

Лилиә Һакмар

# Балапан



*Драмалар, сценарийҙар, поэмалар,*
*хикәйәләр, тәржемәләр*

*Электрон баҫма*

КИТАП
ӨФӨ • 2013

УДК 821.512.141-2
ББК 84 (2 Рос=Баш)-4
Ҡ 91

**Ҡәйепова, Л. З.**

Ҡ 91 Балапан: драмалар, сценарийҙар, поэмалар, хикәйәләр, тәржемәләр / Лилиә Һаҡмар. — Өфө: Китап, 2013. — 304 бит.

ISBN 978-5-295-05874-5

Лилиә Һаҡмар Башҡортостанда шағирә булараҡ билдәле. Был уның драма әҫәрҙәре, хикәйәләре, поэмалары, рус һәм төрөк теленән шиғри тәржемәләре, балалар өсөн ижад ителгән шиғырҙары, сценарийҙары тупланған китабы. Әҫәрҙәрҙең барыһында ла тәрбиәүи тәрән фекер халыҡсан, ихлас, образлы телдә асыла. Балалар өсөн яҙылған әҫәрҙәр серле донъяға әйҙәһә, юмористик хикәйәләре уйланырға мәжбүр итә.

Был китап мәҙәниәт эшмәкәрҙәре, китапханасы, уҡытыусы, тәрбиәселәр өсөн дә тематик кисә, тәрбиәүи саралар уҙғарыуҙа файҙалы ҡулланма буласаҡ.

**УДК 821.512.141-2**
**ББК 84 (2 Рос=Баш)-4**

© Ҡәйепова Л. З., 2013
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, 2013

**ТП — 189/13**

**ISBN 978-5-295-05874-5**



# ДРАМАЛАР

## БАЛАПАН — БӨРКӨТ БАЛАҺЫ

*Драма*

## Ике бүлектә

**Балалар һәм үҫмерҙәр өсөн**

*Башҡорт халҡының милли батыры Салауат Юлаевҡа арнала*

ҠАТНАШАЛАР:

Салауат
Аллағыуат
Хәкимйән
Зөбәйер
Шәриф
Сәлим
Гөлбикә
Зөләйха
Зиннәт
Барыһы ла 12—14 йәшлек ауыл балалары

Ваҡиғалар башҡорт ерендә сама менән бынан 240 йыл элек бара.

## Беренсе бүлек

### Беренсе күренеш

Матур йәйге ялан. Сәхнә артынан ҡатын тауышы ишетелә: «Ҡыҙҙар, бик алыҫҡа китмәгеҙ! Аҙашырһығыҙ. Оҙаҡламай ҡайтырбыҙ!» Ҡыҙҙар яуап бирә: «Ярай», «Анау аҡлан ситен генә ҡарайбыҙ ҙа...» Ҡулына талдан үрелгән тырыз тотоп, ергә текләп еләкле урынды эҙләй-эҙләй Гөлбикә сыға.

Гөлбикә. Зөләйха, кил бында. *(Йәһәт кенә эйелеп, еләк сүпләй башлай.)*

Зөләйха. Хәҙер. Алдымдағын йыяйым да... унда күпме ни?

Гөлбикә. Эйе.

Зөләйха сыға. Гөлбикә янына килеп сүгәләй. Еләк йыялар.

Гөлбикә. Иртәгә һабантуй яланына сәғәт байрамына сығаһыңмы?

Зөләйха *(еләккә әүрәп уны ишетмәй)*. Һу-у-у, бында күп икән...

Гөлбикә. Әйттем бит. Сыҡмайһыңмы?

Зөләйха. Ҡайҙа?

Гөлбикә. Иртәгә, яланғасы?

Зөләйха. Ә-ә-ә, байрамғамы?

Гөлбикә. Эйе. Еңгәйем миңә яңы күлдәк тегеп ҡалды. Иртәгә кейерһең, ти. Күрше ауылдағы Марусәнән алған тауарын.

Зөләйха. Былтыр минең әсәйем дә шул Марусәнән матур тауар алып ҡайтҡайны. Һабантуйға күлдәк тегеп кейҙе. Икенсе юлы миңә лә алып ҡайтырмын, тине.

Гөлбикә. Улар тауарҙы Мәскәүҙең үҙенән килтерәләр икән. Әсәйем әйтте.

Зөләйха. Ҡара әле, ниндәй ҙур еләк.

Гөлбикә. Сыҡмайһыңмы ни?

Зөләйха. Иртәгәме?

Гөлбикә. Теләйһеңме, мин һиңә үҙемдең бер матур күлдәгемде биреп торам.

Зөләйха. Әлләсе.

Гөлбикә. Уны мин әле бер байрамға ла кейгәнем юҡ. Ысын!

Зөләйха. Уңайһыҙ бит.

Гөлбикә. Сығабыҙ, сығабыҙ. Иртәнсәк үҙем килермен һеҙгә. Тау урамы малайҙары ла сыға.

Зөләйха. Кемдәр?

Гөлбикә *(серле генә итеп)*. Ә һинең кемдәрҙе күргең килә?

Зөләйха. Эй ошо Гөлбикәне! Алдына алғанды ҡуймай.

Гөлбикә. Зөбәйер ағайымдан ишеттем. Хәким Асманды ла алып сыға, ти.

Зөләйха. Кем ул Асман?

Гөлбикә *(көлә)*. Ул кеше түгел дә инде. Теге һабантуйҙа беренселекте алған айғырсы? Вәт шәп юрта тиҙәр.

Зөләйха. Шунан, Асманды алып сыҡһа ни була? Сәғәт байрамында ат сабыштырмайҙар бит.

Гөлбикә. Тағы ла Салауат, Сәлим дә сығалар, тине ағайым.

Зөләйха. Салауаттарға кисә знакумдары килгәйне. Атаһы Юлай старшина менән ҡайҙалыр киттеләр.

Гөлбикә. Китһә ни. Иртәгә ҡайтырҙар әле...

Тауыш ишетелә: «Гөлбикәү, Зөләйха, әйҙәгеҙ, әйҙә. Ҡайтыу яғына ыңғайлағыҙ!»

Зөләйха. Ана, ҡайталар. Әйҙә, киттек.

Гөлбикә. Кискә килермен. Күлдәкте күрһәтермен. Матур ул...

Икәүләшеп сығып китәләр.

## Икенсе күренеш

Киң ялан. Алыҫтан байрамға йыйылған кешеләр тауышы ишетелә. Ирҙәр тауышы: «Әсәһе, самауырҙы яңыртырға кәрәк, ана, балалар сәй эсмәне...» Ҡатындар тауышы: «Хәкимйән улым, шишмәнән һыу ғына килтереп самауырға һалсы...», «Балалар, сеүегеҙ, байрамда талашыу килешмәй», «Гөлбикә ҡыҙым, барығыҙ Зөләйха менән барып сәйгә мәтрүш, еләк япрағы килтерегеҙ». Хәкимйән Асман исемле атын байрамға килтергән. Шәриф менән Сәлим Хәкимйәндән менгегә тай һорайҙар.

Шәриф. Бер тапҡыр ғына... ҡыумайым, Хәкимйән ағай, әкрен генә... йылға буйлатып ҡына.

Хәкимйән. Сапмағас, нимәгә һиңә Асман? Ул бит ярыш аты.

Сәлим. Миңә, миңә... һин теге юлы уҡ вәғәҙә иттең. Һиңә иртәгә бер киҫәк шәкәр алып сығырмын.

Хәкимйән. Шәкәр, тиһеңме? Ҙурмы?

Сәлим *(баш бармағының башын күрһәтеп)*. Ҙур! Бына ошондай. Миңә теге юлы атайыма килгән Иван биргәйне. Һаҡлап һалып ҡуйғайным.

Хәкимйән. Ярай. Тәүҙә шәкәреңде күрһәтерһең, аҙаҡ бирермен.

Шәриф. Ә миңә, миңәсе?

Сәхнә уртаһына Хәкимйән сыға. Ҡулында сыбыртҡы. Янына малайҙар йыйыла.

Х э к и м й э н . Йә, шымығыҙ. Бөгөн берегеҙгә лә бирмәйем. Үҙем генә менәм.

Ш э р и ф *(ситкә ҡарап)*. Эй, малайҙар, ҡарағыҙ, ҡарағыҙ, Салауат та һыбай килгән икән.

Х э к и м й э н . Ҡайҙа?

Ш э р и ф . Ана! Шишмә яғына ыңғайланы.

Х э к и м й э н . Күрәм, күрәм, һуҡырмындыр шул.

С э л и м . Шәриф, әйҙә унан һорап ҡарайыҡ.

Х э к и м й э н . Һы, уның алашаһы менән ҡайҙа сапмаҡ булаһығыҙ?

С э л и м . Бер ҙә алаша түгел. Һабантуйҙағы сабышта тояғын имгәтмәһә, һинең Асманыңды үтер ине.

Ш э р и ф . Шулай, шулай. Атаһы старшина була тороп, алама тай менеп килмәҫ. Киттек, Сәлим.

С э л и м . Туҡта. Атын һуғарып сыҡһын да. Ҡарап торайыҡ.

Х э к и м й э н *(һыҙғырып ебәрә)*. Зөбәйер, кил әле бында!

### Өсөнсө күренеш

Ҡулына бер ус мәтрүшкә тотҡан Зөбәйер килеп инә.

З ө б э й е р . Нимә?

Х э к и м й э н . Бар, Аллағыуатты саҡыр!

З ө б э й е р . Нимәгә? Мин сәйгә мәтрүш йыям бит.

Х э к и м й э н . Саҡыр, тигәс, саҡыр. Тиҙ бул!

З ө б э й е р . Ярай, Хәким ағай!

Зөбәйер сыға. Бер аҙҙан Аллағыуат менән бергә килеп инә. Ҡулында мәтрүшкәһе бар.

А л л а ғ ы у а т . Саҡырҙыңмы?

Х э к и м й э н *(егеттәрҙең уртаһына баҫып)*. Шунан, кемегеҙ Асманды менергә теләй?

Шәриф менән Сәлим бер-береһенә ҡарашып ала. Бер ни ҙә өндәшмәйҙәр.

А л л а ғ ы у а т . Бирҙе, ти, бирмәй ҙә ни. Һин шуға ышанаһыңмы, Зөбәйер?

Х э к и м й э н . Ысын, ысын. Бөгөн бирәм. Тик бер шартым бар.

А л л а ғ ы у а т . Йә һуң, әйтеп ҡара.

Ш э р и ф . Ышанма, Аллағыуат!

З ө б ә й е р *(Аллағыуаттың еңенән тартып)*. Һора, һора, нимә тиер икән?

Х ә к и м й ә н. Кем дә кем хәҙер, бына ошонда... *(Барыһы ла һыр бирмәһәләр ҙә, иғтибар менән тыңлайҙар.)* Ҡыҫҡаһы, көрәшәбеҙ! Кем еңеүсе була, Асман шуныҡы! *(Барыһының да иғтибары арта.)*

С ә л и м. Алдаштырмаҡ була. Үҙенең көслө икәнен белә.

Ш ә р и ф. Кем һинең кеүек гел дә һабантуйҙарҙа көрәшеп йөрөгән?

А л л а ғ ы у а т. Йәштәр араһында быйыл да еңеп сыҡтың да инде? Барыбыҙҙы ла еңеп, беҙҙе һемәйтергә уйлаһыңмы?

Х ә к и м й ә н. Зөбәйер, бар, йәһәт кенә таҫтамал килтер! Ҡурҡмағыҙ, был юлы мин көрәшмәйем.

С ә л и м. Әй, Зөбәйер, туҡта! Икмәк һынығы ла килтер!

З ө б ә й е р. Нимәгә? Ашарғамы?

С ә л и м. Килтер, тигәс, килтер, нимә төпсөнәһең? Ташла шул үләндәреңде!

Зөбәйер йүгереп сығып китә. Хәкимйән ялан уртаһындағы үләнде тапап, көрәш майҙаны әҙерләй. Аллағыуат, Шәриф, Сәлим дә көрәшкә әҙерләнә. Салбар бауҙарын тарттыра бирәләр, ҡаталарын сисәләр, иҙеүҙәрен ысҡындыралар.

Ш ә р и ф. Сәлим, көрәшкәндә мин күлдәгемде сисмәйем. Таҫтамал билде һыҙыра.

С ә л и м. Сисһәң яйлыраҡ була ул.

А л л а ғ ы у а т. Эй, ул Хәкимйәндең әйткәненә ышанһаң?

Ш ә р и ф. Хәкимйән ағай алдамай ул. Их, ошо Сәлим кеүек көслө булһаң ине.

А л л а ғ ы у а т. Һинең атайың да көрәшсе лә инде, Шәриф.

Ш ә р и ф. Булһа ни...

Ҡулына таҫтамал, бер һыныҡ икмәк тотҡан Зөбәйер күренә. Мәтрүшкәләре юҡ. Йүгереп килеп таҫтамалды Хәкимйәнгә тоттора. Аллағыуатҡа килә.

З ө б ә й е р. Бына! Һораның бит!

А л л а ғ ы у а т *(икмәкте алып өҫкә күтәрә лә)*. Эй, малайҙар, ҡарағыҙ! Хәкимйән тәүҙә ошо икмәкте тотоп ант итһен.

С ә л и м. Дөрөҫ!

Х э к и м й э н . Бына ҡарағыҙ! *(Икмәкте тотоп ант итә.)* Кем дә кем көрәштә еңә, шуға Асманды менергә бирәм. Икмәк өҫтө! Ант!

## Дүртенсе күренеш

Малайҙар уртаға йыйылып көрәшә башлайҙар. Сыр-сыу киләләр. бер-береһенә өйрәтәләр. Шул саҡ сәхнәгә Салауат килеп сыға. Тәүҙә, уйынға әүрәп, уны күрмәйҙәр. Хәкимйән уны күреп ҡала.

Х э к и м й э н . Салауат, ҡайҙа толпарың?

С а л а у а т . Утлауҙа. Ә нимәгә һиңә минең атым?

С э л и м . Һаумы, Салауат!

Башҡа малайҙар ҙа көрәшеүҙән туҡтай. Барыһы ла Салауатҡа ҡарай.

Х э к и м й э н . Нимәгә килдең?

С а л а у а т . Аллағыуатты күрәйем тигәйнем, һеҙ бында... ниңә һуғышаһығыҙ?

С э л и м . Һуғышмайбыҙ, көрәшәбеҙ генә.

А л л а ғ ы у а т . Еңеүсегә Хәкимйән Асманды бирә.

Ш э р и ф . Әйҙә, Зөбәйер, бөтмәнек бит.

Улар тағы көрәшә башлай. Бер яҡта Салауат, икенсе яҡта Хәкимйән тора. Улар иғтибар менән көрәшеүселәрҙе күҙәтәләр. Кемеһенәлер өйрәтеп ебәрәләр. Сәлим еңеп сыға. Хәкимйән дә ҡыҙығып китә.

Х э к и м й э н . Еңдең, Сәлим, Асман һинеке!

С э л и м . Әйҙә икәү көрәшеп ҡарайыҡ? Былай ғына.

Х э к и м й э н . Әйҙә!

Көрәшәләр. Хәкимйән еңә. Малайҙар Салауатты өгөтләйҙәр.

Ш э р и ф . Салауат, әйҙә һин дә Хәкимйән ағай менән көс һынашып ҡара?

С а л а у а т . Шулай тиһеңме?

А л л а ғ ы у а т . Әйҙә, Салауат, теге юлы һабантуйҙа көрәшә алманың бит. Моғайын, еңер инең үҙен.

Х э к и м й э н . Ниңә, әллә Салауатты еңә алмаҫ тиһегеҙме?

Ш э р и ф . Әлбиттә, еңәсәкһең!

З ө б э й е р . Салауат көрәшһә, теге һабантуй тәкәһе Хәкимйәнгә эләкмәҫ тә ине.

С а л а у а т . Әҙерһеңме, Хәкимйән?

Х э к и м й э н . Әйҙә!

Хәкимйән менән Салауат көрәшә. Зөбәйер менән Аллағыуат Салауатты яҡлашып сыр-сыу киләләр. Шәриф Хәкимйәнде яҡлай. Сәлим бик ҡыҫылмай. Ситтәрәк тора. Салауат еңә. Хәкимйәндең күңеле кителә.

Хәкимйән *(һыр бирмәҫкә тырышып)*. Минең бөгөн көрәшә торған көнөм түгел ине.

Сәлим. Йә, хәҙер кемгә Асман? Салауат еңде бит!

Хәкимйән. Юҡ, Салауат менән былай ғына. Әйҙә, Сәлим!

Шәриф. Хәким ағай, мин дә барайыммы?

Хәкимйән. Әйҙә һуң!

Зөбәйер. Салауат, әйҙә бергәләп һинең тайыңда сабайыҡ!

Аллағыуат. Мин дә.

Салауат. Әйҙә, Хәкимйән, һин дә кил!

Хәкимйән. Оҙон һаҙ буйына килмәгеҙ, үҙебеҙ сабабыҙ, белдеңме?

Салауат. Сабырға ғына ялан табырбыҙ.

Барыһы ла сыға.
Ут һүнә.

## Бишенсе күренеш

Сәлим менән Шәриф урман юлынан үҙҙәре йыйыла торған йәшерен ҡыуышҡа китеп баралар. Ҡыуышта уларҙы Хәмит көтөргә тейеш.

Шәриф. Кисә атайым, Ташморон битләүендә Айыу күргәндәр, тине.

Сәлим. Ысынмы? Беҙ тап ошо битләүҙән киләбеҙ бит. Ҡыуышҡа юлды ҡыҫҡартам тип туранан тарткайным.

Шәриф. Әйҙә тегенәнерәк барайыҡ. *(Ялан яҡҡа ыңғайлай.)*

Сәлим. Беҙгә былай китергә бит. *(Бер ҡыуаҡ артына китә. Сәлимдең башы ҡапыл аҫҡа төшөп юҡ була. Ул Айыу ауларға ҡоролған тәрән соҡорға «ҡолай».)* А-а-а...

Шәриф *(ҡыуаҡ ситенә йүгереп килеп)*. Сәлим, һин ҡайҙа? Нимә булды?

Сәлим *(алыҫтан)*. Ҡоланым! Соҡорға!

Шәриф *(Сәлимде күрмәй)*. Ҡайҙа?

Сәлим. Был яҡҡа килмә! Һин дә ҡолайһың. Соҡор өҫтөнә һалынған ағастарҙы ал!

Шәриф. Хәҙер! *(Бер-ике ботаҡты тартып алып ташлай. Ятып «соҡорҙо» ҡарай.)* Сәлим! Сәлим!

С ә л и м . Күрҙеңме? Мин һине күрәм!

Ш ә р и ф . Күрҙем! Уй, ҡалай тәрән! Имгәнмәнеңме?

С ә л и м . Юҡ!

Ш ә р и ф . Әйттем бит, айыу күргәндәр, тип. Соҡор ҙа ҡаҙып ҡуйған һунарсылар. Һин көтөп тор. Хәҙер! *(Бер ағас килтереп соҡорға төшөрә.)* Менә алаһыңмы?

С ә л и м . Юҡ. Һин... арҡан кәрәк. Бар Хәкимйәнде саҡыр! Ҡыуыш яҡын бит. Көтәрмөн!

Ш ә р и ф . Хәҙер! *(Сығып йүгерә.)*

## Алтынсы күренеш

Уң яҡтағы ҡыуаҡтан ҡыҙыу атлап Хәкимйән менән Шәриф сыға.

Х ә к и м й ә н . Ҡайҙа?

Ш ә р и ф . Ошо тирәлә... *(Ҡарана.)* Сәлим!

С ә л и м . Әү! Мин бында!

Хәкимйән менән Шәриф соҡор янына киләләр.

Х ә к и м й ә н . Дә-ә-ә. Тәрән икән шул.

С ә л и м . Хәкимйән, арҡан кәрәк?

Х ә к и м й ә н . Бар, Шәриф, ауылға. Үҙегеҙҙә булмаһа, беҙҙең ат һарайынан буй арҡанды ал да һыпырт!

Ш ә р и ф . Ярай!

Х ә к и м й ә н . Берәйһе күреп ҡалмаһын. Шым йөрө!

Ш ә р и ф . Шымсы икәнемде оноттоңмо ни?

Йүгереп сығып китә.

## Етенсе күренеш

Х ә к и м й ә н . Сәлим, белештегеҙме? Иртәгә һыртҡы урам ҡыҙҙары сығамы еләккә?

С ә л и м . Белештем. Сыға.

Х ә к и м й ә н . Гөлбикә сыҡһа ярар ине?

С ә л и м . Нимәгә ул һиңә?

Х ә к и м й ә н . Былай... ә ниңә бөтә ҡыҙҙар ҙа, Салауат та Салауат, тип ауыҙ һыуын ҡороталар. Ул ғына көслө, батыр, изге күңелле, имеш.

С ә л и м . Берәй этлек уйлайһыңмы әллә?

Хәкимйән. Иртәгәме? Иртәгә ҡыҙҙар минең дә батыр икәнемде күрерҙәр.

Сәлим. Нисек?

Хәкимйән соҡор өҫтөндәге ағастарҙы ала башлай.

Хәкимйән. Һы... Еләктә уларҙы урмандан сығып, малайҙар баҫтыра башлай. Ә мин ул малайҙарҙың кәрәген бирәсәкмен.

Сәлим. Ул малайҙар кемдәр инде?

Хәкимйән. Һы... Ниңә, бына береһе — һин, икенсеһе — Шәриф, өсөнсөһө... табырмын!

Сәлим. Ә бәлки, иртәгә сыҡмаҫбыҙ?

Хәкимйән. Ниңә, әллә күҙ атып йөрөгән берәй ҡыҙың сығамы? Әһә, теге юлы йылға буйында ҡыҙҙарҙың күлдәктәрен йәшергәндә, Гөлбикәнекенә теймәгеҙ, тип яр һалғайның. Әллә һин дә...

Сәлим соҡорҙан балсыҡ киҫәге алып Хәкимйәнгә ташлай. Уның аяғы алдына килеп ята.

Хәкимйән. Ә-ә, һинең дә батыр булғың киләме? *(Ҡапыл.)* Туҡта, туҡта... Һине соҡорҙан сығарһам, эште боҙоп ҡуйыуың бар!

Сәлим. Мин үҙем сығам, белдеңме?

Хәкимйән. Сыҡтың, сыҡмай ҙа ни? Һин түгел, ана айыу ағайың да сыға алмағанды.

Бая алған ботаҡтарҙы кире һала башлай.

Сәлим. Әй, һин нимә? Сығар! *(Ҡысҡыра.)* Сығарығыҙ! Мин соҡорға ҡоланым! *(Ялбарыулы тауыш менән.)* Хәкимйән, теләйһеңме, иртәгә мин яланға бөтөнләй сыҡмайым. Уйыңды бер кемгә лә әйтмәйем.

Хәкимйән. Булмай, тигәс, булмай! Хуш! Ана хәҙер Шәриф килә, сығарыр әле. *(Сығып китә.)*

Сәлим *(ялбарыулы)*. Хәкимйән! Шәриф! Әй, сығарығыҙ!

**Һигеҙенсе күренеш**

Бер аҙҙан Шәриф килеп инә. Ҡулында арҡан.

Шәриф. Сәлим!

Сәлим. Әү, Шәриф! Хәкимйәнде күрмәнеңме?

Ш ә р и ф . Ю-юҡ! Ә... ул бында... Шым! Кемдер килә шикелле.

Ботаҡ һынған тауыш ишетелә. Шәриф, ҡурҡып, ҡыуаҡ артына йәшенә. Сәхнәгә Аллағыуат инә. Ерҙән сысҡан ояһын эҙләй.

А л л а ғ ы у а т . Салауат, кил, бында сысҡан оялары күп!

Салауат инә. Ҡулында биҙрә.

С а л а у а т . Эйе. Ана, юлдары күренеп ята. Бар, һыу килтер!

Аллағыуат биҙрә алып сығып китә. Салауат сысҡан ояларын тикшерә.

С а л а у а т . Бынан ингән. Әһә, ана тегендә сығырға тейеш. *(Соҡор яғына ыңғайлай.)*

Ш ә р и ф *(ҡыуаҡ артынан)*. Унда барма! Соҡор!

Салауат шып туҡтай. Ҡыуаҡ артынан Шәриф килеп сыға.

С а л а у а т *(аптырап)*. Шәриф?! Нимәгә йәшендең?

Ш ә р и ф . Мин... ней... айыу килә икән тинем. Тегендә... Сәлим.

С а л а у а т . Ә-ә-ә, унда Сәлим дә бармы ни? *(Соҡорға атлай.)*

Ш ә р и ф . Туҡта! Соҡор. Айыу ҡапҡаны. Сәлим төшөп китте.

С а л а у а т . Ҡасан? *(Соҡор ситенә килеп.)* Сәлим?!

С ә л и м . Әү! Мин бында. Шәриф күренмәйме шунда?

С а л а у а т . Шәриф бар. Шәриф, кил, әйҙә бынау сытырҙарҙы таҙалайыҡ! *(Ағастарҙы ситкә ала башлай.)* Сәлим, хәҙер сығарабыҙ! Арҡан кәрәк булыр микән?

Ш ә р и ф . Ауылдан килтерҙем. *(Йүгереп барып ҡыуаҡ артынан арҡанды килтерә.)* Бына!

С а л а у а т . Һай, шәп иткәнһең! Әйҙә, һин тегендә баҫ, мин бында. Бир арҡанды! *(Шәриф арыраҡ баҫа. Салауат үҙе соҡор янына баҫа. Арҡанды соҡорға ташлайҙар.)* Еттеме?

С ә л и м . Етте!

### Туғыҙынсы күренеш

Аллағыуат инә. Ҡулында һыулы биҙрә.

А л л а ғ ы у а т . Ыстағәфирулла! Шәриф ҡайҙан килеп сыҡҡан бында?! Хәкимйәндең шымсыһы бит ул, Салауат!

С а л а у а т . Туҡта әле, Аллағыуат! Ана, Сәлим айыу соҡорона ҡолаған.

А л л а ғ ы у а т . Ысынмы? *(Биҙрәһен ҡуйып соҡорға килә.)* Уй, тәрән икән дә! Әйҙә мин дә тартышам.

С а л а у а т . Тартмайбыҙ. Ана, арҡандың осон тот! Беҙ ныҡ итеп тотоп торабыҙ. Сәлим, һин үрмәләп мен! Шулай еңелерәк була.

Аллағыуат Шәриф артынан килеп арҡан осон тота. Арҡан тартыла.

С а л а у а т . Әйҙә мен, мен, ҡурҡма!

Сәлим менеп етә. Ҡыуаҡ артынан шыуышып килеп сыға. Салауат биҙрәне алып сәхнә мөйөшөнә бара.

С ә л и м . Рәхмәт, дуҫтарым. Ҡотҡарҙығыҙ!

Ш ә р и ф *(арҡанды биләгенә урап ала)*. Рәхмәт, Салауат, Аллағыуат!

А л л а ғ ы у а т *(Сәлим янына килә)*. Ҡурҡтыңмы әй. Үәт тәрән, исмаһам! Айыу бер төшһә, сыға алмай инде... Имгәнмәнеңме?

С ә л и м . Юҡ. Ҡулым ғына һыҙырылды. Ней, ҡара әле, һин бөгөн кис беҙгә килерһең әле?

А л л а ғ ы у а т . Ниңә?!

С ә л и м . Бер һүҙем бар!

А л л а ғ ы у а т . Ярай, тик көтөүҙән һуң, йәме. Алашабыҙ өйгә тура ҡайтмай. Эҙләп алырмын да...

Ш ә р и ф *(арҡанды йыйып бөткәс)*. Әйҙә, Сәлим!

А л л а ғ ы у а т *(ҡапыл иҫенә төшөп)*. Шәриф, һин Хәкимйәнгә, Сәлимде бер үҙем генә ҡотҡарҙым, тип әйт! Беҙҙе ҡыҫтырма! Атыу әләгер үҙеңә!

Сәлим менән Шәриф сығып китәләр.

## Унынсы күренеш

С а л а у а т . Был Хәкимйәндәр тағы ла берәй этлек уйлай микән әллә? Кисә Шәрифтәрҙең кәртә артында йыйылышып һөйләшеп торалар ине. Беҙҙең ҡаянан бөркөт балаһын алғанды белеп ҡалмаһындар.

А л л а ғ ы у а т . Бынау шымсы Шәрифтән булыр ҙа әле ул. Бөтә ишеткән-күргәнен Хәкимйәнгә еткереп йөрөй, тиҙәр.

С а л а у а т . Һағыраҡ булырға кәрәк. Кисә бөркөт балаһын ҡаянан төшөргәнебеҙҙе бер кем дә күрмәне шикелле?

А л л а ғ ы у а т . Яҡын-тирәлә кеше юҡ ине былай. Бөркөт балаһын ҡайҙа йәшергәнебеҙҙе генә берәйһе белеп ҡалмаһын. Зөбәйергә әйтеп ҡуйырға кәрәк. Уның атаһына ат дағалатырға күп йөрөйҙәр. Уларҙың һөйләшкәнен тыңлаштырып йөрөһөн.

С а л а у а т . Атайымдар алған бөркөт балаһы беҙҙекенән ҙурыраҡ.

А л л а ғ ы у а т . Уны ике аҙналай алдараҡ алдылар ҙа инде.

С а л а у а т *(бер сыҫҡан өңөнә күрһәтеп)*. Әһә, таптым! Әйҙә, һин бында ҡой! Мин тегендә көтөп торам. Хәҙер килеп сыға ул. Был сыҫҡан балапаныбыҙға бүләк булыр. Бөркөттәр сыҫҡан, йомран, ҡуянды терелэй ашарға ярата, тигәйне атайым. Йыртҡыс ҡош бит.

Салауат сәхнә ситендә сыҫҡан ауларға әҙерләнә. Башындағы түбәтәйен ҡулына тотҡан. Аллағыуат икенсе тишеккә һыу ҡоя.

С а л а у а т. Сыҡты, сыҡты! *(Сыҫҡан артынан йүгереп сығып китә. Сәхнә артынан.)* Тоттом! Тоттом! *(Түбәтәйен күкрәгенә ҡыҫып килеп сыға.)*

А л л а ғ ы у а т *(янына бара)*. Ҡайҙа? Ҙурмы?

С а л а у а т . Балапаныбыҙға бер туйымлыҡ.

А л л а ғ ы у а т . Шәп булды. Салауат, ҡара, ана тағы бер өң!

С а л а у а т . Һо-о! Быларҙы ашай башлаһа, беҙҙең бөркөт балаһы тиҙ ҙурайыр!

Улар шулай һөйләшә-һөйләшә алыҫлашалар. Сәхнә ҡараңғылана. Бер аҙҙан кире яҡтыра башлай.

## Ун беренсе күренеш

Яңы көн башланыуын белгертеп, ҡоштар һайраша. Сәхнәгә Хәкимйән менән Шәриф сыға. Улар бөгөн ҡыҙҙарҙың еләккә сыҡҡанын ҡарауылларға тейеш. Шуға яланға алдараҡ сығып йәшенеү өсөн килгәндәр.

Х ә к и м й ә н . Шәриф, ҡара әле, ошо аҡланға килергә тейештәрме?

Ш ә р и ф *(тирә-яғына ҡаранып)*. Ошо, буғай.

Х ә к и м й ә н *(Шәрифтең янына яҡын килеп)*. Һин миңә буғайлама, дөрөҫөн әйт! Яҡшылап ҡара ла...

Шəриф. Ана, кəкре ҡайын, ошо! Кисə үҙем кəртə башынан тыңлап яттым, Кəкре ҡайын яланына тиклем барабыҙ, тинелəр.

Хəкимйəн. Улай булғас, Шəриф, һеҙ ҡайҙа йəшенəһегеҙ?

Шəриф. Анауында, сейə ҡыуағы артында, ултырырбыҙ.

Хəкимйəн. Зиннəткə əйттеңме?

Шəриф. Əйттем. Хəҙер килеп етер. Был яҡты яҡшы белə ул.

Хəкимйəн. Туҡта, шым, ана ботаҡ һынған тауыш ишетелде, моғайын, килəлер.

Бер мөйөштəн, тирə-яғына ҡаранып, Зиннəт килеп сыға. Туп-тура Хəкимйəн янына килеп күрешə, Шəрифкə баш ҡаға.

Зиннəт *(йыш тын алып)*. Ниңə был яланды һайланығыҙ?

Хəкимйəн. Ҡыҙҙар бөгөн ошонда килергə тейеш. Ана, Шəриф-шымсы үҙе ишеткəн.

Зиннəт *(тирə-яғына ҡаранып)*. Əллə дөрөҫ, əллə буш, кисə атайым ике балаһын эйəрткəн инə бүре Кəкре ҡайын яланына ыңғайланы, тигəйне. Бесəн ҡарарға барғанда күргəн.

Шəриф *(шөрлəй төшə)*. Кит юҡты. Күҙенə күренгəндер?

Хəкимйəн. Ниңə, бүре ояһы бар, тип əйтергə телəйһеңме?

Зиннəт. Белмəйем, бəлки, үтеп кенə барғандарҙыр.

Хəкимйəн. Һы, булһа ни, мин был урмандағы бер йəнлектəн дə ҡурҡмайым, белдегеҙме? Бүре, имеш. Моғайын, берəй эт-маҙарҙы күргəндəрҙер? Зиннəт, барығыҙ, һеҙ ана теге ҡыуаҡ артына йəшенегеҙ. Нимə эшлəргə икəнен белəһегеҙ бит?

Шəриф бирелеп китеп елəк ашай башлай.

Зиннəт. Шəриф əйтте, елəккə килгəн ҡыҙҙарҙы ҡурҡытабыҙ, аҙаҡ һин ҡыҙҙарҙы яҡлашаһың, шулаймы?

Хəкимйəн *(тыныcһыҙланып, йəне көйөп)*. Шəриф, нимə бер елəк ашауҙан бушамайһың. Тəүгə күрҙеңме?

Шəриф. Тəмле бит.

Хəкимйəн. Барығыҙ, оҙаҡламай килеп етерҙəр. Иртə сыға торғайнылар.

Шәриф менән Зиннәт сейә ҡыуағы артына, Хәкимйән ҡапма-ҡаршы яҡтағы ҡыуаҡ артына китә. Ҡоштар һайрай. Бер аҙҙан яланға килә яткан ҡыҙҙар тауышы ишетелә. «Сәлимә-ү, унда еләк бармы?» Тауыш: «Бар. Тик күп түгел. Хәҙер, әҙ генә йыям да». Гөлбикәнең тауышы: «Зөләйха, әйҙә Кәкре ҡайын яланын ҡарайыҡ! Былтыр шунда еләк күп ине». «Барығыҙ, бар. Аҙаҡ беҙ ҙә килербеҙ». «Ҡыҙҙар, бик таралышмағыҙ!» Шул саҡ бүре олоған тауыш ишетелә. Барған еренән шып туҡтай. Тыңлай. Тағы ла эт сыйнаған һымаҡ тауыш ишетелә. Хәкимйән дә шыр ебәрә, ҡурҡыуын тегеләргә белдермәҫкә тырыша. Шәриф менән Зиннәт йәһәтләп Хәкимйән торған яҡҡа киләләр.

Хәкимйән. Нимә, бөжләнегеҙме? Әйҙә, үҙем барып ҡарайым. Киттек! *(Икенсе ҡыуаҡ яғынан да бүре олоған тауыш ишетелә.)* Улай ҡурҡһағыҙ, һеҙ бына был яҡтағы ҡыуаҡҡа йәшенегеҙ. Мин тегендә барам.

Шәриф *(ҡобараһы осоп)*. Әллә ҡаманылар инде?

Зиннәт. Нисәү икәнен белергә ине?

Шәриф. Һинең һанағаныңды көтөп тормай инде улар. Килә лә ташлана.

Хәкимйән. Бүреләр ҡамай! *(Килгән яҡҡа ыңғайлай бирә лә туҡтап ҡала. Тыңлай.)*

Малайҙар икенсе ҡыуаҡ яғына әйләнәләр. Шул саҡ ул ҡыуаҡ артынан да бүре олоған тауыш ишетелә. Малайҙар туҡтай.

Хәкимйән. Ҡастыҡ, малайҙар! *(Иң тәүҙә ауыл яғына ҡарай йүгерә. Унын артынан Шәриф менән Зиннәт эйәрә.)*

Ҡыуаҡтар артынан Салауат, Аллағыуат, Зөбәйер сыға. Хәкимйәндәр киткән яҡҡа төртөп эстәрен тотоп көләләр.

Салауат. Ҡыҙҙарға этлек уйлаһаң, шулай була ул!

Зөбәйер *(Хәкимйәнде эләкләй)*. Мин был урманда бер йәнлектән дә ҡурҡмайым.

Аллағыуат. Етмәһә, ҡыҙҙар алдында батыр булып күренмәк була.

Зөбәйер. Эй шәп иттек, эйеме?

Салауат. Шәплеген шәп тә, был яланға кире килеүҙәре бар. Әйҙә аҙыраҡ көтөп ятайыҡ.

Аллағыуат. Ҡыҙҙар килгәнсеме?

Зөбәйер. Һа, ҡыҙҙарҙы күргең киләме?

Аллағыуат. Һантый, ҡыҙҙарҙы күргәнем юҡ тиһеңме әллә?

Зөбәйер. Әһә, кисә генә, Фирүзәне бер күрергә ине, тип ултырғайның да инде.

Салауат. Йә етәр, талашмағыҙ. Ҡыҙҙарҙы күреү насарҙыр шул. Беҙ уларҙы һаҡлар өсөн килдек бит. Әйҙә, ҡалҡыуғараҡ барып йәшенәйек. Хәҙер улар ана теге түбәнге аҡланда булырға тейеш. Хәкимйәндең ни уйлағанын белеп буламы? Шунда барып ҡуймаһын.

Күмәкләп бер түбәләс артына ятып алыҫтағы аҡланды күҙәтәләр.

Салауат. Ана, әйттем бит, ана, беҙҙең ҡыҙҙар урман ситенән күренде лә.

Зөбәйер. Күрәм, күрәм.

Аллағыуат. Анау алда барғаны Гөлбикә, шикелле?

Зөбәйер. Юҡ, Гөлбикә һары күлдәген кейеп йөрөй ине иртәнсәк.

Аллағыуат. Их, кешенең күҙе алыҫтағын да яҡын итеп күрһен ине.

Салауат. Әсәйем әйтә, киләсәктә кешеләр бик алыҫтағы нәмәләрҙе лә яҡын итеп күрәсәктәр. Һауала тимер ҡоштар осоп йөрөр, икмәк, шәкәр ҙә күп буласаҡ, кешеләр бәхетле йәшәйәсәк, ти.

Зөбәйер. Әй, ҡарағыҙ, баяғы ҡыҙҙы таныным. Зөләйха ла инде.

Салауат *(ҡыҙыҡһынып)*. Зөләйха? Ҡайҙа, ҡайҙа? *(Ҡарай.)*

Аллағыуат. Эй һөйкөмлө шул Зөләйха.

Зөбәйер. Ә мин уны йәлләйем. Үгәй әсәһе нык ҡыйырһыта, ти Гөлбикә.

Салауат. Ә үҙе нисек егәрле. Ҡулдарына күҙ эйәрмәй.

Аллағыуат. Моңло итеп йырлай тиҙәр.

Салауат. Моңло бала бәхетһеҙ була, ти әсәйем. Ниңә шулай икән? Мин Зөләйханы бәхетле иткем киләсе?

Аллағыуат. Мин дә.

Салауат. Тәүҙә мин әйттем.

Зөбәйер. Аллағыуат, ҡара, ана Фирүзә йөрөй.

Аллағыуат. Ниңә, Фирүзә булһа ни булған?

Зөбәйер. Үҙең әйттең дә инде... оҡшай, тип.

Салауат. Ниңә, ҡыҙҙарҙы оҡшатыу насармы ни? Араһынан береһен кәләш итеп алырға тура киләсәк әле беҙгә.

Зөбәйер. Шулай шул. Асыуланған була.

Аллағыуат. Оҡшатам шул, тик үҙенә нисек белгертергә белмәйем. Салауат, әсәйеңдән һора әле. Минең әсәйем һинеке шикелле минең менән һөйләшмәй, гел эш менән була ла йөрөй.

Салауат. Булыр ҙа шул. Атайыңдың яңғыҙ ҡатыны булғас. Минең әсәйемдән кесе ике апайым бар. Ярай, һорармын.

Аллағыуат. Мин әйтте тимә.

Салауат. Борсолма.

Зөбәйер. Салауат, һиңә бер нимә әйтәйемме?

Салауат. Йә!

Зөбәйер. Ней, минең һеңлем бар ҙа инде, Гөлбикә. Ул һине нык оҡшата шикелле.

Салауат. Гөлбикәме? Ә ҡайҙан белдең?

Зөбәйер. Әллә, бер ҡайҙа барырға булһам, гел дә унда Салауат буламы, ти ҙә һорай. Башҡа бер кемде лә һорамай.

Салауат. Уға ана Хәкимйән ғашиҡ булған, тиҙәр бит.

Аллағыуат. Ә мин Сәлим тип ишеттем.

Зөбәйер. Ҡыҙҙар былай килә.

Салауат. Аллағыуат, Зөбәйер, әйҙә, аҫҡараҡ төшөп ятайыҡ. Беҙҙе күреп ҡалып йә ҡурҡырҙар. *(Торалар.)*

Аллағыуат. Беҙгә балапанды ашатырға кәрәк.

Салауат. Ярай, саҡ ҡына ҡарауыллайыҡ та барырбыҙ. Юл ыңғайы берәй йомран балаһын тотоп алайыҡ. Сысҡанға ғына туймай шикелле.

Зөбәйер. Йомран ҙур була, ашар микән?

Һөйләшә, һөйләшә сығып киталәр.

**Шаршау**

## Икенсе бүлек

### Беренсе күренеш

Сәхнәлә Салауаттар бергә йыйылып һөйләшә торған урын. Ҡаяның уңайлы ғына өңөш ере. Бер яҡтан инә торған тишек бар. Шул тишектән эйелә биреп, Аллағыуат менән Зөбәйер килеп инә. Ҡулдарында сепрәк төйөнсөк бар. Ҡая эсендәге бер мөйөштә ҡара сепрәк менән ябылған ситлек тора. Унда бөркөт балаһы ултыра. Аллағыуат инеү менән стеналағы сыраға ут ҡабыҙа. Зөбәйер бөркөт балаһы янына килә. Ипләп кенә сепрәктең осон күтәрә. Бөркөт балаһы саңҡылдаған тауыш ишетелә.

Аллағыуат. Асма! Ҡысҡыртмай тор! Хәҙер! Салауат инһен дә.

З ө б ә й е р. Ә нимәгә артта ҡалды ул?

А л л а ғ ы у а т. Бөтәбеҙ бергә ингәнде күрһәләр, берәйһе беҙҙең йәшерен урынды белеп ҡалыр, ти.

З ө б ә й е р. Шулай шул. Ана Хәкимйәндәр ҙә нисек беҙҙең менән этләшергә белмәй. Беҙ уларға ниндәй насарлыҡ эшләгәнбеҙҙер?

А л л а ғ ы у а т. Ниңә, теге юлы көрәшкәндә Салауат Хәкимйәнде еңде лә инде. Шуға сәме киләлер.

З ө б ә й е р. Эйе шул. Тик бына балапаныбыҙ бар икәнен генә белеп ҡалмаһындар. Бөтә ауылға таратыр. Бөркөт балаһын һунарға әҙерләү бала-саға эше түгел, тип өлкәндәр бөркөтөбөҙҙө алыр ҙа ҡуйыр.

А л л а ғ ы у а т. Улай ғына булһа ярар ҙа. Хәкимйәндәр балапаныбыҙҙы урлап имгәтеп ҡуйыр, йә үлтерер. Кем белә уның башында ниндәй уй барын.

Ишек яғынан ағас ботағы һынған тауыш ишетелә.

А л л а ғ ы у а т. Ана, инеп килә!

Ҡая ишегенән бер ҡосаҡ ҡурай үләне тотҡан Салауат күренә.

З ө б ә й е р. Нимә ул, Салауат?

С а л а у а т. Ҡурай.

А л л а ғ ы у а т. Ҡурай? Теге Мансур бабай уйнаған ҡурай ошолай буламы?

С а л а у а т. Минең атайым да уйнай ул. Ҡунаҡ йыйғанда.

З ө б ә й е р. Аллағыуат, һин әллә ҡурайҙы күргәнең юҡмы?

А л л а ғ ы у а т. Бар! Һин бигерәк инде. Тик бынау йәшел көпшә үләнен генә күргәнем юҡ ине.

С а л а у а т. Ҡурай көпшәһен үҙ мәлендә генә йыйырға кәрәк. Һуңлаһаң да, алдараҡ йыйһаң да, һәйбәт ҡурай килеп сыҡмай.

А л л а ғ ы у а т. Әйҙә бөгөн үк ҡурай эшләп уйнап ҡарайыҡ?

С а л а у а т. Һа, аҡылың алтын икән. Әле сей бит улар.

З ө б ә й е р. Нисек, сей?

С а л а у а т. Уларҙы йылы, ҡоро урында оҙаҡ ҡына киптерергә кәрәк.

А л л а ғ ы у а т. Эй, ҡурай ҙа ҡурай тип, балапанды ашатырға оноттоҡ!

З ө б ә й е р. Салауат, һинең атайың йыл да һунарға бөркөт балаһы ала. Беләһеңдер әле, бөркөт балаһы йомранды ашай аламы?

Салауат ҡурайҙарҙы бер мөйөшкә һала.

С а л а у а т. Йомран да килтерҙегеҙме ни? Шәп! Тик беҙҙең бөркөт балаһы бәләкәйерәк, ашай алыр микән? Атайым бирә торғайны былай. Ҡайҙа?

Аллағыуат ҡулындағы төргәк эсенән һаҡ ҡына йомран сығара. Салауат килеп ҡарай.

С а л а у а т. Белмәйем. Йомран — сысҡан түгел. Ашар микән?

З ө б ә й е р *(тотоп ҡарай)*. Эйе шул. Әйҙә биреп ҡарайыҡ һуң.

А л л а ғ ы у а т. Ҡана, үҙем бирәм.

Бөркөт ситлегенең ҡара япмаһын аса. Ситлек ишеген асып йомранды һалырға итә. Бөркөт балаһы уның ҡулын суҡый. Аллағыуат йәһәт кенә йомран менән бергә ҡулын тартып ала.

З ө б ә й е р. Суҡынымы? *(Аллағыуаттың ҡулына ҡарай. Аллағыуат ҡулын йәшерә.)*

А л а ғ ы у а т. Асыҡҡан шикелле.

С а л а у а т. Ҡулыңды күрһәт әле? *(Ҡарай.)* Оһо, суҡышы нығынып килә икән. Ауыртамы? Хәҙер бәйләйбеҙ.

А л л а ғ ы у а т. Кәрәкмәй, үҙе төҙәлә ул.

С а л а у а т. Бир әле йомранды. Үҙем ашатып ҡарайым.

З ө б ә й е р *(мөйөштән сепрәк киҫәген килтереп)*. Бына, ҡулыңа ҡапла. Ул әле кеше ҡулының еҫенә өйрәнмәгән, шуға суҡый. Быға тиклем гел итте таяҡ осона ҡыҫтырып ҡына биргәйнек бит.

С а л а у а т. Ә ҡулға сепрәк ҡаплағас, уның еҫенә нисек өйрәнә ул?

Йомранды алып ситлеккә тыға. Был юлы бөркөт суҡымай. Ҡулын ала. Күмәкләп ашармы-юҡмы икәнен күҙәтәләр.

А л л а ғ ы у а т. Оҡшатманы шикелле. Яҡын да килмәй.

З ө б ә й е р. Бәлки, ситлекте ябырға кәрәктер?

С а л а у а т. Юҡ, япмайыҡ. Нимә ашағанын аҙыраҡ күрһен. Ул бит тотҡон түгел. Бер аҙ ҙурайғансы ғына ошолай бикле буласаҡ. Ә аҙаҡ...

Аллағыуат. Ҡарағыҙ, йомранды тикшереп ҡарай башланы.

Зөбәйер. Нимәгә был сысҡан ҙур тиме икән?

Салауат. Ярай, бик текләмәйек. Беҙ ҡарап торғанға ашамай бит ул. *(Бөтәһе лә бер аҙ ситкә китә.)*

Салауат. Әйҙәгеҙ, уҡ юна торайыҡ.

Бер мөйөштән кипкән ботаҡтар килтереп малайҙар уҡ юна башлай.

Аллағыуат. Кисә күргән һырт ҡуянды бөгөн дә һағалап ҡарайым әле. Ағайымдар ҙа күптән ҡуянға сыҡҡандары юҡ.

Салауат. Ҡуян нимә?! Бына төлкө алғанда!

Зөбәйер. Төлкө хәйләкәр бит. Үҙебеҙҙең һунар бөркөтөбөҙ-балапаныбыҙ үҫеп етмәйенсә булмай инде.

Салауат *(хыялланып)*. Үҙебеҙҙең бөркөт менән төлкө алып, үҙемә ҡышҡылыҡҡа бер кәпәс тектерер инем.

Зөбәйер. Һинең төлкө кәпәсең бар ҙа инде.

Салауат. Булһасы? Ә минең үҙем атып алған төлкө тиреһенән тектергем килә шул.

Аллағыуат. Мин йылға буйында һәйбәт муйыллыҡ күрҙем. Ботаҡтары төҙ генә. Ян яһарға.

Салауат. Их, уҡ-һаҙаҡ ҡына түгел, Урал батырҙыҡы кеүек Аҡбуҙатың, тауҙы уртаға ярырлыҡ булат ҡылысың да булһын ине.

Зөбәйер. Булһа, нимә эшләр инең?

Салауат. Минме? Иң тәүҙә Хәкимйән кеүектәрҙе аҡылға ултыртыр инем. Шунан, шунанмы... ситтән килеп беҙҙең урмандарҙы ҡырҡып, тауҙарҙы аҡтарып, йылғаларҙы бысратыусыларҙы был тирәнән ҡыуыр инем.

Аллағыуат. Хоҙай тәбиғәтте бөтә кешеләр өсөн дә яралтҡан бит.

Салауат. Шулай шул. Тәбиғәт бер беҙҙеке генә түгел. Беҙҙән һуң йәшәүселәргә лә кәрәк! Улар ҙа ҡыуанып йәшәргә тейеш.

Аллағыуат. Бына беҙ бөркөт балаһын алдыҡ. Беҙ ҙә тәбиғәтте ҡоротоусы булабыҙмы ни?

Салауат. Нишләп ҡорота ти? Беҙ бит уны үлтермәнек. Өҫтәүенә, ояла бөркөттөң ике, йә өс балаһы булһа ғына, береһен алырға ярай. Ә мин алған ояла бөркөт балаһы икәү ине.

Зөбәйер. Хәҙер ул бөркөттөң бер балаһы ҡалдымы?

Салауат. Эйе. Берәү генә ҡалһа көслө булып үҫә бөркөт балаһы.

Аллағыуат. Улай булғас, беҙ ул бөркөткә көслө бала үҫтерергә ярҙам иткән булабыҙ инде.

Салауат. Тәбиғәттә байлыҡ шул тиклем күп. Ер йөҙөндәге бөтә кешегә лә етерлек.

Зөбәйер. Кем әйтә?

Салауат. Әсәйем.

Аллағыуат. Улай булғас, ниңә ер өсөн һуғышалар икән?

Салауат. Үҙҙәрен Алла итеп хис итәләрҙер. Тәбиғәттең бар байлығына үҙҙәре генә хужа булырға теләйҙәрҙер. *(Аллағыуатҡа юнылған уҡ сыбығын биреп.)* Бына, шәпме?

Аллағыуат *(уҡты әйләндереп ҡарап)*. Шә-әп! Үҙе шыма, үҙе төҙ. Еңел генә.

Салауат. Зөбәйер, атайың тимерсе бит. Беҙҙең уҡтарға башаҡтар яһап бирер микән?

Зөбәйер. Нишләп яһамаһын ти. Мин дә ярҙам итермен.

Аллағыуат. Ух, был уҡтар менән сәпсек, ҡарға атып алып ашата башлаһаҡ, балапаныбыҙ тиҙ ҙурая инде.

Салауат. Осоп барған ҡошҡа уҡ тейҙереүе анһат түгел. Иртәнән һуң Ташморонға сығып, уҡ атышырбыҙ. Башаҡтар яһатайыҡ та.

Бөркөт тауышланып ҡуя. Барыһы ла ситлек янына килә.

Зөбәйер. Ух, ашай башланы. Иртәгә лә йомран килтерәйекме, Салауат?

Салауат. Эйе...

Аллағыуат. Ҡарағыҙ, ҡара! Тырнаҡтарын нисек батырған!

Салауат. Беҙҙең балапан бик көслө булырға оҡшаған. Уның тырнағына бер килеп эләккән ҡуян ысҡына алмаясаҡ!

Зөбәйер. Шулай булһын шул. Бер тотҡан табышты һунарсы юғалтмаҫҡа тейеш тә инде.

Салауат. Егеттәр, әйҙәгеҙ гел генә бер төрлө булмаһын. Иртәгә яланға уҡ атышырға барғанда балапаныбыҙға берәй ҡарға атып алып киләйек.

Аллағыуат. Салауат, ә уҡ атышырға Сәлимгә лә әйтәйемме?

Зөбәйер. Һин нимә, иҫәрләндеңме? Ул бит Хәкимйәндәр менән.

Аллағыуат. Булһасы. Хәкимйәнгә әйтмәҫкә ҡушырбыҙ. Сәлим һәйбәт егет тә инде.

Салауат. Миңә лә бик оҡшай ул. Шәп егет. Ә ниңә? Беҙгә лә оҫта, һөнәрле, ҡыйыу егеттәр күберәк кәрәк. Әйт Сәлимгә! Килһен!

Аллағыуат *(шатланып)*. Ярай!

Салауат. Әйҙә, ҡуҙғалайыҡ! Өйҙә юғалтҡандарҙыр.

Аллағыуат. Быҙау эҙләргә тип кенә сыҡҡайным.

Салауат. Беҙҙең кәзә бәрәсенең аяғы имгәнгән. Шуға үлән генә йолҡоп алам да. *(Ҡурайҙар янына килә. Бер мөйөштән кер бауы алып ҡосаҡлап бәйләргә итә.)*

Аллағыуат *(янына килеп ярҙам итә башлай)*. Киптерергә әләбеҙме? Аҙаҡ миңә лә уйнарға өйрәтерһең, яраймы?

Салауат. Өйрәтермен. Барыбыҙға ла ҡурай етерлек бында. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, тиҙәр.

Салауат. Аллағыуат, яндарҙы ла ал. Яланға илтеп ҡуяйыҡ! *(Аллағыуат яндарҙы ала.)*

Зөбәйер. Ҡара әле, ашап бөткән дә. Тиҙ ҙурая инде. *(Уҡ сыбыҡтарын ҡосаҡлап.)* Алайыммы?

Салауат. Эйе, ал. Атайыңдан башаҡтар ҡаҡтыр! Балапандың япмаһын ябайыҡ. Ел һуҡмаһын. Иртәгә бер аҙ яҡтыға сығарып алырбыҙ. Ҡараңғыла күҙе бөтөнләй һуҡырайып ҡуйыр. *(Ситлекте ҡаплай.)* Хуш, балапан! Бойоҡма! *(Хисләнеп китеп, ситлектәге бөркөткә ҡарап шиғыр юлдарын — «Егеткә» шиғырын һөйләй.)*

*Бейектә оса ҡоҙғон ҡош,*
*Унан бейек осор ыласын бар.*
*Ыласындан да бейек оса торған*
*Ҡош батшаһы — ҡыйғыр бөркөт бар.*

Бөркөт тауышланып ҡуя. Малайҙар бергәләп сығып китәләр.

## Икенсе күренеш

Салауаттар штабы. Салауат үҙе генә ултыра. Сәхнә ҡараңғы. Салауаттың тауышы.

*Зөләйха, һин ергә төшкән хур ҡыҙы,*
*Күҙҙәреңдә балҡый Зөһрә йондоҙо,*
*Күҙҙәрең, гүйә, төндәге күк йөҙө,*
*Яҡтыра шул күҙҙәреңдә Ай үҙе…*

Салауат бер таш мөйөшөндә яҙышып ултыра. Алдында сыра яна. Икенсе мөйөштә бөркөт балаһы ҡуйылған ситлек. Салауат уйлана. Ҡауырһынын иренenә терәп өйөрөлтөп ала.

*(Салауаттың тауышы.)*

*...Мин, бахыр, Зөләйхам, нык һөйәм,*
*Нык һөйәм... һөйәм...*
*Әйтә алмайса һүҙҙәремде, баш эйәм.*

Ҡаршы яҡ мөйөштән, мәмерйә ишегенән Аллағыуат күренә.

Аллағыуат. Сәләм! Нимә яҙаһың?

Салауат өндәшмәй. Ҡағыҙын бөкләп салбар кеҫәһенә һала.

Салауат. Юҡ, былай ғына.

Аллағыуат. Бөркөтөбөҙ ни хәлдә? *(Ситлек янына килә.)* Ашағанмы?

Салауат. Аҙ ғына бирһәң дә ярай.

Аллағыуат. Бына мин һиңә ит килтерҙем. Мә! *(Усына ит һалып ситлекте асып бөркөткә һуҙа.)* Оһо, минең ҡулдан да ашарға өйрәнеп килә!

Салауат. Беҙҙең ҡулдан ғына ашап өйрәнһә, башҡа кешегә килмәйәсәк ул. Һунарға бергә йөрөрбөҙ, дуҫ! *(Аллағыуат янына килә.)* Бына балапаныбыҙҙың күҙе тулыһынса асылһын да ирекkә сығарып ҡарарбыҙ.

Аллағыуат бер мөйөштәге теҙелгән таштарҙың береһен күтәреп көсләнә башлай.

Аллағыуат. Бер-ике-өс, беҙҙә, беҙҙә бөтә көс!

Салауат. Аллағыуат, әйҙә, бер көндө ҡыҙҙарға әйтәйек тә Аҡташ буйына аҡланға еләккә сығайыҡ! *(Янына килә. Күҙәтеп тора.)*

Аллағыуат. Фирүзәгә лә әйтәйек!

Салауат. Эйе шул. Гөлбикәнең әхирәте бит ул.

Аллағыуат. Ай-һай, ҡыҙҙар килерме икән? Малайҙар булған ергә йөрөмәйҙәр ҙә улар?

Салауат. Килерҙәр. Беҙ Хәкимйәндәр кеүек уларға этлек уйлайбыҙҙыр шул? Ҡыҙҙарға, һеҙҙе һаҡлап йөрөтөрбөҙ, тиербеҙ.

Аллағыуат. Килһәләр, шәп булыр ине. Уларға еләк йыйырға ярҙам итер инек.

С а л а у а т. Ниңә, бик ҡурҡһалар, ана Зәлифә апайҙы ла алһындар.

А л л а ғ ы у а т. Эйе шул.

С а л а у а т. Их, дуҫҡай, Хоҙай ҡыҙҙарҙы ниңә шулай матур итеп яралтҡан икән? Ул күҙҙәре, ҡаштары, сәстәре, нәҙекәй билдәре...

А л л а ғ ы у а т. Әллә берәйһенә ғашиҡ булдыңмы, Салауат?

С а л а у а т *(Аллағыуатҡа һынсыл ҡарап)*. Бер кемгә лә әйтмәйһеңме?

А л л а ғ ы у а т. Юҡ! Икмәк өҫтө!

С а л а у а т *(юнылған уҡ сыбығын усына алып, һоҡланып)*.

*Зөләйхам, һин ергә төшкән хур ҡыҙы,*
*Күҙҙәреңдә балҡый Зөһрә йондоҙо...*

*(Аллағыуат ташын ҡуя ла тыңлай.)*

Салауат йырлай. («Һандуғас» шиғырына.)

*Төнгө тынлыҡ. Ағаслыҡта*
*Һандуғас моңо.*
*Күктеме, ерҙеме данлай?*
*Кем белә уны.*
*Йырлаймы күктә балҡыған*
*Ҡояштың нурын?*
*Әллә айға арнағанмы*
*Һандуғас йырын?*
*Әллә арналғанмы ул йыр*
*Яҡты йондоҙға,*
*Йәйрәп ятҡан яландарға,*
*Хәтфә болонға?*
*Мин белмәйем.*

А л л а ғ ы у а т. Их, һинең кеүек шағир булһам, мин дә Фирүзәгә шиғыр сығарыр инем.

С а л а у а т. Зөләйха үҙе белмәй шул оҡшатыуымды.

А л л а ғ ы у а т. Бына еләккә сығайыҡ та, әйтерһең үҙенә. Һиңә ни бөтә ауыл ҡыҙҙары ғашиҡ инде. Бына миңә генә...

С а л а у а т. Нимә, һиңә генә... Фирүзә бынау беләктәреңде күрһәме?

Салауат та ташҡа үрелә.

А л л а ғ ы у а т . Уй, унығы ауыр бит! Еңелерәген ал!

С а л а у а т *(ҙур ташты ала)*. Мин уны кисә өс тапҡыр күтәрҙем инде.

А л л а ғ ы у а т *(күтәреүҙән туҡтай. Һанай)*. Бер, ике, өс, дүрт, биш... етәр!

С а л а у а т . Көслө булып... Зөләйханы күтәреп кенә йөрөткөм килә.

Бөркөт тауышлана.

А л л а ғ ы у а т . Әй, балапанға һыу килтерергә кәрәк бит. *(Турһыҡ алып сығырға итә.)*

С а л а у а т . Шишмәгә уратып төш! Ҡаяға һуҡмаҡ һалынмаһын!

## Өсөнсө күренеш

Салауат бер үҙе.

С а л а у а т . Их, Зөләйха... Берәй саҡ, икәү генә ҡалһаҡ, мин һиңә хыялдарым тураһында һөйләр инем. Балапаныбыҙҙы ла күрһәтер инем. *(Бер буйлауҙан ҡурай ала. Уйнап ебәрә.)* Ошолайтып уйнап ебәрһәм, күңелемдәген, моғайын, һүҙһеҙ ҙә аңлар инең. Әсәйем мине уҡырға өйрәтте. «Таһир вә Зөһрә» хикәйәтен һиңә уҡып ишеттерер инем. Саҡырһам, Аҡташ буйы яланына килерһеңме икән?

Аллағыуат инә. Салауат ситлектән һыу һауытын ала.

С а л а у а т . Ҡана үҙем ҡуяйым! *(Һыу ҡуйып ситлеккә ултырта.)* Эсә, эсә балапан! Сарсаған.

Ботаҡ һынған тауыш ишетелә. Икеһе лә шым ҡалып тыңлай. Бер аҙҙан ишектән Зөбәйер күренә. Ҡулында бер ҡосаҡ сәскә.

З ө б ә й е р . Һеҙ ҙә бындамы ни?

А л л а ғ ы у а т . Ә һин, күрше ауылға барам, тигәйнең дә. Ҡайттығыҙмы ни?

З ө б ә й е р . Әй, атайым атын таба алманы ла барманыҡ. Иртәгә, ти.

С а л а у а т . Нимәгә сәскә йыйҙың?

З ө б ә й е р . Былай ғына. Яландан килдем дә, ух, хуш еҫтәре... Балдың нимәгә тәмле икәнен белдем. Түҙмәй өҙөп алдым әле.

А л л а ғ ы у а т . Кемгә бирәһең?

З ө б ә й е р . Бирмәйем. *(Сәскәләрҙе балапандың ситлеге янына һала.)* Таш ҡаяның еҫен генә һуламаһын әле. Сәскәләр еҫен тойоп, тотҡонлоҡта түгел икәнен белһен.

А л л а ғ ы у а т . Ысынлап та. Үәт баш үҙеңдә, Зөбәйер.

З ө б ә й е р . Әле ошо тауға күтәрелгәс, тирә-яғыма ҡарап торғайным, күңелемә бер моң килде.

С а л а у а т . Ысынлап та, матур шул беҙҙең ауыл тәбиғәте. Мин дә гел шулай оҙаҡ һоҡланып торам.

З ө б ә й е р . Бына, тыңлағыҙ! *(Бер көйҙө көйләй.)* Матурмы?

С а л а у а т . Иҫ китмәле!

А л л а ғ ы у а т . Шәп! Һүҙҙәре булһа, үҙебеҙҙең йыр итеп йырлар инек, эйеме, Салауат? *(Салауат бер мөйөшкә барып уйлана. Шунан ҡапыл нимәлер иҫенә төшкәндәй егеттәр янына килә лә шиғыр юлдарын әйтә.)*

*Минең тыуған ҡырҙарым,*
*Балдай татлы һыуҙарым,*
*Яландарым, урманым…*
*…Күккә ашҡан Уралым.*

Зөбәйер көйләй. Егеттәр был шиғыр юлдарын Зөбәйер көйләгән көйгә ҡушып көйләйҙәр. Өсөһө бергә ҡулдарын яурындарына һалып, өр-яңы йырҙы йырлайҙар.

*Минең тыуған ҡырҙарым,*
*Балдай татлы һыуҙарым,*
*Яландарым, урманым,*
*Күккә ашҡан Уралым…*

З ө б ә й е р . Ура, үҙебеҙҙең йырыбыҙ ҙа булды! Киттек беҙгә. Уҡтар әҙер! Алайыҡ та.

Йырлай-йырлай сығып китәләр.

## Дүртенсе күренеш

Кескәй аҡлан. Ситтә бейек ҡыуаҡ. Янында ағас түмәр. Салауат инә. Ҡулында уҡ-ян. Бер көйҙө һыҙғырып, уҡ атышырға урын һайлай. Түмәр янына килә. Аҙаҡ артҡараҡ сигеп уға ҡарай. Ҡош тауышы ишетелә. Өҫкә ҡарай. Шунан түмәргә баҫып, тирә-яҡҡа ҡарай, кемделер эҙләй ҙә эсе итеп һыҙғырып ебәрә. Аллағыуат килеп инә.

Аллағыуат. Таптыңмы?

Салауат. Бына ҡара! *(Түмәргә күрһәтә.)*

Аллағыуат. Шәп! *(Ҡысҡырыбыраҡ.)* Сәлим! Кил! Таптыҡ!

Сәлим килеп инә.

Салауат. Сәлим! Түмәргә ултыртырлыҡ ағас торонбаштар килтер! Бесәнселәр усағында барҙыр. Аллағыуат, кил!

Сәлим сыға. Аллағыуат менән Салауат түмәр янына килә. Түмәрҙән биш аҙымдай ара һанайҙар.

Аллағыуат. Туҡтап тор. Хәҙер! *(Йүгереп бер таяҡ килтерә.)* Бына ошоно һалайыҡ!

Таяҡ һалалар. Салауат тағы ла һанай. Аллағыуат тағы ла бер таяҡты һала.

Салауат. Булды!

Сәлим инә. Ҡулында торонбаштар. Уларҙы ергә ҡуя.

Салауат. Афарин, Сәлим! Береһен түмәргә ҡуй әле! *(Сәлим ҡуя.)*

Сәлим. Булдымы?

Салауат уғын тоҫҡап уға атып ҡарай.

Салауат. Быныһы ҙур. Бәләкәйерәген ҡуй!

Сәлим ҡуя. Салауат тейҙерә.

Сәлим *(һоҡланып.)* Шә-әп! Ҡана мин дә! *(Ата, теймәй.)*

Аллағыуат. Хәҙер мин! *(Тейҙерә.)*

Сәлим. Тағы ла бер атайым әле?!

Салауат. Ат, ат! Ярыш түгел бит. Өйрәнәбеҙ генә.

Сәлимдең уғы теймәй.

Сәлим. Әй, минән уҡсы сыҡмай. Хәҙер көлөрһөгөҙ инде.

Салауат. Юҡсы, кем көлһөн! Берәү ҙә белеп тыуымай. Беҙ бит Аллағыуат, Зөбәйерҙәр менән гел дә сығабыҙ. Ә һин тәүгә генә. *(Сәлим янына килеп.)* Һин бит ауылда иң көслө малай.

Сәлим. Барыбер теге юлы көрәштә һиңә етеүсе булманы.

С а л а у а т. Беләктәге көс кенә етмәй. Таҫыллыҡ та кәрәк. Әле атырға сыҡтыҡ, аҙаҡтан бергәләп көрәшергә лә өйрәнәбеҙ әле.

С ә л и м. Һеҙҙә күңелле шул!

Шулай атышалар.

А л л а ғ ы у а т *(атыуҙан туҡтап)*. Беҙҙең менән булғың киләме? *(Үҙе Салауатҡа ҡарай. Салауат уҡ ата.)*

С ә л и м. Нисек?

А л л а ғ ы у а т *(Сәлимдең янына яҡын килеп)*. Салауат риза булһа, мин риза. Әйҙә әйтәйек!

С ә л и м. Әй, минең кеүек уҡты сәпкә тейҙерә белмәгәнде...

А л л а ғ ы у а т. Улай тимә әле. Һин Салауатҡа үҙең әйт! Ул ҡыйыу егеттәрҙе ярата.

С ә л и м. Әллә...

А л л а ғ ы у а т. Әйт, үкенмәҫһең. *(Салауатҡа.)* Салауат, Сәлимдең һиңә бер һүҙе бар!

Салауат атыуҙан туҡтай.

С а л а у а т. Йә!

С ә л и м. Салауат! Мин... мин башҡа Хәкимйәндәр менән булмайым! Һеҙҙең менән булам.

С а л а у а т. Һин шәп егет, Сәлим! Әлегә бергә йөрөтөрбөҙ. Тик Хәкимйән менән дуҫлашмаһаң ғына. Мин бит бында бер үҙем түгел. Ана, Аллағыуат ни тиер?!

А л л а ғ ы у а т. Мин риза, Салауат! Аҙаҡ Зөбәйерҙән һорарбыҙ! *(Дуҫының бергә булырына ҡыуанып.)* Кил, Сәлим! Һинең сират! *(Атырға саҡыра.)*

Салауат менән икәүләп Сәлимгә уҡ атырға өйрәтәләр.

С а л а у а т. Төҙләгәндә уҡ башағын сәптән саҡ ҡына юғарыраҡ төҙә. Уҡ башағы аҫҡа тарта ул. Тимер бит. Ауыр.

А л л а ғ ы у а т. Уң ҡулыңды ҡалтыратма! Ара яҡын. Керешеңде бик ныҡ тартма! Йә, төҙәнеңме? Ат!

Сәлим ата. Торонбаш ҡолай.

А л л а ғ ы у а т. Ур-ра! Тейҙе!

С а л а у а т. Сәлим! Бына күрҙеңме? Гел дә шулай атһаң, һинән көслө уксы сығасаҡ.

Аллағыуат. Ә-й, сыпсыҡ атырға онотоп ҡуймайыҡ. Балапанға. *(Серҙе сискәнен иҫенә төшөрөп, ҡапыл Салауатҡа ҡарай. Салауат, ниңә серҙе асаһың, тигәндәй уға шелтәле ҡарай.)*

Сәлим *(гәжәпләнеп)*. Балапан?

Салауат *(һүҙҙе икенсегә бороу өсөн)*. Ә-ә-ә, эйе, атайым, бөркөт балаһына сәпсек атып алып ҡайт, тигәйне шул. Әйҙә, асыҡҡараҡ сығайыҡ та.

Аллағыуат. Ана, бер ҡош. Атып ҡарайыммы?

Салауат. Ат, ат. Алғараҡ төҙә. Ҡош шәп оса.

Ата. Теймәй.

Сәлим. Их, теймәне!

Салауат. Ҡана, үҙем атайым әле?! *(Ата.)*

Аллағыуат. Тейҙе, тейҙе! Ур-ра!

Сәлим. Ҡайҙа?

Аллағыуат. Ана, ҡош таш кеүек аҫҡа төшә.

Сәлим. Вәт шәп!

Аллағыуат *(һыҙғырып)*. Салауат булһын да тейҙермәһен инде. Беҙҙең Салауат шулай ул, Сәлим!

Салауаттың арҡаһынан ҡағалар.

Салауат. Ҡоштоң ҡайҙа төшкәнен иҫләнеңме, Аллағыуат.

Аллағыуат. Эйе.

Салауат. Беләһегеҙме, егеттәр! *(Аллағыуатҡа мәғәнәле ҡарап.)* Һунар бөркөттәре ошолай атып ҡолатҡан ҡошто ергә төшмәҫ борон һауала уҡ тотоп алып хужаһына килтерә, ти. Әле теге сәпсекте ҡасан табабыҙ, билдәһеҙ.

Аллағыуат. Әллә уҡ-һаҙаҡтарҙы ошонда ғына йәшереп китәйекме?

Салауат. Була инде. Иртәгә тағы килербеҙ. Сәлимгә өйрәтәһе бар бит әле. Әйҙә бынау ҡыуаҡ артына һалайыҡ та...

Аллағыуат менән Салауат ян-уҡты йәшерәләр.

Аллағыуат. Сәлим, әйҙә киттек, ҡошто табайыҡ!

Сығалар.

## Бишенсе күренеш

Шомло көй яңғырай. Тирә-яҡҡа ҡарана-ҡарана Шәриф сыға. Ҡыуаҡ арттарын тикшереп сыҡҡас, ымлап Хәкимйәнде саҡыра. Хәкимйән инә. Ҡулында ҡара сепрәк менән ҡапланған ситлек. Улар балапанды урлағандар. Хәкимйән ситлекте бер ҡыуаҡ төбөнә ҡуя ла үҙе янына ултырта.

Шәриф. Әйҙә шәберәк! Күреп ҡалһалар?!

Хәкимйән. Туҡта! Саҡ ҡына ял итеп алайыҡ! Итегемдең силғауы төйөлгән... Тәҡәт ҡороно... *(Ултырып итеген сисә башлай.)*

Шәриф. Бынау көндә итек кейәләрме ни?

Хәкимйән. Кейҙем шул. Атайым Асманды тышап ебәрергә ҡушҡайны. Кисеү аша сығырға бит... *(Аяғына силғауҙы урай башлай.)*

Шәриф. Һин бәхетле. Һинең Асманың бар. Минең шундай толпар атым булһа, бер нимәгә лә ҡайғырмаҫ инем.

Хәкимйән. Ниңә, Асман минеке генә түгелсе.

Шәриф. Барыбер. Атайың һиңә уны менеп йөрөргә бирә бит. *(Ситлекте асырға итә.)* Исмаһам ошондай бөркөт балаһы ғына булһын ине. Һунарға йөрөр инем.

Хәкимйән *(уның ҡулына һуғып)*. Асма бөркөттө! Яҡтыны күрһә, ҡысҡыра башлар. Тотолабыҙ бит!

Шәриф. Тереме тип ҡарайым ғына тигәйнем.

Хәкимйән. Хәҙер беҙҙеке инде ул.

Шәриф. Вәт ҡылдыҡ Салауаттарға, эйеме?!

Хәкимйән. Ә һин бөркөттөң Салауаттарҙыҡы икәнен анығ беләһеңме?

Шәриф. Һуң?! Ул мәмерйәне аҙна буйы күҙәттем дә. Етмәһә, эстә Салауаттың күлдәгенән ишелгән арҡан бар ине.

Хәкимйән. Ул күлдәктең Салауаттыҡы икәнен ҡайҙан белдең?

Шәриф. Бәй-бәй, уныҡы кеүек күлдәк башҡа малайҙарҙа юҡ та. Атаһы старшина булғас, Ырымбурҙан ғына килтертә, ти, кейемде?

Хәкимйән. Йә, ярай. Гел Салауаттар ғына әллә кем булып йөрөмәһендәр әле. *(Итеген кейеп атлап ҡарай. Бер ерен оҡшатмай. Кире ултыра. Итеген сисә.)* Әһә, теге кисеүҙе кискәндә табаныма таш ҡыҫылған икән. Нимә төртә, тием. *(Тирә-яғына ҡаранып нимәлер эҙләй.)* Шәриф, берәй ағас ботағы килтереп бир әле. Мин итекте сискәнмен.

Шәриф тап бая Салауаттар ян йәшергән ҡыуаҡ араһынан бер таяҡты тарта, ул ян булып сыға.

Шәриф. Һы, әллә ян инде? Хәкимйән, ҡара әле?!

Хәкимйән. Килтер, килтер! *(Янды әйләндереп ҡарай.)* Кем ҡалдырып киткән икән?

Шәриф. Ҡайҙа, тағы ла юҡ микән? *(Кире ҡыуаҡҡа бара.)* О-о-о, бында тағы ла ике ян, өҫтәүенә, уҡтары ла бар!

Хәкимйән. Килтер бында. *(Бер уҡты әйләндереп ҡарай.)* Был тимерсе Сәлих яһаған башаҡ бит!

Шәриф. Зөбәйерҙеке инде улай булғас. Яндарын ҡарайыҡ әле? *(Ҡарайҙар.)*

Хәкимйән *(тороп баҫа. Яндың керешен тартып ҡарай. Уҡты төҙәй)*. Шә-әп! *(Янда яҙыу күреп ҡала.)* Шәриф, кил әле. Бына был тамғаны күрәһеңме?

Шәриф. Эйе. Ә нимәне аңлата ул?

Хәкимйән *(ҡапыл нимәнелер хәтерләгәндәй)*. Был яндар кемдеке, беләһеңме?

Шәриф. Кемдеке?

Хәкимйән *(зәһәр ҡыуанып)*. Салауаттарҙыҡы!

Шәриф. Ә ҡайҙан белдең?

Хәкимйән. Бына ошондай тамғаны Салауаттың атаһы гел дә айғыр һыртына баҫа. Салауат та шуны һалған янына.

Шәриф. Йә ярай, әйҙә, итегеңде таҙала ла, шылайыҡ!

Хәкимйән *(итеген алып уҡ башағы менән табанын соҡой)*. Сыҡты! *(Итеген кейә.)* Әллә... был уҡ-яндарҙы ла алып китәйекме?

Шәриф. Ҡурҡыта бит әле.

Хәкимйән. Һы, тапҡанһың ҡурҡыр нимә.

Шәриф. Бөркөт балаһын йәшереүе еңел. Ә уҡ-һаҙаҡты атыш уйнағанда барыбер күрһәтергә кәрәк.

Хәкимйән. Дөрөҫ! Иң яҡшыһы нимә, әйтәйемме? *(Уҡты алып урталай һындыра.)* Бына! Күрҙеңме? Бер кем дә, һеҙ һындырҙығыҙ, тип әйтә алмай.

Шәриф. Был тирәлә, атайым, айыу йөрөй, ти. Йә айыу һындырған, тиербеҙ.

Хәкимйән *(түмәр янына килеп)*. Ҡара, ҡара! Улар бында атышҡа өйрәнгәндәр. *(Түмәр янындағы түбәтәйҙе күтәрә.)* Был кемдеке? *(Хәкимйәнгә күрһәтә.)*

Шәриф. Былмы? Был Сәлимдекенә оҡшаған.

Хәкимйән. Сәлим?! Вәт һатлыҡ йән! Салауаттар менән уҡ атышҡан! *(Түбәтәйҙе ергә һалып тапай. Ныҡ асыуланып.)* Ҡана, килтер яндарҙы!

Шәриф килтерә. Хәкимйән береһен алып урталай һындыра.

Хәкимйән. Бына һеҙгә! Бына! *(Шәриф тә бер янды һындыра. Шул саҡ бөркөт тауыш бирә. Ярһыған Хәкимйән ситлеккә яҡын килеп.)* Әле һин дә яҡлашаһыңмы уларҙы? *(Хәкимйән ҡаршыһына Шәриф сыға.)*

Шәриф. Хәкимйән, туҡта! Бөркөт балаһы беҙгә кәрәк бит! Теймә!

Хәкимйән тыныслана төшә.

Хәкимйән *(ситлекте ала)*. Эйе, һин беҙгә кәрәкһең әле. Беҙ ҙә һунарҙа үҙебеҙҙе күрһәтербеҙ!

Шәриф. Ситлекте теге үҙебеҙҙең ҡыуышҡа йәшереп ҡуйайыҡ...

Ситлекте алып сығып китәләр.

## Алтынсы күренеш

Аллағыуат сыға. Ҡулында төргәк. Шәп килеп юлдағы ян һыныҡтарына абынып йығыла. Төргәге бер яҡҡа оса.

Аллағыуат. Аһ! Сысҡандарым ҡаса! *(Һикереп тора ла моҡсай ағына ашыға.)* Береһе ҡалған икән. Мыраубикәнең тырнағынан саҡ алып ҡалғайным икеһен дә. Ҡарап ҡына тормаһаң, уйната, уйната ла ашай ҙа ҡуя ул мәсекәй. Тәмлене ярата. Ярай, балапан, бер сысҡан етеп торор бөгөнгә. Юл уртаһына кем таяҡ ташлағандыр. Иртәнсәк юҡ ине. *(Таяҡты ала. Салауаттың билдәһен күрә.)* Был бит... был бит беҙҙең ян! *(Хафаланып тирәләп ҡарай.)* Бына минеке, бына Сәлимдеке... Кем шулай ҡыланды икән? Их, юҡҡа ҡалдырып киттек әле шул яндарҙы?!

Салауат килеп инә.

Салауат. Аллағыуат? Нимә булды?

Аллағыуат *(ян киҫәген биреп)*. Бына! Кемдер һындырып киткән.

Салауат *(борсолоп)*. Эйе, ҡылғандар! Береһе лә ҡалмағанмы?

Аллағыуат. Өсөһөн дә һындырғандар.

Салауат. Ә уҡтары иҫәнме?

А л л а ғ ы у а т . Әлләсе, ҡарамаными. *(Барып ҡарай.)* Уҡтары ята!

С а л а у а т . Ярай әле яндарҙы ғына һындырғандар. Уҡтың башаҡтары ҡәҙерле бит.

А л л а ғ ы у а т . Шулай ҙа ул. Нисек һәйбәт итеп эшләгәйнек.

С а л а у а т . Ҡайғырма, дуҫҡай! Яңыларын быларҙан да яҡшыраҡ итеп яһарбыҙ.

А л л а ғ ы у а т . Ҡасан? Әле мин балапанды ашатырға китеп барам.

С а л а у а т . Ҡасан, тиһеңме? Муйыллыҡ яҡын бит. Мин ауылға ҡайтып үткер бысаҡ килтерәм. Ә һин бөркөттө ашатып кил дә мине ошонда көт, йәме.

А л л а ғ ы у а т . Ярай. Килештек!

Салауат та, Аллағыуат та сыға.

## Етенсе күренеш

Салауат килеп инә. Ҡулында ҙур бысаҡ. Тирә-яҡҡа ҡарана.

С а л а у а т . Бәй, Аллағыуат һаман килмәгәнсе? Әллә берәй хәл булғанмы? *(Түмәргә ултыра. Көтә. Бысағын ҡарай.)* Елле бысаҡ! Һунар бысағы. Үткән йыл һабантуйҙа көрәштә еңгән өсөн ҡартатайым бүләк иткәйне. Тылсымлы бысаҡ ул. Яуыз уйҙағы эштәрҙе эшләшмәй. Тик изгеләре өсөн, йә булмаһа, берәй хайуандан һаҡланыу өсөн генә ҡуллан, тигәйне. Ниңә уҡ юнып, ян эшләү изге инде ул...

Ашығып, бик борсоулы ҡиәфәттә Аллағыуат инә.

С а л а у а т . Аллағыуат? Ниңә ағарынғанһың?

А л л а ғ ы у а т *(әрнеп)*. Их, ҡайҙа булды икән?

С а л а у а т . Нимә?

А л л а ғ ы у а т . Йәшел һаҙға тиклем барып ҡараным. Тауға ла мендем. Юҡ! Бер ерҙә лә! Кем генә урланы икән?

С а л а у а т *(хафаланып)*. Әллә... балапандымы?

А л л а ғ ы у а т *(баш һелкә)*. Ыһ!

С а л а у а т . Һин... һин... яҡшылап ҡараныңмы?

А л л а ғ ы у а т . Юҡ, юҡ, бер ерҙә лә юҡ. Ситлеге-ние менән. Хатта ҡара япмаһын да алғандар. Балапаныбыҙ имен генә булһа ярар ине.

С а л а у а т. Терелер! Улар ҙа шул һунар өсөн алғандыр.

А л л а ғ ы у а т. Хәҙер нимә эшләйбеҙ?

С а л а у а т. Балапанды эҙләйбеҙ. Табып... ҡотҡарабыҙ!

А л л а ғ ы у а т. Нисек?

С а л а у а т. Уйлашырға кәрәк. Тәүҙә ауылдағыларҙың кемеһенә һунар бөркөтө кәрәк икәнен асыҡлайыҡ.

А л л а ғ ы у а т. Кемдән һорашабыҙ? Беҙҙең балапаныбыҙ барлығын бер кем дә белергә тейеш түгел, тигәйнек бит. Бөтә уйлағандарыбыҙ юҡҡа сыға инде.

С а л а у а т. Шулай шул. Ике баш берәүҙән яҡшыраҡ. Уйлашайыҡ.

А л л а ғ ы у а т. Балапан тик беҙҙең ҡулдан ғына ашарға өйрәнде. Асығып үлеп ҡуймаһын. Йәһәтләйек!

С а л а у а т. Эйе. Тиҙерәк булайыҡ. Былай итәбеҙ. Һин ауылға ҡайт та, Зөбәйергә бар. Хәлде һөйлә. Йәһәт кенә икәүләп кире муйыллыҡҡа килегеҙ. Мин ошонда көтәм.

А л л а ғ ы у а т. Ярай, Салауат!

Сыға. Салауат яңғыҙы.

### Һигеҙенсе күренеш

С а л а у а т *(һынған яндарҙы ҡарап)*. Бынытының тарамышы һәйбәт кенә. *(Ҡырҡып ала.)* Их, Балапан, Балапан! Һине барыбер табасаҡбыҙ. Тик һин генә бирешмә, йәме. Бирешмә! Ҡанаттарың нығынып, күҙҙәрең асылған булһа, моғайын, үҙең беҙҙе эҙләп табыр инең. *(«Егеткә» тигән шиғырын һөйләй.)*

*Бейектә оса ҡоҙғон ҡош,*
*Унан бейек осор ыласын бар.*
*Ыласындан да бейек оса торған*
*Ҡош батшаһы — ҡыйғыр бөркөт бар.*
*Шул бөркөттәй, егет, батыр бул,*
*Таянғанда таян дуҫтарға...*

Табып ҡына алайыҡ әле. Йәнебеҙҙәй күреп һаҡларбыҙ.

Ҡыуаҡ артынан ботаҡ һынған тауыш ишетелә.

С а л а у а т *(шым ғына)*. Кемдер килә, буғай. *(Икенсе ҡыуаҡ артына йәшенә.)*

Хәкимйән сыға. Ҡәнәғәт йөҙ. Килеп ҡыуаҡ ситен асып ҡарай.

Хәкимйән. Һа, яндарҙы алғандар. *(Тирә-яҡҡа ҡарай.)* Беҙ һындырғанды барыбер белә алмай улар. Хәкимйәндең башы эшләй. *(Тағы ла ҡыуаҡ ситенә килә. Ҡурай еләге ашай башлай.)* Шәп иттек үҙҙәрен! Инде әллә кем булып йөрөмәҫтәр. Еләк! Ҡурай еләге лә бешеп киткән икән. Шәриф, ошонда киләм, тине, буғай.

Ҡурай еләген ашай башлай. Ҡыуаҡ артында ағас һына. Ҡапыл Хәкимйәнгә 2—3 метр етәрәк ҡыуаҡ артынан айыу ҡалҡа. Үкерә. Хәкимйән ҡатып ҡала. Иплэп кенә артҡа шыла. Айыу ҙа яҡыная. Хәкимйән Айыуға ҡараған килеш эйелеп ботаҡ алырға иткән мәлдә икенсе ҡыуаҡ артынан Салауат һикереп килеп сыға ла айыуға ташлана. Уның һыртынан ҡаршыһына сығып бысаҡ ҡаҙай. Айыу үкерә. Икеһе лә ҡолай. Хәкимйән таш булып ҡатып тора ла: «Үлтерҙе! Айыу! Салауат!» — тип һөрәнләп ауыл яғына сығып китә.

### Туғыҙынсы күренеш

Сәхнә ҡараңғы. Ауыл яғынан йүгереп килгән кешеләр тауышы ишетелә: «Ҡайҙа? Ҡайҙа?», «Йәһәтерәк булайыҡ. Ҡаны ағып бөтөп хәлһеҙләнмәһен!» «Мин Салауатты күтәрәм», «Беҙ айыуҙың тиреһен тунай торабыҙ!» «Салауаттың бысағын аҙаҡ беҙгә алып килерһегеҙ!» Сәхнә яҡтырмай. Ундағы декорациялар үҙгәрә.
Ауыл өйөнөң эсе. Зөләйха ҡамырҙан бәрәмәстәр яһай. Мөйөштә мейестә ут яна. Шул саҡ борсоулы ҡиәфәттә Гөлбикә килеп инә.

Зөләйха. Гөлбикә? Ҡайттығыҙҙамы ни? Күрше ауылдағы Марусяларға барманығыҙмы ни?

Гөлбикә. Барманыҡ шул. Әсәйем ебәрмәне. Ярай ебәрмәгән. Йәйәүләп атларға бит. Ташморон яланы аша үтер кәрәк.

Зөләйха. Булһа ни? Гел шунан йөрөйбөҙ ҙә?

Гөлбикә. Бәй, ишетмәнеңме ни?

Зөләйха. Нимәне?

Гөлбикә *(ҡолағына яҡыныраҡ килеп)*. Салауатты?

Зөләйха *(борсолоп)*. Салауатты? Әллә берәй хәл булғанмы?

Гөлбикә. Эй, әхирәткәйем! Һин ошо өйҙән сыға белмәнең инде.

Зөләйха. Әсәйем бер ергә лә ебәрмәй шул. Йә, әйт инде? Нимә булған Салауатҡа? Әллә берәйһе туҡмағанмы?

Гөлбикә. Һы, туҡмарһың Салауатты. Ул үҙе әллә кемдәрҙең кәрәген бирер. Һин ысынлап ишетмәнеңме?

Зөләйха. Юҡ шул.

Гөлбикә. Ниңә, эргә-тирәләге бар ауылдарҙа ла халыҡ геү килә. Былай ҡыйыу йөрәкле бала быуатҡа бер тыуа, тиҙәр ҡарттар. Бөтә ырыуҙы шаҡ ҡатырҙы, ти атайым.

Зөләйха. Нимәгә?

Гөлбикә *(тантаналы тауыш менән)*. Белгең килһә, уны яландан минең атайым күтәреп алып ҡайтҡан!

Зөләйха. Күтәреп? Имгәнгәнме ни?

Гөлбикә. Һы, айыу һынлы айыу менән көрәшһен дә...

Зөләйха. Айыу? Ҡайҙа?

Гөлбикә. Һуң, әйттем дә инде. Ташморон яланында... Шуға әсәйем мине ебәрмәне.

Зөләйха. Салауат ныҡ имгәнгәнме?

Гөлбикә. Яурынының тиреһен һыҙырып алған, ти, ул айыу. *(Бергәләп бәрәмәс эшләй башлайҙар.)*

Зөләйха. Уй, ныҡ ауырталыр инде. Һин үҙен күрмәнеңме?

Гөлбикә. Күрҙе ти. Мине унда кем индерһен? Зөбәйер ағайымдан һорашҡайным, әле иҫенә килмәгән. Яраларын үләндәр һалып бәйләгәндәр, ти.

Зөләйха *(борсолоп)*. Үлмәҫ тә ул?

Гөлбикә. Юҡ, юҡ! Ҡартатаһы кеүек йөҙгә тиклем йәшәр әле ул.

Зөләйха. Шулай шул. *(Көлөшәләр.)*

Гөлбикә. Ҡара әле, Зөләйха, һиңә бер нимә күрһәтәм. Бер кемгә лә әйтмә, йәме.

Зөләйха. Нимә ул?

Гөлбикә. Зөбәйер ағайым белеп ҡалһа, кәрәгемде бирәсәк.

Зөләйха. Әйтмәйем. Йә, күрһәт инде?

Гөлбикә кеҫәһенән айыуҙың тырнағын сығара.

Гөлбикә. Бына!

Зөләйха. Абау! Нимә ул?

Гөлбикә. Айыуҙың тырнағы ла инде. Зөбәйер ағайым теге айыуҙың тиреһен тунағанда һорап алып ҡалған. Һунарға сыҡҡанда ошо тырнаҡты муйынға аҫып сыҡһаң, януарҙан һаҡлай, ти.

Зөләйха. Ә кемдәр тотҡан ул айыуҙы?

Г ө л б и к ә. Бәй, әйтмәнемме ни? Һуң, Салауат бер үҙе йөрәгенә бысаҡ ҡаҙап үлтергән ул айыуҙы. Хәкимгә ташланған да Салауат, уны ҡотҡарам тип, айыуҙы үлтергән. Яланда Салауат иҫһеҙ, айыу үлеп ята ине, ти атайым.

З ө л ә й х а. Ысынлап та, батыр шул беҙҙең Салауат! *(Тырнаҡты ҡулына алып.)* Ҡара әле, ошондай ҙур тырнаҡ Салауаттың яурынына инеп китһен сәле?

Г ө л б и к ә *(тырнаҡты алып кире кеҫәһенә һала)*. Шулай шул. Ағайым һиҙмәҫ борон уны кире урынына һалып ҡуяйым әле. *(Ашығып китә башлай.)*

З ө л ә й х а. Ә... Салауат... бәрәмәстәрҙе. Гөлбикә, аҙ ғына көтөп тор. Хәҙер бәрәмәсте мейескә ҡуям. Сәй эсербеҙ.

Г ө л б и к ә. Аҙаҡ килермен.

З ө л ә й х а. Ней... Салауат иҫенә килгәс ашар ине. Бәрәмәстәрҙе. Һин Зөбәйер ағайыңа бирерһең дә, ул Салауаттарға алып барыр.

Г ө л б и к ә. Мин дә ейәк бәлеше бешерҙем. Һуңғараҡ килеп алырмын. *(Сығып китә.)*

З ө л ә й х а. Ырыу батырының тәненә көс-ҡеүәт бирегеҙ! *(Бәрәмәстәрҙе һыйпай. Мейестәге утты болғай.)* Гөлбикә килгәнсе ҡайнап та сығыр самауырым.

Гөлбикә кире килеп инә.

Г ө л б и к ә *(Зөләйханың ҡолағына килеп ниҙер шыбырлай ҙа уға серле итеп ҡарап ҡуя)*. Ризамы?

З ө л ә й х а *(уйланып)*. Әлләсе? Ярай, кил! *(Башын ҡаға.)*

Гөлбикә ырғый-һикерә сығып китә. Зөләйха йылмайып ҡарап ҡала. Һоҫҡоға мейестән ҡуҙ ала ла сәхнәнән сығып китә.

### Унынсы күренеш

Һәндерәлә Салауат ята. Бер яҡта ауыл өйөнөң стенаһы. Тәҙрә уйылған. Иплэп кенә баҫып Аллағыуат менән Сәлим инә. Икеһенең дә ҡулында кескәй төргәк.

А л л а ғ ы у а т *(Салауат янына килеп)*. Салауат! *(Иплэп кенә яурынына ҡағыла. Ыңғырашып ҡуя ла, Салауат күҙҙәрен аса.)* Салауат! Был мин.

С а л а у а т. Ә-ә, Аллағыуат! *(Йылмая.)* Шунан...

А л л а ғ ы у а т. Хәлеңде белешергә килдек. *(Сәлим дә янына килә.)* Сәлим менән...

С э л и м. Яраларың һыҙлайҙыр инде.

С а л а у а т. Түҙерлек.

С э л и м. Бына әсәйем һиңә тип йәш ҡорот биреп ебәрҙе. Тиҙерәк һауыҡһын, ти.

С а л а у а т. Рәхмәт! *(Сәлим ҡоротто ҡуя.)*

А л л а ғ ы у а т. Тағы ла беҙ һинең яраңды майларға бурһыҡ майы килтерҙек.

С э л и м. Әсәйем әйтә, һыҙлауын баҫа, яраны тиҙ уңалта, ти.

С а л а у а т. Ә бурһыҡты нисек?..

А л л а ғ ы у а т *(бүлдереп)*. Сәлим менән икәүләп тоттоҡ.

С а л а у а т. Рәхмәт, дуҫҡайҙарым. *(Ҡалҡынырға итә лә һыҙланып кире ауа.)* Ой, ныҡ әләккән, ахыры. Айыухан мине ятҡан, ныҡ ҡосаҡлаған. Арҡа яныр бара. Хәкимйәнгә ташланған айыуҙы ғына хәтерләйем, ҡалғаны онотолған да ҡуйған.

С э л и м. Ярай Хәкимйән тиҙ генә ауылға йүгергән. Юғиһә, ҡаның ағып бөтөп үлер инең. Былай ҙа өс көн иҫһеҙ яттың.

А л л а ғ ы у а т *(ғорурланып)*. Ә айыуҙың тап йөрәгенә ҡаҙағанһың бысаҡты.

С а л а у а т. Кит юҡты! Мин йөрәге тип уйламаным да...

С э л и м. Айыуға ҡабырға яҡлап килгәс, ҡапылғара һине аңғармай ҡалғандыр.

А л л а ғ ы у а т. Айыу бейегерәк бит. Һин уның ҡултығы аҫтынан ингәнһең дә ҡаҙағанһың бысаҡты.

С а л а у а т. Ярай әле ул бысаҡ булған. Хәкимйән, айыуҙы күргәс, тораташтай ҡатты ла ҡуйҙы. Етмәһә, әйелеп таяҡ алырға итә. Айыу үкереп ташланды ла ҡуйҙы.

С э л и м. Бөтә ауылды шаҡ ҡатырҙың, Салауат! Бер көндә тирә-яҡтың данлыҡлы батырына әйләндең, Салауат!

А л л а ғ ы у а т. Әйе, ун дүрт йәштә айыуға ташланғас, ун һигеҙҙә кем булыр, тип һөйләналар.

С а л а у а т. Эй, ҡуйығыҙсы. Мин батыр булам тип ташланғанмындыр шул? Күрәләтә берәүҙе бәләлә ҡалдырып булмай ҙа. Минең урында һеҙ ҙә шулай итер инегеҙ. Ә-ә, ней, Балапан?! Табылдымы?

Аллағыуат, Сәлим бер-береһенә ҡараша.

С э л и м. Ней, теге, беҙ асыҡланыҡ шикелле...

С а л а у а т. Кем?

А л л а ғ ы у а т *(ҡыйыуһыҙ ғына)*. Әлегә тап шул, тип әйтә алмайбыҙ...

Сәлим. Һин борсолма. Табырбыҙ...

Салауат *(әсенеп)*. Их, балапан! Мин дә эҙләшер инем... Аһ!

## Ун беренсе күренеш

Ишек шаҡыйҙар. Ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына Хәкимйән күренә. Сәлим менән Аллағыуат уға ҡаршы атлай.

Хәкимйән. Һаумыһығыҙ!

Аллағыуат. Һы, һаулыҡ һорашҡан була. Ҡурҡаҡ! Салауаттың бер үҙен ташлап ҡастыңмы?

Хәкимйән. Ә-ә-ә... ней... Салауат...

Салауат. Кем? Егеттәр?

Аллағыуат. Салауат, Хәкимйән килгән!

Салауат. Үт, үт, Хәкимйән!

Хәкимйән *(Салауатҡа яҡын килеп)*. Һаумы, Салауат! Мин... мин... һиңә бурыслымын. Рәхмәт әйтергә килдем. Ҡотҡарҙың.

Аллағыуат. Рәхмәт әйтә beләһең икән.

Салауат. Үҙеңә лә... рәхмәт. Ярҙам саҡырғанһың. Ыһ!

Хәкимйән. Теге ни... мин... теге юлы яндарығыҙҙы һындырғаным өсөн... ғәфү үтенәм!

Сәлим. Ах, ҡәбәхәт, кем икән тип баш ватҡан булабыҙ, һеҙҙең этлек булдымы?

Хәкимйән. Һин үҙең бит... Салауаттарға ҡушылғанһың... шуға.

Сәлим. Ҡушылһа ни! Айыу соҡорона бер үҙемде кем ташлап китте? Кем?

Салауат. Йә, егеттәр, талашмағыҙ!

Ишек асыла. Шәриф күренә. Ҡулында ҡара япмалы ҡош ситлеге.

Хәкимйән *(ҡыуанып)*. Шәриф! Эй өлгөрһөң дә инде. Шәп!

Шәриф. Һаумыһығыҙ! *(Ситлекте Хәкимйәнгә тапшыра.)*

Хәкимйән. Салауат! Мин һиңә ғүмерем менән бурыслы. Һиңә... һеҙгә... барыһы өсөн дә ғәфү үтенәбеҙ. Бына! *(Ситлекте Салауат янына ҡуя.)*

Аллағыуат, Сәлим ояға ташлана. Икеһе бергә «Балапан!» тип шатлана. Ситлектең япмаһын асалар. Бөркөт балаһы тауышлана. Аллағыуат, Сәлим ситлекте алып һыйпайҙар. Салауатҡа күрһәтәләр. Хәкимйән, Шәриф бер ситкә баҫа.

С а л а у а т. Балапан! Ҡайттыңмы? Беҙҙең тауышты танып ҡыуана бит ул. *(Ситлекте һыйпай.)* Үҙеңдә егетлек тә бар икән Хәкимйән. Атайым әйтә, хата ҡылыуыңды таныу — үҙе батырлыҡ, ти. Балапан! Бирешмәгәнһең!

А л л а ғ ы у а т. Әллә бер күҙе тулыһынса асылған инде, ҡара, Сәлим!

С ә л и м. Эйе шул. Тик бигерәк бойоҡ күренә. Ашаттығыҙмы һуң?

Ш ә р и ф *(ғәйепле ҡиәфәттә)*. Ул беҙҙең ҡулдан бер нимә лә ашаманы.

А л л а ғ ы у а т. Урлауығыҙ ғына етмәгән, асыҡтырып үлтерергә уйланығыҙмы?

Х ә к и м й ә н. Юҡсы. Беҙҙең дә һунарға сыҡҡыбыҙ килгәйне.

Ш ә р и ф. Ғәфү итегеҙ беҙҙе. Шулай...

С ә л и м. Килтергәнегеҙгә лә рәхмәт. Тағы ла бер ике көн тотһағыҙ, асығып үлер ине.

А л л а ғ ы у а т. Шуларға рәхмәт әйтеп тораһы? Бурҙар! Бар тайығыҙ бынан!

Х ә к и м й ә н. Салауат! Һеҙгә... һиңә бер һүҙебеҙ бар.

С а л а у а т. Йә, әйт һуң?

Х ә к и м й ә н. Беҙ башҡа улайтмайбыҙ. Ней, һеҙҙең менән... әйҙә дуҫ йәшәйек!

Барыһы ла аптырап ҡала.

А л л а ғ ы у а т. Һин нимә, Хәкимйән?!

С ә л и м. Тағы ла берәй этлек уйлайҙыр әле ул.

С а л а у а т. Егеттәр! Улай тотҡан ерҙән һындырыу килешмәй. Бәлки, ысынлап та...

Х ә к и м й ә н *(ҡыуанып)*. Мин һеҙгә... мин һеҙгәме... Асманды менергә бирәм!

А л л а ғ ы у а т. Асманды? Бәйге толпарынмы?

Ш ә р и ф. Эйе, эйе, бирә, бирә! Миңә лә бирҙе. Вәт шәп саба әй! Оса ғына! Йөрәк жыу итеп ҡала!

С а л а у а т. Егеттәр! Әллә уйлашабыҙмы? Бөркөттө лә үҙе килтереп бирҙе бит.

Ишектән Зөбәйер күренә. Ҡулында бер туҫтаҡ бәрәмәс һәм ҡурай.

З ө б ә й е р. Сәләм, егеттәр! *(Ситлекте танып.)* Әллә бөркөтөбөҙ табылдымы?

С ә л и м. Ҡара! *(Ситлеккә күрһәтә.)* Үҙҙәре килтереп бирҙеләр!

З ө б ә й е р *(Хәкимйәндәр яғына ҡарап)*. Шулайҙыр тип уйлағайным да. Ниндәй этлегебеҙ тейҙе һеҙгә?

С а л а у а т. Йә, ярай, Зөбәйер, үҙҙәре килтереп бирҙе бит. Хаталарын тандылар.

З ө б ә й е р. Әй, ни, Салауат... *(Әйтергәме, юҡмы тип егеттәргә ҡаранып ала.)* Гөлбикә менән Зөләйха һиңә тәмле еләк бәлеше менән бәрәмәстәр биреп ебәрҙе. Бына! Йылы ғыналар. Тиҙерәк һауыҡһын, тиҙәр. *(Туҫтаҡты Салауат янына ҡуя.)*

С а л а у а т *(тулҡынланып)*. Бәрәмәс? Уй, ҡайһылай тәмлекәс кенә. *(Ашай.)* Ҡыҙҙарға рәхмәт әйтерһең, йәме? Килегеҙ, һеҙ ҙә ашағыҙ!

З ө б ә й е р. Әйтермен. Ә бына быныһын аҙыраҡ һауыҡ-ҡас уйнарһың. *(Салауатҡа ҡурай бирә.)* Кисә атайымдан яһатып алдым. Һинең өсөн.

С а л а у а т. Рәхмәт, дуҫҡайым. Әле үк уйнағым килә лә бит, булмай.

Ш ә р и ф. Сәлим белә. Әйҙә, Сәлим, берҙе генә!

С а л а у а т. Ысынмы, Сәлим! Йә, күрһәт һәләтеңде!

Сәлим ҡыйыуһыҙ ғына ҡурайҙы алып өрөп ҡарай. Шунан бер моңло көй уйнап ебәрә.

С ә л и м. Мин әле өйрәнәм генә.

А л л а ғ ы у а т. Шәп, Сәлим! Беҙгә лә өйрәтерһең.

С а л а у а т. Бына ниндәй һәләтле икәнһең. Ҡана, килтерегеҙ әле балапанды. Аллағыуат, Сәлим, Зөбәйер, Хәким, Шәриф! *(Барыһы ла бергә йыйыла.)* Күрҙегеҙме, дуҫтарым, бына беҙҙең һунар бөркөтө лә, елдәй етеҙ толпарыбыҙ ҙа, хатта ҡурайсыбыҙ ҙа булды.

А л л а ғ ы у а т. Үҙебеҙҙең шағирыбыҙ ҙа, көй сығарыусыбыҙ ҙа бар! *(Көлөшәләр.)*

С а л а у а т. Берәй айҙан бергәләп төлкө, ҡуянға һунарға ла сығырбыҙ! Ошолай татыу, берҙәм булһаҡ, бер кем дә беҙҙе ҡыйырһыта алмаҫ!

Бөркөт балаһы тауышлана.

Х ә к и м й ә н. Ә һунарға... беҙҙе лә алаһығыҙмы?

С а л а у а т. Әлбиттә. Бергәләп күңеллерәк булыр.

С ә л и м. Тәүҙә ҡыҙҙарҙы рәнйетмәҫкә һүҙ бирһендәр.

З ө б ә й е р. Теге юлы һындырған яндарҙы яңынан эшләп бирһендәр...

А л л а ғ ы у а т. Урлашмаһындар...

Салауат. Йә, егеттәр, етәр!

Хәкимйән. Башҡа улайтмайбыҙ, тип әйттек тә инде.

Шәриф. Егет һүҙе бер була. Беҙ ысын!

Салауат. Егеттәр, барыһын да ваҡыт күрһәтер. Беҙ бөтәбеҙ ҙә бер ауылдан да инде. Ниңә татыу ғына йәшәмәҫкә, шулаймы?

Сәлим. Дөрөҫ, Салауат!

Аллағыуат. Һин тиҙерәк һауыҡ, Салауат!

Зөбәйер. Талашмайыҡ шул.

Салауат. Һеҙ шулай татыу булһағыҙ, мин дә тиҙерәк һауығырмын! Алда беҙҙе оло эштәр көтә! Бөркөт кеүек бейек үрҙәргә күтәрелеп, тыуған илдең гүзәллегенә бергәләп һоҡланырбыҙ әле.

Бөркөт балаһы ҡыуанып тауышлана.
Күмәкләп Салауаттың «Тыуған илем» шиғырына яҙылған йырҙы йырлайҙар.

*Минең тыуған ҡырҙарым,*
*Балдай татлы һыуҙарым,*
*Яландарым, урманым,*
*Күккә ашҡан Уралым, —*
*Минең изге төйәгем,*
*Һеҙҙе һөйә йөрәгем.*
*Күгәреп күккә үрелгән*
*Ҡарлы башын Уралдың,*
*Күҙҙең яуын алырҙай*
*Матурлығын ҡырҙарҙың*
*Мәңге маҡтар инем мин,*
*Мәңге данлар инем мин.*

**Шаршау**

# МАРС—500

*Сатирик драма*

## Ике бүлектә

ҠАТНАШАЛАР:

Питер Мончо — Американан килгән турист, 35 йәштә
Фәнил — Америкаға космосты тикшереү үҙәгенә эшкә киткән йәш ғалим
Зөләйха — хат ташыусы, 28 йәштә. Күрше ауылда йәшәй
Регина — Фәнилдең әсәһе, ауылда йәшәйҙәр, 60 йәштә
Тимур — Фәнилдең атаһы, 65 йәштә
Буранбай — ауылда ҡалған урта йәштәге ир
Әлфиә — Марс ауылы килене

## Беренсе бүлек

Ваҡиғалар беҙҙең көндәрҙән 20 йыллап ваҡыт үткәс бара. Бөгөнгө 10—15 йәшлектәргә 30—35 йәш. Ҡасандыр гөрләп торған Марс ауылынан барыһы ла тиерлек китеп бөткән. Регина, Тимур, Буранбай ғына ҡалған.

### Беренсе күренеш

Ауыл өйө интерьеры. Радионан башҡорт йырҙары ағыла. Алып барыусы: «... „Юлдаш-ретро" радиоһы һеҙҙең өсөн...» (Гөлсөм Бикбулатова. «Аҡ болоттар» йыры.) Тимур компьютер артында ултыра. Ҡыҙығып уйнай. Күп тә үтмәй, аҡ халат кейеп, бал ҡорттары саҡмаһын өсөн махсус башлыҡ (ҡорт башлығын) кейеп, умарта таҙарта торған бысаҡ тотоп, Регина килеп инә. Ҡорамалдарын өҫтәлгә ҡуя.

Регина. Тимур! *(Ире ишетмәй. Мауығып экранға текләгән.)* Тимур тим...

Тимур. Һөйлә, һөйлә, тыңлайым бит.

Регина. Тыңлауың нимәгә, ишетмәгәс. Шул бер компьютерың булманы. Иртәгә үк үҙең юкта ҡыйлыҡҡа ырғытам.

Тимур *(ҡатыны яғына ҡарап)*. Йә-йә, ҡыҙма, әйт!

Регина. Әйт, имеш. Ҡыҙҙырҙы-кыҙҙырҙы ла... теге ни бит. Хәлдәр шәп түгел. Ҡышҡылыҡҡа ҡалдырған яңы күсте әйтәм.

Тимур. Әй, анау яңы ояға һалғайныҡ, шулмы?

Регина. Шул-шул. Ни ғилләлер — үлеп бөтөп баралар. Иҫке оялағылары шул көйө, ә былары. Әллә яңы ояның еҫе оҡшаманы, әллә берәй тишеге ҡалып һалҡын бәрҙе инде... *(Тимур ул һөйләгән арала экранға текәлә.)* Һин мине тыңламайһың да?

Тимур. Туҡта, туҡта! Интернеттан яңылыҡтар уҡыйым... Бына... «Американың НАСА үҙәге Марсҡа ракета осорған. Ике астронавтан торған экипаж тиҙҙән Марсҡа аяҡ баҫасаҡ...» Күрҙеңме? Американар өлгөр булып сыҡты.

Регина. Өлгөр инде, өлгөр. Ана үҙебеҙҙең ғалимдар китеп бөтөп бара шул Америкаға. Берҙән-бер улыбыҙ Фәнилебеҙҙе лә үҙебеҙҙең илдә ҡалдыра алманыҡ. Исмаһам Мәскәүҙә йөрөһә лә йылына бер ҡайтыр ине. Һин ғәйепле. Ваҡытында тыйһаң китмәҫ ине. Ярай, бар, ер-һыу күреп ҡайт, тигән булдың. Ҡайтамы ни инде ул? *(Иламһырай.)*

Тимур *(янына килеп, ҡосаҡлап)*. Йә-йә, шым. Бөтөрөнмә. Бына күрерһең, улыбыҙ бөтә донъяға билдәле бер ғалим булып ҡайтып килер әле.

Регина. Нобель премияһы алыпмы? Үҙҙәренә эшләтеп-эшләтеп бер йолҡош итеп ҡайтармаһалар ярар ҙа.

Радионан «Бер ҡайтмаһам, әсәй, бер ҡайтырмын» йырын тапшыралар. Тимур шул саҡ әсенеп ҡысҡырып ебәрә. Күҙ тапҡырын ҡулы менән ҡаплай. Регина ғәжәпләнә. Ире янына хәүефләнеп килеп етә лә устарын битенән алырға итә.

Регина. Әллә һин дә илайһың?

Тимур. Ай, ҡәһәрең. Күҙгә генә эләкте, суҡынғыр.

Регина. Ҡайҙа, ҡайҙа? Ҡаяуы ҡалманымы? Ас әле, үҙем ҡарайым. Халатыма йәбешеп ингән инде. Ҡана, һыуыт-ҡыстан боҙ киҫәге килтерәйем. Һыҙлауы баҫылыр.

Регина сығып китә. Тимур ҙа, компьютерын һүндереп, көҙгөгә барып күҙен ҡарай.

**Т и м у р .** Үлһәм дә сағып ҡалайым тинеңме? Нишләп беҙҙе яңы ояға күсерҙегеҙ, тип асыуланаһыңмы әллә? Хәҙер бына, теге иҫке ояңды таҙартып, шунда күсерербеҙ үҙегеҙҙе. Инде йәмле йәй ҙә етер. Барығыҙҙы ла сәхрәгә, яланға сығарырбыҙ.

Регина боҙ киҫәге килтерә. Беләгендә аҡ халат.

**Т и м у р .** Эй, ҡуйсы. *(Боҙ һалдырмай.)* Әйҙә теге ояны ҡарайыҡ.

Сығалар.

Сәхнә буш. Бары тик радио ғына һөйләй ҙә тына бара.Шомло көй яңғырай. Көй бер тынып, бер көсәйеп китә. Ишек шаҡыйҙар. Ике тапҡыр шаҡығас, хөләмә фуфайка кейеп алған ир кеше саҡҡа аяғына баҫып сайҡала-сайҡала килеп инә. Был Питер Мончо. Американан килгән аҙашҡан турист, геолог. Тоҙ эҙләп сыҡҡан. Питер ныҡ арыған, асыҡҡан, хәле бөткән. Ул килеп инә лә бер аҙ сайҡалып торғас, иҙәнгә ҡолай. Баштарына аҡ ҡалпаҡтар кейеп Регина менән Тимур килеп инә. Ҡәнәғәттәр. Регина алдараҡ инеп, иҙән уртаһындағы кешене күреп, ҡатып ҡала, ә Тимур әле күрмәй, һөйләнә-һөйләнә инеп килә.

**Т и м у р .** Бирешмәҫ. Гөжләп торалар. Һуңғараҡ тағы ла... *(Кешене күреп.)* Ҡара! Был ҡайҙан?

**Р е г и н а .** Әллә Буранбай инде? Башҡа бер ҡасан да эсмәйем, ант, тип киткәйне теге юлы. Оялмай килгән бит әле. Вәт мәлғун. *(Килеп еңелсә генә уның арҡаһына тибә.)* Ошомо һинең антың, алкаш. Эсһәң беҙгә килеп йөрөмә тинем бит!

**Т и м у р .** Эй, ошо Регинаны. Ҡыҙаһың да китәһең. Һуң ауылда башҡа кеше ҡалмағас, беҙгә килмәй кемгә килһен? Бер үҙенә еңел тиһеңме? Былай ҙа ана кәҙә көткән булып, бер үҙе һаман китмәй бында йәшәп маташа. Дуҫтары күптән Себерҙә.

**Р е г и н а .** Йә, ошолайтып иҙән уртаһына һалып ҡуябыҙмы инде. Әйт!

**Т и м у р .** Һуң, таң атҡанса ятып торһон да...

**Р е г и н а .** Иртәнсәк, алҡа, беләҙектәремде урлап сығып ҡасһынмы?

**Т и м у р .** Һөйләмә юҡты. Буранбайҙың кеше әйберенә тейә торған ғәҙәте юҡ. Күңеле матур уның.

**Р е г и н а .** Иҙән уртаһынан алайыҡ исмаһам.

**Т и м у р** *(һөйрәп алып китергә итә)*. Ярҙам ит, нимә ҡаттың? Тот аяғынан.

Регина иғтибар менән ирҙең йөҙөнә ҡарай ҙа күтәреп барған еренән аяғын төшөрөп ебәрә.

Тимур *(уның күҙҙәренә ҡарап)*. Әллә? *(Үлгән тип уйлай. Тирә-яғына ҡарана. Регина башын һелкә.)* Кит юҡты. Ныҡ иҫергәндер?

Регина. Иҫерек кешене күргәнем юҡтыр шул. Ауыҙынан араҡы еҫе борҡоп торор ине. Мәйет ауыр була тиҙәр. Көс еткеһеҙ.

Тимур. Бар, ана утты яҡтырт әле. *(Ирҙең күкрәгенә ҡолағын ҡуйып тыңлап ҡарай.)* Тибә, тибә!

Регина утты яҡтырта. Тимур ирҙе тағы ла күтәрергә итә лә йөҙөнә иғтибар итә. Танымай. Кире һала. Әйләнеп ҡарап сыға. Еҫкәп ҡарай. Регина умарта кейемдәре, оҙон бысағын тотоп килеп теге кеше алдына эйелә. Кеше ыңғырашып ҡуя. Нимәлер мығырлай.

Регина. Һин нимә?

Тимур. Кил, ҡара!

Регина *(ирҙе күреп тертләп китә)*. Абау!

Тимур. Һин дә танымайһыңмы?

Регина *(тотлоғоп)*. Юҡ-сы.

Тимур. Мин дә... танымайым-сы.

Регина. Ә нисек ингән ул?

Тимур. Күктән төшкән. Шәпһең бит. Ауылда бер кем дә юҡ. Ишекте бикләмәһәк тә ярай тинең. Бына.

Регина. Уятып ҡарайыҡмы?

Тимур *(ирҙе һелкетеп)*. Әй, уян! Кем һин?

Ирҙең иҫе юҡ. Уянмай.

Регина. Әллә иҫен юйған инде?

Тимур. Нишатыр еҫкәтеп ҡарайыҡ!

Регина мамыҡ килтерә. Еҫкәтәләр. Файҙаһыҙ.

Тимур. Бәләһенән башаяҡ. Әллә тышҡа сығарып һалайыҡмы?

Регина. Тышҡа? Көн... төн һалҡын бит!

Тимур. Ә нимәгә йәлләйһең уны. Әллә ул һиңә танышмы?

Регина *(ҡурҡып)*. Юҡ-сы. Былай ғына. Кем икәнен белмәйбеҙ ҙә.

Тимур. Кем булһын. Берәй үткенселер. Башҡа бер өйҙә лә кеше йәшәмәгәс, беҙгә килгән инде.

Р е г и н а. Былай итәйек. Уянғансы көтәйек. Берәйһе күреп-нитә ҡалһа, Фидерҙәге кейәүебеҙ тиербеҙ.

Питерҙы күтәреп, ағас һәндерәгә һалалар.

Т и м у р. Әйҙә. Асыҡтырҙы. Сәй эсеп алайыҡ! *(Икенсе бүлмәгә ыңғайлай. Артынан Регина ла ҡуҙғала. Сығыр алдынан яҡын барып ят кешенең йөҙөнә текләй.)*

Т и м у р. Әллә таныныңмы? Ай-һай, был кеше ҡайҙандыр белеп ингән был өйгә?

## Икенсе күренеш

Таң ата. Әтәс ҡысҡыра. Радио һөйләй башлай. «Хәйерле иртә, хөрмәтле радио тыңлаусылар! Бөгөн егерме беренсе май. Өфө ваҡыты 6 сәғәт. Тапшырыуҙарыбыҙҙы башлайбыҙ!» Тауыш тына бара. Бүлмәгә Регина сыға ла йәһәт кенә биҙрәһен алып, яулығын рәтләп, һыйыр һауырға сығып китә. Бер аҙҙан Тимур сыға. Уның бер күҙе шешеп йомолған. Барып Питерҙы ҡарай. Ул уянмаған. Тын ала микән тип, тыңлап ҡарай. Стенаға эленгән фотоларҙы ҡараштыра. Унда Фәнилдең фотоһы ла бар. Мәрхүм атаһы, әсәһе, туғандары ла бар.

Т и м у р *(фотоларға ҡарап)*. Етмеш йәшең дә тулмай китеп барҙың шул, атай. Һеҙ барыбер бәхетлерәк йәшәнегеҙ. Асбыҙ, яланғасбыҙ тимәнегеҙ, һаман да илегеҙ, ерегеҙҙе уйланығыҙ. Коммунист булып тыумаһаң да коммунист булып үлдең. Ғүмерең буйы көткән, шунын өсөн эшләгән, йәшәгән яҡты коммунизм таңы итәки лә атманы ла атманы… хаҡлы ялға сыҡҡас ихата тултырып умарталар тоторға хыялландың. Әммә ғүмерең буйы йыйған хәләл тир көсө һеңгән аҡсаларың бер көн эсендә тингә тороп ҡалғас… күп йәшәй алманың шул. Һине күргән һайын йөрәгем һулҡый ине. Кәүҙәң тере, ә күҙҙәреңдә нур һүнгән, күңелең шиңгәйне. Шулай ҙа һин үҙ нигеҙеңдә йәшәп донъя ҡуйҙың. Ҡәҙерләп ерләргә яҡындарың, ауылдаштарың булды янында. Алдығыҙҙа әйҙәп торор ҡибла булды. Хыял менән йәшәнегеҙ. Ә хәҙер, ана, Фәнил улыҡайым, океан артына китеп олаҡты. Беҙҙе лә бында бер ниндәй ҙә коммунизмға саҡырмайҙар. Йәшәгең килһә йәшә, йәшәгең килмәһә… бер кемдең дә беҙҙә ҡайғыһы юҡ. Һәр кемебеҙ, етем бала шикелле, үҙ йүнебеҙҙе үҙебеҙ күрәбеҙ…

Питер уяна башлай.

Т и м у р *(яҡын килеп ҡарай)*. Уяндыңмы? Хәйерле иртә! Исемең кем? Ҡайҙан килдең?

Питер өндәшмәй.

Т и м у р. Йә, ниңә өндәшмәйһең? *(Питер «Юҡ» тигәнде аңлатып башын һелкә.)*

Т и м у р. Әллә башҡортса аңламай инде. Әллә ни башҡортҡа оҡшамағанһың шәй. Күрше Фидерҙән килдеңме әллә? *(Ҡолағына яҡын килеп.)* Как тебя зовут? Ты откуда пришел?

П и т е р *(акцентлы тел менән)*. Я где?

Т и м у р. Марс, Марста. Башҡа ҡайҙа булһын.

П и т е р. А вы... живете?

Т и м у р. А как же. Тут наш дом. Сам откуда?

П и т е р *(бармағын өҫкә күрһәтеп)*. Оттуда.

Т и м у р. Ҡайҙан икәнеңде иҫләмәйһеңме әллә?

П и т е р. Юҡ.

Т и м у р. Бына бәлә. Теге сериалдарҙағы кеүек була түгелме был. Унда ла шул саҡ ҡына бер нәмә булһа геройҙары хәтерен юя ла ҡуя бит. Ярай. Аҙыраҡ ял иткәс иҫләрһең. Тор! *(Тимур Питерҙы торғоҙоп карауатҡа ултырта. Тегеһе хәлһеҙ, бәүелеп-бәүелеп ала.)* Бәй, һинең хәлең шәп түгел. Туҡта. Ошолай ултырып тор. Мин хәҙер, сәй ҡуяйым. Йылы сәй эсеп ҡара.

Тимур йүгереп аш бүлмәһенә сығып китә. Ул сығыу менән «Марс? Марс!» тип һөйләнә-һөйләнә лә Питер кире карауатына ауа. Ул да булмай төпкө бүлмәнән эҫе сәй тотоп Тимур килеп сыға. Сәй эҫе булғас, уны тиҙ генә өҫтәлгә ултырта ла Питерға ҡарай. Һөтлө биҙрәһен тотоп Регина килеп инә

Р е г и н а. Тегендә генә эсһәң ни була?

Т и м у р *(Питерға ымлап)*. Эсерәм тигәйнем дә.

Р е г и н а. Бәй, ул йоҡлай бит!

Т и м у р. Йоҡламай. Әле генә торғоҙоп ултырткайным. Хәле юҡ. Етмәһә ҡайҙан килгәнен дә иҫләмәй.

Р е г и н а. Беҙгә бәлә генә була инде. Юҡҡа сығарып ҡына һалманыҡ.

Т и м у р. Берәй хәл тыуһа милиция алдында нимә тиерһең? Былай исмаһам эргәлә. Яраһы-ние юҡ буғай. Урманда аҙашып киткәндер. Ныҡ арығанға оҡшай. Уятып ҡарайыҡмы?

Р е г и н а. Әлләсе? Туҡта, сәйенә бер аҙ һөт ҡояйыҡ та. *(Биҙрәһенән стаканға һөт ҡоя.)*

Питер ыңғыраша. Нимәлер мығырлай. Тимур ҙа, Регина ла уның янына баралар.

Тимур. Әй, кем? Уян! *(Һелкетеп ҡарай. Питер уянмай.)*

Регина. Уянды, тинең бит. Исемен һораманыңмы ни?

Тимур. Әйтеп өлгөрмәне.

Регина. Йә ярай. Уяныр әле. Ҡырылмаһа ҡырҡ эшем бар. Әйҙә сәй эсеп алайыҡ та... *(Төпкө бүлмәгә ыңғайлай.)*

Тимур. Һаман уны ҡарауыллап булмай инде. Кисәге бал ҡорттарын ҡарап инергә кәрәк.

Регина. Эйе шул. *(Һөйләнә-һөйләнә сығып китәләр.)*

## Өсөнсө күренеш

Питер төш күрә. Һаташа. Сәхнә ҡараңғылана. Унда Марс планетаһы күренеше. Алыҫта Ер шары күгәреп кенә күренеп тора. Питер космонавт кейемендә. Яй ғына атлап килеп сыға. Тирә-яғына ҡарана. Мөйөштән бер күҙле ир кеше килеп сыға. Эргәһендә тағы берәү. Башында оло аҡ умарта ҡалпағы. Ҡулында оло бысаҡ. «Был беҙҙең ер! Кит бынан! Беҙ һине үлтерәбеҙ!» тип ир кеше Питерға яҡын килә. Питер: «Теймәгеҙ! Мин Ерҙән килдем! Ерҙән!» — ти. Ир кеше Питерға яҡын килә башлай. Ир Питерҙың фуфайкаһына йәбешә. «Бир! Был минең кейемем, сис! Сис!». Питер: «Sos, sos, ҡотҡарығыҙ!» — тип ҡысҡыра. Төш өңгә олғаша.

Питер. ...Сос! Ҡотҡарығыҙ! Ҡотҡарығыҙ!

Тауышҡа Регина менән Тимур йүгереп килеп сығалар. Питер карауатта тороп ултырған. Йөҙө ағарынған. Ҡалтырана. Регина аҡ халат кейгән. Башында ҡорттан һаҡлана торған башлыҡ. Тимурҙың ҡулында бысаҡ.

Регина. Уянды?!

Карауат янына йүгереп киләләр. Уларҙы күреп Питер яңынан иҫен юйып карауатҡа ҡолай.

Тимур. Уянды, уянмай ни. *(Регинаға ҡарап.)* Һуң бынау башлығыңды сисһәң ни була?

Регина *(Тимурҙың ҡулындағы бысаҡҡа ымлап)*. Үҙең һуң! Мине һуйырға килә был тип уйлағандыр. Бысағыңды һал! Һин ҡарауылла! Беҙ юҡта уянып сығып ҡасмаһын. Кем икәнен белеп булмай.

Ишек шаҡыйҙар. Тимур менән Регина ҡурҡыуға ҡала. Бер-береһенә ҡарашалар. Тимур бысаҡты йәшерә. Ишекте тағы ла нығыраҡ һуғалар.

Регина. Бар, ас!

Тимур. Тәүҙә кем икәнен һорайыҡ. Бәлки уның артынан килгәндәрҙер. *(Ишек яғына барып.)* Кем?

Зөләйха. Мин — Зөләйха, асығыҙ!

Тимур. Ә, Зөләйхамы ни. Әйҙә, әйҙә! Хәҙер асам.

Регинаға ымлай. Регина йәһәт кенә бер япма алып Питерҙы ҡаплай. Зөләйха инә. Ул күрше ауылдан килгән. Хат ташыусы.

Зөләйха. Һаумыһығыҙ! Әллә шулай ҡаты йоҡлайһығыҙ инде. *(Тирә-яҡты байҡап.)* Кисә һеҙгә берәй ир кеше килмәнеме?

Тимур менән Регина бер-береһенә ҡарашып.

Регина. Юҡ, юҡ, ҡыҙым. Кем килһен?

Зөләйха. Гәзиттә уҡыным. Свердлауҙағы төрмәнән бер ир ҡасҡан, ти. Уны беҙҙең районда күргәндәр.

Тимур. И-исеме кем икән?

Зөләйха. Бәй, ул һеҙгә ысын исемен әйтеп танышып торалыр шул. Енәйәтсе бит ул.

Регина. Рәхмәт әйтеүеңә. Бер кемде лә индермәҫбеҙ.

Зөләйха. Һағыраҡ булығыҙ инде. Ә мин һеҙгә посылка килтерҙем. Кемдән, тиһегеҙме? Фәнилдән!

Регина. Улымдан. Эй, Хоҙайым. Хәҙер инәм. Асмай тор! Ҡана ҡуйып торайым! *(Ала ла өҫтәлгә ҡуйып сығып китә.)*

Тимур Зөләйха биргән ҡағыҙға имза ҡуя. Посылканы һыйпай.

Тимур. Рәхмәт, ҡыҙым! Ҡара әле, теге ҡасҡалаҡ тураһындағы гәзитте беҙгә лә килтерерһең.

Зөләйха. Ярай. Һеҙҙән бигерәк үҙем ҡурҡам әле. Үҙәккә үткән машиналарға ултырып ҡына киләм бит бында. Посылка булмаһа, бөгөн килмәҫ тә инем. *(Компьютер яғына ымлап.)* Фәнил ҡайтырға уйламаймы?

Тимур. Кисә генә яҙғайны. Бер айға булһа ла ҡайтам тигән.

Зөләйха. Бер айға? *(Ҡыуанып.)* Ҡайтырға сыҡҡанын белһәгеҙ миңә лә хәбәр итерһегеҙ, яраймы? Күреп ҡалырмын.

Т и м у р. Беләм, беләм, ҡыҙыҡай. Теге кем әле... Американағы буласаҡ кейәүеңдең исеме?

З ө л ә й х а. Регина апайға әйтеп ҡуймағыҙ инде. Мин бит былай ғына. Һаман шулай яңғыҙ йөрөгөм килмәй ҙә. Бындағы егеттәр вис ситкә эшкә китеп бөттөләр. Ә минең әсәйем ауырый. Китә алмайым. Шуға былай ғына хат алышабыҙ уның менән.

Т и м у р. Запасҡа инде.

Регина инә. Кейемен һала.

Р е г и н а. Йә, Зөләйха, ҡайҙа теге посылка?

Регина посылканы бысаҡ менән аса. Төргәктән бер салбар менән электр ҡырынғысы килеп сыға. Хаты бар. Ҡысҡырып уҡый.

Р е г и н а. Һаумыһығыҙ, атай, әсәй! Әсәй, һине 8 март байрамы менән ваҡытында ҡотлай алманым, һиңә джинсы салбар, атай һиңә 23 февраль менән ҡырынғыс бүләк итеп ебәрәм.

Т и м у р. Эй, улым, улым, рәхмәт инде. *(Бритваны алып һыйпай.)*

Р е г и н а *(салбарҙы кейеп)*. Ҡарағыҙ әле, килешәме?

З ө л ә й х а. Во! Йәшәреп киттең. Кем әле теге... мадонна кеүек.

Р е г и н а. Йәш ваҡытта салбар төшөрмәнек осанан. Хәҙер ни йәпһеҙ һымаҡсы. Улым ебәргәс, кәртәгә сыҡҡанда булһа ла кейермен. Рәхмәт инде америктарға. Биш йыл сисмәй кейһәң дә туҙырлыҡ түгел салбарҙары...

Т и м у р *(бәләкәй йәшник эсен ҡарай)*. Тағы ла берәй нәмә юҡмы? *(Гәзиткә төрөлгән төргәк сығара.)* Бар!

Асып ҡарайҙар. Кәнфит, шоколадтар.

Р е г и н а. Беҙҙең тәмләп сәй эскәнде белә ул. Улыҡайым, ҡайҙа ғына йөрөһәң дә имен йөрө. Америкта ла һәйбәт кешеләр күптер әле. Үҙең ҡайтһаң бигерәк шәп булыр ине лә. *(Йәштәрен һөртөп ала.)* Зөләйха, әйҙә һин дә... Күстәнәстәр менән. Гел генә бал ашарға тимәгән дә. *(Сыға. Посылка эсенән сыҡҡан америка гәзите өҫтәлдә ятып ҡала.)*

З ө л ә й х а. Эйе, хәҙер. Тимур ағай, миңә компьютерҙы тоҡандырып ҡына бир әле.

Тимур Зөләйхаға бармағын янап, компьютерҙы тоҡандыра.

З ө л ә й х а . Рәхмәт. Мин почтаны ғына ҡарайым да. Хәҙер.

Тимур сыға. Зөләйха ҡала. Компьютерҙан почта ҡарай.

З ө л ә й х а . «Үҙең бында килергә риза булмағас, һине эҙләп, юлға сығырға уйлайым. Адресың бар.» Туҡта, туҡта, был хат ҡасан яҙылған? Өс аҙна элек. Эйе шул, мин күптән почтаны ҡарағаным юҡ. Әсәйем әлегә белмәһен тип ошо адресты әйткәйнем. Ах, Питер, Питер... инде юлдаһыңдыр. Һинең килгәнеңде нисек белермен икән? Көн һайын килеп ҡарауылларғамы? Өс йыл буйы хат алышып та бер килгәнеңдә күрмәй ҡалайыммы?

Р е г и н а . Зөләйха, ҡыҙым, сыҡ! Әйҙә, сәйең һыуына.

Зөләйха сыға. Питер борғоланып ятып, карауаттан ҡолап төшә. Тауышҡа барыһы ла йүгереп килеп сығалар.

З ө л ә й х а . Абау!

Т и м у р . Ҡурҡма, ҡыҙым, кисә кис килеп ингәйне. Күрше Фидерҙән. Теге ни беҙҙең кейәү тейеш кеше. Иҫерек ине. Ләйаҡыл. Шуға бында ҡалдырып торғайныҡ.

Р е г и н а . Әллә таныйһыңмы, Зөләйха. Һин ней почта ташығас, күргәнең барҙыр?

З ө л ә й х а . Юҡ, юҡ. Танымайымсы?

Р е г и н а *(Зөләйхаға яҡын килеп, ярым шыбырлап)*. Мин кейәү тейеш тип былай ғына әйттем. Ней бит. Уны Тимур ҙа таныманы. Беҙ уны ошонда тотоп торорбоҙ, һин иртәгә милиция алып килерһең, яраймы?

З ө л ә й х а . Ярай. Хушығыҙ! Ишегегеҙҙе бикләп йөрөгөҙ! *(Йүгереп сығып китә.)*

Р е г и н а . Был Зөләйха бигерәк матур, илгәҙәк ҡыҙ. Йәше үтеп бара. Кейәүгә лә сыҡмаған.

Т и м у р . Һайланалыр?

Р е г и н а . Әллә Фәнилгә хат яҙаһыңмы?

Т и м у р . Нимә тип?

Р е г и н а . Һуң, бында матур кәләш бар. Тиҙерәк ҡайт, тип.

Т и м у р . Америкта ҡыҙҙар юҡ тиһеңме?

Р е г и н а . Бәй-бәй, әллә берҙән-бер улыңды сит илдә йәшәтергә итәһеңме?

Т и м у р . Беҙҙең һымаҡ хәйерсе булмаҫ.

Регина. Нимәһе хәйерсе? Бына ауылдан китмәһәләр, гөрләшеп йәшәр инек. Һаман шулай япа-яңғыҙ ултырырбыҙмы? Исмаһам киленебеҙ янда булыр.

Тимур. Йә ярар, Фәнил үҙе нимә тиер әле? Бәлки Зөләйханың да йәрәшкән егете барҙыр?

Регина. Булһа ни, улыбыҙ кеүек ғалим түгелдер әле. Күрше ауылдарҙа йүнле ир-ат ҡалманы. Барыһы ла эшкә тип сығып китешеп бөттөләр.

Тимур. Ҡайтырҙар! Тыуған тупраҡ тарта тиҙәр. Ҡайтырҙар. Ситтә лә уларҙы ҡалас тотоп көтөп тормайҙар. Аптырағандың көнөнән, бында эшләп-эшләп тә бер тин аҡса күрмәгәс, сығышып китеп бөттөләр шул.

Регина. Ана, ҡартатайымды репрессия тип һөргөнгә Себергә ебәргәндәр. Бөтә һаулығын юғалтып ҡайтты ла, күп тормай үлеп тә ҡуйҙы, тип һөйләгәйне ҡартәсәйем. Хәҙер йәштәр үҙҙәре теләп һөргөнгә китәләр. Вәт замана! *(Ҡапыл иҫенә төшөп.)* Уй, Аллам, хәбәргә тейешеп киткәнмен. Быҙауым астыр. Һөт эсереп, инәйем.

Регина сыға. Тимур компьютер янына килә. Яңылыҡтар уҡый.

Тимур. «Тайганы үҙләштереү бик йылдам үҫешә. Ике йыл элек ойошторолған ағас эшкәртеү предприятиеһы Рәсәй буйынса килем күләме буйынса икенсе урынға сыҡҡан. Был рентабелле предприятиены Себерҙә Башҡортостандан килгән Рөстәмов Ринат атлы ир ойошторған...» беҙҙекеләр ҡайҙа ла һынатмай. Молодцы егеттәр. Башҡортостан данын төшөрмәгеҙ!

Питер ыңғырашып ҡуя. Тимур уның янына ашыға.

Питер. Һыу? *(Инглиз телендә әйтә.)*

Тимур. Ә, телең асылдымы? Исемең кем? Как зовут?

Питер. Питер.

Тимур *(һыу килтерә)*. Мә,тамағың кипкәндер.

Тимур Питерҙы карауатҡа торғоҙоп ултыртырға итә. Тегеһенең хәле юҡ. Уға һыу эсерә.

Питер. Рәхмәт.

Тимур *(Питерҙы карауаттан төшөрә. Аяғына итек кейҙерә. Яурынына фуфайка һала)*. Әйҙә, тышҡа сығайыҡ. Һауа һуларға кәрәк һиңә. *(Икәүләп сығып китәләр.)*

## Дүртенсе күренеш

Радионан тауыш: «Рәсәй хөкүмәте Марс планетаһында тереклек булыуын тикшереүҙәр өсөн космосты тикшереү үҙәгенә 500 миллион һум аҡса бүлергә ҡарар итте. Был тикшеренеүҙәр Рәсәй халҡы өсөн бик мөһим». Регина килеп инә. Карауаттағы буш урынды күреп ҡала. Тимур ҙа юҡ.

Регина. Тимур! Тимур! Һин ҡайҙа? *(Иплән кенә барып аш бүлмәһе яғын ҡарай.)* Тимур?! Ай Аллам, әллә... алып сығып киткән! Буранбайҙың фуфайкаһын кейеп ингәс тә һыным теймәгәйне. Унылы ла бер, өйҙә генә ултырмай, ҡуянға тоҙаҡ ҡуям тигән булып, тау яғына сыға ла китә. Енәйәтсе енәйәтсе инде ул. Кеше айырып тормай. Буранбай ҙа, ҡартым да әрәм генә булды. *(Йәһәт кенә килеп ишектең келәһен элә.)* Инмәй торһон әле. Беҙ улай уҡ иҫәр түгел. *(Килеп компьютер янына ултыра.)* Хәҙер, нисек әле? Берәйһенә хат яҙып ебәрергә кәрәк.

Тыштан ишек ҡағалар. Тимур тауышы: «Регина, был ни ҡыланыуың? Ас ишекте?» Регина тиҙ генә ишеккә йүгерә.

Регина. Тимур? Тимур! Һин үҙең генәме?

Тимур. Юҡ, Питер менән. Нимә булды?

Регина. Ә ул... ул беҙгә зыян итмәҫме?

Тимур. Нисек зыян итһен? Ул бит аяғында саҡ баҫып тора. Ас тиҙерәк.

Регина ишекте аса. Тимурҙы ҡосаҡлап ала.

Регина. Тимур! Һин мине ташлап китмә инде? Был ауылда бөтөнләй яңғыҙ ҡалыуҙан ҡурҡам.

Тимур. Һай, Регинаҡайым! Нишләп ташлайым ти мин һине?

Питер уларға көләмһерәп ҡарап тора.

Регина. Һаумы... һығыҙ! Мин Регина булам.

Питер. Питер. Извините, кисә иҫләмәйем... аҙаштым. Тоҙ эҙләргә сыҡҡайным...

Тимур. Регина, Питер Американан килгән геолог. Турист. Улар икәү. Дуҫы урманда ҡалған. Питер тоҙ алырға тип ауыл эҙләп сығып киткән. Аҙашып беҙгә килеп юлыҡҡан... Русса аңлай. Башҡортса юҡ.

Р е г и н а . Шулайҙыр, шулайҙыр. Һәр бер һүҙгә ышанаһың да йөрөйһөң. *(Питерға ҡарап.)* Кушать?

П и т е р . Да! Можно.

Т и м у р . Кисә һине үҙебеҙҙең Буранбай менән бутап бер булдыҡ.

Р е г и н а . Сейчас что-нибудь приготовлю. *(Тимурҙың янына килеп.)* Ҡара әле, беҙгә Буранбай күптән килгәне юҡ. Уның фуфайкаһын кейеп алған. Әллә урманда туҡмап, йә үлтереп?.. Теге Зөләйха әйткән... *(Питер яғына шикле ҡарап ала.)*

Т и м у р . Кит юҡты. Насар кешегә оҡшамаған да... Уҡыған кеше һымаҡ.

Р е г и н а . Мин былай ғына. Һағыраҡ һөйләш. Юҡ-барҙы асып һалма, тием.

Регина сыға.

Т и м у р . Питер, иди сюда. Мин һиңә улымды күрһәтәм. *(Стеналағы фото янына килтерә.)* Ул да Америкала эшләй.

П и т е р *(фотоны күреп аптырап китә)*. Смотри, оҡшаған! Ике тамсы һыу шикелле.

Т и м у р . Кемгә?

П и т е р . Америкалағы дуҫыма.

Т и м у р . Юҡ, был минең улым. Фәнил. Ғалим ул. Биолог.

П и т е р . Фейни ҙа биолог-ғалим. Ғәжәп хәлдәр. Ҡайтҡас аптыратырмын. *(Тимурҙың янына килеп иплән кенә.)* Ә был ысынлап та Марсмы?

Т и м у р . Марс. Марс. Һиңә күпме әйтергә була. Беҙ — башҡорттар. Ошонда тыуҙыҡ, ошонда йәшәйбеҙ. Ауылыбыҙҙа элек тормош гөрләп торҙо, хәҙер генә. Бындағы бар халыҡ ситкә күсеп китеп бөттө. Мәктәп тә, медпункт та ябылды. Бер беҙ ҙә, эскесе Буранбай ҡалғас, хатта магазин да ябылды. Борсолма, бына йәй етһен әле, «дедуля», «пап», «мам» тигән балаларын эйәртеп килеп тулалар. Көҙ тағы ла юҡ булалар.

П и т е р . Ҡыҙыҡ. Ә ҡайҙа күсеп киттеләр? Икенсе планетағамы?

Т и м у р . Һин шағирмы әллә? Икенсе планета тиһәң дә була инде. Кемеһелер Себергә, кемеһелер Сахалинға, кемеһелер сит илгә таралды.

П и т е р . Репрессия?

Т и м у р . Точно! Шәп әйттең әй? Ә һин ул һүҙҙе ҡайҙан беләһең?

П и т е р . Солженицын.

Т и м у р . Ә, теге «Архипелаг Гулаг»ты уҡыныңмы ни? *(Карауаттан урын әҙерләп.)* Бына ошонда ятып тор. Мин мунса тоҡандырып инәйем.

Сыға.

## Бишенсе күренеш

Питер карауатҡа ята ла тегеләр сығып киткәс, кеçәһенән кескәй фотоаппарат сығарып өйҙөң төрлө мөйөшөн фотоға төшөрә, диктофонды тыңлап ҡарай, кнопкаһына баçһа, Тимурҙың тауышы: «Марс. Марс. Һиңә күпме әйтергә була. Беҙ — башҡорттар. Ошонда тыуҙыҡ, ошонда йәшәйбеҙ. Ауылыбыҙҙа элек тормош гөрләп торҙо, хәҙер генә...» Карауатҡа барып ята. Ишек яғынан тауыш.

Б у р а н б а й . Тимуржан, һин өйҙәме? Сыҡ әле? *(Бер аҙҙан.)* Регина еңгәй, был мин. *(Килеп инә.)* Туҡ-туҡ! Һа, әллә береһе лә өйҙә юҡмы? *(Питерҙы күреп.)* Һо, ҡунаҡ бар икән дә. *(Ике ҡулын һуҙып Питерға килә башлай. Питер, ҡурҡып сигенә. Ҡулдарын өçкә күтәрә.)* Не понял. Әллә минән ҡурҡаһыңмы? Төшөр ҡулдарыңды! Смирно! *(Питер смирно баçа.)*

Б у р а н б а й . Ә һин... күктән төштөңмө әллә? *(Бармағы менән һауаға күрһәтә.)*

П и т е р . Йес, йес! Май нейм из Питер.

Б у р а н б а й . Һа, һин инглизсә лә беләһеңме ни? Молодец. Үҙең шаянһың да икән. Күктән төштөм, тигән була. Элек, бай сағында был ауылға төрлө яҡтан күп килә торғайнылар ҙа ул. Тәжрибә уртаҡлашырға тип бер йылды хатта Голландиянан да килделәр ҙә урман буйында өс көн ҡымыҙ эсеп, ял итеп ятып «гуд, гуд» тип ҡайтып киттеләр. Әллә шуларҙың күҙе тейҙе инде. Биш-алты йылдан ауылыбыҙ ҡороно ла ҡуйҙы. Хәҙер, Голландия түгел, район үҙәгенән дә бер кеме лә килеп күренмәй. Әйтерһең Марс бөтөнләй булмаған. Йә, һөйлә. Русса әҙерәк аңлайым мин. Инглиш ноу! Һөйләмә.

П и т е р . С-садитесь. Они на улице.

Б у р а н б а й . Әй, һин урыçмы ни? Фидерҙән килдеңме. Дауна шулай тимәй. Инглизсә һөйләп маташасы?

Буранбай ултыра. Кеҫәһенән сикушка сығарып өҫтәлгә ҡуя. Стакан сығара.

Питер. Ноу, ноу.

Буранбай. Русса һөйләш! Мин инглиз түгел бит. Инглизсә ана Тимурҙың Фәниле һөйләшһен. Аңламайһың һин, аңламайһың, бер үҙеңә нисек күңелһеҙ икәнен. Исмаһам, сәкештереп эсерлек бер кеше лә юҡ бит. Аптырап бында килгән булам. Регина әрләп сығара ла ебәрә. Кил! Стакан ал! *(Сервантан стакан ала.)*

Питер. Мин эсмәйем.

Буранбай. Ә кем һиңә эсерә? Үҙемә лә әҙ әле. Һин былай ғына, мине тыңлап ҡына ултыр. Понял!

Питер стакан алып килә. Ҡаршыһына ултыра. Питерға аҙыраҡ, үҙенә күберәк һала.

Буранбай. Йә, тот!

Питер тотҡан була. Эсмәй кире ултырта. Ә Буранбай берҙе уртлап ала.

Буранбай. Йә, ниңә өндәшмәйһең? Нисек йәшәргә? Гөрләп торған ауылыбыҙ юҡҡа сығып бара бит. Беҙҙән башҡа бер кем дә ҡалманы...

Питер. Нейтрон бомба?

Буранбай. Һин үҙең нейтрон бомба, белдеңме? Кем ҡылғандыр былай, белмәйем. Ҡороно, ҡороно бит.

Питер. Ә һин үҙең кем?

Буранбай. Ошо ауылдың данлыҡлы баянсыһы. Әй юҡ, данлыҡлы ғына түгел, Марстың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. Өҫтәүенә мәҙәниәт йортоноң иң яҡшы директоры.

Питер. Һеҙҙә лә мәҙәниәт йорттары бармы?

Буранбай. Әллә бер Фидерҙә генә йырлап-бейеп йәшәйҙәр тигәйнеңме?

Питер. Тағы ла ниндәй һөнәрҙәрең бар?

Буранбай. Һөнәрҙәрем күп минең. Ауыл хужалығы институтын бөткәйнем. Инженер-гидромеханик. Аңлайһыңмы, гидро... теге ней, һыу етмәгән баҫыуҙарҙы һуғарыусы. Ғөмүмән, ғүмер буйы һуғарыусы булып тик йөрөйөм мин.

Питер *(блокнотын сығарып яҙып ҡуя)*. Һуғарыусы.

Буранбай. Һуғарыусы. Баҫыу һуғарыуға уҡыным. Эше бар ҙа, аҡса түләмәгәстәре, мәҙәниәт техникумында уҡып алдым да кешеләрҙең күңелдәрен моңға һуғара башланым.

П и т е р. Хәҙер?

Б у р а н б а й. Хәҙерме? Хәҙер ҡайҙа түгел, кемде. Хәҙер эт һуғарып йөрөйөм.

П и т е р. Эт һуғара. *(Яҙып ҡуя.)*

Б у р а н б а й. Һин нимә, яҙаһың да яҙаһың. Журналисмы әллә.

П и т е р. Эйе, журналист!

Б у р а н б а й. Тәүҙән үк әйтмәй. Улайһа, кәртешкәгә лә төшөрәһеңдер? *(Көҙгө янына килеп сәстәрен матурлай, өҫ-башын ҡараштыра. Курткаһына һоҡлана.)* Әй, һин... кем әле?

П и т е р. Питер.

Б у р а н б а й. Питер, дуҫ, ҡара әле, минең матур курткам бар. Күрҙеңме? Американский. Американың үҙенән ебәрҙеләр.Кем әле, теге президентығыҙ? Бер көндө Зөләйха миңә посылка килтереп тотторҙо. Мә, Американан килгән, ти. Асып ҡараһам... куртка. Хаты ла бар ине. «Марстағы иң яҡшы баянсыға президент бүләге» тиелгән. Шәп бит, ә? Ер шарының теге яғында ла минең барлығымды беләләр, ә бында... эт тә белмәй.

П и т е р. Эт тә белмәй... *(Яҙа.)*

Б у р а н б а й. Әй, һин унда, эт тә белмәй тип, яҙып ҡуйма! Нишләп белмәһен ти.

П и т е р. Беләм. Ней... һорау яраймы?

Б у р а н б а й. Так точно! Һайра! *(Килеп уртлап ала.)*

П и т е р. Курткаң бик матур. Хатта минең дә ундай салбар кейгәнем юҡ. Америкала иң модный ул. Ней... мин кисә ялан буйлап килгәйнем. Тәбиғәт шундай матур, яландар иркен. Баҫыуҙар күп. Бындағы Ерҙәр кемдеке ул?

Б у р а н б а й. Беҙҙеке!

П и т е р. Һинекеме?

Б у р а н б а й. Минеке лә.

П и т е р *(тышҡа ымлап)*. Уларҙыҡы ламы?

Б у р а н б а й. Уларҙыҡы ла.

П и т е р. Фермерҙармы?

Б у р а н б а й. Кем? Фермерҙарҙы ла күрҙеңме?

П и т е р. Юҡ, һеҙ фермерҙармы, тием.

Б у р а н б а й *(йәне көйөп бүлмә буйлап йөрөштөрә башлай. Нимә тип әйтергә белмәй)*. Ә, һиңә нимәгә кәрәк ул? Бына күрерһең, йәй етһен әле, баҫыуҙар гөрләп сәскә атасаҡ.

П и т е р. Нимәләр сәсәһегеҙ?

Буранбай. Беҙме? Ни, теге... ә-ә-ә, эйе. Теләйһеңме, мин һиңә үҙебеҙҙең ауылдың матурлыҡтарын күрһәтеп алып ҡайтам.

Питер. Мин риза!

Питер сығып барышлай ишек төбөндә элеүле торған үҙе кейеп килгән фуфайканы эләктереп ала. Кейергә итә. Буранбай үҙенең кейемен таный.

Буранбай. Минең фуфайкам нисек бында килеп сыҡҡан? Мин уны урманда ҡалдырғанмын икән тип, әй сауҡалыҡта эҙләгән булам. Ярай, зато бынау куртканы табып алдым... Был минеке!..

Питер йәһәт кенә фуфайканы уға һуҙа.

Буранбай. Йә ярай, кей, кей, һалҡын бит. Моғайын, Америкаға алып китмәҫһең.

Икәүләп сығалар. Буранбай өҫтәлдән сикушканы ала. Стакандар ҡала.

## Алтынсы күренеш

Регина килеп инә. Ҡулында тас һәм миндек. Уларҙы ишек төбөнә ҡуя ла, кейемен сисә башлай. Карауатта юрған аҫтында кеше ятҡан һымаҡ ҡабарып тора. Питерҙы шунда ята икән тип уйлай. Шым ғына йөрөй. Көҙгө янына килеп сәстәрен, күлдәген рәтләштерә. Аҙаҡ күрше бүлмәгә сығып, матур халат кейеп сыға. Көҙгөнән үҙенә һоҡланып ала. Сәсе оҡшамай. Толомдарын һүтә лә тараҡ алып, карауат янындағы ултырғысҡа ултырып ҡәнәғәт ҡиәфәттә сәстәрен тарай башлай. Шул саҡ Тимур килеп инә. Эстән генә көй көйләгән ҡатынының сәс тарағанын күреп, аптырай төшә. Тимурҙың ҡулында бал ҡорто рамдарын таҙарта торған бысаҡ. Аҡ халатта. Хас та доктор кеүек. Уны күреп Регина пырх итеп көлөп ебәрә. Тимурға был оҡшамай.

Тимур. Нимәгә шатланаһың? Алтын таптыңмы әллә?

Регина. Һин доктор кеүекһең. Юҡ, хирург.

Тимур. Доктор инде. Доктор. Бал ҡортоноң докторы. Йәмғиәтебеҙҙе дауалаусылар ғына юҡ. Ана, бал ҡорттары бер ҙә үҙ ояһын ташлап китмәй. Бик матур итеп яңы оя ла эшләнек. Юҡ. Үҙһенмәнеләр. Элекке ояларына күсергәйнем, гөжләп киттеләр.

Регина *(карауатҡа ымлап)*. Шым! Йоҡлай бит.

Т и м у р. Йоҡлаттыңмы? *(Ҡысҡырыбыраҡ.)* Төш еткәс сәс тарайҙармы? *(Бысаҡты өҫтәлгә килтерә лә һалырға итә. Аҙаҡ кире ала.)*

Р е г и н а. Мунса-ға әҙерлә-нәм.

Т и м у р *(карауатҡа ымлап)*. Уның менәнме?

Р е г и н а. Һин... һин? Абау! Ыстағәфирулла!

Т и м у р. Нимә ағарындың? Дөрөҫөн әйткәнгәме? *(Бысаҡты алып яҡын килә башлай.)*

Р е г и н а. Иҫәрләндеңме әллә? Тимур? Ниндәй ҡорт саҡты ул һине?

Тимур бысаҡ тотоп Регинаға килә лә уны үтеп китеп карауат яғына бара. Регина артынан барып ҡулынан тотоп ала.

Т и м у р. Ә, йәлләйһеңме?

Тимур йәһәт кенә юрғанды алып иҙәнгә ырғыта. Карауат буш. Икеһе лә аптырап ҡала.

Т и м у р. Ҡасырҙыңмы ни? Ҡайҙа китте? *(Ҡыҙыу атлап өй буйлап йөрөгәндә өҫтәлдәге ике стаканды күреп ҡала.)* Әһә, байрам итеп тә өлгөргәндәр.

Р е г и н а *(стакандарҙы күреп ҡала)*. Кемдәр? *(Ҡурҡыуға ҡала.)* Тимур, өйҙән һин аҙаҡ сыҡтың бит. Үҙең мине әрләйһең, үҙең дә ишекте тыштан бикләмәгәнһең?

Т и м у р. Этемә китһенме? Табылыр, табылыр. Ауылда башҡа тере йән юҡ. Эскесе Буранбайға барһынмы? Бер тәмен белгәс...

Р е г и н а. Һал бысағыңды! Йәш ваҡытта бер ҙә улай ҡыланмай инең дә, Тимур!

Т и м у р *(бысаҡты һалып, бер аҙ тынысланып)*. Шулай шул. Был ялҡытҡыс тормоштан иҫәрләнергә лә күп ҡалмаҫ. Элек ауылда күрше-тирә булғанда рәхәт ине. Кискистәрен бер ултырып һөйләшеп эс бушата инек. Хатта анау әйбер урлап теңкәгә тейгән Хәкимйән дә һағындыра, суҡынғыр. Артынан төшөп урлаған әйберҙе тартып алып бер аҙ йоҙроҡ еҫен еҫкәтеүгә тиклем онотолмай әй. *(Килеп өҫтәл артына ултыра ла стакандың береһен тота. Регина уны күреп ҡала.)*

Р е г и н а. Ҡағылма!

Т и м у р. Ниңә?

Р е г и н а. Бармаҡ эҙҙәрен... юяһың.

Т и м у р. Регина, һин бөгөн ысынлап ғәжәпһең. Үҙемдең өйөмдә үҙемдең эстәкәнгә лә ҡағылырға ярамаймы?

Регина. Теге ир... кем әле... Битәр тиме... Зөләйха әйткән ҡасҡалаҡ енәйәтсегә оҡшаған.

Тимур. Кит бушты. Төрмәлә шулай яҡшы итеп кейендермәйҙәр ҙә.

Регина. Берәйһен талағандыр? Һаҡланғанды һаҡлармын тигәндәр.

Тимур. Йә ярай, мунса әҙерме?

Регина. Ярты сәғәттән.

Тимур. Питер ҡайтҡас бергә барырбыҙ. Моғайын, алыҫ китмәгәндер. *(Компьютер янына килә.)*

Регина. Фәнилдән хат юҡмы?

Тимур. Ҡана, ҡарайыҡ әле? Бар, бар! Бөгөн төндә яҙған. «Ҡәҙерлеләрем! Марсҡа осҡан астронавтарҙан хәбәр килеү менән ҡайтырға сығам. Ошо эш өсөн беҙгә 500 мең доллар гонорар бирергә тейештәр. 50 мең доллары миңә.» Калькуляторҙы килтер әле, Регина.

Регина калькулятор килтерә.

Тимур. 50 мең доллар беҙең аҡсаға күсергәндә күпме була?

Регина. 9999 була. Булмаған аҡсаларҙы иҫәпләргә тиһәң һине ҡуш.

Тимур. Нишләп булмаһын, ти. Бына Фәнил хат яҙған. Миңә гонорар бирергә тейештәр, тигән.

Тимур *(иҫәпләй)*. Бер миллион 500 мең һум! Бер миллионын үҙе тотонһа. 500 меңенә... Регина, бер күс умарта хаҡы күпме әле?

Регина. Башланыңмы хыялланырға. Бейәнең арҡаһын һындыраһың бит, тиергә генә ҡала инде.

Тимур. Һуң үҙең әйттең дә инде. Аҡсам булһа берәй 100 баш умарта алып бал етештереүсе фирма асып ебәрер инем, тип. Исмаһам йәштәр ҡайтһа ла эш булыр ине.

Регина. Ә Фәнилеңдән һoраныңмы? Бәлки ул шул аҡсаларға фатир һатып алып өйләнергә уйлайҙыр. Тәүҙә ҡайтарып алырға кәрәк үҙен. Питерҙы яҙма. Килгәс күрешерҙәр әле. Йә алдашалыр. Яуап яҙ.

Тимур. Нимә тип?

Регина. Аҡсаңды туҙҙырма. Умартасылыҡ эшен асырға уйлайбыҙ, тигән.

Тимур. Булды! Ә хәҙер... *(Серле йылмайып.)*

Тимур өҫтәлдәге стакандарҙы ҡулъяулыҡ аша тотоп ҡына полкаға алып ҡуя ла Регинаның ҡулына ручка тоттора. Үҙе ишек төбөнә бара ла туҡылдатып ингән кеше була.

Тимур. Һаумыһығыҙ, Регина Шәриповна! Мөмкинме?

Регина *(тамағын ҡырып)*. Мөмкин. Һеҙ кем булаһығыҙ?

Тимур. Мин — Англиянан килдем. «Вита-фито» концерны директоры урынбаҫары булам. Беҙгә һеҙ етештергән бал оҡшай. 1 миллион долларға контракт төҙөшөп булмаҫ инеме икән?

Регина. Бал үҙе генә кәрәкме, әллә прополис, перга, маточное молочко...

Тимур. Барыһы ла кәрәк. Беҙ балалар өсөн бик файҙалы витамин эшләйбеҙ...

Регина *(кнопкаға баҫҡан һымаҡ)*. Фәнил Тимурович! Инегеҙ әле, Зөләйхаға ла әйт. Бында һатып алыусылар килгән.

Тимур ҙа, Регина ла ҡыуанышып көлөшәләр.

Тимур. Шәп бит! Фәнилен аңланым ти. Ә Зөләйхаһы....

Регина. Зөләйха һуң. Беҙҙең почтальонка. Уны реклама бүлегенә алырбыҙ. Тирә-яҡтағы бөтә ауылдарҙы белә.

Тимур. Фәнилде кире ебәрмәү сараһын табырға кәрәк. Ҙур фирма асһаҡ, көслө биолог ғалимдар үҙебеҙҙән дә артмаҫ. Зөләйхаһы ла Америкаға ебәрмәҫкә ине.

Регина. Бәй-бәй, Зөләйха ла америкка китәм тинеме? Ә нишләп һиңә әйтә, миңә юҡ?

Тимур. Үҙе әйтмәҫкә ҡушҡайны. Былай ғына хат алышам, тигән була. Күңелен кем белә?

Урамдан баян тауышы ишетелә. «Иртә буран, кис тә буран...» тип Буранбай йырлай. Ул да булмай ишектән бер аҙ һуҡмыш Буранбай менән Питер күренә. Питер ҙә күңелле генә. Ул да йырлап маташа. «Буран» тигән һүҙен генә әйтә. Буранбай Тимур менән Регинаны күргәс тағы ла йәнләнеп китә. Ҡысҡырыбыраҡ йырлай. Туҡтай ҙа.

Буранбай. Бына, Питерға ауыл эргәһендәге баҫыуҙарҙы күрһәттем. Нимә сәсәһегеҙ, тигәйне. Хе-хе-хе. Дарыу үләндәре, тинем. Һеҙ мине һатып ҡуймағыҙ, йәмәғәт. Буш баҫыуҙар, сүп үләне үҫә тип әйтә алмайым да инде. Атыу Рәсәйҙә ерҙең ҡәҙерен белмәйҙәр, баҫыуҙар сәселмәй тип

гәзитенә яҙып ҡуйыр. *(Питерға йылмайып, ымлап.)* Шулаймы? Гуд, гуд!

Питер *(йылмайып, башбармағын өҫкә күрһәтеп)*. Гуд! Гуд! Яҡшы! Шәп!

Буранбай *(Тимурҙың шешкән күҙен күреп ҡала)*. Тимур ағай, күҙеңә ни булған ул? Әллә ҡунаҡ йомдорҙомо?

Тимур. Юҡ та. Кисә бал ҡорто саҡты.

Буранбай. Мәҙәк. Хас та сит планета кешеһенә оҡшап киткәнһең.

Тимур. Беҙ ни былай ҙа сит планета инде. Ҡасандыр хөкүмәтебеҙ беҙҙе ҡайғырта ине. Хәҙер тоттолар ҙа «әйҙә үҙегеҙ ни теләйһегеҙ шуны ҡыланығыҙ» тинеләр. Иҫкереп бөткән техника менән күпме генә эш ҡыраһың? Трактор һатып алыу сана алыу түгел шул.

Буранбай. Иплән һөйләш. Теге ни, бынау Питер һүҙҙәреңде гәзитенә яҙып ҡуйһа, хөкүмәткә донос тип... Алла һаҡлаһын. Алай ҙа башҡортса аңламайһың. Һинең янында һөйләшеп тә булмаҫ ине. *(Питерға ҡарап.)* Молодец, Питер!

Тимур. Ниндәй гәзит һөйләйһең, Буранбай?

Буранбай. Бәй, ул бит миңә журналисмын тине. Американан.

Регина. Америктан икәнен беләбеҙ ҙә, тик беҙгә ул геологмын тигәйне.

Тимур *(Питерға)*. Геолог?

Питер. Геолог.

Регина. Журналист?

Питер. Журналист.

Буранбай. Туҡта әле, башым бутала. Кем һин?

Питер. Геолог, биолог, журналист...

Тимур. Туҡта, туҡта, яҙып барайым. Онотолор. *(Ҡағыҙ, ручка алып өҫтәлгә ултыра.)* Йә...

Питер. Мин — Питер Мончо. Биолог, геолог, журналист, ғалим... эҙләйем.

Тимур. Нимә эҙләйһең?

Питер. Үлән, ағас, таш, урман, ҡая...

Тимур. Бәй, Америкала улары юҡмы ни?

Буранбай. Ҡуйығыҙ әле буш менән булмағыҙ. Бына беҙ ҙә ғүмер буйы нимәләр эҙләйбеҙ ҙә... яҡшы ҡатын, матур өй, аҡсалы эш, иркен тормош эҙләйбеҙ. Ул да шулайҙыр. *(Баянда уйнай.)* «Ҡайҙа һин, ҡайҙа һин, ҡайҙа һин, йәшлегем...» лутсы, ошолай йырлашып, табын ҡорайыҡ та яйлап аңлашырбыҙ, шулаймы Питер?

П и т е р. Шулай, шулай. Хорошо!

Питер көҙгөгә ҡарай. Һаҡал-мыйығын ҡапшай.

Т и м у р. Ә, бына кисә улымдан посылка килде. Ҡырынғыс ебәргән. Мә, әҙерәк рәтләнеп ал. Мунса алдынан. *(Питер ҡырынғыстағы яҙыуҙы күреп ҡала.)*

П и т е р *(уҡығас)*. Был бит… минең… ҡырынғыс.

Т и м у р. Юҡ, юҡ. Һинеке түгел. Миңә бүләк итеп ебәргән. Улым!

П и т е р. Ҡайҙан?

Т и м у р. Американан.

П и т е р. Бына ҡара. «Тыуған көнөң менән ҡотлайым. Питер» Мин был ҡырынғысты былтыр Фейнигә бүләк иткәйнем!

Т и м у р. Бер ниндәй ҙә Фейни, Мейни түгел. Минең улымдың матур исеме бар. Фәнил. Фәнде яратыусы, ғалим тигәнде аңлата. *(Килеп бритваны тартып ала.)* Ҡайҙа? *(Уҡый.)* Ысынлап та бар шул. Тик инглизсә яҙылған.

П и т е р. «Питер» тигәнен күрәһеңме?

Т и м у р. Шулай шул.

П и т е р. Туҡта. Мин Фейни… менән бергә эшләгәйнем. Ул Уралданмын тигәйне шул.

Т и м у р *(Питерҙы фотоһүрәттәр янына килтерә)*. Улмы?

П и т е р. Шул, шул. Тап үҙе. Әйттем бит!

Т и м у р. Нимәне?

П и т е р. Фотолағы кеше миңә таныш тип. Тимәк һеҙ Фениэлдең атаһы? Вот здорово!

Регина сыға.

Р е г и н а. Һеҙ нимә шатланаһығыҙ? Әллә алтын таптығыҙмы?

Т и м у р. Таптыҡ шул. Ҡара! Фәнил ебәргән ҡырынғыс Питерҙыҡы булып сыҡты.

Р е г и н а. Нимә?

Т и м у р *(күрһәтә)*. Ҡара, яҙыуы бар. Питер Фәнилебеҙҙең танышы. Дуҫы. Элек бергә эшләгәндәр.

Р е г и н а. Бар, бар. Бына мөғжизә. Ә мин?

Т и м у р. Әй улым, улым. Ҡайт бында! Бүләккә яңы ҡырынғыс алырға ла аҡсаң булмағас…

Регина тас менән миндекте килтерә. Буранбай миндекте күреп.

Буранбай *(Питерға ҡарап, миндеккә күрһәтеп)*. Лекарство. Дарыу.

Питер. Ә, теге баҫыуҙа үҫтергәнме?

Буранбай. Эйе, эйе. Бында мәтрүшкәһе лә, йүкәһе лә бар. Шәп дауа ул.

Питер. Нимәгә килешә?

Тимур *(биленә күрһәтеп)*. Бында. Алдына ла ярап ҡала. *(Миндек менән Питерҙың иңенә һуҡҡылап ала. Көлөшәләр.)*

Питер *(еҫкәп ҡарай. Һушы китә)*. Нисек ҡулланырға?

Тимур. Киттек мунсаға. Хәҙер күрһәтәм.

### Етенсе күренеш

Буранбай бер үҙе. Баянын ҡуя ла салбары кеҫәләрен ҡапшай. Бер пачка аҡса сығара.

Буранбай. Быларын араҡыға тотонмайым. Эскесе тигәс тә. Бына үҙемә йылҡылдап торған туфлиҙар, ҡап-ҡара костюм, зәңгәр галстук алып ебәрһәмме? Эсмәйәсәкмен. Бына һин миңә кейәүгә сыҡһаң, тамсы ла эсмәйәсәкмен. Ысын. *(Түш кеҫәһенән фото сығара. Ҡарай.)* Һинең турала һөйләгәйнем, Питер кейем ал, туй яһа, тип 1 мең доллар аҡса бирҙе. Беҙҙеңсә 30 мең тирәһе. Үҙеңә күрһәтһәм был аҡсаларҙы, моғайын, әллә кем булып йөрөмәҫ инең. Мин бөткән кешеме ни? Бар ағзам да теүәл. Һөнәрем дә бар. Эшләй башлағас Питерға бурысымды ла ҡайтарырмын. *(Аҡсаларҙы кире кеҫәһенә һала. Регина инә.)*

Регина. Һин һаман бындамы әле?

Буранбай. Ярай, Регина апай, һау булып тороғоҙ. Асыуланмағыҙ инде. Ауылда башҡа бер кем дә булмағас, һеҙгә килмәй, кемгә киләйем.

Регина. Бер кем дә тип ауыҙ асып ултырғансы кәләш ал. Икәү булырһығыҙ.

Буранбай. Мин дә шулай уйлап ултырам әле.

Регина *(йәнләнеп)*. Әллә бармы?

Буранбай. Барлыҡҡа бар ҙа ул...

Регина. Ултырып тор әле. Ашыҡма! Йә, һөйлә?

Буранбай. Әле генә ҡыуа ине... ней бит әле, тамағым кибеп тора.

Р е г и н а. Ай, суҡынғыр, һин шул булырһың. *(Күршебүлмәгә сығып китә. Бер банка ҡорт балы килтереп сығара.)*

Б у р а н б а й. Эй яратам да инде ошо Регина еңгәйҙе. *(Өҫтәлгә яҡшылап ултырып ала. Регина стакандар килтерә. Ҡаршыһына ултыра)*.

Р е г и н а. Ниндәй ауылдан?

Б у р а н б а й. Һеҙ уны беләһегеҙ. Бына ошолай сағынан *(ҡулы менән күрһәтә)* беләм мин уны. Бантиклы башын ҡырын һалып сәхнәнән «һин дә бик матур, Өфө лә матур» тип йырлай торғайны. Шунан бирле оҡшатып йөрөйөм. Тик үҙенә әйтергә ҡурҡам.

Р е г и н а. Нимәне әйтергә?

Б у р а н б а й. Һуң, кәләш итеп алғым килә, тип.

Р е г и н а. Ата-әсәһе бармы?

Б у р а н б а й. Бар, әсәһе түшәктә ята. Әлегә уны ҡарай. Уның да йорто бар, минеке лә... шәпме?

Р е г и н а. Исеме кем, бәлки беләмдер?

Б у р а н б а й. Әй, Регина апай, әй, еңгәй *(ҡойған балды уртлап)* иләнмәгән, һуғылмаған тигән шикелле, әле әйтергә оялам. Бер тапҡыр ғына булһа ла ҡылын тартып ҡарайым да шунан әйтермен, яраймы?

Р е г и н а *(үпкәләп)*. Ә мин һине һөйләшеп бөткән тип торам тағы.

Б у р а н б а й. Юҡ, юҡ, Регина еңгәй, быйыл точно кәләш алам. Бына икмәк өҫтө. Ысын!

Р е г и н а. Кәләш алыр өсөн аҡсаһы ла кәрәк бит әле?

Б у р а н б а й *(Регинаға яҡыныраҡ килеп)*. Ә һин бер кемгә лә әйтмәйһеңме?

Р е г и н а. Алтын ятҡылығы таптыңмы әллә?

Б у р а н б а й. Һүҙ бир. Бына икмәкте тотоп!

Р е г и н а *(икмәкте тотоп)*. Ант, бер кемгә лә.

Б у р а н б а й *(кеҫәһенән аҡсаларҙы сығара)*. Бына!

Р е г и н а *(ҡурҡып китә)*. Абау! К-күпме?

Б у р а н б а й. 30 меңдәй. Кәләш алырға етә.

Р е г и н а. Ҡайҙан таптың? Урмандамы? Юлдамы? Былтыр мин шулай көтөүгә һыйыр ҡыуғанда 500 һумлыҡ тапҡайным.

Б у р а н б а й. Эйе, көтөп тор. Хәҙер беҙҙең урманға ошолай пачкалап аҡса ҡалдырып китәләр ти. Белгең килһә, миңә Питер бүләк итте уларҙы? Кәләш алырға аҡсам юҡ тигәйнем.

Р е г и н а. Питер? Ул шулай баймы икән ни? Ҡайҙан алдым ти?

Б у р а н б а й. Бәй, мин следовательдер шул унан ҡайҙан алғанын һорап торорға?

Р е г и н а. Ҡара әле, иртәгә... әй юҡ, был аҡсаларҙы үҙеңдә тот. Юғалтма. Иртәгә төшкәрәк беҙгә тағы килерһең, яраймы. Ҡурҡма, мин бер кемгә лә әйтмәм.

Б у р а н б а й. Иртәгә лә бал эсерәһеңме? Бигерәк шәп һинең балың. Башты әйләндереп ебәрә.

Р е г и н а. Таҙа балдан ғына эшләнгән бит ул. Эсерәм, эсермәй ни.

Б у р а н б а й. Регина еңгәй, һин ҡатын кеше, бәлки миңә ярҙам итерһең, ә?

Р е г и н а. Н-нисек?

Б у р а н б а й. Теге ни, кәләш алғанда тием. Әллә һин әйтеп ҡарайһыңмы. Мин йә эште боҙоп ҡуйырмын. Тәүҙә ауылға килтерәйем дә шунан һин...

Р е г и н а. Эйе шул. Борон-борондан еңгәләр димсе булған. Ауылға килгәс тә миңә әйтерһең. Һөйләшермен.

Б у р а н б а й. Мин... кәзәмде ашатмағанмын да. Көнө буйы бында йөрөнөм. Ҡайтайым.

Буранбай сыға. Регина тиҙ генә өҫтәлде йыйыштыра.

Р е г и н а *(үҙ алдына)*. Ҡайҙан килгән был әмериканис? Ауырымаған башҡа тимер таяҡ! Зөләйха белеп әйткән, тәүҙән үк ышанырға кәрәкмәгән. Ана бит, берәйһен үлтереп аҡсаһын талаған да ҡайһылай шәп булып эскеселәргә таратып йөрөй. Шәп иттем әле. Иртәгә Зөләйха милиционерҙарҙы килтерһә, тотабыҙ ҡараҡты.

Сыға.

**Һигеҙенсе күренеш**

Питер менән Тимур мунсанан ҡайтып инәләр. Ҡыҙмаса булғандар. Питер «Иртә буран» йырын йырлап маташа. «Буран, буран» тигән һүҙен генә әйтә. Тимур көлә. Ҡулында баяғы банка. Эсеп бөтмәгәндәр. Шуға алып ҡайтҡан. Тимур өҫтәл өҫтөнә банканы ултырта. Тимур сәй килтерә, бал ултырта. Икәүләп ултырып сәй эсәләр. Берҙе эсегән бал да эсеп ебәрәләр.

П и т е р. Тәмле!

Т и м у р . Башҡорт балы бит ул. Бөрйән тоҡомло бал ҡортонан.

П и т е р . Беҙҙә ундай тәмле бал юҡ.

Т и м у р . Белгең килһә, ана шул һеҙҙең Америктан килеп ошо бал ҡортон һатып ала торғайнылар. Һалҡын ҡышҡа сыҙамлы, егәрле, ауырыуҙарға бирешмәҫ бер бал ҡорто ул.

П и т е р . Беҙҙә үрсер микән ул?

Т и м у р . Юҡ, юҡтыр. Һеҙҙә моғайын беҙҙәге кеүек сәскәләр юҡ?

П и т е р . Әле бындағы йылға, күл һыуҙарын ҡарап, составын тикшереп бөтмәнем. Һауағыҙ саф. Ер шарында бер ерҙә лә бындай таҙа, зыянлы ҡушылмалары булмаған саф һауа юҡтыр ул. Ә баҫыуҙағы тупрағығыҙҙы тикшерҙем. Микроэлементтар, тоҙҙар, хатта көмөш бар. Беләһеңме, бындай тупраҡта үҫкән ашлыҡ — һаулыҡ өсөн бик файҙалы. Тик...

Т и м у р . Нимә тик?

П и т е р . Был баҫыуҙарҙы алып китеп булмай. Һеҙгә бында иген, арыш, кукуруза кеүек ашлыҡтар сәсергә ине. Дарыу үләндәре лә һәйбәт инде ул.

Т и м у р . Элек ни, барыһы ла үҫте бында. Арышы ла, һолоһо ла тигәндәй. Хәҙер техника юҡ.

П и т е р *(тәҙрә янына килеп)*. Кисә мине Буранбай анау тау башына алып менде. Тәбиғәт — иҫ китмәле! Һеҙҙә туристик маршрут асырға була. Беҙҙә, Америкала, бындай матур урынды күрһәләр, әллә ҡасан ҙур ҡунаҡһарайҙар асып, туристарҙы йәлеп итерҙәр ине.

Т и м у р . Һин ҡайһылай шәп кешеһең әле ул. Мин дә тап һинең кеүек уйлап йөрөй инем. Әллә беҙгә ярҙам итеп ебәрәһеңме?

П и т е р . Нисек?

Т и м у р . Туристик эште асырға, тием. Һеҙҙә байҙар аҡсаһын ҡайҙа ҡуйырға белмәй. Әйҙә беҙгә ял итергә килһендәр. Бында тормош гөрләп китер, ә?

П и т е р . Уйлашырға кәрәк.

Т и м у р . Былай итәйек. Һин үҙ ереңә ҡайт та туристар бар тип хәбәр ебәр. Беҙ бында ҡаршыларбыҙ уларҙы.

П и т е р . Әйҙә шуның өсөн! *(Алған саҡта бал өҫтәлгә сайпылып түгелеп китә.)*

Тимур өҫтәлгә йәйелгән америка гәзитен алып, һыуын иҙәнгә һелкә.

Питер. Туҡта, туҡта, был ниндәй гәзит?

Тимур. Кисә посылка эсендә килгәйне.

Питер. Ҡарарға яраймы?

Тимур. Уҡы, уҡы. Мин барыбер белмәйем.

Питер *(уҡый)*. «...яр буйындағы ауылды һыу баҫҡан. Унда йәшәүсе Питер Мончо менән Стив Браун ғәйеп булғандар, тип белдергән Питерҙың ҡатыны. Улар бер көн алда диңгеҙгә балыҡҡа сыҡҡан булғандар. Эҙләнеүҙәр дауам итә. Һыу уларҙы күмеп киткән булырға тейеш...» *(Тауыш сәхнә артынан сыға. Ул үҙ телендә уҡый бит.)*

Тимур. Ниңә йөҙөң ағарынып китте. Насар хәбәр бармы әллә?

Питер. Юҡ, юҡ... миңә... беҙгә ҡайтырға кәрәк. Тиҙ!!

Тимур. Әле генә ер-һыуҙы өйрәнәм. Булам әле тигәйнең бит?

Питер. Стив... табырға... тауҙағы ҡыуышта.

Тимур. Ҡыуышта? Дуҫыңмы?

Питер. Эйе. Һеҙҙә компас юҡмы?

Тимур. Ниндәй компас? Теге үҙе ҡыҙып янған һыйыр тиҙәгеме ни?

Питер. Юҡ та. Ориентировка. Табырға. Мин аҙаштым бит. Компасым ҡаянан төшөп юғалды.

Тимур. Туҡта! Дуҫың ҡалған ҡыуыш янында йылға бар инеме?

Питер. Бар ине.

Тимур. Ә берәй ел тирмәне һымаҡ нәмә юҡ инеме?

Питер. Тирмән? Ә... Санчо Пончо. Тирмән бар ине. Әллә беләһегеҙме?

Тимур *(тәҙрәгә яҡын килтереп)*. Ана-ау тауҙы күрәһеңме?

Питер. Күрәм!

Тимур. Бына шунда инде һин һөйләгән ҡыуыш.

Питер. Алыҫмы?

Тимур. Ике, өс саҡрым бар. Бөгөн атты табып алып ҡайтам да иртәгә иртәнсәк бергәләп барырбыҙ. Бөгөн хәл йый!

Питерға урын күрһәтә, үҙе икенсе бүлмәгә сыға. Питер бер үҙе. Карауатҡа ята. Ут һүнә.

Күренеш: аҡ кейемдә ике ҡатын һәндерә алып сыға. Питер ҙа аҡ кейемдә. Уны иплэп һәндерәгә һалалар. Диңгеҙ шаулаған тауыш ишетелә. Алыҫта зәңгәр ер күренә. Питер: «Был Марсмы?» Ҡатын тауышы: «Марс, Марс! Һин ошонда ҡал. Ҡайтма! Һин беҙҙең өсөн үлгәнһең. Беҙгә аҡса кәрәк... кәрәк... кәрәк...» ҡатындар көлөшә-көлөшә сығалар. Питер: «Эльза! Эльза!..» — тип саҡыра.

Ут яҡтыра. Иртә таң. Зөләйха карауат янына килеп Питерҙы уята.

З ө л ә й х а . Питер! Питер? Буранбай Питер тигәйне. Был мин — Зөләйха бит.

Питер уянып китә. Караuat янында матур итеп кейенгән Зөләйха тора. Йөҙө шат.

П и т е р *(тороп ултыра)*. Был төшмө, өнөммө? *(Күҙ-ҙәрен ышҡылай.)* Ә Марс?

З ө л ә й х а . Марс? Марстаһың да инде.

П и т е р . Ә Эльза... ҡайҙа?

З ө л ә й х а *(тирә-яғына ҡарап)*. Эльза? Бында бер кем дә күренмәй. Кем ул?

П и т е р . Эльзамы? Калифорнияла.

З ө л ә й х а . Һин Марста. Был Америка түгел. Эльза юҡ. Питер уян! Был мин — Зөләйха!

Питер. Эйе. Аңланым. Эльза юҡ. Страховка аҡсаһын алырға теләй. Эльза!

З ө л ә й х а . Һин мине иҫләйһеңме?

П и т е р . Юҡ, белмәйем.

З ө л ә й х а *(күңелһеҙ)*. Ә минең һуңғы хатымды иҫләйһеңме?

П и т е р . Хат? Ниндәй хат?

З ө л ә й х а . Һин... һин Питер түгелме?

П и т е р . Питер.

З ө л ә й х а . Интернет аша бер ҡыҙ менән хат алыштыңмы?

П и т е р . Ә һин уны ҡайҙан беләһең?

З ө л ә й х а . Һуң шул ҡыҙ мин инем бит!

П и т е р . Эзольда?

З ө л ә й х а . Юҡ, мин — Зөләйха. Оноттоңдамы ни?

П и т е р . Ул бит Германиянан ине. Ә был Марс. Урал. Русия.

З ө л ә й х а . Һин... һин өс йыл буйы. Һиңә ышанып ниндәй матур хаттар яҙҙым.

П и т е р . Зулейха, ғәфү ит. Ә ул Питер ҡайҙан ине?

З ө л ә й х а . Американан.

П и т е р . Америка ҙур ил.

З ө л ә й х а . Мичиган ҡалаһынан.

П и т е р . Бына күрҙеңме? Мин — Калифорниянан.

З ө л ә й х а *(күңелһеҙ)*. Йәл. Уның да исеме Питер ине. Килеүен көтә инем.

П и т е р . Ә һин миңә оҡшайһың. Һин бик сибәр ҡыҙ.

З ө л ә й х а . Шулаймы? Рәхмәт.

Питер. Бынан нисек... берәй поезд, самолетҡа ултырырға юлды өйрәтһәң... Питерға сәләмеңде еткерермен.

Зөләйха. Өйрәтермен. Тик сәләм кәрәкмәй. Әгәр яратһа, үҙе килер. Килмәһә, табырмын.

Питер. Кемде?

Зөләйха. Ул бит үҙем киләм тип хат яҙғайны. Килмәһә үҙем барам Америкаға. Мине лә алаһыңмы?

Питер. Китмә унда.

Зөләйха. Нимәгә? Унда насармы ни?

Питер. Насар түгел. Бында һеҙҙә иркенерәк. Халыҡ та матур күңелле. Бер-береһенә ярҙам итергә әҙер торалар. Ер иркен. Әгәр тегендә кәләшем булмаһа, мин бында йәшәргә лә ҡалыр инем.

Зөләйха. Йәшәргә? Беҙҙәме? *(Көлә.)* Ошо ташландыҡ утрауҙамы? Нисек йәшәмәк булаһың?

Питер. Көлмә, Зөләйха, көлмә. Һеҙ бит алтын өҫтөндә ултыраһығыҙ. Берегеҙ ҙә шуны аңламай. Йәки аңламағанға һалыша. Беҙҙә булһамы шундай матур тәбиғәтле урындар?! Беҙҙә күптән туристик маршруттар асырҙар ине. Египетҡа йөрөгән кеүек туристар килер ине.

Зөләйха. Ә һин ул тәбиғәтте лә күреп өлгөрҙөңмө ни?

Питер. Буранбай күрһәтте. Шәп!.. Ҡара әле. Беҙҙең башта бер идея тыуҙы. Әйҙә буласаҡ туристик фирмабыҙҙың директоры бул.

Зөләйха. Ысынмы? Мин дә үҙебеҙҙең тәбиғәткә ғашиҡ. Ә аҡсаны ҡайҙан алырбыҙ?

Питер. Уныһы минең эш. Ризамы?

Зөләйха. Риза! *(Шатланып көлә.)* Ә маршруттар буйлап кем алып йөрөр?

Питер. Уныһынмы? Ана Буранбай килештерә. Әйҙә уға ҡушайыҡ.

Зөләйха. Эйе шул. Етмәһә шәп баянсы ла ул. Кистәрен туристарҙың күңелен йыр-бейеү менән асыр.

Питер. Булды. Мин ҡайтам да ҡағыҙҙар әҙерләй башлайым.

Улар тәҙрә янына киләләр.

Зөләйха. Ҡара, күрәһеңме, анау ҡаялы тау башында төп бинаны урынлаштырайыҡ.

Питер. Ә тегендәрәк, йылғаға яҡыныраҡ, туҡтап ял итеү базаһы төҙөрбөҙ...

Шул саҡ тау башында төтөн күреп ҡалалар.

Зөләйха. Питер, ҡара әле. Анау тау башында нимәлер яна буғай.

Питер. Эйе шул. Унда берәй ауыл бармы?

Зөләйха. Юҡ! Берәй бесән кәбәне генә булмаһа. Йәһәтерәк Тимур ағайға әйтергә кәрәк. Пожар! Тимур ағай, тиҙ генә килегеҙ!

Тимур умарта дымарын тотоп йәһәтләп килеп инә.
Төтөнө сығып тора.

Тимур. Күрәм, күрәм... Ҡайҙа Буранбай? Мин хәҙер. Атымды эйәрләйем дә... Буранбай күренһә әйтегеҙ. Артымдан килеп етһен!

Зөләйха. Ярай, Тимур ағай!

Тимур *(Питерға)*. Ә һин... һин бында көтөп тор. Аңланыңмы?

Питер. Ярай. Көтәм!

Тимур йәһәтләп сығып китә.

Зөләйха *(тағы ла тәҙрә янына килеп)*. Тау башында нимә яныр икән? Ҡасандыр бик борон заманда унда һыу тирмәне булған ти торғайны әсәйем. Урман ғына янмаһа ярар ине.

Зөләйха. Питер! Мин Буранбайҙы эҙләп табып шунда ебәрәйем әле. Тимур ағай бер үҙе бит.

Питер. Бар, бар! Мин бында ғына көтөрмөн.

Питер бер үҙе ҡала. Килеп компьютерҙы тоҡандыра.

Питер *(хат яҙа)*. «Фэйни! Был мин — Питер. Мин һинең атайың менән әсәйең янында. Буранбай ҙа бар. Марстамын. Эльзаны табып әйт әле. Ошо адрес менән миңә хат яҙһын. Бөгөн үк!»

Эльза, Эльза! Шулай тиҙ генә мине ерләргә уйланыңмы? Моғайын мине тиҙерәк ҡайтарыр өсөн шаяртып ҡына прессаға шулай хәбәр иткәнһеңдер. Бик һағындырҙың. Һиңә үпкәләремдең эҙе лә ҡалманы. Тик ҡайтып ҡына етәйем әле. Устарымда ғына йөрөтөрмөн үҙеңде. Ысын! Һине нисек яратыуымды белер, тойор өсөн миңә шулай алыҫҡа сығып китергә кәрәк булғандыр. Ҡайтырға, ҡайтырға кәрәк!

Ут һүнә.

## Икенсе бүлек

### Беренсе күренеш

Шул уҡ йорт эсе. Питер, уның артынан һайғау тотҡан Буранбай килеп сыға.

Буранбай. Үлтерәм мин һеҙҙең икегеҙҙе лә.

Питер өҫтәл аҫтына йәшенә.

Питер. Мы не хотели. Буранбай, теләмәгәйнек. Стив әйтте бит, әйт, күпме кәрәк?

Буранбай. Күпме кәрәкме? Минең ғүмерем буйына алыҫ тауға берәмләп ташыған бүрәнәләрҙең хаҡы бар тип уйлайһыңмы? Миңә, бер үҙемә еңел булған тиһеңме?

Питер. Әйт, әйт, нимә кәрәк һиңә?

Буранбай. Тау башындағы ел тирмәне кәрәк. Бер быуат элек минең ата-бабаларым унда һыу тирмәне эшләгән. Шул тирмән көсө менән ашлыҡты онға әйләндергәндәр. Икмәкте беләһеңме, чисбургерҙан башҡа нәмә ашамаған америка ҡомағы! Икмәк. Арыш икмәге! Шуны ашап ҡына тере ҡалғандар. Сыҡ унан!

Питер. Һуҡмайһыңмы?

Буранбай. Юҡ. Үҙең бит ҡыҙҙырҙың. Нимәгә кәрәк ул тирмән тип.

Питер. Мин... уны Дисней Ленд һымаҡ. Балаларҙы әүрәтеү өсөн тип уйлағайным. Унда водопад... шарлауыҡ юҡ бит?

Буранбай. Нимәгә һиңә шарлауыҡ?

Питер. Һин һыу тирмәне тинең.

Буранбай. Элек шулай булған. Хәҙер, йылға һайыҡҡас, мин шул урында ел тирмәне эшләгәйнем. Аңлайһыңмы? *(Ҡулын вертолет һымаҡ өйөрөлтөп күрһәтә.)* Ел тирмәне.

Питер. Нимәгә?

Буранбай *(һайғауын һелтәй)*. Бына һинең кеүек аңра баштарға.

Питер. Ғәфү ит инде, Буранбай. Мин түгел бит, ана, Стив усағын һүндереп бөтмәй йоҡлап киткән.

Буранбай. Беҙ барып өлгөрмәгәндә, Стив үҙе лә янып китә ине. Аяғын һындырған бит. Йүгергәндә соҡорға эләккән.

Питер. Ул...килмәнеме ни?

Буранбай. Юҡ, ана Тимур ағай больницаға алып китте. Бына рюкзагығыҙ.

Питер. Аяғы төҙәлмәйенсә тағы ҡайта алмайбыҙмы?

Питер рюкзакты ҡарай. Унының бер мөйөшө янған.

Питер. Паспорт. Минең паспортым... янған. Бер мөйөшө генә ҡалған.

Башын услап ултыра төшә.

Буранбай. Паспорт ул ҡағыҙ киҫәге. Яңынан эшләтеп була, ә бына һин ун биш йыл буйы йөрәк йылыһын биреп эшләгән йән киҫәгең янһа нимә эшләрһең?

Сығып китә.

## Икенсе күренеш

Питер бер үҙе ултырып ҡала. Зөләйха инә.

Зөләйха. Бына... ниндәй тырыш егет булған бит Буранбай. Бер үҙе ниндәй алыҫҡа матур итеп ел тирмәне эшләгән. Шуға ла ауылдан китмәгән инде.

Питер. Әйттем бит. Бындай ожмах һарайы кеүек матур тәбиғәтле ерҙә бер ниндәй ҙә завод, фабрикалар кәрәкмәй. Бары тик ҡәҙерләп кенә һаҡлап, туристик маршруттар асырға кәрәк.

Зөләйха. Буранбай шуның өсөн яһағандыр ҙа был тирмәнде. Ул шундай бейектә бит ул. Унан бөтә тирә-як ус төбөндәгеләй күренә.

Зөләйха Питерҙың башынан һыйпай. Шул саҡ ишектә Тимур күренә.

Тимур. Ҡамасауламаныммы?

Зөләйха. Юҡ, юҡ, Тимур ағай. Беҙ былай ғына. Был икенсе Питер икән.

Тимур. Ә-ә-ә. Шулаймы ни? Беҙҙең Фәнил дә ҡайтып киләлер?

Зөләйха. Ҡасан?

Тимур. Әйҙә ҡарайыҡ. Бәлки юлға сыҡҡандыр ҙа.

Компьтерҙы ҡабыҙа. Почта ҡарай.

Тимур. Бер хат бар. Тик Фәнилдән түгел. Зөләйха, ҡара әле? Һиңәлер?

Зөләйха. Эйе, бар. Тик минең танышым түгел дә. Ниндәйҙер Эльзаның хаты яңылыш килеп эләккән.

Питер. Эльза? Мөмкинме? *(Ҡарай.)*

Зөләйха. Был хат инглиз телендә яҙылған. Моғайын уғалыр.

Тимур. Кәләшеңме әллә?

Зөләйха. Эйе.

Тимур. Һинән һорамайым да.

Питер *(бирелеп китеп хат уҡый. Йөҙө яҡтыра бара.)* Яҡшы. Мин уйлағанса икән. Кәләшем имен-һау. Тик...

Тимур. Нимә?

Питер. Яуап хаты яҙырға ине.

Тимур. Яҙ һуң. Тәүгеһен яҙғанда рөхсәт һорамағанһың бит!

Питер. Рәхмәт. *(Яҙа.)* Булды! Ебәрҙем. Документтарымдың копияһын ебәр, тинем. Янғын тип аңлатып торманым. Юғалттым ғына тинем. Мин бит документһыҙ ҡайта алмайым. Өҫтәүенә Стив больницала.

Тимур. Ә Буранбай ҡайҙа?

Питер. Белмәйем. Сығып китте.

Тимур. Ҡыҙыу нәмә берәй эш боҙоп ташламаһын. Ҡарап киләйем әле.

Сыға.

Зөләйха. Ни эшләргә уйлайһың?

Питер. Иң тәүҙә Буранбайға ел тирмәнен яңынан эшләшергә кәрәк. Унан Стивтың хәлен белешергә.

Зөләйха. Документ юлларға.

Питер. Эйе. Мөмкин булһа. Һин иртәгә районда белешеп кил әле? Мә, ошо ҡалған киҫәкте ал да.

Зөләйха. Ә һин?

Питер. Мине беренсе милиционер шунда уҡ тотоп бикләйәсәк. Мин бит башҡортҡа оҡшамағанмын *(көлә)*.

Зөләйха. Ярай.

Питер. Рәхмәт. Ә мин бында Буранбай менән...

Зөләйха. Мин дә оҙаҡлап киттем. Һине күрәм тип кенә килгәйнем. Һине теге хат алышҡан Питер тигәйнем дә.Ул да оҙаҡламай килермен тип хат яҙғайны.

Питер. Көтәһеңме?

Зөләйха. Әллә, эйе лә, юҡ та. Ғүмереңдә лә бер күрмәгән кешене көтөп буламы?

Питер. Ниңә кейәүгә сыҡмайһың, Зөләйха? Һин бик матур ҡыҙ. Холҡоң да һәйбәт.

Зөләйха. Әллә, элегерәк Фәнилде оҡшатып йөрөгәйнем. Ул ана америкка китте. Дуҫтар ғына булып ҡалайыҡ, тине.

Питер. Ә һин беләһеңме?.. Һине бер егет өҙөлөп ярата. Кәләш итеп алырға уйлай.

Зөләйха. Ә һин... ҡайҙан беләһең?

Питер. Үҙе әйтте.

Зөләйха. Кем ул?

Питер. Әйтмәйем. Үҙе әйтер. Һәйбәт егет. Күңеле матур. Ҡулынан бар эш тә килә. Уға кейәүгә сыҡһаң үкенмәҫһең. Донъя көткәндә ана шундай егәрләләр янында еңел була.

Зөләйха. Аҙыраҡ һиҙенәм, тик...

Питер *(тәҙрәгә ҡарап)*. Ана, Буранбай килә.

Буранбай инә.

Буранбай. Питер, ана һине Тимур ағай саҡыра. Бал ҡорто ҡарашырға, ти.

## Өсөнсө күренеш

Питер сыға.

Зөләйха. Буранбай, һин... һинең оҫта ҡуллы икәнеңде белмәгәйнем. Хәҙер нимәгә ошо ауылға йәбешеп ятыуыңды аңланым.

Буранбай. Ел тирмәне өсөн генә тип уйланыңмы? Уныһы ла бар. Тик мин... бер ҡыҙға ғашиҡ булғайным. Шуға... унан алыҫ китә алмайым. Бер нисек тә.

Зөләйха. Кем икән ул? Марстамы?

Буранбай. Юҡ, Марста ла, Юпитерҙа ла түгел, минең күңелемдәге планетала йәшәй ул.

Зөләйха. Ой, ҡыҙыҡ!

Буранбай. Ысын! Бына күрерһең. Тиҙҙән кәләш итеп тә алырға уйлайым.

Зөләйха. Кемде?

Буранбай. С-сер. Беләһеңме, Зөләйха, бына мин ул ҡыҙҙы кәләш итеп алһам, билләһи, түрҙә генә ултыртып ҡуйыр инем. Ҡулымдан бөтә эш тә килә. Малын табыр инем. Нисәнсе йыл инде уға йөрәк серемде аса алмай интегәм. Хатта туйға тип аҡса ла әҙерләнем.

Зөләйха. Ысынмы?

Буранбай *(кеҫәһенән аҡса сығара)*. Бына 30 мең. Аҙаҡ тағы табырмын. Эшләй башлағас.

Зөләйха. Ә кем ул ҡыҙ? Бәлки мин дә беләмдер?

Буранбай. Мин уға бына ошондай сағында уҡ ғашиҡ булғайным. Бер концертта матур итеп йырлағайны. Нисәмә йыл йөрәк серемде аса алмай интегәм *(кеҫәһенән фото сығара. Зөләйхаға бирә)*. Бына!

Зөләйха. Ҡарасы? Ул концертты онотоп та бөткәнмен инде *(хәтерләп)*. Эйе, иҫләнем. Теге ни «Өфө ҡалаһы ни өсөн матур...» тип йырлағайным. Миңә бир был фотоны. Иҫтәлек бит.

Буранбай. Ал! Йөрәгемдә ошондай фотолар күп ята ул. Барыһында ла — һин.

Зөләйха. Белгең килһә, ул саҡтарҙа мин дә һиңә аҙыраҡ ғашиҡ булып йөрөй торғайным. Йәшереп кенә. Беҙҙең кластан тағы ла биш ҡыҙ һиңә ғашиҡ инеләр. Шаршау ярығынан һинең баян уйнағаныңды оҙаҡ итеп ҡарап тора торғайныҡ.

Буранбай. Аҙаҡ оҡшатмай башланыңмы?

Зөләйха. Үҙең бит ... йыш эсә башланың. Мине эшкә һанамай башҡа ҡыҙҙар менән йөрөнөң.

Буранбай. Улар менән ваҡыт үткәреү өсөн генә. Һиңә яҡын барырға ла ҡурҡа инем.

Буранбай Зөләйха алдына килеп теҙләнә.

Буранбай. Зөләйха! Йөрәгемде бирергә әҙермен! Валлаһи, һинең һүҙеңдән сыҡмам. Эсеүемде лә ташлайым. Ысын! *(Шул саҡ Регина инә. Шым ғына тыңлап тора.)* Сыҡ миңә кейәүгә!

Зөләйха *(Регинаны күреп ҡала)*. Абау, бынау Буранбайҙы.

Буранбай ҙа Регинаны күреп ҡала.

Буранбай. Ней. Беҙгә кисә үҙәктән бер спектакль әҙерләргә ҡушҡайнылар. Шуны ҡабатлайбыҙ.

Регина. Шулайҙыр шул.

З ө л ә й х а . Миңә ҡайтырға ваҡыт.
Б у р а н б а й . Әйҙә, оҙатып ҡуям.

Икәүләшеп сығып китәләр.
Питер инә. Аҡ халат кейгән. Ҡулында бал ҡорто рамаһы.

П и т е р *(Регинаға)*. Ҡайҙа ҡуяйым?
Р е г и н а . Һыймай ҡалдымы? Ҡуй бына табаҡҡа... *(Табаҡ алып сыға.)*
П и т е р . Ә ҡайҙа улар?
Р е г и н а . Кемдәр?
П и т е р . Буранбай... Зөләйха.
Р е г и н а . Яланға сәскә йыйырға киттеләр.
П и т е р . Сәскә. Яҡшы, яҡшы! Регина апай! Һеҙгә ҙур рәхмәт инде. Сәйегеҙ ҙә, балығыҙ ҙа тәмле. Береһе лә бушҡа килмәгән. *(Кеҫәһенән аҡса сығарып.)* Бына, бөтә изгелектәрегеҙ өсөн.
Р е г и н а . Юҡ, юҡ. Алмайым. Беҙҙә юлаусыны ашатаэсерәләр, хаҡ һорамайҙар.
П и т е р . Беҙҙә лә шулай. Тик ... түләргә мөмкинселегең булып та буш ашау беҙҙә гонаһ һанала.
Р е г и н а . Әлләсе?
П и т е р . Алығыҙ. Ихлас күңелдән. Рәхмәт йөҙөнән. Ана умарталарға берәй нәмә алырһығыҙ.
Р е г и н а . Рәхмәт инде. Аҡса артыҡ булмаҫ. Фәнилде ҡаршылайһы бар. Иртәгә Тимур баҙарҙан табынға емештәр алып ҡайтыр.
П и т е р . Борсолмағыҙ. Кәрәк булһа тағы ла бирермен. Тик әлегә был турала бер кемгә лә әйтмәгеҙ.
Р е г и н а . Ярар. Үҙең әйтерһең. Йә Фәнил ҡайтҡас кире ҡайтарырбыҙ.
П и т е р . Мине Тимур көтәлер *(сыға башлай)*.
Р е г и н а . Әйҙә, көн кисләп бара. Мин дә булышайым һеҙгә.

Икәүләп сығалар.

## Дүртенсе күренеш

Сәхнә яҡтыра. Бер аҙҙан радионан «Сәләм әйт тыуған яғыма» йыры ишетелә. Шау-гөр килеп Фәнилде ҡаршы алып ҡайтып киләләр. Иң тәүҙә өйгә Буранбай баяны менән инә лә туш уйнай башлай. Унан һуң Фәнил, артынан атаһы, әсәһе, Питер, аҙаҡтан Зөлхизә инә. Атаһы Фәнилдең сумкаһын тотҡан. Әсәһе плащын эләктергән.

Регина. Төклө аяғың менән, улым. Бына ҡайтып та еттек.

Тимур. Уф, улай оҙаҡ йәйәү йөрөгән юҡ ине. Таксист ней ауылдың теге осонда ҡалдырып китте лә барҙы бит.

Фәнил. Һаумы, тыуған йортом! Йәйәү килеү һәйбәт булды әле. Бөтә ауылды күрҙем. Тик кешеләр генә осрамаңы.

Тимур. Һинең ҡайтмағаныңа ике йыл да үтеп киткән икән. Ул саҡта әҙ-мәҙ кеше ҡалған ине. Хәҙер бына беҙ ҙә Буранбай ғына ҡалдыҡ.

Фәнил. Нисек инде?

Тимур. Шулай. Барыһы ла эшкә тип ҡалаға китте. Ғаиләләре менән. Бында ней магазины ла, мәктәбе лә ябылды бит.

Фәнил. Ә колхоз?

Тимур. Банкрот. Йә ҡуй әле. Аҙаҡ һөйләшербеҙ. Регина, сәй әҙерме?

Регина. Әҙер, әҙер. Зөләйха менән табынға теҙеп кенә сыҡҡайныҡ. Ҡана, сәйҙе генә тоҡандырайым да *(аш бүлмәһенә сыға)*.

Зөләйха *(Фәнил янына килеп)*. Фәнил, ә һин нисә көнгә ҡайттың?

Фәнил. Белмәйем. Зөләйха, һин ҡайһылай матурайып киткәнһең. Әллә кейәүгә сыҡтыңмы?

Зөләйха. Юҡсы? Бында хәҙер егеттәр юҡ бит. Ҡалаға киткем килмәй. Әсәйем ауырый.

Фәнил. Элек урам тулып йырлашып йөрөгән йәштәр ҡайҙа булған?

Буранбай. Эй, Зөләйха, егеттәр юҡ тигән була. Бына мин бар ҙа инде. Инде һиңә кем кәрәк?

Фәнил сумаҙанын аса. Бүләктәр тарата.

Фәнил. Әсәй, кил әле.

Регина килеп сыға.

Фәнил. Бына һиңә. Үҙе ҡырҡа, үҙе турай торған аҡыллы машина. Найсер дайсер тип атала.

Регина. Рәхмәт, улым.

Фәнил. Атай, һиңә урамда башҡорт көйҙәрен тыңлап йөрөү өсөн плеер. Унда ҡоштар тауышын яҙҙырып та алып була. Кино ла, фото ла ҡарайһың.

Тимур. Рәхмәт. Үҙең өйрәтеп бирерһең.

Ф э н и л. Зөләйха. Кил әле. Һиңә быna сәсеңә заколка менән битте йәшәртә торған крем. Буранбайға, әһә таптым. Бик матур футболка. Инглизсә былай тип яҙылған: «Ҡайҙа барһам аяҡтарым гел тарта тыуған яҡҡа». Тыуған яғына тоғро кешегә как раз.

Б у р а н б а й. Эй рәхмәт төшкөрө. Быны йыр менән булһа ла йыумай булмай.

Баян уйнай. Фән Вәлиәхмәтов репертуарынан «Тыуған яҡҡа йышыраҡ ҡайтайыҡ» йырын йырлай. Ҡушымтаға барыһы ла ҡушыла.

*«Атай ҡартҡа күлдәк, әсәйгә шәл*
*Күстәнәскә тәмле сәй алайыҡ.»*

Р е г и н а. Фәнил улым, әйҙә инде сәйең һыуына.

Фәнил, Тимур, Регина сығалар. Буранбай, Питер, Зөләйха ҡала.

Б у р а н б а й. Питер! Теге юлы ҡыҙғаным өсөн ғәфү ит!

П и т е р. Ярай, улай ғына була инде. Мин үҙем дә шулай ҡыҙыу ул.

Б у р а н б а й *(Зөләйханың ҡулдарынан тотоп)*. Мин һиңә һөйләгән һылыу ҡыҙ ошо инде. Буласаҡ кәләшем.

З ө л ә й х а. Булмайыраҡ торһон әле. Тәүҙә һынауҙы үтәһең.

П и т е р. Ниндәй һынау. Һеҙҙә шундай йола бармы?

З ө л ә й х а *(шаян)*. Бар шул. Тәүҙә үҙен күрһәтһен. Эсеүен ташлаһын.

П и т е р. Буламы?

Б у р а н б а й. Була ла ул ...тик...

З ө л ә й х а. Нимә тик?

Б у р а н б а й *(Зөләйхаға)*. Һин миңә кейәүгә сығырһыңмы?

З ө л ә й х а. Гид булып эшләй башлаһаң, бәлки сығырмын да.

П и т е р. Иртәгә үк кәләшемә хәбәр итәм. Мин әлегә барыбер Рәсәйҙән сығып китә алмайым. Документтар әҙер түгел. Стив ауырый. Эльза үҙе килһен. Страховка аҡсаһын алһын да. Туристик фирманың сметаһын төҙөргә кәрәк. Эльза бик шәп экономист ул.

Б у р а н б а й. Ҡайһылай күңелле булып китте әле. Терелә, терелә былай булғас ауылыбыҙ.

Аш бүлмәһенән Регина, Фәнил, Тимур инә.

Р е г и н а. Зөләйха, барығыҙ һеҙ ҙә күстәнәстәрҙән ауыҙ итегеҙ!

З ө л ә й х а. Әйҙәгеҙ!

Буранбай, Питер, Зөләйха сыға.

Тимур. Фәнил, теге хатҡа яҙған аҡсаларҙы бирҙеләрме һиңә, юҡмы?

Фәнил. Ниндәй аҡса?

Тимур. Гонорармы шунда. Марсҡа осҡан космонавтарҙан хәбәр килдеме?

Фәнил. Бер ҙә белмәйем, атай. Һаман да хәбәр юҡ ине. Көттөм, көттөм дә ҡайтырға булдым да ҡуйҙым. Һеҙ улай аҡсаһыҙ ҡайтҡан тип уйламағыҙ. Карточкала бер аҙ бар инде ул.

Регина. Уныһын тотонмайыраҡ тор. Кәләш алаһың да бар.

Фәнил. Кәләш? Эйе, дөрөҫ. Ҡарармын!

Регина. Ҡарамын, тип ни. Беҙгә америка килене алып ҡайтмаҫһың бит? Ана, үҙебеҙҙә лә матур ҡыҙҙар күп. Зөләйха ғына ла үҙе ни тора!

Фәнил. Әсәй, аҙаҡ...

Тимур. Булһа йәшермә. Атыу әсәйең һиңә кәләш димләй башлар.

Фәнил. Тегендә бик һәйбәт таныш ҡыҙым бар. Ул американ түгел. Рәсәйҙән. Атаһы урыҫ, әсәһе башҡорт. Кургандан килгән.

Тимур. Курган тиһеңме? Матур яҡ ул.

Регина. Улай булһа бер хәл.

Регина. Фәнил, улым, беҙгә кәңәш ит әле, беҙ бына ошо умартасылыҡты ҙурайтып, күпләп ҡорт алып бер эш асып ебәрәйек тигәйнек. Нисек башларға белмәйбеҙ?

Фәнил. Ысынмы? Бик изге эш. Тегендә минең бер дуҫымдың шундай фирмаһы бар. Кәңәш һорарға була.

Регина. Һин әле булаһыңдыр бында?

Фәнил. Булам. Питер менән һөйләшәм дә, бергә китербеҙ.

Тимур. Бер аҙ ятып ял ит. Аҙаҡ тау яғына сығып йөрөп килерһең.

Фәнил. Юҡ инде... мин бында йоҡлап ятыр өсөн килмәнем.

Аш бүлмәһенән сығалар.

Буранбай. Рәхмәт, Фәнил, күстәнәсеңә. Ҡайтайым. Әйҙә, Зөләйха.

Зөләйха. Һау булығыҙ. Рәхмәт! *(Сығалар.)*

Регина. Быҙауымды ҡарап инәйем.

Икеһе лә сыға.

### Бишенсе күренеш

Питер менән Фәнил генә ҡала.

Ф ә н и л. Ни эшләргә уйлайһың?

П и т е р. Белмәйем. Страховка аҡсаһын да юғалтҡы килмәй бит әле. Хәҙер генә ҡайта ла алмайым. Паспорт юҡ. Стив дауаханала. Хәҙер генә ҡайтһам булыр ине. Мине унда тулҡын йыуып океанға алып киткән тип уйлайҙар.

Ф ә н и л. Әйт!

П и т е р. Әллә паспортты алыштырып, бында ҡалырғамы икән?

Ф ә н и л. Бында? Бөтөнләйгәме? Ошо ҡороған ауылдамы?

П и т е р. Ҡороған тимә. Һеҙҙең ауыл алтын өҫтөндә ултыра. Ере иркен. Һыуы таҙа. Тәбиғәте иҫ китмәле.

Ф ә н и л. Әллә ошонда төпләнергә уйланыңмы?

П и т е р. Ни өсөн ҡасып китеп бөткәндәрҙер, аңламайым. Мин бында туристик фирма асыр инем...

Ф ә н и л. Ысынмы? Ә сығымдарҙы ҡайҙан?

П и т е р. Страховка нимә өсөн?

Ф ә н и л. Аңланым. Улай булғас, Эльзаны бында саҡыраһың инде.

П и т е р. Саҡырайым тигәйнем шул. Нисек уйлайһың?

Ф ә н и л. Шәплеккә шәп уй. Тик, бындағы халыҡты нисек эшкә йәлеп итерһең икән? Китешеп бөткәндәр бит.

П и т е р. Ә мин ике етәксене таптым да.

Ф ә н и л. Кемдәр?

П и т е р. Культура йәһәтенән Буранбай, реклама, ижади эштәрҙе Зөләйха алырға риза.

Ф ә н и л. Үҙеңсе?

П и т е р. Мин — генераль директор. Бөтә ойоштороу эштәрен үҙ өҫтөмә алам. Сит илдәрҙән дә туристар йәлеп итергә кәрәк.

Ф ә н и л. Уйҙарың шәп. Тимәк, бында ҡалаһың?

П и т е р. Шулай яҡшы һымаҡ. Һин нисек уйлайһың, дуҫ? Ҡайтып полиция ҡулына бирелергәме әллә?

Ф ә н и л. Бына атайым менән әсәйем умартасылыҡты йәнләндереү тураһында хыялланалар. Их, Питер, әгәр ҙә ошо эштәрҙе атҡара алһаҡ, Марс ауылы ла терелеп китер. Эш урыны булһа, йәштәр ҡайтып төпләнер ине.

П и т е р. Беләһеңме, Буранбай миңә анау тау башына менеп, баҫыуҙарҙы күрһәтте. Һеҙҙекеләр унда дарыу үләндәре сәсә икән.

Ф э н и л . Кемдәр?

П и т е р . Һуң һинең атайың, әсәйең...

Ф э н и л . Йә-йә, ҡыҙыҡ!

П и т е р . Тик ул үләндәрҙе йыйып эшкәрткән кеше юҡ. Бер аҙ уйлаштырғанда файҙалы сәйҙәр эшләүсе фирма асырға ла була.

Ф э н и л *(йәне көйә башлай. Ниңә ул идеяларҙы Питер әйтә, ул түгел)*. Шәп! Ҡара әле Питер, ә нишләп ошо идеяларҙы Америкала саҡта тормошҡа атҡарманың? Ниңә турист, геолог булып киттең әле?

П и т е р . Америкала бындай ҙур ташландыҡ ерҙәр юҡ. Барыһын да кемдер биләй. Ерҙе һатып алыуы бик ҡиммәткә төшә. Етмәһә, бындай матур тәбиғәт тә юҡ унда. Бында бик күп аҡса эшләргә була. Фэйни! Фантастика!

Ф э н и л . Һине буш ерҙәр ҡыҙыҡтырҙы инде.

П и т е р . Эйе шул. Әрәм булып ята бит.

Ф э н и л . Ятһа ни. Ниңә беҙҙең ергә ҡыҙығаһың? Ул ерҙәр беҙҙеке, белдеңме? Беҙҙеке. Американыҡы түгел.

П и т е р . Һинекеме ни? Һин дә ана киткәнһең. Ә кемгә кәрәк ул һеҙҙең ерегеҙ? Файҙаһын күрмәгәс.

Ф э н и л . Берәй ҡасан күрербеҙ әле.

П и т е р . Ташландыҡ ергә әйләнгәс, урмандарҙы сытыр баҫып үтмәҫлек булғасмы? Йылғалағы һыуҙар һайығып, ҡороғасмы? Баҫыуҙарҙы билсән баҫҡасмы?

Ф э н и л . Ә беҙҙең ерҙә һинең ни эшең бар? Бар ана ҡайт та үҙеңдә шулай телләш.

П и т е р . Ярай. Ҡайттым да, ти. Шунан. Минең төрмәлә сереүемде теләйһеңме?

Ф э н и л . Йә ярай. Ҡыҙмайыҡ. Беҙ кешеләр ҙә инде. Бында бер мин генә хәл итә алмайым. Ауыл советы бар. Уйлашайыҡ, кәңәшләшәйек. Бәлки ысынлап та шулай итергә кәрәктер. Әйҙә, анау тауға менеп төшәйек. Һағындырған.

П и т е р . Әйҙә. Мин юлды беләм. Буранбайға рәхмәт *(сығалар)*.

### Алтынсы күренеш

Регина килеп инә. Ҡулында арҡан. Уны быҙау тартып өҙгән.

Р е г и н а *(бауҙы ике өлөшөн ике ҡулына тотоп)*. Хәлләнгән был быҙау. Йәбешеп имә. Тартып айырайым тигән-

сә, арҡан өҙөлөп китте. Әллә быҙау хәлләнгән, әллә арҡаны серек. Фәнилемде... кәләшем дә америкта ти бит әле. Бынау Буранбайҙы килеп ҡыҫылды. Зөләйханы димләр ҙә ҡуйыр инем. Буранбайы ла йәл. Исмаһам былай йәтим йөрөмәҫ ине. Ай-һай арҡан серектер. Яңыһын иштерергә кәрәк.

Тимур килеп инә. Ҡул йыуғысҡа килеп ҡул йыуа башлай.

Регина. Тимур, бынау арҡанды әйтәм. Нисәмә йыл йөрөй. Иҫкергәндер. Быҙау бер тарткайны өҙөлдө лә ҡуйҙы.

Тимур *(ҡулын таҫтамалға һөртөп)*. Туҙғандыр... Ярай, яңыһын ишеп бирермен.

Регина. Фәнилде әйтәм. Кире америгына китеп кенә бара инде. Кәләшем дә шунда ти.

Тимур. Китһә китә инде. Арҡан менән бәйләп тотоп булмай балаларҙы. Күңелендә тыуған ер тойғоһо булмаһа, ни хәл итәһең? Бына Буранбайҙы ағаһы күпме саҡырҙы Себергә. Эш тә, кәләш тә, фатир ҙа була тине. Юҡ, китмәне бит. Ана әле кәләш тә тапты буғай.

Фәнил килеп инә.

Фәнил *(ашығып. Борсоулы)*. Атай, иртәгә икәүләп район үҙәгенә барайыҡ әле.

Тимур. Берәй документ кәрәкме?

Фәнил. Кәрәк шул. Һөйләшергә ине.

Регина. Питерың ҡайҙа ҡалды?

Фәнил. Юлда Буранбай осраны ла үҙенә алып ҡайтты. Зөләйха ла бар ине. Өсәүләп ултырып ҡалдылар. Ул булмағанда һеҙҙең менән һөйләшеп алайым әле..

Тимур. Ҡыҙыҡ. Йә, әйт.

Фәнил. Әсәй, һин дә тыңла. Бында минең өсөн һеҙҙән дә ҡәҙерле кешеләр юҡ. Эш былай тора. Питерҙы мөмкин тиклем йәһәтерәк Америкаға ҡайтарып ебәрергә кәрәк.

Регина. Бәй-бәй, ул һинең дуҫың түгелме? Ҡунаҡ булһын. Бергәләп китерһегеҙ.

Фәнил. Дуҫым шул. Әммә... уның паспорты юҡ.. Шуға тиҙ арала паспорт алып бирергә кәрәк.

Тимур. Уға кәрәк бит. Үҙе йөрөһөн. Һин әле генә килдең дә?

Фәнил. Һуң, атай, әлегә барыһын да әйтә алмайым. Аңлатырмын. Барабыҙмы?

Тимур. Ярай һуң. Оло юлға тиклем йәйәүләп сығырға кәрәк булыр.

Регина тәҙрәгә ҡарап.

Р е г и н а . Аһ-аһ, ауа-түнә Буранбай бында йүгерәсе? Берәй хәл булды микән?

Ишектән ярһыған, ҡурҡынған Буранбай күренә. Килеп инеү менән.

Б у р а н б а й . Мин... теләмәнем. Үҙе бит... кәзәмә бесән һалып ҡына ингәнемсә. Ух һине... мин иплəп кенә. Ауылса ғына һуҡҡайным. Ҡоланы. Үлеп фәлән ҡуйһа ни эшләйем инде. Мине яҡлашырһығыҙ инде.

Ф ә н и л *(Буранбайҙың яғаһынан бөрөп һелкетеп)* . Нимә булды? Һөйлә!

Регина уға стакан менән һыу килтерә. Буранбай уны эскәс, өҫтәл артына ултыра.

Т и м у р . Ҡурҡма. Һатмабыҙ. Һөйлә.

Б у р а н б а й . Теге кем әле? Питерҙы... үлтерҙем, шикелле.

Ф ә н и л . Һин нимә? Шул ғына етмәгәйне.

Ф ә н и л . Йә, һөйлә, нимә булды?

Б у р а н б а й . Мин кәзәгә бесән һалам тип кенә сыҡҡайным.

Ф ә н и л . Унының ишеттек. Артабан.

Б у р а н б а й . Улар икеһе генә өйҙә ҡалды. Инеүемә теге хәшәрәт минең Зөләйхамды...

Р е г и н а . Ыстағәфирулла... тфү, мәлғүнде. *(Тимурға.)* Тәртипле, һәйбәт кеше тигән була.

Б у р а н б а й . Зөләйханы... ҡосаҡлап тора ине.

Т и м у р . Шул ғынамы?

Р е г и н а . Шунан башлана ла инде. Шул ғынамы, имеш.

Т и м у р . Шуның өсөн генә һуктыңмы тием дә?

Б у р а н б а й . Әллә нимә булды инде. Әле генә беҙҙе таныштырып изге күңелле булып йөрөгәс, ҡыҙҙым да киттем. Күп тә һуҡманым. Берҙе генә. Ул йығылды, мин бында йүгерҙем.

Ишектән аһылдап Зөләйха килеп инә.

З ө л ә й х а . Тере. Тере, Буранбай. Һин үлде тип уйланыңмы? *(Буранбай янына килеп.)* Буранбай, һин ғәфү ит мине.

Б у р а н б а й . Тереме? Тере. *(Зөләйханы ҡосаҡлай.)* Мин һине ысынлап та яратам икән дә Зөләйха.

З ө л ә й х а . Мин дә. Һин йүгереп сығып киткәс, йылғанан ташлана икән тип ҡотом осто. Был яҡҡа ыңғайлағас, артыңдан йүгерҙем.

Б у р а н б а й . Ҡайҙа ул?

З ө л ә й х а . Ҡалды. Шунда.

Б у р а н б а й . Ул бит һине ҡосаҡлап тора ине.

Р е г и н а . Йә нимә аптырап ҡаттығыҙ? Фәнил, әйҙә Питерҙы алып киләйек. Хәҙер бында үҙе килмәйәсәк. Оялыр.

Т и м у р . Әйҙә. Киттек.

Тимур, Фәнил, Регина сығалар. Буранбай менән Зөләйха яңғыҙы.

Б у р а н б а й . Ул бит һине ҡосаҡлап тора ине.

З ө л ә й х а . Юҡсы. Мин унан ярҙам һорағайным.

Б у р а н б а й . Ниндәй ярҙам?

З ө л ә й х а . Әсәйемә табиптар ҡатмарлы операция кәрәк тигәйнеләр. Түләүле. 20 мең кәрәк.

Б у р а н б а й . Питерҙан һорамаҡ булдыңмы?

З ө л ә й х а . Эйе. Кемдән һорарға белмәнем. Һин бит үҙең уның аҡсаһы күп тинең.

Б у р а н б а й . Шунда уҡ һораһаң ни була?

З ө л ә й х а . Шунан ул әлегә ярҙам итә алмайым. Бына кәләшем килергә тейеш. Ул аҡса килтерер. Шунан бирермен тине. Минең кәләшем дә һинең кеүек матур, нескә генә, тине. Мин тәҙрә янында инем. Ул тәмәке тартырға уйланы ла форточканы асам тигәйне. Арттан килеп ҡулын һуҙғайны ғына һин килеп индең.

Б у р а н б а й . Ярай, ғәфү ит. Беләһеңме, һинең өсөн мин тау аҡтарырға ла әҙер. Бына, *(кеҫәһенән аҡса сығара)* ал, күпме кәрәк. Әсәйеңде һауыҡтырайыҡ.

З ө л ә й х а . Рәхмәт, Буранбай! Ҡотҡарҙың.

Б у р а н б а й . Мин был аҡсаларға туй яһарға уйлағайным.

З ө л ә й х а . Туй?

Б у р а н б а й . Эйе. Һинең менән.

З ө л ә й х а . Әсәйем терелһә, туйҙың иң матуры беҙҙеке буласаҡ!

Б у р а н б а й . Ысынмы? *(Күтәреп ала.)* Америкаға ҡасып китмәҫһеңме?

З ө л ә й х а . Юҡ! Бер ҡасан да. Үҙебеҙҙекеләргә бер кем дә тиңләшә алмай. Ана бит. Бер һуҡҡандан иҫһеҙ булып ҡоланы ла ҡуйҙы.

Б у р а н б а й . Питерҙы килтергәнсә һыҙайыҡ бынан. Миңә уңайһыҙ. Аҙаҡ ғәфү үтенермен әле.

Сығалар. Фәнил алдан Питер арттараҡ ҡалып килеп инәләр.

П и т е р . Фәнил, кәңәш ит, нимә эшләргә миңә?

Ф ә н и л . Иҫән сағында ҡайтырға кәрәк. Иртәгә атайым менән һиңә паспорт юлларға барабыҙ. Район үҙәгенә...

П и т е р . Мин дә барайыммы?

Ф ә н и л . Юҡ. Һине күрһәләр милицияға ябырҙар.

П и т е р . Ә һеҙ нисек?

Ф ә н и л . Әҙерәк алдашырға. Шунан бер аҙ аҡса түләргә тура килер.

П и т е р . Кәрәкме?

Ф ә н и л . Аҙаҡ бирерһең. Әлегә бар.

П и т е р . Туҡта, Фәнил, мин Америкаға?.. Алдашҡан өсөн, төрмәгә ултыртырҙар бит.

Ф ә н и л . Ә һин теге Калифорниялағы фазендаңа бар. Унда һине өләсәйеңдән башҡа бер кем дә танымай.

П и т е р . Шулай... Тик мин Эльзаға хәбәр иткәйнем.

Ф ә н и л . Нимә тип?

П и т е р . Бында кил, тип. Страховка аҡсаһын ала ла килә. Икәүләп бында туристик фирма асабыҙ тигәйнек.

Ф ә н и л . Бында? Икәүләп?

П и т е р . Эйе. Тегендә төрмәлә ғүмер үткәргәнсә.

Ф ә н и л . Һине бында эшләтмәйәсәктәр.

П и т е р . Кемдәр? Ана, Буранбай менән Зөләйха беҙгә эш була тип ҡыуанып йөрөйҙәр.

Тимур килеп инә. Ҡулында аҡ халат, умарта башлығы.

Т и м у р . Питер, әйҙә һиңә умарталарҙы күрһәтәм. Икәүләп теге инә ҡорттарҙы ҡарап алайыҡ.

Ф ә н и л . Ниндәй инә ҡорт тағы?

Т и м у р . Ана Питер һораны. Ике инә менән бер ата ҡорт кәрәк ти. Фазендамда ҡорт үрсетәм. Һеҙҙәге бал тәмле, ти. Үҙем дә бөрйән бал ҡортон маҡтап ташлағайным.

Ф ә н и л . Шулай шул. Әйҙә үрсетһен. Бар, бар!

Питер кейенә. Тимур менән икәүләп сығалар.

## Етенсе күренеш

Фәнил бер үҙе.

Ф ә н и л. Питерҙы һис тә бында ҡалдырырға ярамай. Тегендә лә уны көтмәйҙәр.

Регина килеп инә.

Ф ә н и л. Әсәй, бар әле Буранбай менән Зөләйханы бында саҡыр. Питер атайым менән йөрөгән саҡта һөйләшеп алайыҡ.

Р е г и н а. Ярай, улым. Хәҙер. Эскәмйәлә генә ултыралар ине.

Буранбай менән Зөләйха, Регина инәләр.

Ф ә н и л. Бына нимә, хәлдәр шулай. Беҙ Питерҙы йәһәтләп Америкаға оҙатырға тейешбеҙ.

Б у р а н б а й. Нисек оҙатырға. Минең арҡаламы?

Ф ә н и л. Юҡ, һинең ҡыҫылышың юҡ. Ул бында кәләшен саҡырырға уйлай. Дөрөҫөрәге, инде саҡырған да. Кәләше күп кенә аҡса килтерергә тейеш. Бына шул аҡсаға Питер беҙҙең ерҙе һатып алып унда туристик фирма, тағы әллә нимәләр асырға ниәтләй.

Б у р а н б а й. Асһа ни. Буш ятҡанса. Бына беҙгә лә эш булыр ине. Уның нимәһенән ҡурҡаһың?

З ө л ә й х а. Беҙгә һаман ошолай хәйерселектә йәшәргә тимәгән дә. Исмаһам бер йән ярҙам итәм тигәндә һин...

Ф ә н и л. Һеҙ американдарҙы белмәйһегеҙ әле. Бер ерҙә төпләнеп алһалармы, уларҙы бер ҡасан да кире ебәреп булмаясаҡ. Етмәһә үҙенең кәләшен дә килтерә. Тимәк, ғаилә. Аҙаҡ туғандары килеп туласаҡ. Аңланыңмы?

Б у р а н б а й. Юҡ. Аңламаным.

Р е г и н а. Эй, Хоҙайым, атайым мәрхүм герман һуғышынан инвалид булып ҡайтҡайны. Гел һамаҡлай торғайны. Ҡан менән яуланған ерҙе данға ҡаплағыҙ инде, бер ниндәй көрәшһеҙ генә, бушҡа бирмәгеҙ инде, тип. Улар ҡан ҡойоп һаҡлап алып ҡалған ерҙе ошолай һуғышһыҙ ниһеҙ генә...

З ө л ә й х а. Ысынлап та шулай шул. Беҙ үҙебеҙ теләп ерҙе башҡаларға тапшырабыҙ түгелме?

Б у р а н б а й. Уныһын уйламағанмын икән дә. Эш була, аҡса була, имеш.

Ф ә н и л. Эш тә, аҡса ла кәрәк инде ул. Ауылды ла терелтергә кәрәк. Әйҙә уйлашайыҡ. Берәй юлын табайыҡ. Тик Питерҙарҙан башҡа.

Р е г и н а. Таптым! Хат яҙайыҡ!

Б у р а н б а й. Хөкүмәткәме ни? Уҡыны ти ул һинең хатыңды. Исмаһам, нисек йәшәйһегеҙ, тип хәлебеҙҙе белгән кеше лә юҡ.

Р е г и н а. Юҡ, теге ни... ауылдаштарға. Күп киттеләр бит. Себерҙер, Сахалиндыр, шунда...

З ө л ә й х а. Ысын шул. Бәлки берәйһе бөтөнләйгә ҡайтыр?

Б у р а н б а й. Ҡайтыуы нимәгә, беҙгә яраҡлы берәй эш асмағас.

Ф ә н и л. Дөрөҫ. Яҙайыҡ. Эш асырға теләүселәр ҙә булыр. Аҡсалы ерҙә эшләйҙәр бит. Ил төкөрһә, күл була тиҙәрме?

З ө л ә й х а *(ҡағыҙ ручка алып яҙа башлай)*. Бөтәһенә лә бер иш хат ебәрәйек тә ҡуяйыҡ. Бына, ауыл бөтөп бара. Һеҙҙән ярҙам һорайбыҙ. Төрлө фирмалар асырға кәрәк. Аҡса менән ҡайтығыҙ. Йә үҙегеҙ ҡалығыҙ. Юғиһә бында американдар килеп ерҙе һатып алалар, тип.

Б у р а н б а й. Әйҙә, йәһәтерәк. Адрестарҙы табайыҡ та ебәрәйек.

Р е г и н а. Ысынлап та, Зөләйха. Һин ауыл советынанмы, ҡайҙан адрестарын тап та хатты ебәрегеҙ.

З ө л ә й х а. Ярай. Киттек, Буранбай *(сығалар)*.

Ф ә н и л. Туҡтағыҙ. Миндә лә бер нисә адрес бар. Бергәләп яҙайыҡ. Теге атайым һөйләгән Ринат Рөстәмовты ла онотмайыҡ. Себер урманынан да матурыраҡ беҙҙең урмандар *(сығалар)*.

Питер килеп инә. Күҙен баҫҡан. Һағыҙаҡ саҡҡан. Килеп көҙгөгә ҡарай. Артынса Тимур инә.

Т и м у р. Ҡаяуын алырға кәрәк. Ҡана үҙем ҡарайым әле *(ҡарап, ҡаяуын ала)*. Бер шешә лә бөтә ул. Һыҙлаймы? Ана шундай уҫал ҡорттар йәшәй беҙҙә. Нык сағалар. Шуға башҡа ҡорттар уларҙың ояһын яулай алмай. Яугир ҡорттар. Борондан килә уларҙың тоҡомо. Хас та беҙҙең башҡорт халҡы кеүек.

П и т е р. Уҫалдар. Хәтеремдә бәләкәй саҡта ғына бер тапҡыр ҡорт саҡҡайны. Быныһы бигерәк нык ауырттыра.

Тимур. Туйға ҡәҙәре бөтә ул. Ҡасан ҡайтырға уйлайһың?

Питер. Мин ҡайтырға уйламайым. Ана Фәнил бит. Ҡайт, ти. Мин бында фирма асырға уйлағайным. Кәләшем аҡса килтерергә тейеш.

Тимур. Хәҙер аҡсаға барыһын да һата ла ҡуялар шул. Элек ерҙе ҡан ҡойоп яулап алғандар. Ә хәҙер... бына йәшәйбеҙ, ә кемдең ҡулына ҡалырбыҙ, белмәйбеҙ.

Питер. Минең Калифорнияла ла фазендам бар ул. Унда өләсәйем йәшәй. Тәүҙә шунда умартасылыҡ менән шөғөлләнермен тигәйнем. Хәҙер мин Америка өсөн юҡ. Үлгәнмен. Океанға батҡанмын. Әгәр ҙә хәҙер ҡайтып күренһәм, мине ғүмерлеккә төрмәгә ябасаҡтар.

Тимур. Ни өсөн?

Питер. Йәшенеп ятҡан өсөн. Беҙҙә шулай. Мин табылмағас, ҙур ғына страховка аҡсаһын кәләшемә түләйҙәр. Беҙ ул компанияны алданыҡ булып сыға.

Тимур. Алай икән. Хәлең шәп түгел, малай.

Питер. Фәнил дә мине ҡыуа. Ана фазендаңда йәшенеп ят, ти. Ғүмер буйы йәшенеп йәшәүе еңел тип уйлай микән?

Тимур. Иртәгә беҙ Фәнил менән һиңә паспорт юлларға барабыҙ. Һеҙҙең бында ҡалыуығыҙ бәлки хәйерлерәктер. Фәнил менән үҙем һөйләшермен.

Питер. Рәхмәт һеҙгә. Изгелегегеҙҙе онотмам.

Тимур. Ҡайҙа китте әле ул Фәниле? *(Сыға.)*

Питер компьютер артына ултыра. Хат ебәрә.

Питер. «Эльза. Минең тере икәнемде бер кемгә лә әйтмә. Туристик фирманың документтарын ал. Бында филиал асырбыҙ. Әлегә барыһы ла мин уйлағанса бара. Килер көнөңдө хәбәр ит.»

Буранбай килеп инә.

Буранбай. Һа! Һин бында хужа булып та алдыңмы? Кем һиңә компьютерға тейергә рөхсәт итте? *(Килеп компьютерҙы һүндерә.)* Ана үҙегеҙгә ҡайт та командуй.

Питер. Иртәгә паспорт йүнәтергә баралар. Документ алғас та ҡайтырмын.

Буранбай. Шулай булмай ни? Кәләшеңде лә саҡырғанһың бит әле. Рәсәй паспорты алғас, ер һорай башлаясаҡһың, аҙаҡ беҙҙе ҡол итергә уйлайһыңмы? Барып сыҡмаҫ.

П и т е р . Һеҙгә эш... бирәм. Насармы ни?

Б у р а н б а й . Насар. Белгең килһә, ер беҙҙеке. Уны нисә быуат буйы ҡан ҡойоп һаҡлағандар. Уны бер кемгә лә бирмәйбеҙ. Белдеңме?

П и т е р *(көлә)*. Шайтан таяҡ ҡына үҫтерәһегеҙме? Шәп!

Б у р а н б а й . Нимә теләйбеҙ шуны үҫтерәбеҙ. Унда һинең эшең булмаһын.

П и т е р . Ә техникаға аҡсаны ҡайҙан табырһығыҙ?

Б у р а н б а й . Аҡсамы? Һин аҡсам күп тип маҡтанаһыңмы? Беҙҙе һатып алырға уйланыңмы? *(Питерға яҡын килеп ул биргән аҡсаларҙы битенә бәрә.)* Мә ал кире. Ҡалғанын аҙаҡ түләрмен. Беҙ һатылмайбыҙ. Нисек йәшәргә юлын табырбыҙ.

Зөләйха килеп инә.

З ө л ә й х а . Буранбай, һин тағы башланыңмы? *(Аҡсаларҙы күреп аптырай.)*

Б у р а н б а й . Ана, беҙҙе һатып алырға теләгәйне. Борсолма, Зөләйха, табылыр аҡсаһы ла. Матур йәшәргә теләк кенә һүрелмәһен.

П и т е р . Рәхмәт, Буранбай! Турфирмаға икенсе кешеләрҙе эшкә алырға тура килер.

Б у р а н б а й . Ялларһың. Фирмаңды аса алһаң.

Питер сығып китә.

З ө л ә й х а . Һин нимә? Тағы ла талаштыңмы?

Б у р а н б а й . Хаттарҙы яҙып бөттөгөҙмө?

З ө л ә й х а . Фәнил яҙып ҡалды. Иртәгә ебәрербеҙ. Ун биш хат булды. Өсәүһе генә яуап бирһә лә... Инде туйҙы кисектереп торабыҙмы?

Б у р а н б а й . Саҡ ҡына көтәйек. Берәй йүне сығыр.

Тимур менән Фәнил инә.

Ф ә н и л . Әһә, мөхәббәт ҡошсоҡтары бында икән? Ниңә бойоҡ былай?

Б у р а н б а й . Питерҙы бынан ебәрергә кәрәк.

Ф ә н и л . Мин дә атайыма шулай тием. Ә ул киреһен һөйләй.

Т и м у р . Тағы башланыңмы? Уның беҙгә ниндәй зыяны тейә? Аҡсаһы бар, һинекен ашамай. Күмәкләп өй һалышып бирһәк, ана кәләше менән йәшәрҙәр шунда.

Буранбай. Ул бит беҙҙең ерҙәрҙе һатып алам, ти.

Тимур. Беҙ рөхсәт итмәһәк, бер кем дә ер һатып ала алмаясаҡ, белдеңме? Ә беҙ уға рөхсәт итмәйәсәкбеҙ.

Зөләйха. Тимәк, Питер ҡала инде.

Фәнил. Шулайыраҡ шул. Бер уйлаһаң — йәл дә. Ҡайтһа уны төрмәгә ябасаҡтар.

Буранбай. Мин иртәгә үк эшкә китәм.

Зөләйха. Һиндәме? Төҙөлөшкәме?

Буранбай. Юҡ, сәпсимгә түгел. Бер ике айға ғына. Ҡайтам да бында үҙемдең эшемде асам.

Зөләйха. Шәп! Әйҙә, тәүәкәллә.

Тимур. Беҙ эшкә китә алмаҫбыҙ инде.

Фәнил. Ә мин нимә өсөн? Әлегә эш башлар өсөн генә етәрлек аҡсам бар. Тағы ла Америкаға барып кәләшемде алып киләм әле. Унан гөрләтеп яңы эш башларбыҙ.

Регина килеп инә.

Регина. Бында бер йыйылыш бара инде әллә. Ҡай-һылай күмәкбеҙ үҙебеҙ. Геү килеп һөйләшәбеҙ.

Тимур. Ана, Фәнилебеҙ аҡса биреп торам, ти. Нисә умарта алайыҡ?

Регина. Тәүгә бер ун биш, егерме етеп торор. Аҙаҡ ҡарарбыҙ.

Тимур. Иртәгә үк белешеп ҡайтам да башларға кәрәк. Тиҙҙән муйыл сәскә ата башлай.

Буранбай. Әйҙә, Зөләйхам! Юлға әҙерләнәйек!

Зөләйха, Буранбай сығалар.

Фәнил. Питер ҡайҙа китте?

Тимур. Әллә. Анау ҡая яғына ыңғайлап китеп бара ине.

Фәнил. Уның янына барып хәлде аңлатайым әле. Әгәр ҙә үҙебеҙ фирмалар асып ебәрһәк, ул америкаға ҡайтмаһа ла ярай ҙа инде.

Тимур. Ҡайтмаһын шул.

Регина. Бынау Буранбай турфирма асам тигәйне. Унда сит илдән килһәләр беҙгә һәйбәт тәржемәсе кәрәк буласаҡ. Питерҙы шунда эшкә алырбыҙ, эйеме?

Тимур. Ну баш һиндә. Дөп-дөрөҫ уйлайһың да ҡуяһың ҡайһы саҡ.

Регина. Һинең генә башың йоморо тиһеңме?

Ф э н и л . Уныһын үҙҙәре ҡарар. Әлегә бында ҡалып торһон.

Фәнил сыға.

Т и м у р . Ней бит әле, Регина, миңә Питер әҙерәк аҡса биргәйне.

Р е г и н а . Һиңә лә бирҙеме? Ҡайһылай мут кеше. Алдан уҡ барыһын да һатып алып өлгөргән. Әйтәгүр һаман уны яҡлаштың.

Т и м у р . Бер нисә бал ҡорто кәрәк, тине. Шуға биргәйне.

Р е г и н а . Бал ҡорто? Һин әле үҙебеҙгә саҡ еткән бал ҡорттарын әллә ниндәй үткенсегә һатып йөрөйһөңмө?

Т и м у р . Һатманым. Уйланым ғына.

Р е г и н а . Ә аҡсаһын алғанһың. Бер бөртөк бал ҡортон да бирмәйем. Аҡсаһын ҡайтар!

Т и м у р . Һин... умарталар һатып алам тигәйнең...

Р е г и н а . Юҡ инде. Ул аҡсаларға алмаясаҡбыҙ. Кире ҡайтар. Аҙаҡ был минең умарталар тиһә?

Т и м у р . Уныһы шулай ҙа. Ярай. Ҡайтарырмын. Барыбер бында ҡалам тине бит.

Р е г и н а . Белгең килһә, ул миңә лә аҡса бирҙе?

Т и м у р . Һиңә?.. Түләнеме?

Р е г и н а . Ух ошо оятһыҙҙы. Түләне шул. Ашаным, эстем, ял иттем. Рәхмәт, тине.

Т и м у р . Ах, шилма ҡатын. Миңә әйтмәгән була бит әле.

Р е г и н а . Уның ҡайғыһы булдымы ни? Һин дә әйтмәгәнһең бит.

Т и м у р . Улайһа һин дә кире ҡайтараһың инде.

Р е г и н а . Уйламайым да. Ниңә әзмәүерҙәй ир бушлай ашап-эсеп ятһынмы? Тағы күпме йәшәйәсәк әле ул бында.

Т и м у р . Дөрөҫ. Үҙенә әйт тә кире бирмә. Ә мин бирәм.

Р е г и н а . Башҡа бер тин дә алма унан. Беҙҙе ҡол итергә әҙер генә торалар.

Т и м у р . Иртәгә районға киткәс, өйҙә тормам.

Р е г и н а . Онотоп торам. Быҙауҙы нисек айырам. Мә, теге арҡанды тоташтырып бир!

Регина арҡан бирә. Тимур уны ишеп оҙонайтырға ултыра.

Р е г и н а . Фәнилебеҙ бөтөнләйгә ҡайтырға булды түгелме?

Т и м у р . Шулайыраҡ. Кәләшемде алып ҡайтам, ти бит.

Р е г и н а . Бынау Питер килеүенән бер файҙа. Сәменә тейҙе улымдың. Юғиһә Фәнил һаман шул Америка тип суҡыныр ине.

Т и м у р . Бер Фәнилме ни, ана күпме йәштәр бында түгер көсөн ситтә сарыф итеп әрәм булалар. Әйтерһең, элек беҙ алтын көмөшкә ҡойоноп йәшәгән. Һәр ерҙә тырышлыҡ, сәм һәм татыулыҡ кәрәк.

Р е г и н а . Баяғы күсереп, иҫке ояһына һалған бал ҡорттары ни эшләй?

Т и м у р . Ни эшләһен? Гөжләп торалар. Бирешерлек түгелдәр. Тегенең һауаһын оҡшатманылар ахыры?

Р е г и н а . Сит сит инде ул. Иртәгә һорашып ҡайт әле, бер күс бал ҡорто күпме тора икән?

Т и м у р . Эй ҡуймайһың да инде алдыңа алғанды. Белешермен. *(Арҡанды күрһәтеп.)* Бына, өҙөлгән тип әйтмәҫһең дә. Мә! *(Арҡанды Регинаға бирә.)*

## Һигеҙенсе күренеш

Фәнил менән Питер килеп инә. Арығандар.

Ф э н и л . Саҡ таптым был Питерҙы. Әллә ҡайҙа теге ҡороған күл буйы туғайына барып еткән.

П и т е р . Матур ерҙәр. Иркенлек. Бер кем дә тыймай. Йөрө лә йөрө.

Ф э н и л . Әсәй, атай, Питер бында ҡалһам, һеҙгә үҙ эшегеҙҙе асырға бар хәлемдән ярҙам итәм, ти. Финанс йәһәтенән аяҡҡа баҫҡас, минең ярҙамым кәрәк булмай башлағас ҡайтырмын, ти, Америкаға.

Т и м у р . Һай егет тә икәнһең үҙең.

П и т е р . Бына Фәнил генә китәм тип ҡаҡшата.

Ф э н и л . Кире ҡайтам да инде. Кәләшемде генә алам да. Бергәләп эшләрбеҙ.

П и т е р . Һин юҡта мине рәнйетмәҫтәрме?

Т и м у р . Борсолма. Буранбай менән дә һөйләшеп ҡуйырмын. Теймәҫ. Иртәгә эшкә китергә йыйына ул.

П и т е р . Ә мин ул ҡайтыуға теге янған ел тирмәнен яңынан эшләп ҡуйырмын. Туристарҙы саҡырып торасаҡ ул тау башынан.

Р е г и н а . Һай, ауыҙыңа бал да май. Тимур, иртәгә Питерға Рәсәй паспорты алырға бараһығыҙ. Питер тип

яҙҙыртһағыҙ кем ул да, ҡайҙан, тип һорап йонсоторҙар. Әллә...

Фәнил. Ысын шул, Питер?

Питер. Аңламайым.

Фәнил. Бына беҙҙә бер ҙә Питер тигән исем юҡ. Һине ниндәй исем менән яҙҙырайыҡ?

Регина. Белдем. Питерға оҡшап тора. Үҙе теләп беҙҙә ҡалырға әҙер кешегә тап килә — Батыр тип ҡушайыҡ!

Тимур. Батыр. Ысынлап та Батыр тип әйтәйек. Ризамы Питер?

Питер. Шулай кәрәк икән, мин риза *(Тимурға ҡулын бирә)*.

Фәнил. Ә фамилияһы?

Регина. Фамилияһымы? Мончо булғас, Мусин булһын. Оҡшаймы?

Питер. Мунсин?

Регина. Юҡ, Мусин. Беҙҙә шундайҙар бар.

Фәнил. Батыр Мусин. Шәп яңғырай. Һине бер кем дә Американан килгәнһең тип әйтмәҫ. Күрше Фидерҙән тиерһең. Яйлап башҡортса ла өйрәнеп алырһың.

Питер. Ә мин беләм. «Рәхмәт, буран, шәп».

Тимур. Бына бит. Буранды ҡайҙан өйрәндең?

Питер. Буранбайҙан. Йырланы. *(Көҙгөгә ҡарай.)* Фәнил, был кем?

Фәнил. Үҙеңде танымайһыңмы ни?

Питер. Күҙемде ҡара?

Тимур. Күҙеңме? Бая бал ҡорто саҡты ла. Оноттоңдамы ни?

Питер. Оһо, шулай ныҡ шешәме ни ул?

Тимур. Иртәгә ул күҙең бөтөнләй ябыласаҡ. Һин тәүҙә беҙҙе бер күҙле сит планета кешеһе тип уйлағайның. Бына хәҙер үҙең сит планета кешеһенә оҡшаның.

Питер. Ниңә, мин хәҙер марсианин булам түгелме? *(Көлөшәләр.)*

Тимур. Ана, Американан Марсҡа ракета осорғандар ти бит.

Фәнил. Ысын, атай, әйҙә НАСА-ның яңылыҡтарын ҡарайыҡ әле?

Тимур. Әйҙә һуң.

Компьютер янына киләләр.

Ф э н и л. Урра! Питер, ҡара, тыңлағыҙ. Марсҡа осоролған «Марс-500» космик ракетаһы экипажы бәйләнешкә ингән!

П и т е р. Шунан?

Ф э н и л. Шунанмы? Беҙгә гонорар булырға тейеш. 500 мең доллар!

П и т е р. Түгел. Марста тормош бармы?

Ф э н и л. Уныһын хәбәр итмәгәндәр. Юҡтыр моғайын.

П и т е р. Ә һин яуап яҙ. Яҙ! Америка гражданины Марсҡа аяҡ баҫты! Исеме Питер Мончо. Марстағы кешеләр менән дуҫлашты! Уны Марста Батыр Мусин тип йөрөтәләр, тигән.

Т и м у р. Марста нишләп тормош булмаһын, ти?

Ф э н и л. Әйҙә үҙебеҙҙең туристик фирмаға исем уйлайыҡ? Бренд.

П и т е р. «Марс-500» булһын!

Ф э н и л. Ә ниңә 500?

Т и м у р. 500 мең гонорар. «Марс-500» ракетаһы.

Р е г и н а. 500 хеҙмәтсе булыр!

Көлөшәләр.

## Туғыҙынсы күренеш

Ишек шаҡыйҙар. Себерҙән ҡайтып йортон йыйыштырып йөрөгән Әлфиә күренә. Ҡулында күстәнәстәр һалынған сумка.

Ә л ф и ә *(туҡылдата)*. Мөмкинме?

Р е г и н а. Аһа, әллә беҙҙең Әлфиәбеҙ инде?

Ә л ф и ә. Шул шул. Һаумыһығыҙ! Кисә үк килгәйнем. Юлда арытылған, шуға килә алманым. Ауылда һеҙҙән башҡа тере йән ҡалмаған да. Тоҙ кәрәк ине.

П и т е р. Һа! Тағы ла бер марсиянин. Тоҙ эҙләп килгән.

Т и м у р. Һаумы, ҡыҙым! Әллә бөтөнләйгә ҡайттыңмы?

Ә л ф и ә. Шулайыраҡ уйланыҡ әле. Ғайса бер айҙан ғына ҡайта. Мин донъяны рәтләштерә торайым тинем.

Ф э н и л. Һаумы, Әлфиә апай. Бик дөрөҫ уйлағанһығыҙ. Бына мин дә ҡайтырға булдым әле. Ниндәй матур ауылыбыҙҙы ташлап киткәнбеҙ.

Р е г и н а. Әйттем бит. Тыуған яҡ тарта ул үҙенә. Бына күрерһегеҙ. Тиҙҙән ауылыбыҙ гөрләп торор.

Ә л ф и ә. Беҙ үҙебеҙҙең эшебеҙҙе асырға уйланыҡ.

Тимур. Сер булмаһа, ниндәйерәк эш икән ул?

Әлфиә. Ғайса тегендә лә фермер булды. Бында ла ер алып ашлыҡ сәсергә уйыбыҙ.

Тыштан Буранбайҙың баян тауышы ишетелә. Тиҙҙән үҙе лә күренә. Ул яңы йыр йырлай.

Буранбай. Әлфиә, һин ҡайттыңмы? Иртәгә үк клубҡа кил. Һинең кеүек йырсылар һирәк. Яңы йыр өйрәтәм. Үҙем сығарҙым.

Фәнил. Йә, беҙгә лә йырлап ишеттер.

Буранбай йырлай.

**Һағынып ҡайтам**

*(Йыр)*

*Мәңгелеккә тик бер генә*
*Бирелә беҙгә тыуған яҡ,*
*Бала саҡтың шау-шыуына,*
*Мөхәббәткә тулған саҡ.*

*Ҡушымта:*
*Тыуған ягым, тыуған ягым,*
*Мөхәббәткә тулған ягым,*
*Гөрләп үткән бала сагым*
*Һагынып ҡайтам тагын.*

*Йәне булган һәр кем ҡайта*
*Һагынып тыуган ягын,*
*Мәтрүшкәләр йыйган ялан,*
*Сейәләр йыйган тауын.*

*Ҡушымта шул уҡ.*

*Һыу шикелле ага гүмер,*
*Туктатыр саралар юҡ,*
*Тыуган яҡка ҡайтыр юлды*
*Ҡыйырлыҡ аралар юҡ.*

**Шаршау**



# ЙОНДОҘЛО КҮПЕР

*Фантастик мелодрама*

## Ике бүлектә

ҠАТНАШАЛАР:

Зөлхизә
Айҙар
Рух — икенсе планета егете
Астра — икенсе планеталағы ҡыҙ
Шат — икенсе планеталағы егет
Фәриҙә
Таңһылыу — 1-се ҡыҙ
Әлфиә — 2-се ҡыҙ
Зәлифә — 3-сө ҡыҙ
4-се ҡыҙ

## Беренсе бүлек

### Беренсе күренеш

Зөлхизә һәм ҡыҙҙар.
Ҡыҙҙар киске уйынға йыйылған. Аулаҡҡа. Кемдер бәйләм бәйләй, кемдер сигеү сигә. Стеналағы кәкүкле сәғәт 12-не күрһәтә.

Зәлифә. Тулды! Башланыҡ, ҡыҙҙар!

Бер түңәрәккә теҙеләләр. Күмәкләп:

*Юрағаным юш килһен,*
*Теләктәрем ҡуш килһен,*
*Юра, юра изгелек,*

*Алға сыкһын тиҙ генә,*
*Кемгә ниндәй кейәү килә*
*Беҙгә кәрәк белергә!*

Таңһылыу. Йә, иң тәүҙә кемгә кейәү юрайбыҙ?

Ҡыҙҙар, шырҡылдашып, бер-береһенә ҡарашалар. Тәүгә башларға береһе лә ҡыймай.

Фәриҙә. Әй, бешмәгәндәр! Һеҙҙән булмаҫ, булһа ла тормаҫ. Әйҙәгеҙ, миңә!

Ҡыҙҙар бер тында «Фәриҙә» тип ҡысҡыралар ҙа, барыһы ла шым ғына кире урындарына ултырып, көтә башлайҙар. Бер аҙҙан урамда ҡар шығырлағаны ишетелә.

Әлфиә. Ана, ишеттегеҙме? Әйҙә...

Ҡыҙҙар йүгереп килеп тәҙрәгә ҡаплана.

Зәлифә. Бер нимә лә күренмәйсе?

Таңһылыу. Яҡшылап ҡарайыҡ әле. Əһә, ана, ҡарағыҙ, килә, килә!

Зөлхизә. Кем килә?

Таңһылыу. Ниңә, Фәриҙәгә кейәү килә!

Тыштан ат тояғы тауышы ишетелә.

Зәлифә. Булды, ҡыҙҙар, ат китеп бара... *(Тамағын ҡырып ала.)* Һым! Ултырышайыҡ.

Ҡыҙҙар урындарына ултырышалар.

Зәлифә. Фәриҙә, һин өндәшмәйһең. Юғиһә, барыһын да яңынан башларға тура киләсәк.

Фәриҙә башын һелкә.

Таңһылыу. Беҙҙең Фәриҙәбеҙҙең буласаҡ кейәүе ошо тирәнән буласаҡ.

Әлфиә. Ат шикелле эшсән, егәрле булыр.

Зәлифә. Мыкты кәүҙәле, көслө була инде...

Зөлхизә. Ҙур ҡара күҙле, сибәр...

Таңһылыу. Аттан төшмәҫме икән?

Әлфиә. Ниңә, көтөүсе була инде этеүһә.

Зәлифә. Əһә, түбәнге остан килә бит был ат. *(Көлөшәләр.)*

Фəриҙə. Етəр, етəр! Мин риза! Киттек артабан!

Зəлифə *(Фəриҙəнең янбашына ҡағылып үтə.)* Күрҙеңме?

Уртаға Зəлифə сыға. Ҡыҙҙар Зəлифəне уратып алалар ҙа, барыһы бер юлы «бер, ике, өс» тигəс, «Зəлифə» тиҙəр ҙə урындарына ултыралар. Бер аҙҙан урамда эт өргəн тауыш ишетелə.

Таңһылыу. Булды, булды! Ишеттегеҙме?

Зəлифə үпкəлəп артына боролоп ултыра.

Əлфиə. Зəлифə, нимəгə үпкəлəргə инде. Был бит уйын ғына.

Фəриҙə. Белəһеңме, Зəлифə, һинең буласаҡ кейəүең эт шикелле һиңə тоғро буласаҡ.

Зөлхизə. Йортоноң именлеген күҙ ҡараһылай һаҡлар.

Таңһылыу. Өрһə лə, һиңə яратып ҡына өрөр.

Əлфиə. Һунарсы булыуы ла ихтимал.

Зəлифə. Ярай.

Артабан «Əлфиə», тиҙəр — тышта ҡаҙ ҡаңҡылдай.

Фəриҙə. Затлы тоҡомдан, тəпəшəк буйлы...

Зөлхизə. Ҡош-ҡорт көтөргə яратыусы...

Зəлифə. Хəстəрлекле хужа...

Əлфиə. Булды!

Ҡыҙҙар «Таңһылыу» тиҙəр. Тыңлайҙар. Бер аҙҙан шыйлап машина туҡтаған тауыш ишетелə.

Фəриҙə. Əллə-лə, беҙҙең Таңһылыуҙы бик алыҫтан килеп алып китмəкселəр.

Зəлифə. «Мерседеста», эйеме?

Əлфиə. Улай булғас, бик бай була инде.

Зөлхизə. Үҙенə күсереп алып китерме икəн?

Фəриҙə. Бай була тороп, беҙҙең ауылда йəшəмəҫ инде.

Əлфиə. Эш байлыҡтамы ни, күңеле бай, изге булһын.

Зəлифə. Их, минең дə кейəүем бай булһа, матур булһа, нисек бəхетле булыр инем.

Таңһылыу хыялдарға бирелеп өндəшмəй тик ултыра.

Фəриҙə. Таңһылыу, ниңə өндəшмəйһең? Һинең кейəүең тураһында һөйлəй торғас, хəҙер таң ата бит. «Булды» йə «ярай» тип əйт. Атыу туҡтарға ярамай ҙа инде.

Т а ң һ ы л ы у. Ярай. Һеҙ миңә ҡунаҡҡа килерһегеҙ. Мин һеҙгә тәмле бәлештәр бешерермен...

Ә л ф и ә. Юраһаныбыҙ юш килһен, тип, тышҡа сығып, ҡар һибешәбеҙме, ҡыҙҙар?

З ә л и ф ә. Эйе шул. Әйҙә, әйҙә, таң атмаҫ борон һибешеп ҡалайыҡ.

Барыһы ла тышҡа сығырға йыйына башлай. Фәриҙә бер мөйөштә бойоҡ ултырған Зөлхизәне күреп ҡала.

Ф ә р и ҙ ә. Уй, ҡыҙҙар, беҙ бит Зөлхизәгә кейәү юрарға онотторҡ. Ниңә үҙең өндәшмәйһең?

Т а ң һ ы л ы у. Эйе шул. Ҡыҙҙар, улай булмай, килегеҙ. Зөлхизәгә лә кейәү юрайбыҙ.

З ә л и ф ә. Эй, Зөлхизә йәш бит әле. Уға кейәүгә иртәрәк. Икенсе юлы...

Т а ң һ ы л ы у. Юҡ! Ултырығыҙ!

Ф ә р и ҙ ә. Башланыҡ! *(Ҡыҙҙар кире ултырыша ла күмәкләп «Зөлхизә» тип ҡысҡыралар.)*

Тыңлайҙар. Бер тауыш та ишетелмәй.

З ә л и ф ә *(сабырһыҙланып)*. Әйттем бит, уға иртәрәк, тип.

Ә л ф и ә. Шым! Барыбер ҡасан да уға ла кейәү кәрәк.

Тыңлайҙар. Тауыш юҡ. Таңһылыу ымлап ҡына ҡыҙҙарҙы тәҙрә янына саҡыра. Тәҙрәнән ҡарайҙар.

З ә л и ф ә. Мин бер нимә лә күрмәйемсе?

Ф ә р и ҙ ә. Туҡтағыҙ, шым! Мин бер моң ишетәм!

Т а ң һ ы л ы у. Мин бер ни ҙә ишетмәйемсе?

Ә л ф и ә. Мин дә бер моң ишетәм!

З ә л и ф ә. Юҡ, мин ишетмәйем. Моғайын, күрше Айҙар магнитофонын тоҡандырғандыр.

Моңло көй ишетелә.

Ф ә р и ҙ ә. Уй, ҡыҙҙар, күрҙегеҙме! Анауында бер йондоҙ атылды!

З ә л и ф ә. Һы, Зөлхизәнең кейәүе йондоҙҙан төшә, тип әйтергә теләйһеңме?

Т а ң һ ы л ы у. Мин дә күрҙем, ҡыҙҙар! Әллә, ысынлап та, һинең кейәүең йондоҙҙан булырмы икән?

З ә л и ф ә. Уй, һантый, әллә иҫәрләнеп бараһыңмы?

Әлфиә. Йондоҙҙан булһа ни? Уф, ҡыҙҙар, күргем килә...

Зәлифә. Булмай, булмай. Йондоҙҙа кешеләр юҡ, белдеңме? Әкиәт һөйләмәгеҙ.

Зөлхизә. Әкиәт түгелсе? Мин ышанам. Шул тиклем күп йондоҙар араһында мотлаҡ кешеләр барҙыр? Ҡайҙа икәнен әйтәйемме?

Ҡыҙҙар, ҡыҙыҡһынып, «Йә, әйт, әйт!»

Зөлхизә. «Ҡош юлы» тигән йондоҙлоҡта улар. Мин бәләкәй саҡта өләсәйем шулай ти торғайны.

Ҡыҙҙар уңайлап ултырып тыңларға әҙерләнә.

Зөлхизә. Борон заманда беҙҙең ергә йондоҙҙан бер егет төшкән, ти. Ер ҡыҙына ғашиҡ булған да уны үҙенең йондоҙона алып киткән, ти. Осоп барып етер өсөн икеһе лә аҡҡошҡа әйләнгәндәр. Киң йыһанда бер-береһен юғалтмаҫ өсөн оҙон арҡанға йәбешкәндәр. Бер заман ҡыҙҙың ҡулы талған. Егет борсолмаһын тип әйтмәгән. Тамам арығас, ҡыҙ арҡанды ысҡындырған икән, алыҫҡа осҡан да киткән, ти. Егет быны күреп ҡыҙға ҡысҡырған: «Ҡаурыйҙар эҙенән осорһоң. Мине табырһың!» — тип әйткән дә ҡауырһынын өҙөп алып ташлай-ташлай ары осҡан. Ҡыҙ, артта ҡалһа ла, һис аҙашмай, ҡауырһындар теҙелгән юл буйлап егете артынан барып еткән йондоҙға. Бик бәхетле йәшәгәндәр улар. Торабара баяғы ҡауырһындар йондоҙға әйләнгәндәр, ти. Кешеләр шуға был йондоҙҙар теҙмәһен «Ҡош юлы» тип атай башлағандар. Ҡош юлында, имеш, икенсе планеталарға алып сыға торған күпер бар, тиҙәр.

Таңһылыу. Иҫ китмәле! Әйҙә, беҙ ҙә сығып ҡарайыҡ! Бәлки, күперҙе лә күрербеҙ?

Зөлхизә. Ҡош юлындағы серле күперҙе бөтә кешеләр ҙә күрмәй икән шул.

Әлфиә. Ә-ә-ә, теге телескоптан ғына күренәме?

Зөлхизә. Өләсәйем әйтә, был серле күперҙе бер-береһенә ғашиҡ булғандар ғына күрә ала, ти.

Фәриҙә. Уф, тиҙерәк ғашиҡ булғым килеп киттесе?

Зәлифә. Минең дә.

Таңһылыу. Улайһа, әйҙә бергәләп сығып Ҡош юлын ҡарайыҡ. Теләктәр теләйек. Өйҙә тик ултырып ғашиҡ булып булалыр шул?

Әлфиә. Әйе шул. Сыҡтыҡ!

Ҡыҙҙар йәһәтләшеп тышҡа сығалар. Зөлхизә генә тороп ҡала. Тәҙрәнән йондоҙҙарға ҡарап тора.

Зөлхизә. Йондоҙло күпер! Ҡош юлы! Күпме ғашиҡтар айлы төндәрҙә өмөт тулы ҡараштары менән, ҡош юлына теклләп, хыялындағы мөхәббәткә юл — йондоҙло күперҙе эҙләй. *(Йырлай.)*

*Ғаләмдә йондоҙҙар,*
*Әйтәһе һүҙем бар,*
*Ҡаурый ҙа ҡанатлы хистәрем.*
*Ҡош юлы буйынан,*
*Хыялда, уйымда,*
*Атлайым иртәһен, кистәрен.*
*Кем һуң һин, яҙмышым?*
*Ишетәм таныш моң.*
*Хистәрем — ҡош юлы, моң юлы.*
*Кил генә, мин көтәм,*
*Моңланам кис, иртән,*
*Көтмәҫтән атылыр йондоҙом.*

Йырлап бөткәс, шиғыр әйтә.

Зөлхизә.

*Мин ышанам һинең килереңә,*
*Берҙән-берем, һөйгән йәрем минең.*
*Ер йөҙөндә әгәр булмаһаң,*
*Кил һин айҙан,*
*Йондоҙҙарҙан кил һин!*
*Хыялдағы йәрем, кил генә!*

Ут һүнә. Моңло көй ишетелә. «Йондоҙло күпер» көйө.

## Икенсе күренеш

Ауыл күренеше. Ҡоҙоҡ. Ҡыуаҡтар. Арттараҡ кескәй ялан. Ялан уртаһына ялтыр шар төшә. Шар уртаға ярыла. Унан Рух килеп сыға. Ер кешеләре кейемендә. Ул бында махсус йомош менән килгән — ерҙең, һыуҙың өлгөләрен алырға. Ер кешеләренең хис-тойғолары динамикаһын тикшерергә тейеш. Быны өсөн ул кешеләргә махсус һорауҙар бирә. Уларҙың нимә тип яуап биреүҙәрен яҙып ала. Рух иплəп кенә ҡоҙоҡ янына килә лә һыуға бер әйбер төшөрә. Уны кире алып өлгөрмәй, алыҫтан Зөлхизәнең йырлағаны ишетелә. Рух тыңлай. Тауыш бында яҡынлашҡас, ҡыуаҡ артына йәшенә. Зөлхизә,

йырлай-йырлай килеп, ҡоҙоҡҡа биҙрә төшөрөп ебәрә. Биҙрәне күтәрә башлай. Шул саҡ икенсе яҡтан, бер биҙрә генә тотоп, Айҙар сыға.

А й ҙ а р. Туҡта, Зөлхизә! Үҙем! *(Йәһәт килеп биҙрәне үҙе күтәрә башлай.)*

З ө л х и з ә. Әллә тәҙрәнән минең һыуға килгәнде генә ҡарап тораһың, Айҙар? Кисә лә мин дә килдем, һин дә...

А й ҙ а р. Юҡ та. Ана быҙау, һыу һорап, йәнгә тейә.

Айҙар биҙрәләрҙең икеһенә лә һыу тултыра.

А й ҙ а р. Өйөгөҙгә үк алып барайыммы?

З ө л х и з ә *(шаян)*. Әйҙә һуң. *(Айҙар биҙрәләрҙе тотоп сыға башлай.)* Айҙар? Ә быҙауҙы үҙем һуғарайыммы ни?

Айҙар уңайһыҙланып туҡтап ҡала.

А й ҙ а р. Алып барам, тигәс, алып барам инде. Быҙау көтөп торор. *(Һыр бирмәй сығып китә.)*

З ө л х и з ә. Һыуҙарҙы аласыҡ янына ултырт. Мин хәҙер.

З ө л х и з ә *(үҙ алдына)*. Һы, хәҙер, көтөп тор! Һыуҙан икәүләшеп ҡайтып килгәнде күрһәләр, иртәгә бөтә ауылға таралыр. *(Ҡыуаҡ янына килә.)* Ах, гөлйемеш сәскә атҡан икән? Өләсемде ҡыуандырайым әле. Иртәгә уның тыуған көнө. Гөлйемеш сәскәләрен бигерәк ярата ул. *(Йыя башлай.)* Уф, сәнсә, ҡәһәрең. *(Йыйған саҡта беләҙеген юғалта. Сәскәләрҙе йыйып бөткәс, уларға һоҡланып сәхнә уртаһына килә. Ҡулындағы беләҙегенең береһе юҡ икәнен шәйләп ҡала. Йәһәт килеп ҡоҙоҡ янынан, аҙаҡ гөлйемеш ҡыуағы янынан эҙләштерә башлай.)* Ҡайҙа төштө икән? Былтыр өләсем үҙе бүләк иткәйне. Ҡәҙерләп кенә йөрөт, тине. Хәҙер нимә тип әйтәм инде. *(Иларға етешә. Ҡабат ҡыуаҡ янына килһә, унда ботаҡ һынған тауыш ишетелә. Зөлхизә ҡурҡып артҡа сигенә лә йүгереп сығып китә.)*

## Өсөнсө күренеш

Рух ҡыуаҡ артынан килеп сыға.

Р у х. Был сәскәле ҡыуаҡты «Гөлйемеш» тинеләр. *(Кейемендәге бер кнопкаға баҫа ла һүҙҙәрҙе яҙып ала.)* Гөлйемеш сәскәһе розаныҡы кеүек. Хуш еҫле. Алһыу төҫтә. Тыуған көнгә бүләк итәләр. *(Ҡоҙоҡ янына килә.)* Һыу өл-

гөһөн алырға кәрәк. *(Бая төшөргән әйберен тартып сығара ла янындағы сумкаға һалып ҡуя.)* Был тирәләге һыуҙа көмөш күп. Көмөшлө һыуҙы эскән кешеләр изге күңелле, ауырыуға бирешмәҫ була. Тәмләп ҡарайым әле? *(Һыуҙы услап эсеп ҡарай.)* Шә-ә-п! Күберәк алып ҡайтҡанда ла була. *(Биҙрәне ҡоҙоҡҡа төшөрә. Һыуҙы күтәрә лә Айҙар ҡалдырған биҙрәгә ҡоя. Ул тишек биҙрә булып сыға. Рух биҙрәне күтәреп ҡарай ҙа бик ныҡ аптырап баяғы диктофонына әйтеп яҙҙырып ҡуя.)* Быҙауҙарға һыуҙы тишек биҙрәнән эсерәләр. Сәйер автопоилка. Шәп! Бында бик аҡыллы, башлы кешеләр йәшәй. Әлеге көмөш касафатылыр. *(Ҡапыл нимәлер иҫенә төшөп.)* Көмөш. Саф көмөш күрҙем бит бая. *(Ҡыуаҡ янына килә лә уның араһына инеп ерҙән көмөш беләҙек килтереп сығара. Беләҙекте тешләп ҡарай.)* Саф көмөш. Бындағы ҡыҙҙар көмөшлө һыу ғына эсмәй, хатта көмөштө беләктәренә лә кейеп йөрөйҙәр. Моғайын, күңелдәре лә матурҙыр уларҙың. Миңә яратыу, көнләшеү, мауығыу кеүек хистәрҙең тәбиғәтен тикшерергә ҡушылғайны. *(Кеҫәһенән блокнот һымаҡ әйбер сығарып, төрлө кнопкаларына баҫып ҡарай.)* Яратыуҙың тәбиғәтен асыҡлар өсөн был тойғоно үҙеңә кисерергә кәрәк, тиелгән инструкцияла. Мин бер һылыуға ғашиҡ булырға тейеш, моғайын. Әгәр был ҡыҙ оҡшаһа, уның күңелен яулар өсөн уға изгелек эшләргә, ярҙам итергә кәрәк. Ярҙам итергә. Әһә-ә-ә, Айҙар, тимәк, Зөлхизәгә ғашиҡ булған, уны ярата, шуға биҙрәләрен тотоп китте. *(Блокнотын ҡарай.)* Әгәр ҙә егет кенә түгел, ҡыҙ ҙа уға ғашиҡ булһа, был мөхәббәт тип атала. Инде хәҙер Зөлхизәнең Айҙарҙы яратамы-юҡмы икәнен белергә кәрәк. *(Рух беләҙекте ҡоҙоҡ ситенә һала ла үҙе ҡыуаҡ артына йәшенә.)*

## Дүртенсе күренеш

Борсоулы ҡиәфәттә Айҙар килеп сыға. Туп-тура ҡыуаҡ янына килә лә беләҙекте эҙләй башлай.

Айҙар. Ҡайһы тирәлә йыйҙы икән сәскәне? *(Таба алмай.)*

Оҙаҡламай Зөлхизә лә сыға.

Зөлхизә. Таптыңмы?

А й ҙ а р . Юҡ! Ҡайҙан йыйҙың?

З ө л х и з ә . Мин бит ҡайҙа юғалтҡанымды белмәйем. Бәлки, шундалыр, тинем. Табыш инде?

А й ҙ а р . Һин ҡоҙоҡ эргәһен ҡараштыр!

Зөлхизә ҡоҙоҡҡа килә һәм беләҙеген күреп ҡала.

З ө л х и з ә . Уй, Айҙар, таптым, таптым! Бына ул!

Айҙар уның янына килә. Беләҙекте ҡарай.

А й ҙ а р . Ҡайһылай матур! Ырып сәскәләр төшөрөлгән. Саф көмөштән! Ҡайҙа үҙем кейҙерәм беләгеңә. *(Беләҙекте алып кейҙерергә итә. Ҡапыл яңылыш уны ҡоҙоҡҡа төшөрөп ебәрә.)* Аһ!

З ө л х и з ә *(ярһып)*. Ах! Табылды ла юғалды! Һин юғалттың, һин! Бар хәҙер ҡоҙоҡҡа төшөп алып сыҡ!

А й ҙ а р . Н-нисек? Тәрән бит!

З ө л х и з ә . Унда минең эшем юҡ! Үҙең төшөрҙөң, үҙең алып бир! *(Иларға итә.)*

А й ҙ а р . Һин ошонда көтөп тор! Мин хәҙер, берәй ырғаҡ килтерәм дә, алырбыҙ. *(Йүгереп сығып китә.)*

З ө л х и з ә . Яратам, имеш. Арттан быҙау шикелле эйәреп йөрөү яратыу буламы? Бешмәгән! *(Һыу тултырылған биҙрәне күреп ҡала. Уның һыуы тишегенән ағып саҡ ҡына ҡалған.)* Вәт алдаҡсы. Быҙауға һыу кәрәк, имеш. Мине күреп тишек биҙрәне тотҡан да йүгергән. *(Биҙрәне тибеп осора.)* Аһ! Ҡайҙа ул китаптарҙа, шиғырҙа, йырҙарҙағы ысын мөхәббәт. Бына бит ул мине үҙенсә ярата, ә минең уны күрһәм, йәнем көйә. Ә бит ысынлап яратһаң, һинең ул егетте күргән һайын күргең килеп торорға тейеш. *(Ҡоҙоҡҡа ҡарап.)* Әллә Айҙарҙы көтөп тормай үҙемә төшөп алырғамы беләҙекте. Хәҙер ана мин ярҙам иттем, һин миңә иғтибар ҙа итмәйһең, тип йәнгә тейер. *(Шул саҡ ҡыуаҡ артынан тауыш ишетелә.)*

Р у х . Туҡта, Зөлхизә! Ашыҡма! Беләҙекте һиңә үҙем алып бирәм.

З ө л х и з ә *(ҡурҡып ҡына)*. Һин кем? Гөлйемеш ҡыуағының эйәһеме?

Р у х . Мин — егет. Һиңә ярҙам иткем килә.

З ө л х и з ә . Ә ниңә күренмәйһең?

Р у х . Һин ҡурҡмаһын, тием. Ҡурҡма! Мин һиңә зыян итмәм.

Ҡыуаҡ артынан Рух килеп сыға. Ҡоҙоҡка килә лә уның өҫтөнә усын ҡуя һәм уның усында беләҙек пәйҙә була.

Рух *(усын асып)*. Бына! Рәхим итегеҙ! Һеҙҙекеме?

Зөлхизә *(һаман ғәжәпләнеп)*. Һеҙ, һеҙ күрше ауылданмы?

Рух. Юҡ! Мин икенсе илдән.

Зөлхизә. Илдән? Илдең исеме бармы?

Рух. Бар. Аҙаҡ әйтермен. Тик һин минән ҡурҡма! Зыян итмәм. Бер һорау бирергә мөмкинме?

Зөлхизә. Мөмкин.

Рух. Һин Айҙарҙы яратаһыңмы?

Зөлхизә. Унда һеҙҙең эшегеҙ юҡ! Теләһәм, яратам, теләмәһәм, юҡ!

Рух. Икенсе һорау. Һинең уға изгелек эшләгең киләме?

Зөлхизә. Нисек?

Рух. Мәҫәлән, Айҙарҙы кемдер берәү ҡыйырһыта башлаһа, һин уны яҡлап ярҙамға килер инеңме?

Зөлхизә. Әлләсе? Егет кеше үҙен үҙе яҡларға тейеш тә инде.

Рух. Һин уны ҡыҙғанаһыңмы?

Зөлхизә. Кемде?

Рух. Айҙар икенсе бер ҡыҙ янында торһа, һиңә ҡыйын буламы?

Зөлхизә. Юҡ шикелле. Оҙағыраҡ тора бирһен. Исмаһам, минең янға килмәҫ, тип уйлайым.

Рух. Рәхмәт!

Зөлхизә. Нимәгә?

Рух. Ихлас яуаптарың өсөн.

Зөлхизә. Хәҙер бында Айҙар килә. Һиңә китергә кәрәк.

Рух. Ни өсөн?

Зөлхизә. Ул һине... һиңә ҡыйын буласаҡ.

Рух. Нисек?

Зөлхизә. Ул мине... ҡыҙғанасаҡ. Һиңә зыян итеүе бар.

Рух. Һин минең йәшенеүемде теләйһеңме?

Зөлхизә. Эйе.

Рух. Ярай, улайһа. *(Ҡыуаҡ артына йәшенә.)*

## Бишенсе күренеш

Айҙар килеп инә. Ҡулында оҙон тимер.

Айҙар. Ошоноң менән алып булыр. *(Сыбыҡты коҙоҡҡа төшөрә, болғай.)* Эләктереп кенә алайым да...

Зөлхизә, уның күҙе алдынараҡ ҡулын ҡуйып, беләҙекте күрһәтеп тора.

Айҙар. Әллә? Кем алып бирҙе?

Зөлхизә. Һинән алда өлгөрҙөләр инде. Оҙаҡлап йөрөмәҫкә ине.

Айҙар. Кем? Әйт инде?

Зөлхизә. Күргең киләме?

Айҙар. Килә? Нисек алды ул?

Зөлхизә. Әй, кем? Исемеңде һорарға онотканмын бит. Сыҡ әле? Һине Айҙар менән таныштырам.

Рух килеп сыға. Айҙарға килеп ҡулын һуҙа. Айҙар ҡулын бирмәй.

Айҙар. Сәләм, егет! Һинең дә Зөлхизәгә күҙең төштөмө?

Рух. Күҙем төшмәне. Беләҙеге төштө.

Айҙар *(тибелгән биҙрәне күреп)*. Ә минең биҙрәне кем типте? Һинме? Ҡайҙан килдең? Ҡалананмы? Беҙҙең ҡыҙҙарҙы аҙҙырырға уйлаһаң тай бынан, белдеңме? *(Рухтың муйынына йәбешә.)* Һеҙҙең өсөн беҙҙең ауылда ҡыҙҙарыбыҙ юҡ. Үҙебеҙгә лә етмәй.

Рух. Һин Зөлхизәне ҡыҙғанаһыңмы?

Айҙар. Башҡа берәй егет уның янына килһә, миңә ҡыйын була. Һин ни өсөн килдең бында?

Рух. Былай ғына. Зөлхизәнең беләҙеге төшөп киткәнен күрҙем дә ярҙам иттем. Ярамаймы?

Айҙар. Ярамай. Зөлхизә һине яратмай.

Рух. Һине лә.

Айҙар. Ә, һеҙ бында һөйләшеп торҙоғоҙмо ни? Уның ратыуы миңә нимәгә. Иң мөһиме – мин уны яратам. Тағы ла нимә тураһында һөйләштегеҙ?

Зөлхизә. Айҙар, етәр! Нисек оялмайһың?

Айҙар. Һин дә уны яҡлашаһыңмы? Яҡшы саҡта тай бынан, егет.

Зөлхизә. Һин уға рәхмәт әйтергә тейешһең. Ул булмаһа, нисек ала инек беләҙекте?

Рух менән Зөлхизә бер-береһенә яратып ҡараша.

Зөлхизә. Рәхмәт, егет. Һау бул!

Рух. Һау булығыҙ! Һинең тауышың моңло. Күберәк йырла.

Айҙар. Бар, бар, юлыңда бул!

Рух сығып китә.

Айҙар. Әйҙә, һине өләсең көтә. Самауыр ҡуйырға сыра юнып бирәм. Ҡайһы ауылдан тине?

Зөлхизә. Белмәйем. Әйтмәне бит...

Һөйләшә-һөйләшә сығып китәләр.

Ут һүнә.

## Алтынсы күренеш

Икенсе көн. Рух Зөлхизәнең һыуға килгәнен көтөп ултыра.

Рух. Бөгөн дә килһә ярар ине. Һорауҙарымды биреп бөтмәнем. Ҡайтырға биш көн генә ваҡыт ҡалды. Был ауылда бөтә ҡыҙҙар ҙа шулай матур йырлаймы икән? Ниндәйҙер таныш моң? Ҡайҙа ишеттем икән. Иҫләмәйем.

Алыҫтан Зөлхизәнең йырлағаны ишетелә. Зөлхизә килгәнсе, Рух өҫ-башын рәтләштереп ала. Ҡоҙоҡтан саҡ ҡына ситкәрәк барып баҫа. Зөлхизә килеп инә лә Рухты күреп туҡтап ҡала.

Зөлхизә. Һаумыһығыҙ!

Рух. Һаумы, һылыу!

Зөлхизә *(тирә-яғына ҡаранып)*. Һеҙ... нимә? Кемде?

Рух. Һине көтөп торҙом.

Зөлхизә. Нимәгә?

Рух. Тыңларға... Йыр. Тауышың моңло.

Зөлхизә. Ә йырмы?

Рух уға яҡын килеп биҙрәләрен ала ла ҡоҙоҡ янына килә.

Рух. Һин тағы ла йырла. Мин үҙем һиңә һыу алып бирәм. Йырла. Зинһар өсөн!

Зөлхизә. Ә... һин теге ни... ошолай ауылдарҙан йырҙар яҙып йөрөйһөңмө? Кем әле... теге ни... студент. Ә... иҫләнем. Фольклор. Шулаймы?

Рух. Фольклор? Һинең йырың фольклор тип аталамы?

Рух ҡоҙоҡтан һыу ала.

Зөлхизә. Юҡ! Һин ҡалай ҡыҙыҡ ҡынаһың ул? Боронғо... ни... халыҡ йырҙары фәнни телдә фольклор тип атала. Бына тыңла...

Зөлхизә йырлай. Рух уға һоҡланып ҡарап тыңлай.

Рух. Иҫ китмәле! Һоҡланғыс! Ә һин был йырҙы кемдән ишеттең?

Зөлхизә. Өләсәйемдән. Ул мине йоҡлатҡанда, бәләкәй генә сағымда гел ошо йырҙы йырлай торғайны.

Рух икенсе биҙрәгә һыу ала ла биҙрәләрҙе йәтешләп ултырта.

Рух. Бында бөтә ҡыҙҙар ҙа шулай матур йырлаймы?

Зөлхизә. Әлләсе? *(Биҙрәләрен элеп.)* Ярай мин китәйем инде. Рәхмәт!

Рух. Нимәгә?

Зөлхизә. Һыу тултырып бирҙең дә.

Рух. Туҡта! Тороп тор. Исемең кем?

Зөлхизә. Ә минең исемем һиңә нимәгә?

Рух. Минең исемемде лә белгең килмәйме?

Зөлхизә. Кем? *(Биҙрәләрен ҡуйып.)* Әйҙә һуң, танышайыҡ. *(Рухҡа яҡын килеп, ҡулын һуҙа.)* Зөлхизә.

Рух *(Зөлхизәнең ҡулын тота. Зөлхизә тертләп китә)*. Нимә булды?

Зөлхизә. Ток һуҡҡан кеүек...

Артабан улар күҙ ҡарашы менән һөйләшәләр. Тауыш сәхнә артынан ишетелә.

Рух. Иртәгә ошо ваҡытҡа киләһеңме?

Зөлхизә. Һин килһәң, мин дә килермен.

Рух. Мине күргәнеңде Айҙарға әйтмә.

Зөлхизә. Ҡурҡаһыңмы?

Рух. Юҡ! Мине күрергә теләүеңде белһә, һиңә насарлыҡ эшләүе бар.

Зөлхизә *(һыуҙы алып сыға башлай)*. Хуш!

Рух. Көтөрмөн.

Зөлхизә сыға. Рух яңғыҙ.

Рух. Был ниндәй мөғжизә! Ҡулдарына ҡағылыуым булды, уның биополеһы менән минеке берләште. Инде беҙ күҙ ҡарашы аша аралаша алысаҡбыҙ! Зөлхизә. Әле генә янымдан китте, ә минең уны күргем килә. Ҡасан иртәгә

тыуа инде. Туҡта! Мине йыр яҙып йөрөүсе, тине. Моғайын, ҡыумаҫтар. Зөлхизәнең өләсәһенә барып, тағы ла бер нисә йыр яҙҙырып алайым әле. *(Ашығып сығып китә.)*

## Етенсе күренеш

Бер биҙрә тотоп, Айҙар килеп сыға. Ҡоҙоҡ янына килеп ултыра. Ул да Зөлхизәне көтә.

Айҙар. Һаман юҡ. Сыҡһа ярар ине. Моғайын, бер көйәнтә һыу менән мискәләре тулмаҫ. Эх, Зөлхизә. Һин оҡшатһын өсөн нимә генә эшләйем икән? Ниңә шундай китап сығармайҙар икән? Мәҫәлән, әгәр ҙә берәй ҡыҙҙы оҡшатһаң, егет кешегә нимә эшләргә? Оҡшатам, тип әйтеп кенә яратыуыңды белгертеп булмай ҙа инде. Бешеренергә, тегенергә, хатта баҡсала кишер сәсергә өйрәткән китаптар донъя тулы. Редакцияға хат яҙып ебәрәйем әле. Ғашиҡ булған егеттәргә файҙалы кәңәштәр китабы сығарығыҙ, тип.

Алыҫтан Зөлхизәнең көлгән тауышы ишетелә. Йылмая-көлә килеп сыға.

Зөлхизә. Уф, үлтерәләр инде, көлдөрөп.

Айҙар. Нимә булды? Әйҙә мин дә көлөшәйем.

Зөлхизә. Тегендә... уф... үләм! Өләсәйем... бая ғына аяғым ауырта, баҫа ла алмайым, тип ултыра ине, әле таҡмаҡ әйтеп бейеп йөрөй.

Айҙар. Ҡыҙыҡ булған икән шул. Минең өләсәйем дә, «Юлдаш»тан бейеү көйө бирһәләр, бейеп китә.

Айҙар ҡоҙоҡтан һыу ала ла уны Зөлхизәнең биҙрәләренә ҡоя.

Зөлхизә. Өләсәйемде Рух бейетә лә инде.

Айҙар. Ниндәй Рух.

Зөлхизә. Егет. Теге юлы күрҙең дә инде. Ошонда. Беләҙексе?

Айҙар. Уның исеме шулаймы? Ә ниңә һеҙҙә ул?

Зөлхизә. Өләсәйемдең йырлағанын яҙып алам, ти. Фольклор йыя шулай. Былтыр ҙа шулай йөрөнөләр бит. Иҫләйһеңме?

Айҙар. Ә... хәтеремдә. Һине лә йырлаттылар, эйеме?

Зөлхизә. Эйе. Һыу алып бир сәле?

Айҙар. Ашыҡмай тор. Саҡ ҡына һөйләшәйек тә. Хәҙер. *(Һыу ала.)* Бөгөн кис уйынға сығаһыңмы? Йылға буйына. Егеттәр менән усаҡ яғырға утын йыйып ҡуйҙыҡ. Гармунымды алып сығам.

Зөлхизә. Ҡыҙҙарҙан һорашырмын әле. Бер үҙем сыға алмайым да.

Айҙар. Ә мин кис килеп алырмын, әҙерләнеп өйҙә тор.

Зөлхизә *(нимәнелер хәтерләп)*. Уй, онотоп торам. Беҙ бөгөн мунса яғабыҙ бит. Өләсәйемде йыуындырғансы төнләй ҙә китә торған.

Айҙар. Һин булһаң, гел шулай берәй сәбәп табыр ҙа торорһоң.

Зөлхизә. Йә, ҡой һыуыңды. Нимәгә күтәреп тик тораһың ул?

Айҙар *(шуҡланып)*. Йә, кис уйынға сығам, тип әйтмәһәң, ҡоймайым.

Зөлхизә. Һы, таптың инәлтергә? *(Тулы биҙрәне икенсеһенә яртылаш ҡоя башлай.)* Миңә ярты биҙрә лә етә. *(Үсеккәнен белгертә.)*

Айҙар. Йә, ярар. Үпкәләмә, шаяртам ғына. *(Ике биҙрәне лә тултыра.)*

Зөлхизә ашығып сығырға итә.

Айҙар. Әйҙә, үҙем алып барам.

Зөлхизә *(уның буш биҙрәләренә ымлап)*. Ә тегеләр?

Айҙар. Ҡасмаҫ. Ә һин әллә Рухты күрергә ашығаһыңмы?

Зөлхизә. Юҡ. Үҙем алып ҡайтам. Кит юлдан.

Зөлхизә сығып китә.

Айҙар. Бына бит. Тағы ла килеп сыҡманы. Кискеһен өйҙәренә барып ҡарармын инде. *(Һыу алып, бойоҡ сығып китә.)*

**Һигеҙенсе күренеш**

Рух менән Зөлхизә яңғыҙ. Төнгө күкте күҙәтәләр.

Рух. Йә, онотманыңмы икән, мин йәшәгән йондоҙҙо табып күрһәт.

З ө л х и з ә. Онотманым. Хәҙер. Ана, Ҡош юлы. Уның уртаһында яҡты бер йондоҙ бар. Ул һеҙҙең ҡояшығыҙ. Һин йәшәгән Сириус уның тирәләй әйләнә.

Р у х. Сириус. Килгәнемә күп ваҡыт та үтмәне, ә мин уны һағынып өлгөрҙөм. Беҙҙең Ер ҙә шул тиклем матур! Тик унда бына һинең кеүек матур йырлаған кешеләр юҡ.

З ө л х и з ә. Ә һинең унда... кәләшең бармы?

Р у х. Кәләш? Нимә була ул?

З ө л х и з ә. Һуң, ғаилә ҡороу өсөн. Яратҡан ҡыҙыңсы?

Р у х. Юҡ. Дуҫтарым ғына бар. Астра, Мега, Шат... Астра ла икенсе планетанан килгән. Зөлхизә... *(Тулҡынлана.)*

З ө л х и з ә. Әү.

Р у х *(күккә текләп)*. Ана, бер йондоҙ атылды. Күрҙеңме?

З ө л х и з ә *(бойоҡ)*. Миңә ҡыйын.

Р у х. Миңә лә.

З ө л х и з ә. Һин иртәгә ана шул атылған йондоҙ кеүек ғаләмгә инеп юғаласаҡһың... мәңгелеккә.

Р у х. Шулай. Ә һин минең ҡалыуымды теләйһеңме?

З ө л х и з ә. Эйе.

Р у х. Ғәжәп. Минең дә һинең менән ҡалғым килә. Ысын!

З ө л х и з ә. Әгәр ҡалһаң, һин бит башҡа бер ҡасан да Сириусҡа ҡайта алмаясаҡһың. Ә Ерҙә һине аңламаҫтар. Һин бит йондоҙҙан килгән, үҙеңә урын таба алмай йөҙәйәсәкһең.

Р у х. Булһын. Һин теләһәң, мин риза.

З ө л х и з ә. Ә мин... мин рөхсәт итмәйем һиңә ҡалырға. Ерҙә һин оҙаҡ йәшәй алмаҫһың. Һинең кеүек изге күңелле кешеләр беҙҙә оҙаҡ йәшәмәй.

Р у х. Булһын.

З ө л х и з ә. Ә мин һинең оҙаҡ йәшәүеңде теләйем. Ә һин һөйлә. Сириуста нисек?

Р у х. Ундамы? Унда йәшәүе еңелерәк. Бөтә автоматика кешеләргә уңайлыҡ тыуҙырыу өсөн яратылған. Планетабыҙ ҙур түгел. Шуға бер-беребеҙ менән тығыҙ бәйләнештәбеҙ. Аҡыллы машиналар барыһын да контролдә тота.

З ө л х и з ә. Ҡыҙыҡ.

Р у х. Ә мин барыһын да һөйләп килештерә алмайым. Теләйһеңме, һине Сириусҡа алып китәм, үҙем менән.

З ө л х и з ә. Нисек? Мин бит Ер ҡыҙы?

Р у х . Әйттем бит. Беҙҙә башҡа планетанан килеүселәр ҙә йәшәй, тип. Тик...

З ө л х и з ә . Нимә, тик?

Р у х . Икенсе планета кешеһен мин бер тапҡыр ғына алып ҡайта алам. Бер генә кешене.

З ө л х и з ә . Һинең янда миңә шул тиклем рәхәт. Әллә нисек... бер нимәнән дә ҡурҡмайым, бер нимә өсөн дә борсолмайым. Һин һәр саҡ ярҙам итергә әҙерһең.

Р у х . Зөлхизә, миңә лә шулай. Рәхәт, күңелле. Иртәгә миңә ҡайтырға кәрәк. Ә мин иртәгәнең тыуыуын теләмәйем. Ниңә икән? Һине шулай башҡа бер ҡасан да...

З ө л х и з ә *(ҡосаҡлай)*. Миңә лә ҡурҡыныс... быға тиклем әле бер ҡасан да миңә шулай ҡыйын булғаны юҡ ине. Ә һин кит! Мин нисек тә...

Р у х . Һин яуап бирмәнең. Минең менән китәһеңме?

З ө л х и з ә . Ә өләсәйем? Туғандарым?

Р у х . Өләсәйеңде ҡарарға һеңлең бар. Теләһәң, аҙаҡ уны ла алып китербеҙ.

З ө л х и з ә . Ә минең ҡайтҡым килһә?

Р у х . Ҡош юлын күрәһеңме? Унда бер күпер бар. Йылына бер тапҡыр ғына асыла ул. Теләһәң, шул күперҙән кире ҡайтырһың. Хәҙер иҫәпләйем. *(Тиҙ генә кеҫәһенән бер прибор алып баҫҡылай. Ул янып-һүнеп ала.)* Һин Ерҙә ике ай ғына юғалып торасаҡһың. Тиҙҙән ул күпер асыласаҡ. Теләһәң, ҡайтырһың.

З ө л х и з ә . Ике ай? Ике айҙан минең уҡыуҙарым башлана. Өлгөрәм, эйеме? Өләсәйемә әйтәм дә, әсәйемдәргә шылтыратам да... Иртәгә килеп алырһыңмы?

Р у х . Эйе. Әҙер тор!

Айырылышалар. Моңло көй яңғырай. Рух менән Зөлхизә дуэты.

З ө л х и з ә .

*Кем һуң һин, яҙмышым,*
*Ишетәм таныш моң,*
*Йөрәгем һөйөүгә төрөнә.*
*Матурһың, батырһың,*
*Йондоҙҙай атылып*
*Инерһең күңелем түренә.*

Р у х .

*Ғаләмдә йондоҙҙар —*
*Әйтәһе һүҙем бар:*
*Ҡаурый ҙа ҡанатлы хистәрем...*

*Ҡош юлы буйынан,*
*Хыялда, уйымда*
*Атлайым иртәһен, кистәрен...*

Зөлхизә.

*Һөйөүем бөрөлә,*
*Йыһанға түгеләм —*
*Хистәрем — Ҡош юлы — моң юлы,*
*Кил генә, мин көтәм,*
*Моңланам кис, иртән,*
*Көтмәҫтән атылып йондоҙом.*

## Туғыҙынсы күренеш

Сириус планетаһы. Рух менән Зөлхизә бында килгәндәр. Интерьер экологик дизайнда эшләнгән. Әйберҙәрҙең осло мөйөштәре юҡ. Шкаф һымаҡ бер ҙур экранлы, эстән зәңгәр ут менән янған ҡоролма бар. Бер мөйөштә — компьютер. Бер яҡта оло тәҙрә. Рух Зөлхизәгә компьютерҙа нимәлер өйрәтә.

Рух. Бына — беҙҙең икебеҙҙең генә баҡсабыҙ. *(Шкафтағы экранда матур баҡса күренеше.)* Бына ошолай. Әйҙә, киттек. *(Экранда баҡса буйлап атлап киткән кеүек була. Улар шулай был планетаны өйрәнәләр.)* Оҡшаймы?

Зөлхизә. Оҡшай! Ә беҙ унда ҡасан барабыҙ?

Рух. Әле һынауҙар бөтмәгән. Һин — беҙҙең кешеләр өсөн ят әлегә.

Зөлхизә. Һинең өсөндәме?

Рух. Юҡ! Минең өсөн һин — иң яҡыны. Әйҙә, тиҙерәк үҙләштер ҙә был техниканы, һынауҙарҙы йәһәтерәк үтәйек тә, шунан...

Зөлхизә. Мин һинекеме?

Рух. Эйе! Мәңгелеккә! Ә беҙ йәшәйәсәк йортто күрһәтәйемме? *(Экранда бик күркәм йорт интерьеры.)*

Зөлхизә. Бир, йәһәтерәк өйрәнгем килә.

Тауыш ишетелә: «Рух! Һине Тазикон саҡыра».

Зөлхизә. Бар, ана саҡыралар!

Рух. Бер ҙә һинең яндан киткем килмәйсе?

Зөлхизә. Бар! Бар!

Рух. Ярай! Әгәр яңылыша башлаһаң, ошо төймәгә баҫырһың. Ярҙам итермен!

Рух сыға. Зөлхизә ихлас өйрәнә. Әле бер, әле икенсе төймәгә баҫа. Ҡыуана. Сәпәкәй итә. Тағы баҫа. Борсола. Килеп сыҡмай. Тирәяғына ҡарана башлай.

Зөлхизә. Туҡтаны. Нимәһендер яңылыштым, буғай. Рухты саҡырырғамы? Бешмәгән тип асыуланырмы икән? Әллә... бынау ҡыҙыл төймә нимәгә икән? *(Баҫа. Бер тауыш та юҡ. Тағы ла баҫа. Шул саҡ ишекте ҡағалар. Зөлхизә йүгереп бара.)*

Зөлхизә. Рух? *(Тауыш-тын юҡ.)* Рух? Һинме был?

Шат. Мин Шат. Һин бит үҙең саҡырҙың!

Зөлхизә. Саҡырҙым? Ә... эйе, яңылыш... әйҙә ин!

Шатҡа ишекте аса. Шат Рухтың дуҫ егете.

Шат. Нимә булды?

Зөлхизә. Һаумы? Булманы ла. Бына компьютер... туҡтаны.

Шат. Хәҙер. *(Компьютер янына ултыра.)* Бына булды. Өйрәнәһеңме? Шәп! Ә Рух ҡайҙа?

Зөлхизә. Тазикон саҡырҙы. Хәҙер килеп етәсәк.

Шат. Тазикон? Ә һин беләһеңме, уны нимәгә саҡырҙылар?

Зөлхизә. Хужа кеше берәй йомош ҡушалыр?

Шат. Йомош шул. Йомош. *(Кеҫәһендәге телефоны шылтырай. Ала. Тыңлай.)* Мин бында. Аңланым, борсолмағыҙ. Эшләйем. Зөлхизә, һиңә бында килмәҫкә кәрәк ине.

Зөлхизә. Мине... мин һиңә түгел, Рухҡа килдем.

Шат. Һин миңә асыуланма инде. Иғтибар менән тыңла. Ҡалғанын үҙең хәл итәһең.

Зөлхизә. Йә. Тыңлайым.

Шат. Мин һине лә, Рухты ла йәлләйем. Рухты Тазикон әле тап шуның өсөн саҡырҙы. Эксперимент тамамланыуға өс көн ҡалды. Өс көн.

Зөлхизә. Ниндәй эксперимент?

Шат. Рухты Ергә һиңә ғашиҡ булһын өсөн генә ебәргәндәр тиһеңме? Уны... нисек дөрөҫ аңлатырға. Ғөмүмән, беҙ Ерҙәге кешеләрҙе физик йәһәттән өйрәнеп бөттөк, буғай. Тик уларҙың кисерештәрен, күңел торошон, ҡылыҡтарын һаман аңлап етмәйбеҙ. Рух шуларҙы өйрәнергә тейеш ине.

Зөлхизә. Өйрәнһен һуң. Әйҙә мин дә ярҙам итәм.

Шат. Һин ярҙам итеү генә түгел, һин уның ҡорбанына әүерелдең инде.

Зөлхизә. Ни-сек?

Ш а т . Рух ерҙәге берәй ҡыҙға ғашиҡ булған кеүек ҡыланырға тейеш ине. Шунан теге ҡыҙҙың күңел торошон күҙәтергә, ҡылыҡтарының сәбәбен асыҡларға...

З ө л х и з ә . Юҡ! Юҡ! Рух мине ысынлап ярата. Шулай булмаһа...

Ш а т . Килмәҫ инеңме? Ә бит Рух ерҙә ҡалмаған, һин үҙең килгәнһең бында, шулаймы?

З ө л х и з ә . Мин дә Рухты яратам. Уның хаҡында насар һөйләргә һинең хаҡың юҡ!

Ш а т . Бар, Зөлхизә, бар! Һин Рух менән бәхетле булмаясаҡһың. Зөлхизә, әйт әле, Рух әле һинең ирендәреңә ҡағылдымы?

З ө л х и з ә *(ирендәренә ҡағылып)*. Юҡ. Юҡ, ә ниңә?

Ш а т . Яҡшы.

З ө л х и з ә . Ҡағылһа, нимә буласаҡ?

Ш а т . Йә, ярай, улай оҙаҡ ултырма. Ана, яланға сығып, ҡояшҡа ҡыҙынып ал.

З ө л х и з ә . Рух менән бергә...

Ш а т . Мин һөйләгәндәрҙе Рухҡа еткермә. Һине яҡын күргәнгә. Яраймы?

З ө л х и з ә . Тырышырмын.

Шат сығып китә.

З ө л х и з ә . Бынау дуҫы әллә нимәләр һөйләй. Үҙенә ғашиҡ булмағанға үс итеп һөйләйҙер әле. Туҡта, Рухты саҡырайым? *(Компьютерға килеп бер төймәгә баҫа. Рухтың тауышы: «Нимә булды, Зөлхизә? Йөҙөң ҡасҡан. Көт. Хәҙер килеп етәм».)*

Ишектә ҡыңғырау. Зөлхизә: «Инегеҙ!» — тип ҡысҡыра. Ишек үҙе асылып китә. Рух инә.

Р у х . Зөлхизәм, хатта ишек тә һинең тауышыңды таный башланы. Күрҙеңме? Бөтәһе лә беҙ теләгәнсә.

З ө л х и з ә . Мин теләгәнсә, тиң.

Р у х . Нимә булды? Арыныңмы? Әйҙә, ял мөйөшөнә барып ултырайыҡ. Көй тыңлайыҡ.

З ө л х и з ә *(Рухҡа яҡын килә)*. Яратаһыңмы?

Р у х . Үлеп!

З ө л х и з ә . Мин дә. Һин... алдайһың.

Р у х . Аңламайым. Әгәр яратмаһам, һине бында саҡырыр инемме?

Зөләйха. Барыбер. Һин бит әлегә мине бер тапҡыр ҙа үпкәнең юҡ!

Рух. Үбешеү генә яратыуҙы аңлатамы ни? Теләйһеңме, һине анау йондоҙға осортоп алып барам?

Зөлхизә. Ерҙә, әгәр ратһалар, үбешәләр.

Рух. Зөлхизә, миңә... ярамай.

Зөлхизә. Эксперимент бөтмәнеме?

Рух. Кем әйтте? Астра, Мега, Шат?

Зөлхизә. Үҙем шулай уйланым.

Рух. Һин бер ниндәй ҙә эксперимент түгел. Эйе, элегерәк шул уҡ Шат, Мегалар ана шулай эксперимент өсөн ер ҡыҙҙарын килтерҙеләр. Мине лә шулай уйлайҙар, ахыры. Әле Тазиконда булдым. Ул да ышанмай.

Зөлхизә. Нимәгә?

Рух. Һине ысынлап яратыуыма.

Зөлхизә. Рух, мине ташлама, йәме? Миңә ҡурҡыныс. Яңғыҙымды ҡалдырма! *(Ҡосағына һыйына.)* Мин дә һине яратам. Һин булмаһаң, йәшәүҙең йәме юғала ла ҡуя.

Рух *(ҡосаҡлап)*. Яратам! Элегерәк минең ошо йондоҙҙар араһында гел юлда ғына йөрөгөм килә торғайны, ә хәҙер бары һинең янында ғына булғым килә. Гел дә, гел дә. Бына ошолай.

Зөлхизә. Минең дә, Рух! *(Ирендәренә ҡағыла. Рух та ҡаршымай. Татлы үбешәләр. Бер аҙҙан Рух башын тотоп ситкә тайпыла. Шомло көй ишетелә.)* Нимә? Йөҙөң ап-аҡ булды? Рух... *(Янына йүгереп барырға итә. Рух уны яҡын ебәрмәй ситкәрәк китә.)*

Рух. Борсолма. Былай ғына. Хәҙер үтә ул. Мин тегендә... баҡсала һүрәт төшөрә башлағайным. Хәҙер һиңә килтереп күрһәтәм. Хәҙер. *(Йүгереп сығып китә.)*

Зөлхизә. Ҡыҙыҡ. Әллә, ысынлап та, бер ҙә үбешкәне юҡ инде?

*Сибәр егет, бер күреүҙән*
*Әсир иттең күңелемде,*
*Ҡараштарың — яҡты йондоҙ,*
*Бер ҡараһаң — түгелә моң.*

*Сәйер был моң илтә мине*
*Әкиәткә, бала саҡҡа —*
*Киләсәгем — зәңгәр диңгеҙ,*
*Күрәсәгем — ҡабырсаҡта.*

Рух килеп инә. Ҡулында һүрәт төшөрөү йәйланмаһы.

Р у х . Бына. Кил! *(Ултырғыс ҡуя.)* Бына ошонда ғына баҫ. Мин һине төшөрәм.

Зөлхизә баҫа. Рух төшөрә.

Р у х . Булды. Килеп сыҡты! *(Һүрәтенә алыҫтан ҡарап һоҡлана. Зөлхизә лә ултырғыстан төшөп, һүрәткә яҡыныраҡ килә. Рухҡа яҡынайған һайын, уның башы ныҡыраҡ ауырта һәм ул ситкәрәк китә.)* Яҡын килмә! Бына шулай ҡатып ҡал! Илаһи буй-һыныңды бына шулай төшөргөм килә. *(Әйләндереп күрһәтә.)*

З ө л ә й х а . Иҫ китмәле! Һин рәссам да икән әле. *(Яҡын килергә итә. Рух башына йәбешә. Зөлхизә туҡтап ҡала.)*

Р у х . Мин хәҙер. Һин... көтөп тор. Бергәләп баҡсаға сығырбыҙ.

Сығып китә.

З ө л х и з ә . Ҡыҙыҡ. Инде шулай үҙенә яҡын да ебәрмәҫме икән? Шат дөрөҫ әйтһә, мин бында теге тәжрибә ҡуяны кеүек булам түгелме? Оят! Оят!

Зөлхизә Шатты саҡырған төймәгә баҫа.
Ишектән Шат күренә.

Ш а т . Ышандыңмы?

З ө л х и з ә . Ә һин... ҡайҙан белдең? Беҙҙе күҙәтеп йөрөйһөңмө? Бар, юғал күҙ алдымдан.

Ш а т . Ә һин мониторҙы тоҡандыр.

Килеп баҫа. Экранда Рух постелдә ята. Уның янында Астра йөрөй. Рухтың сикәләрен һыйпай. Ниҙер һөйләй.

З ө л х и з ә . Ниндәй ҡатын ул?

Ш а т . Уның кәләше. Астра. Күрҙеңме? Мөхәббәт тигән булаһың. Рух онотто һине. Хәҙер һин бында бер кемгә лә кәрәкмәйһең.

З ө л х и з ә . Юғал күҙ алдымдан, алдайһың. Рух, Рух... һин ҡайҙа?

Шат уның янына килә. Ҡосаҡларға итә. Зөлхизә ҡаршылаша.

Ш а т . Рухҡа кәрәк булмаһа, миңә кәрәкһең һин. Әйҙә, мине ярат!

Зөлхизә. Һине? Аҡылыңдан яҙҙыңмы әллә? Ҡосаҡлашыу яратыу булалыр шул. Мин Рухтан башҡаны ярата алмайым. Кит!

Шат ысҡындыра.

Шат. Рух та Рух, имеш. Уның ни ере артыҡ! Бына мин унан күпкә сибәрмен. Йәшмен.

Зөлхизә. Иҫәрһең. Тупаҫһың. Алдаҡсыһың.

Шат. Ҡыҙыҡ икән һеҙҙең яратыу тигәнегеҙ. Ана, теләһәм баҡсалағы бөтә ҡыҙҙарҙы ла үбеп сыға алам.

Зөлхизә. Ә ни өсөн... Рухҡа үбешергә ярамай?

Шат *(ысҡындырып)*. Һине тағы ла һынап ҡарарға иткәйнем. Аңланым.

Зөлхизә. Әйт!

Шат. Үҙенән һора. *(Сығып китә.)*

Экрандан тауыш: «Зөлхизә, һине Тазикон саҡыра».

**Унынсы күренеш**

Зөлхизә Тазикон янында.

Тазикон. Һаумы, Ер ҡыҙы! Һин минең улымды ысынлап яратаһың икән, барыһын да күҙәтеп торҙоҡ. Ғәфү ит, беҙҙә шулай. Төрлө кешеләр осрай. Шуға һынап ҡарайбыҙ. Әле Рух йәшәү менән үлем мәлендә. Ерҙә берәйһенә ысын ғашиҡ булып тороп ҡалмаһын өсөн, уның мейеһенә чип ҡуйып ебәргәйнек. Ысын ратҡан ҡыҙ менән үбешкән мәлдән ул тәнде ауырттыра башлай.

Зөлхизә. Нисек ҡотҡарырға?

Тазикон. Кисә генә был мөмкин ине. Бөгөн...

Зөлхизә. Нимә булды?

Тазикон. Кемдер компьютерҙан бер көйҙө юйҙырған. Уны ауыр мәлдәрҙә тик ошо көй менән генә терелтеп була торғайны.

Зөлхизә. Ниндәй көй ул?

Тазикон. Исемен белмәйем. Бик моңло көй. Уны Ер ҡыҙы йырлай торғайны.

Зөлхизә. Әсәһеме?

Тазикон. Юҡ. Бында тороп ҡалған Ер ҡыҙы. Хәҙер мәрхүмә инде. Шуға һине саҡырҙым. Рухтың янында бул. Бәлки, терелер.

Зөлхизә икенсе бүлмәгә үтә. Унда Рух ята. Янында Астра. Зөлхизәне күргәс, ул сығып китә. Зөлхизә Рух янына килә, сәстәрен һыйпай, сикәләренән үбә лә ҡулдарын тотоп.

Зөлхизә. Рух, һин ғәфү ит мине. Шат әйткәйне. Мин һинең менән үбешергә тейеш түгел инем. Ғәфү ит, ғәфү... терел, терел генә.

*(Оҙон башҡорт халыҡ йырын йырлай башлай.)*

*Ирәндеккәй тауы бигерәк бейек,*
*Тора-тора мендем башына...*

Уның йыр тауышына Тазикон килеп сыға.
Тазикон арттан шым ғына тыңлап тора. Аҙаҡтан һулҡылдап илай.
Зөлхизә тертләп китә.

Тазикон. Ошо... ошо йыр ине. Һин терелттең улымды. *(Килеп ҡулдарынан үбә.)* Рәхмәт! Йырла, йырла... был йырҙы ул бишектән тыңлап үҫте.

Йыр дауам итә. Ут ҡараңғылана.

## Ун беренсе күренеш

Рух менән Зөлхизә. Икеһе генә.

Рух. Иҫләнем. Мин бәләкәй саҡта ерҙән килгән бер инәй миңә ошо йырҙы йырлап йоҡлата торғайны. Һинең кеүек йәш сағында килтергәйнеләр уны. Урлап алып киткәндәр. Ул минең атайыма ғашиҡ булған. Шуға уларҙың балаларын да ҡарашҡан, ярҙам иткән. Ә әсәйем бик йәшләй генә вафат булды.

Зөлхизә. Һин дә мине ғәфү ит!

Рух. Нимәгә? Мин һиңә рәхмәт әйтергә тейеш.

Зөлхизә. Һине иренемдән үптергәнем өсөн. Былай булырын белмәнем.

Рух. Эх, Зөлхизә, ниңә беҙ бер планетала ғына тыуманыҡ икән? Былай ҡаңғырмаҫ инек. Хәҙер һин, ҡайтам, ти башлайһың инде.

Зөләйха. Әллә нигә өләсәйемде нык итеп һағына башланым шул.

Рух. Әсәйеңде лә һағынғанһың.

Зөләйха. Ҡайҙан белдең?

Р у х . Аҙаҡ әйтермен. Әйҙә, бына ҡара. *(Килеп монитор янына баҫалар. Унда бер-бер артлы Урал тәбиғәте күренә.)*

Р у х . Барыһын да һинең өсөн төшөрөп алып ҡайттым.

З ө л х и з ә . Уй, матур. Ана беҙең тау. Урмандар. Уф, ҡайтҡым килеп китте.

Р у х . Әле Ҡош юлындағы йондоҙло күпер асыҡ.

З ө л х и з ә . Ҡасанға тиклем?

Р у х . Өс көн, өс төн бар.

З ө л х и з ә . Шулай әҙме? Ә ҡалһамсы? Һине кем дауалар, йырҙар йырлап?

Р у х . Мине уйлама, Зөлхизә.

Шул саҡ сирена тауышы яңғырай. Рух тиҙ генә йыйына ла китергә итә.

З ө л х и з ә . Нимә булған?

Р у х . Бер метеорит беҙҙең планетаға яҡынлап үтеп китә. Шунан һаҡланыу өсөн пушкаларҙы әҙерләргә кәрәк. Һин ҡурҡма. Инде нисәнсе йыл шулай яҡынлай ҙа беҙгә теймәй үтеп китә. Уның орбитаһы башҡа. Шулай ҙа...

З ө л х и з ә . Бар шул. Мин көтөрмөн. Ошонда ғына.

Зөлхизә, ул сығып киткәс, компьютерҙы ҡабыҙа ла нимәлер эҙләй.

З ө л х и з ә . Әһә, бына ул чип. Тәүге сигналдан һуң уның ауыртыу билдәләре кәмей, әммә көсө шулай уҡ ҡала. Кеше һаман да мөхәббәт тулҡынында булһа, тора-бара робот-кеше, йәнһеҙ ағас, үҫемлек кеүек була.

Бүлмәгә Астра-ҡатын инә. Ул Зөлхизәне күреп ҡала ла янына килә.

А с т р а . Аңланыңмы инде? Һин бында ҡалһаң, уны йәнһеҙ роботҡа әйләндерәһең.

З ө л х и з ә . Ә йырҙарым?

А с т р а . Уны яҙҙырып ҡалдырырға ла була.

З ө л х и з ә . Үҙенә нисек әйтергә? Әллә...

А с т р а . Әйтмәһәң дә була. Мин әйтермен.

З ө л х и з ә . Юҡ, мин улайта алмайым. Нисек ҡыйын булһа ла...

А с т р а . Өс көндән күпер ябыла. Ашыҡ!

Сығып китә.

З ө л х и з ә . Ашыҡ! Ашыҡ! Ашыҡ!

Сәғәт һуҡҡан тауыш ишетелә.
Тауыш.

Р у х. *Күңелдә сыңлаған һис тынмаҫ йырым һин,*
*Танһығым ҡанмаған наҙым һин.*
З ө л х и з ә. *Ҡышын да, йәйен дә, көҙөн дә күңелдә*
*Сәскәгә күмелгән яҙым һин.*

Т а у ы ш: Рух. Һинһеҙ нисек йәшәрмен һуң, бәғерем, һинһеҙ әйләнермен моңһоҙға.

З ө л х и з ә. *Төнгө күккә теклән, йыр йырлармын,*
*Барып етер ул йыр йондоҙға.*

Рух менән Зөлхизә. Хушлаша.

Р у х. Зөлхизә, мине онотма, яраймы. Бына бүләк! Иҫтәлегем итеп тоторһоң. *(Уның усына хрусталь шар һала.)* Әгәр ҙә ошо шар йылынып, балҡып китһә, мин һине иҫкә алған булам. Онотма!

З ө л х и з ә. Ә мин һиңә көмөш беләҙек бүләк итәм. Иҫеңдәме?

Р у х. Иҫемдә. Һин Айҙарҙы рәнйетмә. Һәйбәт күңелле егет ул.

З ө л х и з ә. Ярай, хуш! Рәхмәт барыһы өсөн дә!

Р у х. Үҙеңә рәхмәт!

Күперҙән өҫкә күтәрелә башлай. Әйләнә лә икеһе бер юлы бер-береһенең исемдәрен атап яңынан ҡосаҡлашалар.

Р у х. Әйтергә онотҡанмын — һиңә тағы ла бер бүләк биреп ҡайтарам. Тик уныһын ергә ҡайтҡас ҡына белерһең.

З ө л х и з ә. Рәхмәт! Хуш! Онотма!

Зөлхизә күтәрелә. Моңло көй. Алмаш-тилмәш һөйләйҙәр.

Р у х. Мин бәхетле — һине шашып һөйгән өсөн.
З ө л х и з ә. Мин бәхетле — һине уйлап көйгән өсөн.
Р у х. Мин һине һис ҡасан, һис ҡасан онотмам.
З ө л х и з ә. Күперҙәр һүтелер. Килергә юл тапмам.
Р у х. Мин һине эҙләрмен ашығып, күрергә.
З ө л х и з ә. Ғашиҡтар осраша йондоҙло күперҙә.

**Шаршау**

## Икенсе бүлек

Ауыл күренеше. Ҡоҙоҡ янында йәштәр йыйылып бейейҙәр. Ярым ҡараңғылыҡ. Зөлхизә сыға. Уны әлегә бер кем дә танымай. Бер аҙ барғас, уны бер ҡыҙ күреп ҡала ла ҡатып ҡала. Шулай кем уны күрә, шул бейеүҙән туҡтай бара. Фәриҙә, ҡыйыуланып, Зөлхизә янына килә лә уның еңенән тарта.

Фәриҙә. Зөлхизә, был һинме? *(Зөлхизә өндәшмәй.)*

1-се ҡыҙ. Юҡ, юҡ, ул беҙҙең Зөлхизә түгел. Ул инде әллә ҡасан һөйгәне менән йондоҙға китте.

2-се ҡыҙ. Осһа ни. Кире ҡайтҡандыр?

3-сө ҡыҙ. Ҡайтты, ти, әкиәт.

4-се ҡыҙ. Шулай ҙа был беҙҙең Зөлхизәгә оҡшағансы?

1-се ҡыҙ. Теймәгеҙ, ул икенсе планетанан килгән, зыяны тейер.

Фәриҙә. Әйҙә, беҙ уға исеме менән өндәшеп ҡарайыҡ. Зөлхизә!

Ҡыҙҙар бергә. Зөлхизәү!

Зөлхизә. Әү! *(Барыһы ла тертләп китә.)*

Фәриҙә. Теге Ҡош юлы күпере именме?

Зөлхизә. Имен! Шунан ҡайттым да инде мин Ергә.

Ҡыҙҙар уны ҡосаҡлап ала.

Фәриҙә. Йә, ниндәй хәбәрҙәр килтерҙең?

Зөлхизә. Мин һеҙгәме, мин һеҙгә йыһанға ла һыймаҫ оло мөхәббәт килтерҙем.

*Мин татыным мөхәббәттең*
*Илертерлек наҙ, ләззәтен,*
*Ҡолағымда мәңге сыңлар*
*«Һөйәм һине!» — тип әйткәнең.*

Фәриҙә. Улай булғас, ниңә ҡайттың ергә? Бәлки, һөйгәнең дә килгәндер?

Зөлхизә. Юҡ, юҡ, ул килмәне, ул ҡалды. Ауыр миңә уны юғалтыу.

1-се ҡыҙ. Ә мөхәббәт... бөттөмө ни?

Зөлхизә. *Юҡ, бөтмәне, бер яралғас,*
*Уның шиңә торғаны юҡ.*
*Көн дә, төн дә хистәр балҡый,*
*Йөрәк үҙе — торғаны ут.*

Фәриҙә. Кил әле, былдараҡ кил! (Фәриҙәне ситкәрәк алып китә.)

Ҡыҙҙар һөйләшә.

1-се ҡыҙ. Уф, ҡыҙҙар, минең дә ғашиҡ булғым килә.

2-се ҡыҙ. Ана, Зөлхизәнеке кеүек үҙе матур, үҙе аҡыллы егет тапһаң, һин дә ғашиҡ булырһың.

3-сө ҡыҙ. Эш матурлыҡтамы ни? Бөтә ғилләегеттең күңелендә.

4-се ҡыҙ. Теге кисәге Сәлимде иҫләйһеңме?

1-се ҡыҙ. Сәлим? Ә теге ҡап-ҡара ла тумалаҡ егеттеме ни?

4-се ҡыҙ. Эйе. Белгегеҙ килһә, кисә шул егет Фәриҙәгә...

2-се ҡыҙ. Ғашиҡ булғанмы? Ә Фәриҙәсе?

3-сө ҡыҙ. Фәриҙә лә оҡшата, ти...

Фәриҙә менән Зөлхизә инә.

Зөлхизә. Ҡыҙҙар! Беләһегеҙме, мин бында буш ҡул менән килмәнем.

1-се ҡыҙ. Әллә алтын, бриллианттар бүләк иттеме?

Зөлхизә. Унан да яҡшырағын. Бына. *(Шарҙы сығара.)* Серле шар ул. Бына ошолай күккә ҡаратып тотоп тораһың. Әгәр ҙә Рух мине иҫләһә... *(Шар яна башлай.)*

2-се ҡыҙ. Ҡарағыҙ, ҡарағыҙ. Шар эстән балҡып китте.

Зөлхизә. Күрҙегеҙме? Тимәк, минең Рухым мине иҫләй. Йондоҙҙар аша ул шулай миңә сәләмен ебәрә. «Сәләм, Рух!» Әгәр ҙә минең сәләмем уға барып етһә, йондоҙ атыласаҡ.

3-сө ҡыҙ. Әйҙә ҡарайыҡ!

Фәриҙә. Ана, бер йондоҙ атылды. Урра! Һинең сәләмең Рухҡа барып етте!

Зөлхизә сәйерһенеп Фәриҙәгә ҡарай.

Зөлхизә. Сәлим киләсәк һине күрергә бөгөн дә. Яратамы, тиһеңме? Ярата... йәнендәй күрә....

Фәриҙә. Мин һиңә бер нимә лә әйтмәнем дә инде. Уйланым ғына....

Зөлхизә бер ҡыҙ янына килә.

З ө л х и з ә. Мин дә ғашиҡ булырмынмы икән тиһеңме? Кемде яратаһың. Ә Таһирмы? Ул да оҡшата һине. Оялма. Ҡыйыу һөйләш!

2-с е ҡ ы ҙ. Һин әлегә бер кемгә лә ғашиҡ булмағанһың.

Ф ә р и ҙ ә. Ҡара әле, һин бит беҙҙең уйҙарҙы уҡый алаһың?

З ө л х и з ә. Рәхмәт, Рух! Был һинең икенсе бүләгең. Ишетәһегеҙме, күктән бер моң ағыла.

3-с ө ҡ ы ҙ. Күктән булмаһа ярар ине. Айҙар магнитолаһын ҡуйған да инде.

З ө л х и з ә. Ә ул... бындамы?

Ф ә р и ҙ ә. Айҙар! Кил әле бында!

Ҡыҙҙар Зөлхизәне йәшерәләр. Айҙар килә.

А й ҙ а р. Нимә?

Ҡ ы ҙ ҙ а р. Беҙҙе тағы ла бер баян уйнап бейетһәң, әйтәбеҙ.

А й ҙ а р. Әй, шаяртмағыҙ әле.

Ф ә р и ҙ ә. Юҡ, юҡ, шаяртмайбыҙ. Ике ай буйы көткәнең килде!

А й ҙ а р. Кем? Ысынмы? Улайһа, таңға тиклем бейетәм үҙегеҙҙе.

Ҡыҙҙар көлөшәләр. Зөлхизәне сығаралар.

З ө л х и з ә. Айҙар, һаумы? Быҙауыңды һуғарҙыңмы?

Ҡыҙҙар көлөшәләр.

А й ҙ а р. Инде башмаҡҡа әйләнде ул һине көтә торғас. Һаумы!

З ө л х и з ә. Әле генә һин магнитола ҡуйғайныңмы ул?

А й ҙ а р. Юҡсы. Мин ана тегендә егеттәр менән һөйләшеп торҙом.

З ө л х и з ә. Ҡыҙҙар, ниңәлер минең ҡолағыма бер моң ишетелә.

Ф ә р и ҙ ә. Әйҙә шым ғына тыңлайыҡ. Шымығыҙ! Ана, мин дә ишетә башланым... Уй, шундай моңло көй...

4-с е ҡ ы ҙ. Мин бер нимә лә ишетмәйемсе?

1-с е ҡ ы ҙ. Мин дә...

З ө л х и з ә. Моғайын да, тик ғашиҡтарға ғына ишетеләр моңдор ул.

Зөлхизә ҡушылып йырлай.

2-се ҡыҙ *(Фәриҙәнән)*. Сәлим йырлаймы?

Айҙар. Мин дә ишетәм ул моңдо, Зөлхизә. Мин дә ишетәм.

Йыр.

*Күңелдә сыңлаған һис тынмаҫ йырым һин,*
*Танһығым ҡанмаған наҙым һин,*
*Ҡышын да, йәйен дә, көҙөн дә күңелдә*
*Сәскәгә күмелгән хуш еҫле яҙым һин.*

Ҡушымта.
*Хыялдарҙа беҙҙе һәр саҡ бәхет көтөр —*
*Йондоҙло күпер, йондоҙло күпер,*
*Бер ҡасан да бер кем алмаҫ һине һүтеп,*
*Йондоҙло күпер, йондоҙло күпер…*

*Быуаттан быуатҡа кешеләр текләгән*
*Йондоҙло һауаға, йәр теләп,*
*Эҙләһәң, теләһәң күрергә, татырға,*
*Мөхәббәт табыла һәр кемгә.*

**Шаршау**



# ЫСЫҠТАҒЫ ҠОЯШ

*Мелодрама*

## Бер бүлектә

ҠАТНАШАЛАР:

Аҡсәскә Бирғәлина — 42 йәштә, театр актрисаһы
Арслан Мөхәмәтович Йосопов — 45 йәштә, шағир, реклама ойошмаһы етәксеһе
Алсыу — йәш ҡыҙ, 22 йәш (бер үк актриса уйнай ала)
Режиссер — (тауышы) бер үк актер уйнай ала

### Беренсе күренеш

Уртала — кресло. Төптәрәк — китап кәштәһе, кейем шкафы. Ситтә — трюмо көҙгөһө. Янында — телефон. Аҡсәскә креслола ултыра. Ҡысҡырып китап уҡый.

Аҡсәскә. *Нимә эҙләй, нимә көтә был күңел,*
*Үткәндәге үпкәләүҙәр — көл-күмер,*
*Хыял итә һәм ынтыла һөйөүгә,*
*Ашҡына гел серле утрау күрергә…*

*(Креслоға баҫып, ҡулдарын йөрәк тапҡырына ҡуйып, интонация менән уҡый башлай.)* Ашҡына гел билдәһеҙлек, шырлыҡҡа… *(Телефон шылтырай. Китапты уҡый-уҡый телефонға килә.)* Күңелем бит һағыш-зарҙа сыныҡҡан… Нимә көтә…

Аҡсәскә. Эйе, тыңлайым. Ә… эйе… әҙерләнәм. Иртәгә кис филармонияла, тинегеҙ бит, эйеме? Ятлап өлгөрәм! Шулаймы? Аңланым. Бөгөн кис — репетиция. Һау булы-

ғыҙ! *(Трубканы һалғас.)* Кейемде үҙемә һайларға, ти. *(Китап кәштәһенә килә. Бер фотоальбомды ала.)* Бәлки, ошонда берәйһе... ниндәй күлдәгем килешер икән? Спектаклдә рәхәт — нимәне әҙерләгәндәр, шуны кейәһең, ә бында... ни тиһәң дә, шағирҙың ижад кисәһе. *(Креслоға ултырып, альбомды ҡарай башлай.)* Әһә, таптым! *(Йәһәт кенә кейем шкафына ыңғайлай. Фотоальбомды япҡан саҡта эсенән бер фото төшә. Уны күрмәй. Шкафҡа килеп күлдәк һайлай. Көҙгө янына килеп, күлдәкте самалап ҡарай. Ҡыуана. Шкаф артына инеп, кейенеп сыға. Кейенгән арала шиғыр ятлай.)* Нимә көтә, нимә эҙләй был күңел, үткәндәге үпкәләүҙәр көл-күмер, хыял итә һәм ашҡына һөйөүгә... *(Ул күренмәҫ борон телефон шылтырай. Шиғыр ятлай, ятлай килеп сыға. Сәхнә күлдәге кейгән. Телефон яғына атлай. Иҙәндә ятҡан фотоны күреп ҡала. Күтәрә. Телефон трубкаһын ала. Күҙҙәре фотола.)* Трубкала тауыш: «Алло, алло, Аҡсәскә! Репетицияға...» *(Аҡсәскә бер ни ҙә өндәшмәй. Фотоға ҡарап тынып ҡала. Трубканы һала. Үҙ алдына.)* Хәҙер сығам, эйе... *(Уйланып көҙгө янына килә. Фотоны сикәһенә ҡуйып һыйпай. Көҙгө мөйөшөнә ҡыҫтырып ҡуя.)* Һин, һин ҡара, күлдәгем килешәме? Тыңла, мин... һиңә... *(Шиғыр һөйләй.)* Оҡшаймы? Һин мине бер тапҡыр ҙа сәхнәлә күрмәнең шул...

**Икенсе күренеш**

Телефон шылтырай. Сәхнәлә ут ҡараңғылана бара. Бүлмә грим бүлмәһенә әйләнә. Телефон шылтырауын дауам итә. Аҡсәскә трюмо алдында ултыра. Уның кәйефе юҡ. Киҫкен хәрәкәттәр менән йөҙөндәге гримды һөртә, алҡаларын сисә башлай.

Аҡсәскә. Уф, бешмәгән! Кеше күҙенә нисек күренәм инде? Яҡшылап ятламағас, нимәгә ҡағыҙға яҙып ҡына алып сыҡмаҫҡа?..

Телефон шылтырауҙан туҡтай. Микрофондан тауыш: «Аҡсәскә Ибраһимовна, тамашасылар һеҙҙе сәхнәгә саҡыра. Сығығыҙ!»

Аҡсәскә. Шул ғына етмәгәйне... бында оятыңдан ҡайҙа йәшенергә белмәйһең... *(Өҫтәлдә ҡайсы күреп ҡала.)* Хәҙер минең күҙемде лә астырмаясаҡтар. Уф! *(Ҡайсыны ҡулына алып, күкрәге тапҡырына килтерә. Сәнсергә итә.)* Ғәрлек! Ғәрлек! Бер кем дә күрмәгәндә... *(Ҡаты итеп*

*ишек шаҡыйҙар. Аҡсәскә ҡайсыны һала, аптырана. Тағы ла шаҡыйҙар. Ишек артында тауыш.)*

А р с л а н *(тауышы)*. Аҡсәскә Ибраһимовна, һеҙ бындамы? *(Тыңлай.)* Аҡсәскә... һеҙҙе бында тинеләр. Аҡсәскә! Асығыҙ ишекте? Зинһар өсөн! Был мин — Арслан. Һеҙҙе күрмәй китә алмайым. Мин оҙаҡҡа түгел!

А ҡ с ә с к ә. Хәҙер! Аҙ ғына көтөгөҙ! Хәҙер! *(Кейемен рәтләштерә, көҙгөгә ҡарай. Ишекте аса.)*

Арслан инә. Сәскәләр шәлкемен күтәргән.

А р с л а н. Һеҙгә... һеҙгә тамашасылар сәскә бүләк итте. Сыҡманығыҙ?!

Аҡсәскә сәскәләрҙе ала.

А ҡ с ә с к ә. Рәхмәт! Мин ней... гримды йыуған инем, шуға...

А р с л а н. Һеҙгә рәхмәт, Аҡсәскә! Шиғырҙарымды әлегә тиклем бер кем дә шулай хисле итеп һөйләгәне юҡ ине. Һоҡланғыс. Иҫ китмәле актриса һәм алып барыусы икән һеҙ!

А ҡ с ә с к ә. Китсе, шулаймы?

А р с л а н. Ысын!

А ҡ с ә с к ә. Хатта шиғырығыҙҙы онотһам да...

А р с л а н *(хәтерләп)*. Әй, улай ғына булыр инде... кеше робот түгел. Иң мөһиме, юғалып ҡалманығыҙ. Бик оҫта ғына итеп артабан дауам иттегеҙ бит! Ә тегенеһе... юҡҡа борсолаһығыҙ. Тағы ла берәй ижад кисәһе уҙғарһам, мотлаҡ һеҙҙе генә саҡырасаҡмын. Килерһегеҙме?

А ҡ с ә с к ә. Белмәйем. Мин башҡа бер ҙә...

А р с л а н. Ай эттәгенәһе. Онот та ҡуй инде. Бына күрерһең, әле яңылышыуың өсөн үртәлһәң дә, бер нисә йыл үткәс, көлөп кенә иҫкә алырһың. Мин гел шулай...

А ҡ с ә с к ә. Әллә һеҙ ҙә яңылышаһығыҙмы?

А р с л а н. Кем әйткән әле? Хаталар ҙа булыр тормошонда, тик тормошоң хата булмаһын! Шәп, эйеме?

А ҡ с ә с к ә *(иларға етешеп)*. Эйе.

А р с л а н. Бәй-бәй. *(Күҙҙәренә ҡарап.)* Әллә... күҙ йәштәреме?

А ҡ с ә с к ә. Юҡ, юҡ, шатлыҡ йәштәре... рәхмәт! Миңә ҡайтырға...

А р с л а н. Ә банкет?

А ҡ с ә с к ә. Юҡ, юҡ, әйттем бит. Иптәшем Хәниф командировкала. Бармайым. Рәхмәт!

Арслан. Ярай, аңланым. Тик...

Аҡсәскә. Нимә, тик?

Арслан. Бер тапҡыр ғына йылмайығыҙ ҙа, мин китәм.

Аҡсәскә. Зинһар, асыуланмағыҙ! Мин һеҙгә ярҙам итеүҙән һис баш тартмайым.

Арслан *(ишек яғына ыңғайлай)*. Йә! *(Аҡсәскә йылмая.)* Бына рәхмәт! Хушығыҙ! *(Аҡсәскәнең ҡулдарынан үбеп ала ла сыға.)*

Аҡсәскә. Һы... был шағир тураһында әллә нимәләр һөйләйҙәр. Йәнәһе... ҡатын-ҡыҙ күрһә, донъяһын онота. Ай һайын береһен алыштыра, имеш. Бер ҙә ундайға оҡшамағансы?.. Моғайын да, берәйһе менән һөйләшеп торғанын арттырып, шаштыраларҙыр әле. Берәү булһа, ирең өйҙә юҡ, әйҙә мине ҡунаҡҡа алып ҡайт, тип теңкәмде ҡоротор ине. *(Сәскәләргә килеп, күтәреп еҫкәп ҡарай.)* Аһ... Заһирым тыуған көнөмә тап шундай раузалар килтергәйне. Их, Заһир, Заһир, һин тере булһаң, күкрәгеңә башымды һалып үкһеп-үкһеп илар инем дә йылы ҡосағыңа һыйынып, ләззәттә сумыр инем. *(Сәскә араһынан бер ҡағыҙ күреп ала.)* Бәй-бәй... Вәт шағир! Серле йылмайыуында бер ғилләһе бар һымаҡ ине. *(Ҡағыҙҙы ала.)* Нимәләр яҙып һалған икән? *(Уҡый.)* Һеҙҙең менән яҡындан танышҡым килә. Иртәгә Парк туҡталышында киске алтыла көтәм. Ҡулымда китабығыҙ булыр. Һы... вәт шағир. Аулаҡҡа саҡырмаҡсы. Вәт шилма! Актриса, тигәс тә, кем саҡыра, шуға йүгерә тиме икән? Ә ниндәй китап ул? Минең... минең... *(Ҡағыҙҙың артын әйләндереп ҡарай.)* Арслан Йосоповҡа. Бәй, уға яҙғандар бит! Ә мин, иҫәр, астым да уҡыным. *(Ҡағыҙҙы бөкләп ҡуя.)* Ярай, үҙенә тапшырырмын. *(Шаян.)* Парк туҡталышында иртәгә алтыла тигәнме? Моғайын, берәй елбәҙәк ҡыҙ яҙғандыр әле?

## Өсөнсө күренеш

Ут һүнә. Парк туҡталышы эскәмйәһендә Арслан гәзит уҡып ултыра. Модалы кейенгән йәш ҡыҙ килеп сыға. Эскәмйәгә ултыра ла Арслан менән үҙе араһына китап һала. Үҙе тирә-яҡҡа ҡаранып ала. Арслан гәзитен һала.

Алсыу *(әле генә танығас кеше булып)*. Ой, һаумыһығыҙ! Һеҙме ни был?

Арслан. Һаумыһығыҙ, мин һеҙҙе танымайым.

А л с ы у . Мин... мин һеҙҙең шиғриәткә үлеп ғашиҡмын. Шуға... бына ошо китапҡа автограф ҡына яҙып бирмәçһегеҙме? Теге юлы кисәлә һеҙгә яҡын барып та булманы.

А р с л а н . Шул ғынамы? Әлбиттә, һылыу. Исемең кем? *(Ручка ала.)*

А л с ы у . Алсыу. Беләһегеҙме, бөгөн әсәйемдәр ҡунаҡҡа китте. Ауылға. Иртәгә генә ҡайталар. Мин һеҙҙең тауышты диктофонға яҙҙыртып алырға хыялланам.

А р с л а н . Тауышты?

А л с ы у . О, юҡ, юҡ! Яңылыш әйттем. Һеҙ шиғыр уҡыйһығыҙ, ә мин һеҙҙе...

А р с л а н . Һеҙ тауыш коллекционерымы әллә?

А л с ы у . Юҡсы. Һеҙҙең шиғырығыҙ ныҡ оҡшай миңә. Бына: кем һуң әйтте, һин яратҡан, иң бәхетле буласаҡ, тип, тик әйтмәне, яратҡанда күҙең йәшкә туласаҡ, тип.

А р с л а н . Бына бит, үҙең дә бик матур һөйләйһең.

А л с ы у . Ә минең һеҙ һөйләгәнде тыңлағым килә шул. Аулаҡта...

А р с л а н *(китапҡа яҙып)*. Йылы һүҙҙәрең өсөн рәхмәт, һылыуҡай. Ҡунаҡҡа саҡырыуың өсөн дә. Тик бара алмайым шул. Иртәгә иртә менән командировкаға. Күрше ҡалала ла минең ижад кисәмде уҙғарырға булдылар.

А л с ы у . Ә һуңғараҡ? Минең үҙемдең шиғырҙарым да бар ине, бәлки?

А р с л а н *(тороп, сабырһыҙланып сәғәтенә, алыçҡа ҡарап ала. Бик иғтибар итмәй генә)*. Баçтырғаның юҡмы?

А л с ы у . Юҡ. Үҙем өсөн генә яҙам. Берәһен уҡып ишеттерәйемме?

А р с л а н *(туҡтатып)*. Алсыу, һин бик матур, аҡыллы ҡыҙ. Шиғырҙарың да матурҙыр, әйҙә, икенсе юлға ҡалдырайыҡ.

А л с ы у *(элеп ала)*. Беҙҙең өйҙә, эйеме? Мин һиңә шиғырҙарымды һөйләрмен, һин миңә кәңәштәр әйтерһең. Ой, ғәфү итегеҙ, әйтерһегеҙ. Яраймы?

А р с л а н *(көлөмһөрәп)*. Ярай.

А л с ы у . Беҙҙең өй телефонын яҙып алығыҙ. Юҡ, үҙем бирәм.

А р с л а н . Хафаланмағыҙ, һылыу! Шиғырҙарыңды минең эшкә килтер. Шунда ҡарармын. *(Визиткаһын сығарып бирә.)*

А л с ы у . Ә диктофон?

А р с л а н . Миндә уныһы ла бар. Килерһең.

А л с ы у . Ҡасан?

А р с л а н . Берәй айҙан.

А л с ы у . Бер айҙан? Һеҙ, һеҙ...ни...

А р с л а н . Һинең менән танышыуыма бик шатмын!

А л с ы у . Һеҙ... һеҙгә. Юҡ, һеҙ минең записканы уҡынығыҙмы?

А р с л а н . Ниндәй записканы?

А л с ы у *(үпкәләп)*. Сәскәләр эсендәге. Һеҙгә ижад кисәгеҙҙә, сәхнәгә менеп, сәскәләр биргәйнем бит. Иҫләмәйһегеҙме ни?

А р с л а н . Иҫләйем... шикелле.

А л с ы у . Ә бында? Нимәгә?

А р с л а н . Автобус көтәм. Ниңәлер оҙаҡланылар. Ошонда килеп алабыҙ, тигәйнеләр.

А л с ы у . Һеҙ... ни... командировкаға иртәгә сығабыҙ тинегеҙ. Мин бик тәмле бауырһаҡтар бешерҙем. Һеҙ килә тип. Улайһа... ошонда ғына көтөп тороғоҙ. Мин хәҙер...

А р с л а н . Борсолмағыҙ.

А л с ы у . Юлда ашарһығыҙ. Хәҙер килтерәм. Тик көтөп тороғоҙ. Мин бында яҡын йәшәйем.

А р с л а н . Кәрәкмәй! Ашығам.

А л с ы у *(уны тыңламай)*. Көтөгөҙ! *(Сығып йүгерә.)*

А р с л а н . М-дә... был ҡыҙ әллә ғашиҡ булған инде... Вәт йүләр? Үҙе минең ҡыҙым йәшендә генә. Әзмәүерҙәй ирҙе өйөнә саҡырырға оялмай. Вәт йәштәр? Бәләһенән баш аяҡ. Бер кем дә унда шиғыр уҡып ултырғанһың, тимәҫ. Бына шунан ғәйбәт китә лә инде.

## Дүртенсе күренеш

Бер аҙҙан ашығыс аҙымдар менән Аҡсәскә күренә. Ул Арсланға иғтибар ҙа итмәй. Үтеп барышлай, Арслан уны танып.

А р с л а н . Аҡсәскә? Аҡсәскә.

А ҡ с ә с к ә *(туктап)*. Ә... һеҙме ни? Һаумыһығыҙ!

А р с л а н . Ҡайҙа былай... ашығып.

А ҡ с ә с к ә . Уф, һуңлап барам. Бөгөн генераль репетиция.

А р с л а н . Ҡайҙа?

А ҡ с ә с к ә . Театрҙа.

А р с л а н . Ә... теге «Ромео һәм Джульетта»мы?

А ҡ с ә с к ә . Ҡайҙан белдегеҙ?

Арслан. Гәзиттә яҙылғайны. Һин, моғайын, Джульетталыр әле?

Аҡсәскә. Эйе.

Арслан. Ә... репетицияны мин дә ҡараһам яраймы?

Аҡсәскә. Һеҙ бит... ваҡытығыҙ бармы ни?

Арслан. Булдырһаң, бар инде ул. Бына мине ошонда килеп алырға тейештәр ине. Ярты сәғәт үтте. Килмәнеләр. Тимәк, мин ҡайҙа теләйем, шунда китә алам. Нимә булғанын иртәгә белешермен әле.

Аҡсәскә. Әйҙә һуң. Таныш кеше ҡарап кәңәш әйтһә, миңә лә күңеллерәк булыр. Ана, беҙҙең автобус. *(Икәүләп йүгереп сығып китәләр.)*

## Бишенсе күренеш

Бер аҙҙан сәхнәгә Джульетта кейемендә Аҡсәскә сыға ла Джульетта монологын һөйләй башлай. Ихлас килеп сыҡмай.

Аҫтан режиссер тауышы ишетелә. «Стоп! Стоп!» Аҡсәскә, бармай! Үҙеңдең ғашиҡ сағыңды иҫлә әле? Башыңда тик бер генә уй: уны күрергә! Уға ғына изгелек итергә! Ә һин, минеңсә, башҡа нәмәләр тураһында уйлайһың. Яңынан. Киттек!»

Аҡсәскә уйнай.

Режиссер тауышы. «Бына әҙерәк һәйбәт! Тик ниндәйҙер көсөргәнеш һиҙелә. Арығанһыңдыр. Нимә, әллә Хәниф менән асыуланыштығыҙмы?»

Аҡсәскә. Юҡ, юҡ! Барыһы ла һәйбәт. Тырышырмын!

Режиссер тауышы. «Бер аҙнанан премьера. Бөгөнгө кеүек уйнаһаң, яҡшы булмаҫ. Һин — һәләтле актриса. Тырыш, йәме?»

Ут һүнә.

## Алтынсы күренеш

Поезд тауышы. Арслан менән Аҡсәскә икенсе ҡалаға ижад кисәһе уҙғарырға китеп бара. Үҙҙәре күренмәй. Поезд туҡылдауы аша шиғыр уҡыған тауыш ишетелә.

Арслан.

*Һин Джульеттам була ҡалһаң әгәр,*
*Мин Ромеоң булам, теләһәң.*

*Ысын һөйөү тәмен татырмын, тим,*
*Табырмын, тим, әгәр эҙләһәм.*

А ҡ с ә с к ә.

*Нимә көтә, нимә эҙләй күңел,*
*Күпме йәшәп һис аңларлыҡ түгел,*
*Янымдағы усаҡ йылы бирмәй,*
*Ә Ромеом һаман килмәй, килмәй...*

А р с л а н.

*Йылдар аша оҙон юлдар үтеп,*
*Мөхәббәтем, һине табырмын,*
*Һине йылытырға йөрәгемдә*
*Һис һүрелмәҫ усаҡ яғырмын.*

А ҡ с ә с к ә.

*Елә генә ғүмер карауаны,*
*Бер үк юлдан, бер үк тарафҡа.*
*Хоҙай кешеләрҙе һөйөү өсөн,*
*Саф мөхәббәт өсөн яралтҡан.*

## Етенсе күренеш

Сәхнә уртаһында ике кресло. Ҡунаҡхана коридоры. Креслола Аҡсәскә. Арыған ҡиәфәттә. Өй кейемендә. Серем итә. Моңло музыка. Бер аҙҙан Арслан күренә. Ул коридорҙан үтеп бара. Аҡсәскәне күреп, аптырай. Туҡтай ҙа һаҡ ҡына кресло янына килә. Уға һоҡланып ҡарап тора. Аҡсәскә тертләп уянып китә.

А р с л а н. Әллә уяттым инде?

А ҡ с ә с к ә. Юҡ, арытылған. Ойоп киткәнмен.

А р с л а н. Бүлмәгеҙ биклеме әллә?

А ҡ с ә с к ә. Юҡ. Ундағы ҡатынға бер дуҫы килде лә...

А р с л а н. Байрам итәләрме?

А ҡ с ә с к ә. Шулайыраҡ. Ә һеҙ... арыманығыҙмы ни? Осрашыуҙар ялҡытманымы әле?

А р с л а н. Киреһенсә, улар ижадҡа дәрт өҫтәй. Һин үҙеңдең кәрәклегеңде тояһың. Кемгәлер кәрәк икәнеңде тойоп йәшәүе күңеллерәк бит.

А ҡ с ә с к ә. Рәми Ғарипов әйтмешләй, кеше кешеләргә кәрәк булһын, бер ҡайҙа ла артыҡ булмаһын, тиһегеҙме?

А р с л а н. Ә һеҙ бөгөн дә бик матур уҡынығыҙ минең шиғырҙарҙы. Теге юлы онотҡан шиғыр ҙа бик шәп килеп сыҡты, эйеме?

А ҡ с ә с к ә. Гел шулай тип йыуатаһығыҙ. Ә мин үҙем һеҙҙең уҡығанды...

А р с л а н. Әй, ҡуй әле шул һеҙ, һеҙҙеке, үҙегеҙҙе. Бер-бербеҙҙе күптәнән беләбеҙ. Һин, тиң дә ҡуй. Килештекме?

А ҡ с ә с к ә. Улайһа, мин һинең уҡығаныңды тыңларға яратам.

А р с л а н. Хәҙер. Китабымды алып сығам.

Сыға. Бер аҙҙан китап тотоп сыға. Аҡсәскә шул арала көҙгөгә ҡарап рәтләнеп ала.

А р с л а н. Һиңә ниндәй шиғырҙар оҡшай?

А ҡ с ә с к ә. Идея! Минең диктофоным бар. Әйҙә шунда яҙҙыртып алайыҡ. Һин юҡта кәрәк булып китһә, баҫып ҙа тыңлармын. Мин хәҙер. *(Сыға.)*

А р с л а н. Алсыу ҙа диктофон һөйләй ине. Аҡсәскә лә... был ҡатын-ҡыҙ халҡы ҡыҙыҡ инде. Тә-әк! *(Китапты аҡтарып.)* Ниндәйен уҡырға? Моғайын, мөхәббәт тураһындалыр?

А ҡ с ә с к ә. Саҡ астырҙым ишекте. *(Диктофонын күрһәтеп.)* Бына!

А р с л а н. Әйҙә, ултыр! Хәҙер һин минең тамашасым. *(Шиғыр уҡый.)*

*Ни хаҡың бар мине шулай*
*Өнһөҙ генә яҙаларға?*
*Ни эшләрмен, күҙҙәреңә*
*«Һөйәм!» тиеп яҙа ҡалһаң?*
*Ни эшләрмен, төндәр буйы*
*Һине уйлап яна ҡалһам,*
*Йөрәгемә үкенеүҙәр —*
*Һис уңалмаҫ яра һалһаң?*
*Ни эшләрмен?*
*Ни эшләрһең,*
*Башҡа йәрҙәр таба алһаң?*
*Бикләнермен.*
*Бары һиңә*
*Һөйөүемде яба алмам!*

А ҡ с ә с к ә. Шәп! Тағы ла!

А р с л а н.

*Ышанам, мөхәббәт тыуғанда*
*Иңдәрҙә ҡанаттар тойғандар,*

*Бары тик һандуғас телендә*
*Кистәрен һөйләшә торғандар.*
*Һөйләшә... һүҙ — күпер хистәргә,*
*Ә һүҙҙәр булмаһа, нишләргә?*
*Бына мин ҡараһам күҙеңә,*
*Юҡ була әйтәһе һүҙгенәм.*
*Мөхәббәт бер генә, сер генә,*
*Төшөнөп бөткөһөҙ серенә.*
*Мөхәббәт һөйләшә, ахыры,*
*Тик утлы ҡараштар арҡылы...*

Аҡсәскә. Ә быныһын ҡатыныңа арнағанһыңдыр?

Арслан. Ҡайҙан белдең?

Аҡсәскә. Күҙҙәреңдән.

Арслан. Мин дә уның менән ошолай ҡунаҡханала танышҡайным. Уның да күҙҙәре һинеке кеүек моңло ине.

Аҡсәскә. Яратаһыңмы?

Арслан. Кемде?

Аҡсәскә. Ҡатыныңды?

Арслан. Ихтирам итәм. Ул минең яратҡан ҡыҙымдың әсәһе. Күпме йәшәлгән. Ҡайһы берҙә һүҙгә лә килешеп ҡуябыҙ. Ул минең шиғырҙар яҙыуымды, билдәле булыуымды яратмай шул.

Аҡсәскә. Тоҙһоҙ һорауым өсөн ғәфү ит! Рәнйетергә теләмәгәйнем.

Арслан. Ә һеҙҙең ҡыҙға нисә йәш?

Аҡсәскә. Егерме ике.

Арслан. Бәй, һин егерме йәштә үк кейәүгә сыҡтыңмы ни?

Аҡсәскә. Сыҡманым, урланылар мине. Студент отряды менән төҙөлөшкә эшкә барғайныҡ. Шул ауыл егете. Кейәүгә сығырға иртәрәк әле миңә, тигәйнем, Хәниф мине бер иптәше менән машинаға ултыртып алып киттеләр ҙә үҙҙәренә алып ҡайттылар. Аҙаҡ әсәйемдәргә яусы ебәрҙеләр. Рәнйетеүен рәнйетмәне лә, әлеге шул балалыҡ инде, бөтә ауылға «урланған» исемем таралғас, оялышымдан риза булдым да ҡуйҙым.

Арслан. Әле рәнйетмәйме һуң?

Аҡсәскә. Юҡ та, тик икебеҙ ике донъяла йәшәгән кеүек. Түшәк тә аш өҫтәле генә уртаҡ. Күңелдәребеҙ берегә алманы. Шуғалырмы, һис ғәйебем булмаһа ла, көнләшеп бер була.

Арслан. Теге юлы... репетицияға китеп барғанда ла шулай булдымы?

Аҡсәскә. Өйҙәген эшкә килтерергә ярамағанын беләм дә, ҡайһы мәл үҙеңде еңеп булмай шул.

Арслан. Рәнйеттеме?

Аҡсәскә. Ярай ҡулынан тартып алып өлгөрҙөм, өҙгөләп ташлай ине?

Арслан. Кемде? Һинеме?

Аҡсәскә. Ҡотҡарҙым үҙен. Ҡара! *(Кеҫәһенән фотоһүрәт сығара.)*

Арслан *(ҡарай, әйләндереп уҡый)*. «Һине өҙөлөп яратыусынан». Былдай фотоны күрһәм, мин дә ярһыр инем.

Аҡсәскә. Әммә ул кеше тере түгел шул. Үкенескә ҡаршы. *(Фотоны ала. Үбә.)* Заһирым. Тәүге мөхәббәтем. Ул юҡ бит, тип күпме әйтһәм дә, Хәниф аңламай. Ә Заһир, Заһирым мине урлағандарын ишеткәс, күп тә үтмәй ашығыс ҡына кәләш алды. Уныһы аҡылға бер төрлөрәк, тинеләр. Заһирҙы ҡыҙғанып, нимәлер эсергән. Сихырлы һыу, тиме? Ә Заһир ике йылдан ауырып үлеп ҡалды.

Арслан. Йәл!

Аҡсәскә. Ә мин, иҫәр, күпме тырышһам да, уны онота алмайым. Бер нисек тә. Теге юлы ошо миндә ҡалған берҙәнбер фотоһын көҙгөгә ҡуйғайным. Ижад кисәһенә барғанда ҡабаланып, кире алырға онотҡанмын. Хәниф күргән дә...

Арслан. Тәүге мөхәббәт мәлендә хистәр сағыу була. Шуға онотолмайҙыр.

Аҡсәскә. Ә мин һеҙҙең һымаҡ әле бер ир-ат менән дә һөйләшкәнем булманы. Һеҙгә бөтә серҙәрҙе лә асҡым килеп тора. Әллә нисек... һеҙҙе күрһәм, Заһирым иҫкә төшә. Уның күңеле лә һеҙҙеке кеүек яҡты ине. *(Фотоны кеҫәһенә һалып ҡуя.)*

Арслан. Тағы ла «һеҙ»гә күстеңме, Аҡсәскә?

Аҡсәскә. Ғәфү итегеҙ инде, нимә икәнен дә аңламайым.

Арслан. Ә мин аңлайым. Һәр кемдең күңел бушатырлыҡ дуҫы булырға тейеш.

Аҡсәскә. Нисектер, һин миңә яҡынһың.

Арслан. Һин дә. Һин бер ҙә башҡа ҡатындарға оҡшамағанһың. Әле бына һиңә, әйҙә беҙҙең бүлмәгә, икәүләп кенә ултырырбыҙ, һөйләшербеҙ, тип әйтергә лә ҡыймайым. Һин барыбер ҡаршы килерһең, йәки мине башҡа төрлө аңларһың кеүек.

Аҡсәскә. Бәйләнсек ирҙәрҙе күп күрҙем. Һин... һиңә ышанам.

Арслан. Ҡурҡмайһыңмы? *(Көлә.)*

Аҡсәскә. Юҡ! *(Көлә.)* Ә ниңә, беҙ кешеләр түгелме ни? Күңелеңә яҡын кеше менән һөйләшеп ултырыу гонаһтыр шул?

Арслан. Мин ышанысыңды аҡлармын. Ысын! Рәнйетмәм! Ант итәм. Әйҙә!

Аҡсәскә. Әйҙә һуң.

Арслан. Мин дә һиңә үҙ яҙмышым тураһында һөйләрмен.

Аҡсәскә. Ә шиғырҙар?

Улар һөйләшә-һөйләшә сығып китәләр. Шиғыр яңғырай.

*Ҡағылам оло хистәргә,*
*Мансылам һағыштарға,*
*Бәхет, тиеп, нарыҡлайым*
*Тамсыҡай табыштарҙы.*
*Мөхәббәттең бишеге лә,*
*Ҡәбере лә миндә генә,*
*Мөхәббәттең бар ғүмере,*
*Бар ғүмере һиндә генә.*

## Һигеҙенсе күренеш

Грим бүлмәһе. Ишек артынан көслө ҡул сабыуҙар ишетелә. «Афарин, Джульетта!» «Афарин, Аҡсәскә!» тигән тауыштар ишетелә. Ишектән бер ҡосаҡ сәскәгә күмелеп, Аҡсәскә инә. Бик шат. Премьера уңышлы үткән. Көҙгө янына килә.

Аҡсәскә. Эй шәпһең дә инде, Аҡсәскә! Ысынлап ғашиҡ булыуҙың нимә икәнен онотоп бара инем. Үҙең беләһеңме икән, һин, һин ярҙам иттең бит миңә Джульеттаны шулай хисле уйнарға! Һин генә!

Ишекте шаҡыйҙар. Аҡсәскә өндәшмәй. Ишек артынан тауыш. «Был мин — Арслан!» Аҡсәскә йүгереп килеп ишек аса. Арслан уға бер ҡосаҡ сәскә тоттора. Ҡосаҡлай.

Арслан. Ҡотлайым! Аҡсәскәм минең! Иҫ китмәле булды!

Аҡсәскә. Рәхмәт! Ә ниңә сәхнәгә менеп тапшырманың?

Арслан. Һине ошонда яңғыҙыңды күргем килде.

Радионан тауыш: «Аҡсәскә Бирғәлина, тамашасылар тағы ла сәхнәгә сығыуығыҙҙы һорай!»

Аҡсәскә. Юҡ! Хәҙер бында журналистар килеп тулаcаҡ. Ә минең... һине генә... *(Ҡосаҡлай.)*

Радио: Аҡсәскә Бирғәлина. Һеҙҙе күмәкләп фотоға төшөргә саҡыралар!

Арслан. Ярай, көттөрмә! Бар! Ана, сәскәләреңде ал да...

Аҡсәскә сәскә букеты эсенә күҙ һала. Арсланға шаян ҡарай.

Аҡсәскә. Ә унда... берәй записка юҡмы?

Арслан. Был сәскәләрҙе үҙем һинең өсөн генә һайлап алдым, Аҡсәскәм. Бар!

Аҡсәскә ишек яғына ыңғайлай. Шул саҡ телефон шылтырай.

Арслан. Алайыммы?

Аҡсәскә. Ал, ал!

Арслан. Эйе, театр. Бирғәлинамы? Аҡсәскә, һине...

Аҡсәскә килә. Трубканы ала.

Аҡсәскә. Тыңлайым. Эйе, мин, эйе. *(Йөҙө ағарынып китә.)* Хәҙер, көтөгөҙ!

Арслан. Нимә булды? Аҡсәскә? Йә?

Аҡсәскә трубканы ситкә ҡуя. Арслан дөрөҫләп һала. Аҡсәскәнең яурынынан ҡосоп, креслоға ултырта. Аҡсәскә графинға үрелә. Арслан уға һыу ҡойоп бирә.

Аҡсәскә. Больницанан. Авария. Ирем менән ҡыҙым... реанимацияла.

Радио: «Аҡсәскә, һеҙҙе көтәбеҙ!»

Арслан. Һин ошонда ултырып тор! Мин хәҙер уларҙы тынысландырып киләм. Ә больницаға икәүләп барырбыҙ. Машина әҙер!

Аҡсәскә. Больницаға барғанды береһенә лә әйтмә... Аҙаҡ...

Арслан. Ярай. Аңланым.

Сыға. Музыка. Ут һүнә. Шиғыр яңғырай.

*Күңелемде биләй билдәһеҙлек,*
*Шик-шөбһәләр йөрәк кимерә,*
*Йәнем теләй ас бер сабый кеүек,*
*Һөйөү-әсәй һөтөн имергә.*
*Йәнем теләй йәмгә ҡойонорға,*
*Наҙ һемергем килә күңелгә,*
*Йөрәгем ҡош, осор һиңә генә,*
*Ҡарашыңдан һөйөү түгелһә.*

## Туғыҙынсы күренеш

Икеһе лә больница эскәмйәһендә ултыралар. Йөҙҙәре борсоулы. Аҡсәскә күҙ йәштәрен һөртөп ала. Арслан уның яурынынан ҡосаҡлай.

Аҡсәскә. Хәнифтең бер аяғын ҡырҡасаҡтар. Иҙелгән, тиҙәр. Ә ҡыҙымдың ҡулы һынған. Тағы ла бөйөрө ҡыҫылған... Терелә, тинеләр...

Арслан. Оло юлда булған да бит, машиналар оҙаҡ туҡтамаған.

Аҡсәскә. Һиңә рәхмәт, Арслан.

Арслан. Нимәгә?

Аҡсәскә. Ҡан биргәнең өсөн.

Арслан. Кәрәк булһа, тағы ла бирермен, йә башҡаларҙы табырмын. Дарыуҙар кәрәкһә лә әйт, һеңлем аптекала эшләй. Табып бирербеҙ. Тик терелһендәр генә.

Микрофондан тауыш: «Бирғәлина, һеҙҙе баш табип саҡыра!»

Аҡсәскә. Ярай, рәхмәт!

Арслан. Рөхсәт итһәң, мин дә бергә инер инем.

Аҡсәскә. Әлләсе?

Арслан. Мине иремдең туғаны, тиерһең. Бәлки, берәй төрлө ярҙам кәрәк булыр?

Аҡсәскә. Әйҙә һуң. Эшеңдә эҙләмәҫтәрме?

Икәүләп сығалар.

Ут һүнә.

## Унынсы күренеш

Арсландың эш бүлмәһе. Өҫтәл. Бер нисә телефон. Башын тотоп аптырап Арслан ултыра. Бер ситтәге ҡағыҙ өйөмөн аҡтара. Ике ҡағыҙҙы сағыштырып ҡарай. Башын сайҡай. Бер төймәгә баҫа. Секретарь ҡыҙға әйтә.

Арслан. Әминә, «Стройтех»тың маркетинг бүлеге етәксеһен табып тоташтыр әле. *(Үҙ алдына.)* Быны булыуы мөмкин түгел. Бына бит, бөтөнләй оҡшамаған. Нисек инде мин ике миллионлыҡ ҡағыҙға ҡул ҡуяйым, ти? Алмаған аҡсаларға.

Секретарь ҡыҙ тауышы: «Трубканы алығыҙ!»

Арслан. Рекламағыҙҙы күрҙегеҙме? Ә теге ҡағыҙҙы кем килтергән? Эйе. Эйе. Шунан. Кем тикшерҙе? Күсмәгән аҡсаны алдым, тип имза ҡуйырға минең башым икеме ни? Был — саботаж, шантаж. Тикшерергә кәрәк! *(Икенсе телефон шылтырай.)* Ярай, тағы ла һөйләшербеҙ. Алло! Нисек? Шул суммаға машинамды, фатирымды алырғамы? Кем әйтте? Ҡағыҙы бармы? Хоҡуғығыҙ юҡ! Юҡ! Яҙығыҙ! Мин судҡа бирәм! Яҙығыҙ! Ялған имза ҡуйыусыны табырға кәрәк. Ишеттегеҙме?

Трубканы һала. Секретарға: «Әминә, мин бүлмәлә юҡ». Тауыш: «Аңланым!» Телефон шылтырай. Туҡтай. Тауыш ишетелә. «Арслан Мөхәмәтович, һеҙҙе ҡатынығыҙ һорай, тоташтырырғамы?»

Арслан. Тоташтыр! *(Трубканы ала.)* Тыңлайым! Нимә тиҙәр? Һин шуға ышандыңмы? Юҡ! Әйттем бит, юҡ! Юҡ! Юҡ! Алдағандар! Сәбилә, туҡта әле, бөтөрөнмә! Юлын табырбыҙ! Бер кемгә лә ишек асма! Телефонды ла алма! Тиҙҙән ҡайтып етермен!

Секретарь ҡыҙ тауышы: «Арслан Мөхәмәтович, һеҙгә бер ханым килгән. Бик ашығыс эшем бар, ти»

Арслан. Кем?

Тауыш: «Аҡсәскә».

Арслан. Инһен!

Аҡсәскә инә.

Аҡсәскә. Һаумыһығыҙ! Ғәфү итегеҙ инде, борсоном. Миңә диктофон кәрәк ине.

Арслан. Һаумы! Ниндәй диктофон?

Аҡсәскә. Үҙегеҙ әйттегеҙ бит. Диктофоның минең сумкала киткән. Иртәнсәк инеп ал, тинегеҙ. Кисә.

Арслан. Ә-ә, иҫләнем. Хәҙер. *(Сейфҡа килә. Аса. Диктофонды ала. Сейф асыҡ ҡала.)* Ошомо?

Аҡсәскә. Эйе.

Арслан. Мә, ал!

Аҡсәскә. Рәхмәт! Мин... китәйем?

Арслан. Эйе. Аҙаҡ...

Аҡсәскә. Һеҙгә бик ауырмы?

Арслан. Юҡ! Һәйбәт... барыһы ла. Саҡ ҡына һуңғараҡ, яраймы? Ашығыс эшем бар ине.

Аҡсәскә. Ярай, хушығыҙ! *(Артына әйләнеп ҡарай-ҡарай аптырanып сығып китә.)*

Арслан тағы ла башын тотоп ултыра. Телефондарҙың береһен дә алмай. Күҙе асыҡ сейфҡа төшә. Унда барып пистолет ала. Әйләндереп ҡарай.

Арслан. Сейфта ятҡас, һинең ни кәрәгең? Һаҡланыу ҡоралы кешене һаҡларға тейеш. *(Пистолетты алып өҫтәл өҫтөнә һала.)* Әллә... ошолай ғына ҡотолорғамы был бәләнән.

Ишек шаҡыйҙар. Яуапты көтмәйенсә ишек асыла. Аҡсәскә күренә. Һаҡ ҡына килә лә өҫтәл янына баҫа.

Аҡсәскә. Ғәфү итегеҙ, мин...мин...

Арслан. Нимә булды? *(Ситкә ҡарап уйлана.)*

Аҡсәскә. Беләм, эле һеҙҙең бер кемде лә күргегеҙ килмәй. Ошондай ауыр мәлдә һеҙҙе яңғыҙ ҡалдыра алмайым. Беләһегеҙме? Ой, юҡ, беләһеңме? Арслан, шундай ауыр мәлдә мин нимә эшләйем?

Арслан. Нимә?

Аҡсәскә диктофонды ала. Кнопкаға баҫа.

Аҡсәскә. Шиғыр тыңлайым.

*Орлоҡҡа ҡом түгеп,*
*Асфальтҡа күмгәндәр,*
*Ә сәскә, таш ярып,*
*Ҡояшҡа үрмәләй.*
*Сәскәгә биргәстен*
*Шул ҡәҙәр ғәйрәтте,*

*Миндә лә көс етер*
*Еңергә ғәйбәтте.*
*Күңелдең ҡылы ла*
*Тарттырып көйләнә.*
*Үҙемдән көслөрәк*
*Булырға өйрәнәм...*

Секретарь тауышы: «Трубкала ҡатынығыҙ!» Аҡсәскә диктофонды һүндерә. Сығырға итә. Арслан ҡалырға ымлай. Аҡсәскә ултыра.

Арслан *(трубкаға)*. Тыңлайым! Кем? Ҡайҙа? Тыныслан! Хәҙер! *(Аҡсәскәгә.)* Килһә килә бит. Бер юлы. Ах, эттәр! Аҡса алыр өсөн нимә генә ҡыланмайҙар, ә? Фатирҙы, машинаны алырға итәләр ине, әле килеп ҡыҙымды, Заремамды урлағандар.

Аҡсәскә. Ҡыҙыңды? Ни өсөн?

Арслан. Шулай. Бер ҡағыҙҙағы имзаны мин үҙемдеке тип танырға тейешмен.

Аҡсәскә. Туҡта, туҡта! Ә һин ҡыҙыңдың ҡайҙа икәнлеген beләһеңме?

Арслан. Риза булһам, әйтәсәктәр.

Аҡсәскә. Риза бул!

Арслан. Нимә?

Аҡсәскә. Ысын, ысын. Ҡыҙыңды ҡотҡарғың килһә... Мин хәҙер МЧС-та эшләгән ағайыма шылтыратам. Улар ФСБ менән берлектә эшләй. Тик ҡыҙыңдың ҡайҙа икәнлеген белергә кәрәк. *(Кеҫә телефонынан шылтырата башлай.)*

Арслан. Туҡта, туҡта, ашыҡмай тор әле?

Аҡсәскә. Бындай эштә һәр минут ҡына түгел, һәр секунд ҡәҙерле. Алло! Был мин. Ағай, һинең менән күрешергә кәрәк. Тиҙ! Эйе. Аңлашыла. Мин яңғыҙым түгел. Ярай. Булды. Сығабыҙ. Арслан, беҙгә тиҙ булырға кәрәк! Машинаңды сығар. Киттек!

Арслан. Ышанырлымы һуң?

Аҡсәскә. Тиҙ бул, тием дә. Әйҙә!

Арслан өҫтәлдәге пистолетты ла алып кеҫәһенә тыға.

Аҡсәскә. Ә быныһы нимәгә?

Арслан. Һаҡлыҡҡа! Аҡса эше бит.

Аҡсәскә. Ярай. Киттек. *(Сығалар.)*

## Ун беренсе күренеш

Аҡсәскә менән Арслан икеһе бергә Аҡсәскәләрҙең фатирында. Тәүге күренештәге көҙгө, шкаф һ. б. Арслан диктофон йүнәтеп ултыра.

*...Бер-береһен эҙләп йөрөй-йөрөй*
*Сәсәһен, тип, һағыш-ғазапҡа,*
*Хоҙай парлы итеп яралтҡан да*
*Төрлө ергә беҙҙе таратҡан...*

Аҡсәскә. Пистолетыңды урынына һалдыңмы?

Арслан. Эйе. Ҡурҡытам, тип күрһәтеп өлгөргәйнем шул. Ҡорал йөрөтәһең тип, һаҡ аҫтына ала яҙҙылар бит әй! Ә мин ул пистолетты эй эҙләйем, милиция килгәс. Эй эҙләйем...

Аҡсәскә. Һин ул саҡта ныҡ ярһыған инең. Йә берәй-һенә яңылыш атып эште боҙоп ҡуйырһың, тип, мин һиңә белгертмәй генә кеҫәңдән урланым, вәт!

Арслан. Эй аҡыллыһың да инде үҙең. Рәхмәт! Ҡыҙымды ла, үҙемде лә бәләнән ҡотҡарҙың! *(Диктофонды күрһәтеп.)* Берәй ҡыҫҡыс кәрәк ине?

Аҡсәскә табып бирә.

Аҡсәскә. Минең урында булһаң, һин дә шулай итер инең.

Арслан. Әлбиттә. Һинең янда миңә шундай тыныс, күңелле. Әллә нисек үҙемде ирекле, ҡанатлы итеп тоям. Хәҙер тыңлап ҡарарбыҙ.

Аҡсәскә. Әллә берәйһе һине тотҡон итәме?

Арслан. Итә шул. Эштә лә, өйҙә лә үҙемде тотҡон кеүек тоям. Эштә — хужам, өйҙә — ҡатыным. Ә ижадта ireklek кәрәк.

Аҡсәскә. Берәй сит илгә йә берәй утрауға ял итергә китеп ҡара һуң?

Арслан *(шаян)*. Һинең менән бергәме? Һинең менән ер сигенә китергә лә ризамын.

Аҡсәскә. Юҡ инде. Һин дә, мин дә улай бала-саға һымаҡ ҡылана алмайбыҙ шул. Һәр кемебеҙҙең үҙ бурысы бар. Мине — сәхнә аша, һине шиғырҙарың аша халыҡ яҡшы белә. Ярата. Ихтирам итә. Беҙ уларҙың ихтирамын аяҡ аҫтына һалып тапай алмайбыҙ. Хыянат итмәйек, йәме.

Ихтирам ҡаҙаныуы бик оҙаҡ һәм ауыр, ә түбән тәгәрәүгә бер сәбәп кенә етә.

Арслан. О, мин һинән ҡурҡа башланым әле.

Аҡсәскә. Ысын! Һин миңә йөрәгемдәй ҡәҙерлеһең. Юғалтаһым килмәй. Бер көн генә телефондан булһа ла тауышыңды ишетмәһәм, борсола, хафалана башлайым. Һин миңә һауа, һыу кеүек кәрәкһең. Йәшәр өсөн! Күңелемә дауа кәрәк булған өсөн!

Арслан. Һин дә, Аҡсәскәм! Һин дә! Алыҫта булһаң да, был ерҙә һинең барлығыңды тойоуҙан да миңә әллә ниндәй ғәйрәт, көс, шатлыҡ тула.

Аҡсәскә. Бәлки, мөхәббәт тигәндәре ошолор? *(Бер-береһенә текләп.)*

Арслан. Яратаһыңмы?

Аҡсәскә. Юҡ, яратмайым.

Арслан. ...???

Аҡсәскә. Мин «Яратам!» тип әйтергә яратмайым. Ошо һүҙҙең тоҙағына эләгеп күпме алдандым мин. Шуға.

Арслан. Ә мин алдамайым.

Аҡсәскә. Беләм.

Арслан. Аҡсәскә! Һиңә бер һүҙем бар!

Аҡсәскә. Тыңлайым.

Арслан. Әйҙә бергә йәшәйек! Икенсе ҡалаға китәйек, әйҙә!

Аҡсәскә. Н-нисек?

Арслан. Шулай.

Аҡсәскә. Ә ҡатының, ҡыҙың?

Арслан. Мин күптәнән инде туғандарымда йәшәйем. Эштәге проблемалар менән уларҙы борсомаһындар, тием. Фатирҙы ла күптән ҡатынға, машинаны ҡыҙға күсерҙем.

Аҡсәскә. Ә... ниңә быларҙы элек миңә әйтмәнең?

Арслан. Һинең мәшәкәттәрең былай ҙа баштан ашҡан ине бит. Көн дә больница юлын тапайһың. Эшең дә ҡатмарлы...

Аҡсәскә. Инде ни эшләргә уйлайһың?

Арслан. Белмәйем шул. Бына һиңә лә кәңәш һорарға килгәйнем.

Аҡсәскә. Мин беләм. Һиңә мотлаҡ ғаиләңә ҡайтырға кәрәк!

Арслан. Юҡ, ҡайта алмайым!

А ҡ с ә с к ә. Улайһа, был эшеңде алыштыр. Теләйһеңме, мин үҙемдең таныштарымды йәлеп итәм? Һиңә тынысыраҡ урын табырбыҙ.

А р с л а н. Шунан?

А ҡ с ә с к ә. Шунан ҡатының, моғайын, хәлеңде аңлар. Хәйер, һин әле лә ҡайта алаһың бит!

А р с л а н. Юҡ, уларҙы хәүефкә һалғым килмәй. Ҡыҙымдың сессияһы башлана.

А ҡ с ә с к ә. Иртәгә минең ҡыҙымды ла больницанан сығаралар. Оҙаҡламай ирем дә ҡайтасаҡ.

А р с л а н. Аңлайым. Һинең дә, минең дә ауыр ваҡыт.

А ҡ с ә с к ә. Һиңә тиҙерәк ҡайтырға кәрәк. Ғаиләңә. Ҡатының минең менән осрашҡанды белеп ҡалһа, кире индермәҫ! Ә һин... һин ҡыҙыңды яратаһың. Беләм. Ҡатының да ҡәҙерле. Мин һинең үҙ ғаиләңдә бәхетле булыуыңды теләйем. Әйҙә былай һөйләшәйек! *(Күҙҙәренә ҡарап.)* Бер аҙға, бер, ике айға тиәйемме, беҙ бөтөнләй осрашмай, күрешмәй, һөйләшмәй торайыҡ!

А р с л а н. Әллә? Ә һин мине онотоп ҡуйһаң?

А ҡ с ә с к ә. Тап бына шуны төшөнөү өсөн дә кәрәк шул. Хистәребеҙҙе һынап ҡарарбыҙ.

А р с л а н. Бәлки... беҙ бит бала-саға түгел. Кем белә? Бәлки, әлегә шулай кәрәктер ҙә. Мин һине һағынып яңы шиғырҙар яҙырмын.

А ҡ с ә с к ә. Ә мин ошо һағышымды яңы ролдәремә күсерермен.

А р с л а н. Аңланым һине, Аҡсәскә. Ireңә лә, ҡыҙыңа ла иғтибар кәрәк мәлең. Икеһен дә аяҡҡа баҫтырырға кәрәк. Әйткәндәй, һин теге дарыуҙы таптыңмы?

А ҡ с ә с к ә. Иремәме? Таптым! Һинең һеңлең ярҙам итте. Рәхмәт инде.

А р с л а н *(аҡса сығара)*. Ә быныһына Хәнифкә больницаға емеш-еләк һатып ал!

А ҡ с ә с к ә. Юҡ, юҡ! Үҙемдеке етә.

А р с л а н. Йә инде, ҡыланма, мин бит һинең эш хаҡыңды яҡшы беләм. Әле ireң дә эшләмәй. Ал, ал! Ихлас күңелдән бирәм!

А ҡ с ә с к ә. Ярай! Рәхмәт! Тик эш хаҡы алғас та кире ҡайтарырмын, яраймы?

А р с л а н. Ҡайтарырһың. *(Пауза.)* Инде хушлашайыҡмы?

А ҡ с ә с к ә. Шулай итәйек!

Арслан *(ҡулындағы диктофонды хәтерләп)*. Ә бына... тикшереп ҡара?

Аҡсәскә *(диктофонды ала ла кнопкаһына баҫа. Шиғыр ишетелә)*.

*...Һандуғасым, һары өмөт кенәм,*
*Йөрәгемдең һуңғы йырсыһы,*
*Һинһеҙ ҡайҙан илһам алайым да,*
*Һинһеҙ минән ниндәй моң сығыр?..*

Арслан менән Аҡсәскә ҡосаҡлаша.

Аҡсәскә. Ә... нык итеп һағынһам, ни эшләргә?

Арслан көҙгөгә килеп, Заһирҙың фотоһын ала.

Арслан. Иҫләйһеңме беҙҙең ҡунаҡханалағы һөйләшеүҙе? Ирең больницанан ҡайтҡас, был фотоны күрһә, асыуланыр. Ә бәлки, йыртып та ташлар. Һин был фотоны миңә бир. Мине һағынһаң, «Заһирҙың фотоһы кәрәк», тип шылтыратырһың, йәки эшемә килерһең.

Аҡсәскә. Заһирым! Ҡана, берҙе генә ҡарап алайым да. Эй башлыһың да инде үҙең. Ярай, хуш!

Арслан. Хуш! *(Сыға.)*

Ут һүнә.

## Ун икенсе күренеш

Арслан креслола яҙышып ултыра. Аҡсәскәне нык һағынған. Шиғыр ишетелә.

*Бер сәғәтем бер ай һымаҡ,*
*Йылдай оҙон көндәрем,*
*Өйөм булып өйөлә бара*
*Көндәремдең көлдәре.*
*Көлдәрем аҫтында ҡала*
*Һап-һары һағыштарым,*
*Мөхәббәтем, һин, ахыры,*
*Ғүмерлек табышмағым.*

Ут икенсе яҡҡа күсә. Унда Аҡсәскә. Ул да Арсланды нык һағынған.

*Көтәм!*
*Өмөттәрем, уртын сәйнәй-сәйнәй*
*Ризыҡ көткән бүре балаһылай,*
*Ваҡыт ҡаны һарҡый, тиҙерәк кил,*
*Дауаһын тап*
*Йөрәгемдең һулҡыр яраһына.*

Арслан.

*Сираттағы һынауымы яҙмышымдың —*
*Яҙмы, тиһәм, һалҡын өтә*
*Бөрө генә һағышымды.*
*Мөхәббәтем ишетерме тауышымды,*
*Уртаҡлашыр икән кемдәр*
*Күңелдәге табышымды?*

Аҡсәскә.

*Көтәм!*
*Батшалығың әҙер, хаким булһаң,*
*Хистәремдең ысын хаҡын белһәң,*
*Сер һарайын асыр асҡысым бар,*
*Һалыр инем устарыңа уны,*
*Бәхет алып ҡына килер булһаң.*

Ут һүнә.

## Ун өсөнсө күренеш

Арсландың икенсе урындағы эш кабинеты. Телефоны берәү генә. Икенсе интерьер. Телефон шылтырай.

Арслан. Эйе, эйе! Тыңлайым. Театрмы? «Ромео һәм Джульетта»мы? Аҡсәскә Бирғәлина уйнаймы? Юҡ? Ней бит әле, бөгөн кискә беҙгә ҡунаҡтар килергә тейеш. Ҡатынымдың туғандары. Рәхмәт саҡырыуыңа, дуҫым. Бара алмайым шул.

Үҙе шылтырата.

Арслан. Һаумыһығыҙ! Мине телевидениенан тапшырыуға саҡыралар. Теге юлы ижад кисәмдә һеҙҙең театрҙа эшләгән Аҡсәскә Бирғәлина минең шиғырҙарҙы бик матур уҡығайны. Әле ҡайҙа ул? Ә-ә, улаймы ни? Ә ҡасан эшкә сыға? Аңлашылды. Рәхмәт! Һау булығыҙ!

Ишек шаҡыйҙар. Аҡсәскә ҡыйыуһыҙ ғына ишек аса. Инә лә Арсланға текләп өнһөҙ ҡала.

Арслан. Вәт, мөғжизә! Әле генә театрҙан һине һорағайным.

Аҡсәскә. Миңә… Заһирҙың фотоһүрәте кәрәк ине… йәнә бурысымды ҡайтарайым тинем…

Арслан килеп Аҡсәскәне ҡосағына ала. Аҡсәскәнең күҙҙәренән йәш тәгәрәй. Аҡсалар иҙәнгә ҡойола.

Арслан. Һине күрмәгәне бирле бер йыл үткән һымаҡ. Ҡәҙерлем минең. Инде улай бер-беребеҙҙе яҙаламайыҡ, йәме. Шылтыратышып булһа ла һөйләшеп торайыҡ!..

Аҡсәскә. Йә…

Музыка. Улар ҡосаҡлашып уртала тороп ҡала. Мөхәббәт тураһында шиғыр яңғырай. Моңло көй ишетелә.

*Ысыҡтағы ҡояш йәйғоролай*
*Күңелеңдә һөйөү балҡығанда?*
*Мин һаҡ ҡына күҙҙәреңә бағам —*
*Ҡарашыңдан йондоҙ атылғандай.*
*Был тамсыҡай ғына бәхетемдең*
*Балҡып-һүнер мәле — мәңгелектер.*
*Ысыҡтағы ҡояш — һинең күңел,*
*Һөйөүемә йәнә йән keretте.*
*Һинһеҙ йәшәй алмам, йәшәй алмам,*
*Йөрәгемде алдың тотош ҡына,*
*Беләм, бәхет таңым һинһеҙ атмаҫ,*
*Ысыҡтағы алһыу ҡояшҡынам!*

**Шаршау**





# УРАЛ БАТЫР

*(«Урал батыр» башҡорт халыҡ эпосы буйынса)*

*Операға либретто*

## Пролог

Сәхнәлә ҡараңғы. «Урал» көйө ишетелә. Ҡурай моңо. Сәхнә яҡтыра бара. Шүлгән мәмерйәһенең ауыҙы алдындағы ташта аҡ һаҡаллы ҡарт менән 7—8 йәшлек малай ултыра. Ҡарт ҡурай тарта. Малай тыңлай. Көй тына.

Малай. Ниндәй көй ул, олатай?

Ҡарт. «Урал» көйө, улым. Башҡорттар борон-борондан төйәк иткән мәғрур Урал тауы тураһында.

Малай. Ә ниңә был тауҙы Урал тип атағандар?

Сәхнәлә ут һүрелә бара.

Ҡарт.

Борон-борон борондан,
Кеше-маҙар килмәгән,
Ул тирәлә ҡоро ер
Барлығын һис белмәгән,
Дүрт яғын диңгеҙ уратҡан,
Булған, ти, бер урын.

Ут һүнә.

## Беренсе бүлек

### Беренсе күренеш

Шул уҡ мәмерйә алды. Сәхнәгә йүгереп Урал сыға. Ун йәш самаһы. Кейеме йәнлек тиреһенән.

Урал *(күктә осҡан ҡошто күҙәтеп)*.
Ағай, йәһәт кил бында,
Яғылбайҙы сөйгәнмен,
Сыйырсыҡты типкәнен
Үҙең килеп күрерһең!

Шүлгән инә. Уға 12 йәш самаһы.

Шүлгән. Ҡайҙа, Урал, ҡайҙа ул ҡош?
Урал. Ана, ҡая ташҡа ҡунды,
Бахырсыҡ, бер сыйырсыҡҡа
Ташланырға әҙерләнә.
Шүлгән. Күрҙем, күрҙем.
Әйҙә, ултыр!
Күп йүгерҙек.
Ял итәйек!
Урал. Сарсатты бит.
Ултырғансы әйҙә барып,
Шишмәнән беҙ һыу эсәйек!
Шүлгән *(уйланып)*.
Сарсатты шул?
Туҡта, сабыр,
Тыңла, энем, минең һүҙем.
Ҡалманы ла инде түҙем.

Тирә-яғына ҡарана.

Урал, әйҙә, булмаһа,
Ҡабырсаҡты асайыҡ,
Берәр тамсы эсәйек,
Ҡандың тәмен беләйек!
Урал. Ҡабырсаҡтан ҡан уртларға?
Шүлгән *(уның ауыҙын ҡаплай)*.
Шым! Шымыраҡ, юғиһә,
Йәнде ҡыйып һунарлау,
Ҡомарлы эш булмаһа,
Үлән емшәр хайуанға
Ҡара һөлөк ҡаҙатып,
Ошо ҡанды йыйып ҡуйып,
Һыуһағанда ҡан эсеү
Тәмле нәмә булмаһа,
Атамдар йоҡо ҡалдырып,
Көн дә икәү ҡаңғырып,
Йөрөмәҫ ине һунар тип,
Эсмәҫ ине ул ҡанды.

Тәмләйексе тамсыһын?

Урал. Атам һүҙен тотамын,
Мин ул ҡанды йотмамын.
Егет булып үҫмәйенсә,
Төп йоланы белмәйенсә,
Суҡмар алып ҡулыма,
Һис бер йәнде һуҡмамын,
Һөлөк һурған ҡанды мин
Ҡабырсаҡтан йотмамын.

Шүлгән. Кешене еңер Үлемдең
Беҙҙе килеп тапмаҫын
Атам һөйләп бирҙе бит.
Инде низән өркәһең,
Ҡан эсеүҙән ҡурҡаһың?

Урал. Мин йоланы боҙмайым,
Үлем бар, тип уйлайым,
«Бары йәнгә беҙ — үлем!»
Тиеп атай әйтте бит.
Юлбарыҫы, арыҫланы,
Ҡош-ҡорттары, хайуаны,
Барыһы ла бер-беренә
Һунар итә, йән ҡыя.
Шулай булғас, хатта беҙ ҙә,
Улар өсөн үлем бит.
Көсһөҙ һанап барыһын,
Ерҙә үлем сәсеүсе
Ошо тирәлә беҙ дүртәү
Булабыҙ һуң түгелме?
Йола боҙоу — үҙе үк
Ҡурҡыныс хәл булмаҫмы?
Үлем шунда беҙҙең дә
Күҙ алдына баҫмаҫмы?

Шүлгән *(уйлана)*.
Мин үлемдән ҡурҡмайым.
Һин атайға һатмаҫһың бит?
Тик бер генә тамсы ҡанды
Мин барыбер уртлайым.

*Ҡабырсаҡты ала.*

Һүҙеңде бир!

Урал. Ярар, һатмам! *(Шүлгән ҡанды уртлай.)*

Шул саҡ арыҫлан үкергән тауыш ишетелә. Йәшен күкрәй. Арыҫлан тауышынан һиҫкәнеп, Шүлгән йәһәт кенә ҡабырсаҡты урынына ҡуя. Йәнбикә менән Йәнбирҙе һунарҙан ҡайтып килә.

Ш ү л г ә н .   Ана, Атайҙар ҡайтты һунарҙан,
Арыҫланды мин бәйләйем.

Ағас ботағында торған арҡанды алып, арыҫланды бәйләргә сығып йүгерә.

### Икенсе күренеш

Яурынына йәнлек түшкәләре, атылған ҡоштарҙы артмаҡлап Йәнбирҙе инә. Бик ныҡ арыған. Уралдың аяҡ аҫтына түшкәләрҙе ырғыта. Үҙе усаҡ яғына ыңғайлай. Кейемдәрен сисә башлай.

У р а л *(йәнлектәргә бер аҙ ҡарап торғандан һуң)*.
Атай, бына был йәнде —
Ҡасып һинән боҫһа ла,
Һис йәлләмәй тотҡанһың,
Муйынына бысаҡ һалғанһың.
Беҙҙе лә шулай берәй йән
Килеп эҙләп тапмаҫмы,
Беҙгә лә бысаҡ һалмаҫмы?
Й ә н б и р ҙ е .   Көнө бөтөр һәр йәнгә
Беҙ үлеме булабыҙ.
Кешене тотоп ашарлыҡ
Бында бер йән тыумаған,
Үлем бында булмаған.
У р а л .   Атай, Үлемде эҙләһәң,
Уны табып буламы?
Тап килтереп тотҡандан һуң,
Башына етеп буламы?
Й ә н б и р ҙ е .   Үлем тигән яуыз ул
Күҙгә һис тә күренмәй,
Килгәне һис беленмәй
Йәшәй торған януар ул.
Уға тик бер сара бар:
Дейеү-батша ерендә
Әйтәләр, бер шишмә бар,
Шул шишмәнән һыу эскән
Һис тә үлмәй йәшәй, ти,
Үлемгә бирешмәй, ти.

## Өсөнсө күренеш

Сытыр ҡосаҡлап, Йәнбикә инә. Ботаҡтарҙы усаҡ янына килтереп һала. Урал уның янына йүгереп килә лә йәһәт кенә ташты ташҡа ышҡып, осҡон сығарып, усаҡ тоҡандырырға керешә. Йәнбирҙе эргәләге ташҡа ултыра. Шул саҡ Шүлгән инә. Ҡулында үлән бәйләме.

Ш ү л г ә н. Атай, арыҫлан тирләгән
Арҡаларын ҡоротоп һөрттөм,
Һыуынмайса һыу уртламаҫ.
Бәйләп ҡуйҙым...
*(Үләнен ерге ырғыта ла усаҡ янына килә.)*

Й ә н б и р ҙ е. Ярай, хуп, улыма бына.
Әсәһе, йөрәгем яна,
Сарсаным, бирсе, ҡана,
Ҡабырсаҡтан ауыҙ иттер!
*(Йәнбикә ҡабырсаҡты килтерә.)*

Й ә н б и к ә. Мә, атаһы,
Һыуһындарың ҡанһын.
Мин шишмәгә... *(Сыға.)*

Й ә н б и р ҙ е *(ҡабырсаҡты ҡулына алып асҡас, асыулы)*.
Кем ҡағылды ҡабырсаҡҡа?
Шүлгән, Урал килегеҙ!
Ҡулға суҡмар тоторға,
Ҡошҡа шоңҡар сөйөргә,
Әле арыҫлан менергә
Быуыныгыҙ ҡатмаған,
Миҙгелегеҙ етмәгән,
Кемегеҙ ҡан уртлаған?

Ш ү л г ә н. Юҡ, беҙ түгел! Түгел!

У р а л. Ҡабырсаҡҡа ҡағылыусы булманы!

Й ә н б и р ҙ е *(һуйыл таяҡ алып)*.
Йә, таныгыҙ, кем эсте?

Урал менән Шүлгәнгә алмашлап һуға башлай.
Шүлгән һуғыуҙарға түҙмәй.

Ш ү л г ә н. Атай, һуҡма, атайҡайым!
Мин... тәмләнем... бер йотом...

Й ә н б и р ҙ е. Шулаймы ни? Мә, бынығы
Ата һүҙен тотмағанға!
Ә бынығы — йәшең етмәй,
Тыйылғанды уртлағанға!

Ә быныһы, өндәшмәйсә
Алдашырға ҡурҡмағанға.
Ә быныһы…

Һамаҡлай-һамаҡлай Шүлгәнде туҡмай.
Урал унының ҡулынан тотоп ала.

Й ә н б и р ҙ е . Ә… һиңә лә кәрәкме ни?!

Уралға һуғырға итә, тик Урал унының ҡулын ысҡындырмай.

У р а л . Атаҡайым, уйласы,
Ҡулыңдағы һуйылға
Күҙ йүгертеп ҡарасы!
Был һуйыл да йәш булған,
Әле шартлап һынырҙай
Ҡыу таяҡҡа әүерелгән.
Һин дә шулай ярһыуыңдан
Үлемдең үҙен күрергә
Әҙерләндең түгелме?
Бөгөн ағамды үлтерһәң,
Яңғыҙ тороп ҡалғастын,
Ошо һуйыл кеүек һулып,
Ҡартлыҡ баҫып алғастын,
Һунарға кәрең бөткәстен,
Бәйҙә торған арыҫланың
Аслығынан тилмереп,
Ботарлаһа үҙеңде,
Ҡаршыларға тура килер
Бер ҡасан да күрмәгән,
Мәкер, яуыз үлемде.

Уралдың һүҙҙәренән һуң Йәнбирҙе уйға ҡала һәм улын туҡмауҙан туҡтай.

Й ә н б и р ҙ е . Күҙгә һис тә күренмәй,
Беҙгә үлем киләлер.
Мине шулай туҡмарға ла
Ҡоторторға итәлер…

Ут һүнә.

## Дүртенсе күренеш

Усаҡта ут тоҡандырылған. Йәнбирҙе, ауыҙ эсенән мөңрәй-мөңрәй, таш өҫтөндә бысаҡ ҡайрай. Урал менән Шүлгән усаҡ янында. Йәнбикә инә. Турһыҡтар элепгән көйәнтә аҫҡан. Турһыҡтарҙа һыу.

Йәнбикә. Йәһәтерәк. Ҡара болот килә,
Усаҡ һүнер, ямғыр сылатһа.
Йәнбирҙе. Шүлгән, улым, үҙең атып алған
Аҡҡошто...
Шүлгән. Ана, түбәләстә ята ул ҡош
Йән бирә алмай тыпырсына.
Йәнбирҙе. Йүкә ал да, улым, йәһәт
Аяҡтарын уның сырма!

Шүлгән йүкә ала ла түбәләскә менеп аҡҡоштоң аяҡтарын бәйләй. Шул саҡ аҡҡош телгә килә.

Аҡҡош *(тауышы)*. Ил күрергә сыҡтым мин,
Ер ҡошонан түгелмен,
Йәшәй торған илем бар...
Урал. Атай, аҡҡош телгә килде,
Әҙәмдәрҙең телен белде?!
*(Барыһы ла тын ҡалып тыңлай.)*
Аҡҡош. Бар ҡоштарға баш булған
Самрау атлы атам бар,
Ҡояш тигән әсәм бар.
Самрау менән Ҡояштың
Һомай тигән ҡыҙы мин.
Әле лә батша атайым.
Ебәрегеҙ, һеҙ мине
Үҙ илемә ҡайтайым,
Атам барыбер табыр ул,
Килеп, үсен алыр ул!
Ебәрегеҙ, һеҙ мине,
Илемә мин ҡайтайым,
Теләһәгеҙ, йәншишмәгә
Юл өйрәтеп китәйем.
Йәнбикә. Йәншишмәгә?
Йәнбирҙе. Үлемһеҙлек шишмәһенә
Юл өйрәтәм тинеме?
Йәнбикә. Йә, уландар, атаһы,
Был хәлдә ни ҡылырға?

Й э н б и р ҙ е. Йолаһы шул:
Шүлгән аулап алған ҡош ул —
Хөкөм һунарсы ҡулында.

Ш ү л г ә н. Минең тәүге һунарымдың
Табышын ысҡындырмам,
Аҡҡош, юҡҡа ялбарма!
Әсәй, тоҡандыр усаҡты,
Атай, ҡана бысаҡты!

У р а л. Туҡта, Шүлгән, ишеттеңме,
Ябай аҡҡош түгел ул.
Тере һыулы йәншишмәгә
Юл күрһәтәм тине ул.
Әле йәшһең, өлгөрөрһөң,
Башҡа ҡошто бысаҡларға,
Ҡыҙыҡмасы бысраҡ данға,
Буялмасы изге ҡанға!

Ш ү л г ә н. Юҡ, ҡустым, кит, кит юлымдан,
Бер аҡҡошто йәлләр булмам.

У р а л. Аҡылыңа килсе, ағай,
Һомайғошто үлтермәйек...
Йәншишмәгә юл беләйек?!

Ш ү л г ә н. Үҙем табам юлды!

У р а л. Зинһар, теймә был аҡҡошҡа!

Шүлгән атаһынан бысаҡ алырға тип тауҙан аҫҡа төшә. Урал шул арала тиҙ генә аҡҡоштоң аяҡтарын бауҙан ысҡындыра. Аҡҡошто өс аҡҡош күтәреп алып оса. Шүлгән аҡҡош осоп киткән яҡҡа ҡарап торған Урал янына килә.

Ш ү л г ә н. Ҡайҙа иттең минең табышымды?

У р а л. Серле ҡош тип әйттем, ышанманың.
Ҡанатынан өс ҡауырһын һелкте,
Өс аҡҡошҡа улар әүерелде,
Һомайғошто күтәрҙеләр бергә,
Остолар шул күҙ күрмәгән илгә...

Й э н б и р ҙ е. Әй уландар, татыу түгелһегеҙ,
Юҡтан ғына ыҙғыш-бола ҡуба,
Йәншишмәнең ҡайҙа икәнлеген,
Ҡалманығыҙ һорап ниңә унан?
Йә, килегеҙ инде яҡыныраҡ,
Васыят итеп әйтер һүҙем бар:
Арыҫланға менеп атланығыҙ,
Аҡҡош осҡан яҡҡа юл алығыҙ,

Үлем осрай ҡалһа, юҡ итегеҙ,
Йәншишмәне барып, һеҙ табығыҙ!

Урал, Шүлгән. *(Бергә.)* Ярай, атай!

Ут һүнә. Сәхнә әйләнә башлай.

### Бишенсе күренеш

Сәхнә уртаһынан ике яҡҡа ике юл китә. Ситтә йыуан имән үҫә. Уның төбөндә аҡ һаҡаллы бер ҡарт тәсбих тартып ултыра. Арыҫлан үкергән тауыш ишетелә. Юл биштәрен аҫҡан Шүлгән менән Урал инә. Арығандар.

Урал. Бер аҙ ҡарама төбөндә
Ял итәйек, әйҙә... *(Ҡартты күреп ҡала.)*
Тегендә?!

Шүлгән. Шым! Ҡысҡырма улай! Бәлки
Тура юлды был ҡарт беләлер?

Һаҡ ҡына картҡа яҡын киләләр. Ҡарт та уларҙы шәйләп ала. Таяғына таянып тороп баҫа.

Шүлгән. Әссәләмәғәләйкүм!

Урал. Иҫәнлек-именлекме?!

Ҡарт. Вәғәләйкүмәссәләм!
*(Эстән генә уҡынып доға ҡылып ала.)*
Сер булмаһа ҡай тарафҡа
Юлландығыҙ, уландарым?

Шүлгән. Ай аҡһаҡал, талсыҡтыҡ,
Алыҫҡа юлға сыҡтыҡ,
Үлем тигән яуызды
Күрергә тип ашыҡтыҡ.

Урал. Илен күреп, үҙен белеп,
Юҡ итергә уйланыҡ.

Шүлгән. Юлды белһәң, изге ҡартым,
Өйрәт беҙгә?

Ҡарт. Туғандарым, уландарым,
Изге юлда икәнһегеҙ.
Бик мәслихәт.
*(Ике юл сатына килә)*
Һулға китһәң, юл буйы
Уйын-көлкө төн буйы,
Ҡайғы-этлек күрмәйсә,
Рәхәт йәшәй байманда

Бүре, һарыҡ яланда.
Бергә йәшәп, дуҫ булып,
Самрау ҡошҡа баш эйеп,
Ҡан да эсмәй, ит еймәй,
Һис үлемгә юл ҡуймай
Йәшәп килгән бер ил бар?

Урал. Ә йәншишмә ҡайҙа?

Ҡарт *(уны ишетмәй)*. Уңға китһәң — юл буйы,
Яуызлыҡта дан алған
Ҡатил батша иле бар.
Тау-тау кеше һөйәге,
Ҡанға батҡан ере бар.

Урал. Рәхмәт, олатай!

Шүлгән. Рәхмәт, рәхмәт!

Ҡарт яйлап барып урынына ултыра. Урал менән Шүлгән юл сатына килә.

Урал. Ағай, ни ҡылайыҡ!
Һаман бергә барайыҡмы!
Ҡайһы илдә ни булғанын
Бергә барып күрәйекме?

Шүлгән *(уйланып)*. Бергә китһәк, юлдар оҙон,
Кәрәкмәҫ һис ваҡыт һуҙыу.

Урал. Кем һуң уңдан китер, ә кем һулдан?
Ғәҙел булыр беҙ шыбаға тотһаҡ.

Шүлгән *(сыбыртҡы һабын тотоп)*. Бына!
Өҫкә сыҡҡан — һулға,
Бәхет илен күрер юлға!

Шыбаға тоталар. Уралдың ҡулы өҫкә сыға.

Шүлгән *(үпкәләп)*. Һаман һиңә иң яҡшыһы!
Булмай! Дөрөҫ түгел былай!

Урал. Йәрәбә йәрәбә инде.
Миңә яҙҙы.
Самрау илен мин күрәйем.

Атларға йыйына. Шүлгән уның алдына сығып.

Шүлгән. Мин бит әле һиңә ағай кеше,
Минең һүҙем өҫтөн,
Мин барам!
Һин уңдан кит!

Урал *(ҡулдарын ҡаушырып)*. Мәйелең, мин уңға китәм
Ҡатил батшаны белергә,

Ҡан-йәш илен күрергә,
Ҡаршы торорға үлемгә!

Ш ү л г ә н . Рәхмәт, ҡустым!
Иҫән йөрө, ҡайтыр юлда
Осрашырбыҙ бәлки...

У р а л . Хуш, Шүлгән! Самрау ҡыҙына
Минән сәләм еткерерһең.

Ҡосаҡлашып хушлашалар. Икеһе ике юлдан атлап китәләр. Сәхнәлә ут һүнә. Арыҫлан үкергән тауыш ишетелә.

**Шаршау**

## Икенсе бүлек

### Беренсе күренеш

Шаршау ябыҡ. Шомло көй ишетелә. Сәхнәнең һул яғында Урал күренә. Ҡулында уҡ-һаҙаҡ. Күктән ҡош күҙләй. Сәхнәнең уң яғынан әкрен генә атлап бик йолҡош кейенгән ҡарсыҡ менән уны ҡултыҡлаған сибәр ҡыҙ күренә. Урал уларҙы күрмәй. Күккә уҡ атып ебәрә лә ҡоштоң ергә төшкәнен күҙәтә. Ҡош ҡарсыҡ менән ҡыҙҙың аяҡ аҫтына ғына килеп төшә. Улар ҡурҡып тертләп китәләр ҙә ҡыуаҡ артына боҫалар. Урал уларҙы күреп ҡала.

У р а л . Әй, кемдәр һеҙ? Ҡурҡмағыҙ,
Мин юлбаҫар түгел!
Мин йыраҡтан киләмен,
Үлем тигән яуызды
Үлтерергә уйланым.
Сығығыҙ! Миңә был илдә
Ни булғанын һөйләгеҙ!

Ҡарсыҡ менән ҡыҙ сығалар.

Ҡ а р с ы ҡ . Иҫәнме, батыр егет!
Изге уйҙа икәнһең.
Тыңла беҙҙе,
Еребеҙҙе
Ҡатил яуыз яулаған.
Инде уға ҡаршы торор
Ир-егеттәр ҡалмаған.
Минең дә ун балам булды
Ғәзиздәрем, күҙ нурҙарым,

Ҡатилдың фарманы менән
Һәләк булды биш улым.
Бында шундай йола бар:
Йыл да барыһын йыйҙырып,
Ир-егетте, ҡыҙҙарҙы,
Һарайға хеҙмәтсе һайлай.
Ҡалғандарын барыһын,
Ҡул-аяғын бәйләтеп,
Ҡыҙ-ҡырҡынды ҡорбанға тип,
Тереләй һыуға һалдыра.
Ә ирҙәрҙе шунда уҡ
Усаҡ яғып яндыра.
Атаһы өсөн, үҙе өсөн,
Үҙе тыуған көн өсөн
Ҡанлы ҡорбан уҙҙыра.

Урал. Улай икән хәлдәр, ул яуыздың
Яуызлығын туҡтатырлыҡ кеше
Булманымы һеҙҙең илдә?

Ҡарсыҡ. Булды, булды, тик барыһы үлде,
Минең ҡартым, уландарын яҡлап,
Ташланғайны һарай ярандарына,
Шул уҡ көндө уны, һис йәлләмәй,
Тереләй ергә күмеп үлтерҙеләр.

Урал. Ә һеҙ нисек ҡасып ҡотолдоғоҙ?

Ҡарсыҡ. Ошо ҡыҙым ғына тере ҡалғас,
Икәүләп беҙ ҡастыҡ урманға.
Шулай ҡасҡан ир-ат күп бында.
Егет, изге икәнһең,
Яҡшы уйҙа килгәнһең,
Бер әсәнең улыһың,
Ары барма, ҡайт кире,
Ҡанлы ергә килгәнһең,
Яуыз илгә килгәнһең.

Урал. Һыуҙар кисеп, тау ашып,
Күп йыл буйы килгәнмен,
Күп юлдарҙы уҙғанмын.
Күҙ йәшергән үлемде
Эҙләп бында тапмаһам,
Башын сабып өҙмәһәм,
Урал булып йөрөмәм!
Мә, алығыҙ, һеҙгә бер туйымлыҡ.

Ҡош түшкәһен ҡарсыҡҡа тоттора ла, сибәр ҡыҙға ҡарай-ҡарай, «хушығыҙ!»тип сығып китә.

Ҡ а р с ы ҡ . Рәхмәт, улым! Иҫән-аман йөрө!
Насип итер бәлки тағы күреү.

## Икенсе күренеш

Ҡыҙ менән ҡарсыҡ сығып китәләр. Шомло көй көсәйә. Сәхнәлә халыҡ шауы. Әкренләп сәхнә асыла. Унда бер яҡта — ир-егеттәр, бер яҡта ҡатын-ҡыҙҙар теҙелгән. Ирҙәр билгә тиклем шәрә. Ҡатын-ҡыҙҙар эске күлдәктә. Сәхнә уртаһында Ҡатилдың тәхетен ҡуя торған менбәр. Ярандар сыбыртҡы менән рәттәрҙе тигеҙләп йөрөй. Урал күренә. Ул ир-егеттәр теҙелгән яҡта. Тауыш тына. Барабан һуғалар. Ҡолдар күтәргән матур тәхеттә батша ҡыҙын сығаралар. Урал, яҡшыраҡ күреү өсөн, алғараҡ сыға. Ярандар килеп, ҡамсы һелтәп, уны рәткә тигеҙләп китәләр. Батша ҡыҙы, рәт буйлап йөрөп, егеттәрҙе һайлай. Береһен дә оҡшатмай. Ситтәрәк торған Уралды күреп ҡала ла, уның янына килеп йылмайып, бер алма тоттора. Халыҡ геү итеп ҡала. Батша ҡыҙы бер яранға егетте һарайға илтергә ымлай ҙа, үҙе, тәхетенә ултырып, сәхнәнән сығып китә.

Ҡ а р т *(Урал янында тора)*.
Батша ҡыҙы һөйҙө бит,
Батша кейәүе булдың бит.
Я р а н . Әйҙә, һарайға!

Ҡамсы менән төртә. Урал ҡымшанмай. Яран һуғырға иткәндә, уның ҡамсыһын тотоп ала ла үҙен этеп йыға. Халыҡ быны күреп, «аһ!»итеп ҡала.

У р а л . Мин йоланы белмәйем,
Эш аҙағын күрәйем.
Аҙаҡ барһам барырмын,
Ҡыҙҙы эҙләп табырмын!

## Өсөнсө күренеш

Ярандар һарай яғына йүгерәләр. Шау-шыу тына. Дәһшәтле көй аҫтында бик йәмһеҙ ҡиәфәтле, һимеҙ кәүҙәле ҡурҡыныс йөҙлө Ҡатилды ҡолдар тәхете менән күтәреп алып сығалар ҙа менбәргә ултырталар. Ул тәхеттән төшөп, үҙе, рәт буйлап йөрөп, һарайына ҡолдар һайлай. Бер егеттең янына килеп.

Ҡ а т и л . Быныһы һарайға барыр! *(Икенсе егеттең беләктәрен ҡапшап ҡарай.)* Быныһы ла бара. *(Бер егеттең эсенә һуға. Егет һығыла.)*

Ҡатил. Быныһы ҡорбанға булыр.

Егеттәрҙе һайлап бөткәс, ҡыҙҙар янына килә. Һайлай башлай. Бер ҡыҙға һоҡланып ҡарап тора ла ярандарына ымлай.

Ҡатил. Тешен ҡарағыҙ! *(Яран ҡыҙҙың ауыҙын астырып ҡарай. Ҡатил үҙе ҡыҙҙың түштәрен, билен ҡапшап ҡарай.)*

Ҡатил.
Һарайға был ярар,
Бүтәнен үҙегеҙ һайлағыҙ,
Кәрәгенсә алығыҙ.
Ҡалғандары әсәмдең,
Мине йыуған ҡойомдоң
Ҡорбанына ҡалыр!

## Дүртенсе күренеш

Ярандар ҡыҙҙарҙы һайлай башлай. Сыр-сыу китә. Шул саҡ тәхеттә батша ҡыҙы килеп етә.

Батша ҡыҙы *(Урал яғына ҡарап)*.
Егет, һине һайланым,
Һарайыма барманың,
Алма биреп ымланым,
Мине тиңгә алманың,
Кире ҡаҡтың һүҙемде,
Бөтә ҡолдар алдында
Ҡара иттең йөҙөмдө.

Ҡатил был һүҙҙәрҙе ишетеп, тәхетенән төшә.

Ҡатил.
Ҡайһы ырыу егетенән
Минең ҡыҙым хурланған?

Урал янына килеп, асыуланып.

Ҡатил.
Эй, егет, һин затымды
Ҡатил батша атымды
Мин биләгән һәр ерҙә
Ҡошо-ҡорто, йәнлеге,
Ишетеп тә, күреп тә,
Гүрендәге үлек тә,
Танығанын беләһең!
Ҡыҙым әйткәс бармайса,
Нимә уйлап тораһың?
Ниңә йолам боҙаһың?!

Урал. Батша тигән нәмәне,
Кеше һуйыр йоланы,
Ишетеп тә, күреп тә,
Нисә йылдар йөрөп тә
Һис бер ерҙә күрмәнем,
Барлығын да белмәнем.
Үлем тигән яуызды
Үлтерергә эҙләйем.
Бына ҡарап торайым,
Бар йолаңды күрәйем,
Аҙаҡ сиктә үҙ уйым
Һиңә әйтеп бирәйем.

Ҡатил *(ҡыҙына)*.
Бындай тинтәк һайлама,
Күҙең юҡҡа талдырып,
Юҡ кешегә ҡарама,
Ҡайтсы, ҡыҙым, ҡайт әйҙә,
Һарайыңа кит әйҙә!

Ҡатил *(тәхетенә ултырып)*.
Ҡорбандарҙы тотмағыҙ.
Ҡыҙын һыуға һалығыҙ,
Ирен утҡа атығыҙ!
Был егетте, бығаулап,
Минең янға оҙатығыҙ!
*(Дүрт батырына ымлай.)*

## Бишенсе күренеш

Халыҡ сыр-сыу килә. Әсәләр, балалар илаша башлай. Шул саҡ Урал алға сығып.

Урал. Мин күренмәҫ Үлемде
Юҡ итергә сыҡҡанмын,
Ҡан ҡойоусы батшанан
Кеше ашар дейеүҙән,
Бар кешене ҡотҡарыу,
Йәншишмәнән һыу алып,
Үлгәндәрҙе терелтеү
Өсөн тыуған батырмын!
Халыҡ илап торғанын
Күҙ алдында күргәндә,
Йәнде алыр яуыз үлем
Кешегә ҡулын һуҙғанда,

Ирмен тигән ир батыр
Шып-шым ҡарап торормо?
Кит, ярандар, артабан,
Төш, ҙур батша, арбанан,
Ҡолдар ҡулын сисегеҙ!

Ҡатил *(ярһып)*.
Үлем эҙләп йөрөһә,
Ҡанға һыуһап тилмерһә,
Күрһәтегеҙ Үлемде,
Танытығыҙ илемде!

Дүрт батыр алға сыға.

Беренсе батыр. Алыштанмы,
Тартыштанмы?Һайла!

Урал. Әрәм булып ҡуймағыҙ,
Тәүҙә шуны уйлағыҙ,
Үҙегеҙҙән көслөрәк
Берәй хайуан һайлағыҙ!
*(Батырҙар көлә башлай.)*

Ҡатил *(көлә-көлә)*.
Ай-һай батыр икәнһең,
Ҡанһыраған икән был,
Йәнһерәгән икән был.
Һарайымды күтәргән
Үгеҙемде килтерегеҙ:
Үгеҙ ҡылыр ҡылыҡты,
Һеҙ, батырҙар, тик тороғоҙ!

Халыҡ «Аһ!» итеп ҡала. Илаша башлайҙар.

Халыҡ. Әрәм генә була инде егет,
Үгеҙ һынлы үгеҙҙе
Нисек еңер инде егет?!
Әрәм генә була инде,
Аһ, был егет аҫыл ине,
Аһ, был егет еңһен ине!
Аһ, был егет еңһен инде.

## Алтынсы күренеш

Шул саҡ батша ҡыҙы йүгереп килеп сыға ла Ҡатилдың аяҡ аҫтына ташлана.

Батша ҡыҙы. Атаҡайым, ҡуйсәле,
Юҡҡа әрәм итмәле,

«Кейәү һайла үҙең!» — тип,
Миңә биргән һүҙең бар.
Был егетте һайланым,
Кейәүем, тип уйланым.
Һөйләшергә егеттең
Һис яйына ҡуйманың.
Атаҡайым, ҡуйсәле,
Юҡҡа әрәм итмәле!

Ҡатил. Был егетте яланға
Үгеҙгә һеҙ тиҙ генә
Илтегеҙ!

Батша ҡыҙы илай. Ярандар Уралды, арттарынан эйәртеп, алып сығып китәләр. Халыҡ яланды күҙәтә.

Беренсе егет. Батыр егет үгеҙҙе
Мөгөҙөнән алды бит.
Ә үгеҙ һуң, ә үгеҙ,
Ысҡыналмай ҡулынан,
Тубығынан батты бит.

Бер ҡыҙ. Ана, ана, көсәнеүҙән
Ауыҙынан үгеҙҙең
Ҡап-ҡара ҡан аға бит!

Икенсе егет. Ҡанһыраған ауыҙында
Өҫкө теше төштө бит!

Икенсе ҡыҙ. Үгеҙ тамам хәлһеҙләнде,
Ай-һай егет көслө бик.
Шаҡарып, ике мөгөҙҙө
Батҡан ерҙән үгеҙҙе...

Батша ҡыҙы. Күтәреп алды бит егет! *(Шатланып.)*
Торманы ла һис ебеп!

Халыҡ шаулай, ҡыуана. Ярандар уларҙы тыя алмай бер була.

Халыҡ. Һай, был батыр ҡайҙан килгән?
Көслө лә, таҫыллы ла,
Бер кем еңмәҫ үгеҙҙе лә
Еңде! Дан батырына!
Еңде! Дан был батырға!

Сәхнәгә өҫ кейемдәре йыртылған, үҙе талсыҡҡан Урал сыға. Батша ҡыҙы уға һыу килтерә, ҡарттар арҡаһынан ҡаға.

Урал *(һыу эсә-эсә үгеҙ яғына ымлап)*.
Кеше көсөн күрҙең һин,

Хәлһеҙлегең белдең һин,
Кешегә мөгөҙ сайҡама,
Еңермен, тип айҡанма!

### Етенсе күренеш

Шул саҡ Уралды Ҡатилдың дүрт батыры уратып ала. Улар ҡарап тороуға бик бәһлеүән күренәләр. Бер батыр Уралға яҡын килә лә ҡулындағы тәгәсте һелтәп осора.

1-се батыр. Йәнең сыҡһа ҡулымда,
Тәнең ҡайҙа ташлайым?
Сойорғотҡас та үлмәһәң,
Ҡайһы илгә сөйәйем?

Урал. Дүртегеҙ ҙә килегеҙ,
Батыр көсөн белегеҙ!
Ҡулығыҙҙа йән бирһәм,
Арыҫланыма бирегеҙ.
Көсөгөҙ етһә ташларға,
Йәншишмәгә сөйөгөҙ!
Инде һеҙ ҙә әйтегеҙ,
Минең ҡулға төшһәгеҙ,
Он-талҡандай итегеҙҙе,
Күбәләктәй йәнегеҙҙе
Ҡайһы ерҙән табайым?
Кәүҙәгеҙҙе күтәреп,
Ҡайһы ергә бырғайым?

Икенсе батыр. Көсөң етһә атырға,
Һыртты ергә һалырға,
Батша менән ярандарҙың
Алдына ҡарай ташларһың.

### Һигеҙенсе күренеш

Батырҙар дүртеһе бер юлы Уралға ташлана. Көрмәкләшәләр.Урал береһен батша алдына һелтәй. Ә ҡалған өсәүһе ярандары янына барып төшәләр. Урал барып Ҡатилды ла һаҡалынан алып күтәреп ташлай. Батша ярандары Ҡатилды күтәреп сығып ҡасалар. Халыҡ Уралды уратып ала. Батша ҡыҙы ла Урал янына килә. Халыҡ араһынан бер ҡарт алға сыға.

Аҡһаҡал. Тәңре бирмәҫ ярҙамды
Егет, беҙгә атҡарҙың,

Ил ҡаплаған яуыздың
Утлы яуын аҡтарҙың.
Инде, егет, нишләйек,
Ниндәй бүләк бирәйек,
Ни тип әйтеп ҙурлайыҡ?!

Урал. Йәншишмәне эҙләп сыҡҡан
Урал тигән егет мин.
Һис бер ҙурлыҡ кәрәкмәй,
Ил батыры шул булыр —
Кеше һөйөр ир булыр.
Һеҙҙең шатлыҡ — минеке,
Минең шатлыҡ — һеҙҙеке.
Илдең барын йыяйыҡ,
Арағыҙҙан берәүҙе
Башлыҡ итеп ҡуяйыҡ!

Аҡһаҡал. Егет тә егет икәнһең,
Йөрәгеңә таяныпп,
Беләгеңде һыҙғаныпп,
Килгән батыр икәнһең!
Һин ҡотҡарҙың Ҡатилдан,
Батыр тигән даның бар.
Һине һөйөп шаулашты,
Атаһы менән даулашты,
Батша ҡыҙын ал, егет,
Бында тороп ҡал, егет!

Халыҡ. Батша ҡыҙын ал, егет!
Бында тороп ҡал, егет!
Батша булып ҡал, егет!

Урал. Халыҡ һүҙен йыҡмамын,
Әммә оҙаҡ булмамын,
Ҡыҙҙы алып туйҙар уҙғас,
Сығырмын кире юлға.

Халыҡ. Урал! Урал! Батыр егет!
Дан һиңә, ҡотҡарыусы!
Беҙгә ирек, шатлыҡ биргән,
Бәхеткә юл ярыусы!
Ай Урал — ҡотҡарыусы!
Дан! Дан! Дан!

**Шаршау**

## Өсөнсө бүлек

Урал батыр йылан, аждаһаларҙы ҡырғас, Ҡәһҡәһә менән Зәрҡүм Әзрәҡә батшалығына ҡасалар. Ҡасып барған юлда Зәрҡүм Шүлгәнде осрата. Зәрҡүм — Ҡәһҡәһә тигән йыландар батшаһының йылан улы — әҙәм *(егет)* ҡиәфәте алған.

### Беренсе күренеш

Хозур тәбиғәт күренеше. Ҡоштар һайрай. Алыҫта күл күренә. Шүлгән ҡыуаҡ артына боҫа ла күл яғына уҡ тоҫҡай. Бер аҙ тоҫҡағас, атмай, кире тора. Икенсе яҡҡа тоҫҡай ҙа, тағы атмай.

Ш ү л г ә н . Лә-хәүлә, был ниндәй мөғжизә?
Өйрәк, аҡҡош, ҡыр ҡаҙы
Йөҙөп йөрөй, шундай күп!
Туғайында һарығы ла,
Бүреһе лә бергә йөрөй?!
Әтәс, тауыҡ, төлкөһө лә
Бер тирәгә йыйылған.
Барыһы шат, барыһы туҡ!
Бында бер хикмәт бар.
Ҡайтҡанда барыһын да ауలармын.
Әлегә серҙе белергә кәрәк...

Шул саҡ сәхнәнең ҡаршы яғында ҡобараһы осҡан, ҡасып килгән Зәрҡүм күренә. Шүлгәнде күреп ҡала ла ситтәге ағас олонона йәшенә.

Ш ү л г ә н . Кеше? Бында әҙәмдәр ҙә бар икән? *(Ағас янына килеп.)* Һин кем? *(Уҡ-һаҙағын әҙерләй.)* Сыҡ! Юғиһә... *(Атырға әҙерләнә.)* Йә!

З ә р ҡ ү м . Теймә миңә! Был мин — Зәрҡүм.

Ш ү л г ә н *(янын төшөрә)*. Таныш булайыҡ! Мин — Шүлгән.

З ә р ҡ ү м . Был яҡтарға нисек юлыҡтың һуң?

Ш ү л г ә н . Бик алыҫтан, оҙон-оҙаҡ киләм,
Бер ҡустым бар минең Урал тигән...

З ә р ҡ ү м *(тертләп китә)*. Урал?

Ш ү л г ә н . Әллә күрҙең үҙен?

З ә р ҡ ү м *(үҙен ҡулға алып)*. Юҡ, юҡ, былай ғына...

Ш ү л г ә н . Ҡустым менән шулай сыҡҡан инек
Үлем йәшәгән илде күрергә,

Йәншишмәгә юлды белергә.
Юлдарыбыҙ бына айырылды,
Ул тегендә, ә мин бына бында...

Зәрҡүм Шүлгәндең бер ни белмәгәнен һиҙеп ҡалып, уны Әзрәҡәнең улымын тип алдарға була.

З ә р ҡ ү м . Был ерҙәрҙә дейеү-батша иле,
Әзрәҡә тип нарыҡлайҙар уны,
Мин шул Әзрәҡәнең кесе улы.
Ш ү л г ә н . Батша улы? Ошо бәхет иле,
Барыһы ла Әзрәҡәнең ере?!
З ә р ҡ ү м . Теләһәң мин һине алып китәм,
Атайымда үҙем ҡунаҡ итәм!
Ш ү л г ә н . Юлда йөрөп талсыҡтырҙы былай...
З ә р ҡ ү м . Арыҫланға мен дә, әйҙә юлға!
Бер арауыҡ әле барыу кәрәк!

Улар бергә сығып китә. Сәхнә артында арыҫлан үкергән тауыш ишетелә.

### Икенсе күренеш

Батша бүлмәһе. Дейеүҙәр батшаһы Әзрәҡә йыландар батшаһы Ҡәһҡәһә менән икәүләп, иҙән яҫтығына ҡырын ятып, сәй эсә-эсә һөйләшәләр. Янында ялсылары бар. Бер һаҡсы дейеү тора.

Ә з р ә ҡ ә . Исеме Урал тиһең инде?
Ҡ ә һ ҡ ә һ ә *(бармаҡтарын бөгә-бөгә Әзрәҡәгә һөйләй)*.
Ун бер башлы йыланды ла,
Туғыҙ башлы йыланды ла
Ҡылыс менән тураны,
Йыландың йөрәген ярып,
Алтын асҡысымды алып,
Таяғымды урланы,
Сер һарайын асты ла,
Йылан баштарын сапты ла,
Батырҙарҙы сығарҙы,
Бикләп тотҡан ҡол ҡыҙы
Гөлөстанды ҡотҡарҙы.
Бар терәгем — аҡ йылан да
Еңә алманы уны, йотманы.
Үҙем күрҙем: серле таяғымды —
Мине утта янмаҫ, һыуҙа батмаҫ иткән

Серле таяғымды тотҡанын.
Таяғым юҡ — шуға көсөм юҡ,
Уралға тик шуға үсем күп!

**Әзрәҡә.** Эй, дейеүҙәр, ниңә тындығыҙ?
Ер йөҙөнә Урал тыуған мәлдә,
Ниңә шымып, ҡайҙа булдығыҙ?!

**Дейеү** *(Әзрәҡәгә кеселекле баш эйеп)*.
Анау саҡта, ай, батшам,
Бер йәш бала тыуғанда,
Уның тауышы килгәндә
Күктә осҡан дейеүҙәр
Бары ҡолап төшкәйне,
Уны урлап алырға,
Үлтереп юҡ ҡылырға
Барған дейеү, ендәрҙең
Барған бере ҡурҡыуҙан
Йөрәге ҡубып үлгәйне.
«Алам!» тигән уйы ла
Йәншишмәгә төшкәйне.
Шаһым, сара эҙләйек,
Берәй кеше табайыҡ,
Самрау ҡоштоң аҡбуҙатын
Кеше аша алайыҡ,
Һис булмаһа — урлайыҡ!

**Әзрәҡә.** Аҡбуҙатты алырға,
Йә булмаһа ул атты,
Был донъянан юйырға,
Ете дейеү ебәрҙем.
Күктә торған буҙ аттың
Урынын үҙем күрһәттем.
Улар барып баҫтырҙы.
Тота алмаған, яҡшылап
Яндарына саҡырҙы.
Ат уларға килмәне.
Дейеүҙәрем ғәрлегенән
Кире иленә ҡайтманы,
Күктә ҡалды хур булып,
Етегән тигән исемдә.

**Ҡаһҡаһә.** Һомайҙың бит Һараты бар,
Айҙан тыуған ҡыҙы бар.

**Әзрәҡә.** Уларын урлап ҡараным,
Тотҡон итеп ҡараным,

Аҡбуҙ ғына килмәне,
Ҡыҙҙы күрәм, тимәне.

Ҡәһҡәһә. Хәҙер беҙгә шул кәрәк —
Кеше булған ир кәрәк.
Ҡояш ҡыҙы Һомайҙы
Арбап алыр ир кәрәк.
Ҡыҙ, яратып егетте,
Аҡбуҙ менән булатын
Бүләк итерҙәй булһын!

Әзрәҡә. Аҡбуҙ менән булат булһа,
Беҙ Уралды еңербеҙ!

Ҡәһҡәһә. Ер өҫтөндә Кешенән
Һис бер тарлыҡ күрмәбеҙ.

Әзрәҡә. Барын ҡулда тоторбоҙ! Ха-ха-ха-ха!

## Өсөнсө күренеш

Шул саҡ ишек асылып китә һәм Зәрҡүм инә. Әзрәҡәгә баш һала.

Зәрҡүм. Әзрәҡәм, олуғ батшам,
Мин Уралдың ағаһын
Алып килдем.

Ҡәһҡәһә *(кото осоп)*.
Уралдың... ағаһы? Нисек?!
Уралдан да көслө булһа,
Барыбыҙҙы тағы ҡырһа?

Зәрҡүм. Атай, һүҙ ахырын тыңла,
Шүлгән — ҡунаҡ ҡына бында.
Мин серемде асманым,
Әзрәҡә улымын, тиеп,
Шүлгәнде мин алданым.

Әзрәҡә. Һай, афарин, һай егет,
Беҙгә тап кеше кәрәк!
Кеше булған ир кәрәк!

Ҡәһҡәһә. Шүлгәнде ҡунаҡ итәйек!

Әзрәҡә *(дейеүгә)*.
Табын йый, ҡыҙҙарҙы саҡыр!
Үҙең күҙенә салынма!

## Дүртенсе күренеш

Дейеү йәһәт сығып китә. Зәрҡүм дә сыға. Тиҙ арала Шүлгән менән икәүләп килеп инәләр. Ялсылар йүгереп йөрөп уларға урын әҙерләй.

Зәрҡүм. Бына минең яңы дуҫым!
(*Әзрәҡәгә ҡарай биреп*)
Атай, беҙҙә ҡунаҡ булһын, эйеме?
Әзрәҡә. Әссәләмәғәләйкүм!
Әйҙүк, түрҙән. Танышайыҡ!
Шүлгән. Вәғәләйкүмәссәләм!
Исем-атым Шүлгән булыр.

Сәхнәгә тәмле-татлы емештәр күтәреп бер-нисә ҡыҙ сыға. Береһенән-береһе сибәр. Араһында иң сибәре — Айһылыу ҙа бар. Күңелле көй. Шүлгән ҡыҙҙарҙы күҙәтә. Айһылыуға күҙе төшә. Уны эйәртеп ҡарай. Зәрҡүм уның ҡыланыштарын күҙәтә.

Зәрҡүм. Оҡшаймы?
Шүлгән. Сибә-ә-әр!
Зәрҡүм (*алдай*). Минең һеңлем ... Айһылыу ул.
Әзрәҡә (*хәйләләп*). Кем оҡшай, шул һинеке.
Әгәр «ҡыҙымды» һайлаһаң,
Булырһың кейәү ... минеке!

Әзрәҡә Ҡәһҡәһәгә низер шыбырлай. Ҡәһҡәһә Айһылыуҙы ситкә саҡырып ала ла башҡалар ишетмәҫлек итеп.

Ҡәһҡәһә (*Айһылыуға*).
Әзрәҡә әйткәнсә йөрө!
Уға атайым, тиген,
Ҡунаҡ егет оҡшаһа,
Кейәү булыр ул һиңә.
Ул да кеше затынан.
Йылмайырға тартынма!
Айһылыу. Һуң?! Нимәгә?.. Юҡ!
Ҡәһҡәһә (*асыулы*).
Әгәр ҡушҡанды тотмаһаң,
Һиңә әҙер ут-ҡаҙан, йә иһә
Кәүҙәң өҙөләр урталай!

Айһылыу кире бейегән ҡыҙҙарға барып ҡушыла. Ул инде Шүлгән яғына йышыраҡ ҡарай. Шүлгән дә уға күҙ ата. Зәрҡүм ярҙамында тәүҙә Айһылыу сыға, аҙаҡ Шүлгәнде алып сығып китәләр. Улар бер-бер артлы сыҡҡанды күргәс, Әзрәҡә сәпәкәйләп, бейеүсе ҡыҙҙарҙы, ялсыларҙы сығып китергә ымлай. Барыһы ла юҡ була.

Ҡәһҡәһә (*Әзрәҡәгә*). Эш беште былай булғас!
Зәрҡүм. Шүлгән Айһылыуҙы оҡшатты.
Әзрәҡә. Айһылыуҙың минең ҡыҙым икәненә лә ышанды буғай.
Ҡәһҡәһә. Ә Айһылыу... Самрауҙың
Айҙан тыуған ҡыҙы шулмы ни?

Сибәр... йөҙөнән
Ай нурҙары бөркөлә шул!

Ә з р ә ҡ ә *(Зәрҡүмгә)*.
Инде эш һиндә ҡалды,
Шүлгәнде Самрау иленә
Барырға күндерәйек!
Һомайҙы ғашиҡ иттереп,
Аҡбуҙатын, булат ҡылысын
Ҡулыбыҙға төшөрәйек!

З ә р ҡ ү м. Батшам, әйтермен, ризамын.
Бергә сығып китербеҙ!

Ҡ ә һ ҡ ә һ ә. Әлегә туй, мәжлес кәрәк!

Ә з р ә ҡ ә *(шат)*. Шүлгән менән Айһылыуға
Никах иғлан итегеҙ!

**Бишенсе күренеш**

Шүлгән менән Зәрҡүм Самрау иленә китеп бара. Шүлгәндең арҡаһында юл муҡсаһы.

З ә р ҡ ү м. Һомай — Ҡош батшаһы ҡыҙы,
Шуға күлдә йәшәйҙер.

Ш ү л г ә н. Күп ҡалманы, ана бит күл!

З ә р ҡ ү м. Әйтәйемме һиңә бер һүҙ?

Ш ү л г ә н. Йә, әйт. Әйҙә бер аҙ ғына
Ял да итеп алайыҡ!

Таш өҫтөнә ултыралар. Шүлгән муҡсаһынан икмәк сығарып, уртаға бүлеп, Зәрҡүмгә тоттора.

З ә р ҡ ү м. Бынан бик йыраҡ та түгел
Ҡәһҡәһә тигән батша бар,
Унда йылан иле бар.
Ул батшаның ҡулында
Бик хикмәтле таяҡ бар.
Бер батыр ир килгән дә
Шул таяҡты урлаған, ти.
«Мин — Урал батыр!» тигән, ти.
Шунан һуң
Үҙе батша булған, ти.

Ш ү л г ә н. Урал? Минең ҡустым Уралмы ни?

З ә р ҡ ү м. Эйе, ул таяҡта ҡеүәт —
Утта янмай, һыуҙа батмай
Торған кеше булаһың, ти.

Шүлгән. Йә, әйт, әйтһәң тураһын!
Зәрҡүм. Ағай бит һин...
Шул таяҡты үҙеңә ал!
Ерҙә иң көслө йән һин булырһың!
Шүлгән. Ә Аҡбуҙ менән булатты?
Зәрҡүм. Уларын да ҡулға төшөр,
Барабыҙ һуң нимә өсөн?!
Шүлгән *(бер аҙ уйланып ултырғас)*.
Беҙгә таяҡ та кәрәгер.
Уралдан һорармын үҙем.
Зәрҡүм *(күктә ҡош тубы осоп барғанын күреп)*.
Ҡара, ана, ҡоштар! Киттек!
Шүлгән. Һомай һарайына киттек!

## Алтынсы күренеш

Ҡоштар тауышы. Бер аҙҙан тауыш тына бирә. Шүлгән менән Зәрҡүмдең ҡаршыһына сибәр бер ҡыҙ сыға.

Шүлгән *(Зәрҡүмдең еңенән тартып)*.
Ҡара, ҡара, Һомай үҙе буғай,
Ҡаршыбыҙға сыҡты әллә үҙе?
Һомай *(үҙенең Һомай икәнен белдермәй)*.
Һомай илен белгәнһегеҙ,
Уға төбәп килгәнһегеҙ,
Әйҙә, һарайға инегеҙ,
Һомай ҡайтыр, көтөгөҙ.
Бергә ҡунаҡ булығыҙ!
Зәрҡүм. Рәхмәт, һылыу!

Шүлгән менән Зәрҡүм һарай ишегенән ингәс тә һарайҙы томан баҫа. Иҙән уртаға ярыла, һәм Шүлгән менән Зәрҡүм баҙға ҡолай. Һомайҙың көлгәне ишетелә.

Шүлгән. А-а-а! Ҡотҡарығыҙ, беҙ ҡоланыҡ баҙға!
Һомай. Иҫеңдәме, Шүлгән, иҫеңдәме,
Миңә бысаҡ ҡайраған
Сағың иҫкә төштөмө?
Егет тигән Зәрҡүмең
Йылан егет — Зәрҡүм ул!
Шүлгән. Ә ниңә һуң баҙға бикләнең?
Һомай. Ҡан көҫәгән, йәш түккән,
Күптәр башына еткән
Уҫал йөрәгең бөтһөн!

Бәғерле йөрәк үҫһен!
Бөтә йәнде үҙеңдәй
Һөйөрҙәй күңел тыуһын!
Шуға саҡлы был ерҙә
Тере көйө шул гүрҙә
Башың ҡаңғырып ятһын.
Яҡшыға юлдаш булырһың,
Йыландарҙан ҡасырһың!
Яңы кеше ҡалырһың.

Сәхнә ҡараңғылана.

### Етенсе күренеш

Урал менән Һомай диалогы.
Сәхнәгә Урал сыға.

Урал. Кемдәр йәшәй был һарайҙа,
Хужалары ҡайҙа?

Бер ҡыҙ йүгереп сыға ла Уралды күреп ҡалып, кире инеп китә.
Һомай килеп сыға.

Һомай. Йә, егетем, төҫ-башың
Алыҫ илдән күренә,
Һүҙең һөйлә, тыңлайым,
Ҡулдан килһә, йомошоңа
Ярҙамыңдан булайым.

Урал. Үҙем мин йәш булһам да,
Биш ил барын белдем мин,
Береһендә үҙем тыуҙым,
Икеһен йөрөп күрҙем мин,
Ҡалған тағы икәүһен
Күрергә тип, сыҡтым мин.
Ҡайҙа ғына барһаң да,
Кемде генә күрһәң дә —
Береһе үҙен шаһ, тиә.
Икенсеһе баш эйә.
Көслө көсһөҙҙө иҙә,
Теләгәнсә ҡан ҡоя.
Үлемде табып, юҡ итеп,
Ил ҡотҡарыр уйым бар.
Һеҙҙең илдә Үлемдән
Ҡотолорға юл бар, тип,
Ишеткәйнем мин йәштән.

**Һ о м а й .** Һис ҡасан да үлмәҫлек,
Үлемгә буй бирмәҫлек,
Бик борондан донъяла
Йәшәп килгән яҡшылыҡ.
Инде үҙең теләһәң,
Донъяла һис үлмәҫкә,
Дейеү батша илендә
Йәншишмәнең һыуы бар.
Минең һиңә шартым бар.

**У р а л .** Йә, әйт шартың, ни булһа ла,
Теләйем үтәргә мин,
Үҙем өсөн генә түгел юлым,
Халҡым өсөн йөктөң иң ауырын
Күтәрәм мин.

**Һ о м а й .** Тыңла! Бөтә донъя ҡош төҫөн
Үҙ өҫтөндә биҙәгән
Бер ҡошто һин эҙләп тапһаң,
Минән ярҙам күрерһең,
Шишмәнән һыу ҙа алырһың!

**У р а л .** Һиңә ҡошоң табырмын,
Һинән ярҙам алырмын.
Алтын тейәр йөгөм юҡ,
Ынйы тағыр кейемем юҡ,
Бүләгең һуң ни булыр —
Әйтсе, белеп китәйем!

**Һ о м а й .** Ауырлыҡта-тарлыҡта,
Һиңә юлдаш булырҙай,
Күктә тыуып, күктә үҫкән,
Ерҙә тоҡом йәймәгән,
Әзрәкәнең дейеүе,
Мең йыл ҡыуып тотмаған,
Әсәйемдән бирелгән,
Донъялағы йөрәгем —
Үҙем һөйгән егеткә
Бирә торған бүләгем —
Аҡбуҙ толпар булыр ул.
Икенсеһе бүләгемдең,
Утка ҡаршы — ут булыр,
Һыуға ҡаршы — һыу булыр.
Ен-дейеүҙең барыһын
Ҡуй-һарыҡтай өркөтөр,
Булат ҡылыс бирермен!

Урал. Риза! Риза һин теләгән ҡошто
Табып алып килергә,
Тик әйт әле һин миңә,
Йәшермәйсә һис кенә,
Оло юлға сыҡҡайныҡ,
Шүлгән ағайым менән.
Берәй көндө ошонда,
Минең кеүек килмәнеме,
Күрмәнеңме һин уны?
Һомай. Шүлгән? Шүлгән...
Юҡ, юҡ әле бер ҙә
Ундай егетте күрмәнем,
Барлығын да белмәнем.
Әлегә һин ҡунаҡ бул да
Аҙаҡ юлға сығырһың.

Сәхнәгә сибәр ҡыҙҙар сыға. Тәүҙә ҡош тунында бейейҙәр. Аҙаҡ тундарын һалып, Уралды һыйлы табынға саҡыралар. Уратып алып сығып китәләр. Күңелле көй оҙата.

## Һигеҙенсе күренеш

Урал бер ҡыҙҙы ҡулдарында күтәреп алып сыға. Ҡыҙ йоҡлап киткән. Уларға ҡаршы йүгереп ҡыҙҙар сыға.

Ҡыҙҙар *(Урал тотҡан ҡыҙҙы ҡарап)*. Айһылыу? Айһылыу бит?! Айһылыу! *(Ҡыуанышалар.)*

Урал. Сеүегеҙ! Әле йоҡланы,
Юлда килеп бик арыны...

Ҡыҙҙар түшәк йәйеп, ҡыҙҙы йоҡлатырға һала. Ул арала бер ҡыҙ, йүгереп сығып китеп, Һомайҙы килтерә. Һомай килеп Айһылыуҙы ҡарай ҙа ҡыуанысын йәшермәй.

Һомай *(Уралға)*. Һай, егетем, егетем,
Батыр егет икәнһең.
Мин һораған ҡошомдо
Дейеү менән алышып,
Яулап алып килгәнһең.
Урал *(ғәжәпләнеп)*. Ошо ҡошто һорауыңды,
Мин һис кенә белмәнем,
Уны тапҡан ул күлдә
Дейеү-маҙар күрмәнем.
Нисек ул ҡыҙ икәнен,
Ҡош тунында йөрөгәнен
Ҡайҙан белдең һуң үҙең?

Һомай Айһылыу янына бара. Айһылыу уяна. Тороп ултыра.

А й һ ы л ы у. Апай, һинме? Өнмө был?!
Төшөммө был, әйтегеҙ!

Һ о м а й. Һаумы, һеңлем, нисек дейеү
Киткәнеңде һиҙмәне,
Арттан ҡыуа төшмәне?!

А й һ ы л ы у. Дейеү? *(Хәтеренә төшөрөп.)*
Шаян ҡыҙ сағымда
Дейеү мине урланы шул,
Аҙаҡ кейәүгә биреп ҙурланы.
Кейәүем кеше, ир ине.
Бергә оҙаҡ торманы,
Кейәүем китеп юғалды.
Йөрәгемде ҡайғы алды,
Дейеүҙәрҙән ҡастым мин.
Илгә ҡайтһам, артымдан ҡыуып,
Яу килер тип ҡурҡтым мин.
Дейеү килеп табыр тип,
Кеше төҫөн белмәгән
Ҡошҡа әйләнеп остом мин.
Һис бер кеше тапмаҫлыҡ
Бер күлгә килеп боҫтом...

У р а л *(Һомайға)*. Һеңлеңме ни был сибәр?
Мин бит быны белмәнем.

Һ о м а й. Рәхмәт, егет, һылыуымды —
Айһылыуҙы килтергәнһең.

У р а л. Айһылыу?

Һ о м а й. Ҡош батшаһы Самрауҙың
Айҙан тыуған ҡыҙы ул!

У р а л. Мин Самрауҙың Ҡояштан тыуған
Ҡыҙын әле эҙләйем.
Һомай-ҡошто эҙләйем бит!
Һин...

Һ о м а й. Эйе, егет! Эйе!
Инде серҙе асайым —
Мин бит һине таныным.
Ҡотҡарғайның бысаҡтан
Һунарҙан һуң. Күптән инде,
Йәш ваҡытта.

У р а л. Һомай? Һинме Һомай! Һомай!

Һ о м а й. Эйе, ул мин!

**Шаршау**

## Дүртенсе бүлек

### Беренсе күренеш

Самрау батша иле. Ҡоштар батшалығы. Самрау батша янына ҡыҙы Һомай килгән. Һомай менән Самрау һөйләшә.

С а м р а у *(уйланып)*. Айһылыуҙың артынан
Дейеү килеп яу асыр.
Айһылыу ҙа талсыҡҡан,
Әсәһен дә һағынған,
Айға барһын ҡунаҡҡа.
Байман тапһын аулаҡта,
Саҡыртырбыҙ кәрәкһә.
Һарысай атына мендереп,
Оҙатайыҡ йәһәтләп.

Һ о м а й. Уралға мин ғүмерем менән
Бурыслымын, атаҡайым *(Ҡурҡыңҡырап)*.
Айһылыуҙы табып бирһәң,
Аҡбуҙ менән булат ҡылыс
Вәғәҙәгә әйткәйнем,
Йәншишмәгә тура юлды
Өйрәтергә иткәйнем...

С а м р а у. Уралға һин кейәүгә лә,
Һөйһәң, ҡыҙым, барырһың.
Аҡбуҙ атың бирерһең,
Яҡты донъя йөҙөндә,
Рәхәт торорһоң, балам.
Уралдай уҡ батырға
Әсә булырһың, балам.
Урал батыр хаҡына,
Шүлгәнде лә сығар һин.
Бөтә илде саҡыр һин.
Батыр ирҙе туйла һин.

Һ о м а й. Ярай, атай! Фатихаңа рәхмәт!

С а м р а у. Хуш! Хуш, ҡыҙым. Иҫән-аман булығыҙ!

Һомай сығып китә.

### Икенсе күренеш

Урал менән Шүлгәнгә тәғәйен әҙерләнгән ике сатыр. Матур итеп биҙәлгән. Бер-береһенә яҡын торалар. Алыҫта ҡыҙҙар-егеттәрҙең шат көлгәне, күмәк сыр-сыу ишетелә. Айһылыуҙы ҡотҡарған өсөн Урал-

ға рәхмәт йөҙөнән байрам итәләр. Байрам инде ахырға табан бара. Барыһы ла арыған. Һомай, атаһы һүҙен тотоп, Шүлгәнде баҙҙан сығарған. Сәхнә буш. Бер аҙҙан шом ҡатыш көй аҫтында борсоуы йөҙөнә сыҡҡан Һомай күренә.

Һомай. Ай-һай, дөрөҫ эшләмәнем буғай,
Шүлгәнде мин баҙҙан сығарып,
Шомбай кеүек гел өндәшмәй үҙе,
Йөҙө һытыҡ, йөрөй буҙарып.
Урал ниндәй ғорур, сая, алсаҡ,
Ололай ҙа белә ағаһын,
Йөрәгендә тик изгелек кенә,
Күңеле шишмә кеүек таҙалыр,
Бөгөн нисек шашып бейене ул,
Миндә генә ине ҡарашы...
Бына Шүлгән генә тик ултырҙы,
Әллә нимәһенә ҡарышып.
Күңелемдә әллә ниндәй шом бар —
Шүлгән ҡыланышы оҡшамай,
Берәй этлек уйлап ҡуймағайы,
Күҙәтергә кәрәк туҡтамай!

Йәһәтләп сығып китә.

## Өсөнсө күренеш

Шүлгән инә. Йөҙө борсоулы. Тирә-яғына ҡаранып ала.

Шүлгән. Урал, Урал, Урал!
Барыһы ла уны өҫтөн күрә,
Барыһы ла уны ярата.
Хатта Һомай бары Урал тиеп,
Һиҙеп торам, эйе, йән ата.
Шүлгән батыр тигән кеше юҡ!
Ул бит ҡустым ғына, ә шулай ҙа
Дан-шөһрәтте яулар кәрем юҡ...
*(Ҡапыл тертләп.)*
Юҡ-юҡ! Ғәҙел түгел былай, ғәҙел түгел!
Ата-әсәйемә бер көн икәү ҡайтһаҡ,
Урал батыр булыр, ә мин — ахмаҡ?
Урал батыр булыр, ә мин — бахыр?
Әйтмәҫ кәрәк уға минең серҙе —
Ҡәһҡәһәлә ҡунаҡ булыуымды,

Бында килгәндәге мәкер уйҙы
Белмәһен ул! Әйҙә белмәһен!
Үлемде лә яңғыҙ эҙләһен!
Ә мин, минме?
Мин ул белермен —
Һомайҙы ла үҙем һөйөрмөн,
Ә Уралды бер көн...
үлтерермен.
Аҡбуҙ менән булат ҡылыс алып,
Дан яулармын, бына күрерһегеҙ!
Дан алырмын — бына күрерһегеҙ!

Шул саҡ бер мөйөштән Урал күренә.

Ш ү л г ә н *(уны күреп ҡала. Салт йылмайып ебәрә)*.
Урал, ҡустым, эй ҡәҙерлем минең,
Әйҙә, беҙгә урын әҙерҙер.
Арығанһың, ял итеп ал.
Нисек рәхәт һине иҫән күреү!
Батырлығың һинең көнләшерлек!
Эй һоҡланам!
Ғорурланам, ҡустым!

У р а л. Батыр һис бер зарыҡмаҫ,
Яҡшылыҡтан ялыҡмаҫ,
Яуҙан да һис тарыҡмаҫ!

Ш ү л г ә н. Тағын яуға китәһеңме?
Самрау иле ошо бит!
Йәншишмәне яулар өсөн,
Беҙ Самрауҙы ғына ҡыйратайыҡ!
Аҡбуҙатты алайыҡ,
Беребеҙ таяҡ тотайыҡ,
Беребеҙ Аҡбуҙ менәйек,
Көслө батша булайыҡ!

У р а л. Нисек инде, аңламайым?
Самрау һис тә кешегә
Бер яуызлыҡ итмәгән,
Кеше алдап, кеше талап,
Үлтереп ҡан ҡоймаған?!
Кешегә дошман булмаған?

Ш ү л г ә н. Һе! Аҡбуҙатты бушҡа бирмәҫ Һомай,
Ҡыйратырға кәрәк барыһын!
Самрау илен еңһәм — мин дә батыр!
Ә һин, ҡустым, күптән батырһың.

Серле таяғыңды бир миңә, ә?
Ошо илде үҙем емерәйем,
Самрау ҡоштоң берәй ҡыҙын
Кәләшлеккә алайым!
Мин бит һиңә ағаймын?!
Аҡбуҙатты менәйем,
Мин дә данлы булайым!

Урал. Ҡулың ҡысый икән яу асырға!
Әзрәкәне тәүҙә еңәйек.
Унда тотҡон булғандарҙы
Ҡотҡарайыҡ!
Ә бында
Ҡыҙ алам, тип, яу асып,
Үлемгә беҙ юл ҡуйып,
Буштан тиккә ҡан ҡойоп,
Яуыз исем таҡмайыҡ!
Ҡан ҡойоусы даны алып,
Илгә яман ҡайтмайыҡ!
Әзрәкәне еңәйек!

Шүлгән. Йәншишмәгә дейеү хужа, тиеп,
Ишеткәйнем дә ул ишетеүгә,
Барыһынан көслө итер булат ҡылысты ла,
Серле таяҡты ла үҙем алғым килә.
Бер кемгә баш бирмәҫ ҡанатлы ат —
Аҡбуҙҙы ла үҙем менгем килә!

Урал. Ҡыҙын һөйһәң — ҡыҙын ал,
Бүләк, тиһә — атын ал!
Шунан ары китәйек,
Шишмәнән һыу алайыҡ —
Үлгәнгә йән бирәйек!
Кешеләрҙе был донъяла
Үлмәҫ йәндәр ҡылайыҡ!

Шүлгән. Уйлашырбыҙ. Кистән иртән яҡшы —
Ял итәйек инде...

Икеһе ике яҡтағы сатырға инеп китәләр. Бер аҙҙан Шүлгән кире килеп сыға.

Шүлгән. Ҡара һин уны, ағайым тип тормай,
Минең теләктәргә һис юл ҡуймай.
Серле таяҡты ла бирәм, тимәй.
Урал булмаһа һуң ошо илдә,
Һомайы ла ҡарар ине миңә,

Аҡбуҙын да бүләк итер миңә,
Булат ҡылыс ҡалыр бер үҙемә.
Урал түгел, үҙем батша булып,
Ҡайтыр инем илгә...

Итек ҡунысынан бысаҡ сығарып, һаҡ ҡына Урал йоҡлаған сатыр янына килә. Сатырҙы асып инәм генә тигәндә, бер ҡыҙҙың сарғап ҡысҡырғанын ишетә. Тертләп китә. Бысағын йәшерә һала.

Ш ү л г ә н .	Һаҡсыларын ҡуйған буғай Һомай.
Былай булғас бик эш ҡырып булмай.

Ут һүнә.

### Дүртенсе күренеш

Шүлгән менән Һомайҙың һөйләшкәне.

Күл янында Һомай, ауыҙ эсенән генә ниндәйҙер матур көйҙө көйләп, аяҡтарын йыуа, сәстәрен рәтләй. Шул саҡ ситтән ипләп кенә Шүлгән күренә. Һомайҙы бер аҙ күҙәтеп, уға һоҡланып тора. Һомай уны күреп ҡала ла тертләп китә.

Һ о м а й .	Абау, Шүлгән, ҡайҙан килеп сыҡтың?
Ш ү л г ә н .	Һоҡланыуҙан күҙем ҡамашҡандыр,
Сибәрлегең һаман һушым ала.
Һ о м а й .	Ауға эләккәндә тоҙаҡҡа,
Иҫеңдәме, Шүлгән, һоҡланманың,
Үрелгәйнең үткер бысаҡҡа.
Ш ү л г ә н .	Йәш инем бит, иҫәр малай инем...
Һ о м а й .	Шулайҙыр шул. Минең иҫтә һаман.
Ш ү л г ә н .	Шуғалыр ҙа мине баҙға яптың.
Һис үпкәм юҡ. Оноттом да инде.
Һинең сибәрлегең һушым ала,
Һине генә уйлап көн-төн янам,
Әйтмәйенсә инде түҙә алмам.
Минеке бул!
*(Һомайҙың аяҡ аҫтына килеп теҙләнә.)*
Бергә йәшәйек беҙ!
Мин...
Ишетергә тейеш яуабыңды.
Минеке бул!
Һ о м а й .	Мин аңланым, белдем эс сереңде.
*(Бер аҙ уйланып торғандан һуң.)*
Бәлки, һинеке лә булырмын мин, әммә

Мин бит батша ҡыҙы, теләп кенә,
Һайлай алмайым мин егетемде,
Бер шартым бар.

Ш ү л г ә н .   Йә, әйт шартың?!

Һ о м а й .   Майҙан ҡорорға теләйем.
Батырлығың һынайым.
Әсәм-Ҡояш миңә бүләк иткән
Бер атым бар, шуны сығарам!
Әгәр уны һин йүгәнләй алһаң,
Ҡулыңа алырһың булат ҡылысты ла,
Аҫыл егет икәнеңде шунан белеп,
Яныңа килермен, мин һинеке тиеп.

## Бишенсе күренеш

Майҙанда халыҡ геү килә. Урал менән Шүлгән бик оло бер ҡара ташты *(етмеш батман ауырлыҡ)* урынынан күтәрергә тейеш. Халыҡ шуны күҙәтә.

Б е р   е г е т .   Таш күтәреп кеше батыр булмай.

Ҡ а р т .   Дөрөҫ, батыр булмай, егет яуға сапмай.
Дейеү-батша Әзрәҡәне
Еңер өсөн Аҡбуҙ кәрәк,
Тағы булат ҡылыс кәрәк.

Е г е т .   Таш күтәрмәйенсә лә ҡылыс тотоп була.

Ҡ а р т .   Булат ҡылыс — утта иремәҫ һис,
Етмеш батман ауырлығы, тиҙәр,
Кем күтәрә ала ошо ташты,
Тик шул ғына ҡылыс тотор ирҙер,
Шуға ғына Аҡбуҙ башын эйер,
Тик шул батыр яуға атта елер!

Ҡ ы ҙ .   Ҡара, ҡара, Шүлгән килде ташҡа...

Е г е т .   Хәҙер күтәрә ул уны, ҡара!

Ҡ ы ҙ .   Уф, ҡуҙғатты ҡуҙғатыуын ерҙән,
Күтәрергә көсө етмәҫ микән?

Е г е т .   Һай ауыр шул, ауыр етмеш батман...

Ҡ ы ҙ .   Ете әйләнде лә ҡул һелтәне,
Күтәрә алмаҫ бер кем ауыр ташты.

Е г е т .   Үҙем үҫеп кенә буйға еткәс...

Ҡ ы ҙ .   Ҡара, ҡара, ана Урал сыкты,
Шүлгәндең ул ҡустыһы бит, әйе.

Е г е т .   Ҡустымын бит тимәй, күтәрергә итә...

Ҡыҙ. Беләктәре ташып уйнап тора.
Егет. Батыр тиҙәр уны, ҡайҙа барһа,
Даны алдан йөрөй.
Ҡыҙ. Күтәрҙе бит! *(Сәпәкәйләп.)*

Халыҡ та геү килә.

Егет. Ҡайҙа ырғытайым был ташты, ти.
Ҡыҙ. Ҡайҙа ырғытты һуң?
Егет. Әзрәҡә батшалығы яғына
Ҡыҙ. Урал, Урал, бына шатлыҡ, шатлыҡ!
Һомай уға кәләш була инде.
Егет. Аҡбуҙатын менеп ала инде.
Ҡыҙ. Булат ҡылыс ҡулға тота инде...

Халыҡ та ҡыуана. «Урал! Урал! Афарин!» тиешәләр.

## Алтынсы күренеш

Һомай менән Уралдың һөйләшкәне.
Һомай сәхнәгә йүгереп килеп сыға. Шат. Урал уның артынан килеп сыға.

Урал. Туҡта, Һомай, туҡта, алтын ҡошом!
Һомай. Йә, баҫтырып тотоп ҡара үҙең,
Тоҫҡай күрмә миңә әммә уғың.
Урал. Һомайғошом, берҙән-берем, йәнем,
Атылған бит инде күптән уғың,
Һин тоҫҡаның тәүҙә миңә уғың
Йөрәгемдә ҡалды татлы яра,
Теләйһеңме, әйҙә асып ҡара!
Һомай. Батыр икәнеңде белмәҫ борон
Һине оҡшатҡайным.
Урал. Мәңге бергә булайыҡсы, йәнем!
Һомай. Улдар, ҡыҙҙар үҫтерербеҙ, йәме.
Урал. Шүлгән өсөн генә эсем боша,
Ағайым бит!
Һомай. Ул турала мин дә уйлағайным,
Үтә бойоҡ, йәтим генә йөрөй.
Әллә атам менән кәңәш ҡороп,
Айһылыуҙы димләп бирәйекме?
Урал. Ай ҡыҙынмы?
Әллә, Самрау батша риза булһа,
Әйҙә уйлашайыҡ.

### Етенсе күренеш

Һомай, Урал, Шүлгән, Айһылыу.

У р а л . Һин ошонда ултыр, ағай.
Хәҙер Һомай — кәләшкәйем килер.

Һомай сәхнәгә Айһылыуҙы алып инә. Айһылыуҙың йөҙө ҡапланған.

Һ о м а й *(Шүлгән янына килеп)*.
Атам Самрау менән һөйләштек тә,
Һиңә, әгәр үҙеңә тиң күрһәң,
Йәрәшергә булдым һеңлемде.
*(Айһылыуҙың йөҙөн аса.)*

Шүлгән Айһылыуҙы танып, һиҫкәнеп китә. Айһылыу ҙа ныҡ аптырай, тик хәлен бер кемгә лә һиҙҙермәҫкә тырыша. Һомай ғына барыбер нимәлер һиҙенә.

Ш ү л г ә н . Һинең... исемең...
Һ о м а й . Айһылыу ул.
Минең әсәм Ҡояш булһа,
Уның әсәһе Ай булыр.
Ниңә ағарынды йөҙөң?
Ш ү л г ә н . Айһы-лыу? *(Үҙен ҡулға алып.)*
Ай, сибәрлегең...
Телһеҙ итте мине.

Һомай Уралға ымлай. Икәүләп шым ғына сығып китәләр.

А й һ ы л ы у . Шүлгән? Бында нисек килдең!
Хушлашмай ҙа минән киткән инең.
Ш ү л г ә н . Һаумы, Айһылыуым, һине күргәс,
Рәхәт булып китте күңелемә. *(Алдаша.)*
Әзрәҡә бит мине бикләгәйне
Зинданына.
Шунан ҡасып киттем.
Хушлашырға һине табалманым.
Күңелдән гел һинең янда булдым.
Ә һин...
Һин Самрауҙың ҡыҙымы ни?
А й һ ы л ы у . Әзрәҡә мине ҡурҡытып,
Үҙ ҡыҙы тип алдатырға ҡушты.
Ысынында мин Самрауҙың ҡыҙы.
Ш ү л г ә н . Икебеҙ ҙә тотҡон, алдаҡ юлда
Икебеҙ ҙә, ахыры, аҙашҡандар...

Айһылыу. Үткәндәрҙе онотторғамы ни?
Мин бит һине көттөм.
Яратам!
Шүлгән. Ҡауышайыҡ, йәнем, ҡабаттан.

Һағышлы көй аҫтында ҡосаҡлашалар.

**Һигеҙенсе күренеш**

Урал, Һомай бер-береһе менән әрепләшә-гәпләшә сәхнәгә килеп сығалар.

Һомай. Шүлгән, Шүлгән тиһең дә ул,
Һәр бер һүҙе уның — ялған.
Зәрҡүм менән килде бит ул,
Ә Зәрҡүм ул — егет-йылан.
Урал. Үткән ҡылығына үкенә ул,
Сабыр итәйексе, үҙгәрер.
Һомай. Ышанмайым. Үҙгәрмәҫ ул,
Бары этлек кенә уйында,
Мине урларға теләй ул,
Теләй батыр булырға.
Көсө етһә, ҡылысты ла
Алып китер ине ул.
Теге серле таяҡты ла
Алмаҡ булалыр әле,
Уның ҡулындағы серле таяҡ —
Бар донъяға килтерер тик афәт!
Үтенәм, ялбарам, берүк,
Һин таяҡты бирмә, йәме!

Урал артҡа сигенеп китә.

Һомай. Бирә ҡалһаң, уның ярҙамында
Бары этлек кенә ҡыласаҡ ул,
Йә ел-дауыл ҡуптарыр,
Йәки туфан һыуын ҡалҡытыр ҙа,
Ерҙе, тереклекте баҫтырыр!
Урал. Ул бит Әзрәҡәгә барам, тине,
Йыландар илен ҡыйратырға...
Һомай *(ҡото осоп)*. Әллә?.. Ю-юҡ!
Серле таяҡтымы?
Шүлгәнгә??
Урал. Эйе!
Һомай. А-а-һ-һ!

Күк күкрәй, йәшен йәшнәй. Көслө ел ҡуба. Ут бер яҡтыра, бер тоноҡлана. Шулай бер тапҡыр ҡараңғыланғанда, Һомай юҡ була.

Һ о м а й *(тауышы)*. Урал, а-а-а!
Аҡбуҙатым, тоғро атым!
Ҡотҡарығыҙ мине!
Серле таяҡ... Шүлгән...
Туфан һыуы ҡалҡа-а-а!!
Ҡотҡар! Ҡотҡ-а-ар!
У р а л *(аяҡ аҫтына ҡарап)*. Һыу баҫа!
*(Аяҡтарын алмаш-тилмәш баҫып.)*
Һыу баҫа!
Һомай! Һин ҡайҙа?
Ә-ә-й-й! Кешеләр!
Ер өҫтөн туфан һыуы баҫа!
Барығыҙ ҙа түбәләс, тауҙарға күтәрелегеҙ!
Аҡбуҙат! Һомайҙы ҡотҡарайыҡ!

Ут һүнә.

**Шаршау**

## Бишенсе бүлек

### Беренсе күренеш

Хозур тәбиғәт мөйөшө. Иҙел, йоҡоһонан уянып, ағас ҡыуышынан килеп сыға ла артабан китер юлға йыйына башлай. Муҡсаһын тултыра. Төндә яҡҡан усаҡҡа килеп уны тирәләй тапай. Шул саҡ ботаҡ һынған тауыш ишетелә. Иҙел тиҙ генә уҡ-йәйәһен ала ла үҙе йәһәт кенә ағас ҡыуышы янына килеп боҫа.

И ҙ е л *(бер аҙ тыңланып торғандан һуң)*.
Әй, кем бар унда?
Н ө г ө ш. Мин — Кеше!
И ҙ е л. Сыҡ яланға! Күрәйем!
Н ө г ө ш *(сыға)*. Ҡурҡма минән. Юлым алыҫ.
Урал батырҙы эҙләйем.
И ҙ е л *(шикләнеп)*. Һин дә ишеттеңме уның
Батырлығы тураһында?
Бер үҙе дейеү батшаны —
Әзрәкәне тураууын да?
Н ө г ө ш. Эйе, әле шул тарафтан киләм —
Әзрәкәнең кәүҙәһе лә ята.

Ул йығылғас бер тау хасил булған,
Кешеләр ҙә туфан һыуҙан,
Шул тау үренә менеп ҡотолған.
Әзрәҡә исемен онотоп,
Тауҙы халыҡ Ямантау тип атай.

Иҙел. Ямантау, Ямантау.
Мин дә күргән инем бит ул тауҙы.

Нөгөш. Ерҙе туфан һыуы баҫҡас,
Көймә алып, мин дә йөҙҙөм,
Күп кешене ҡотҡарҙым.
Зәрҡум тигән йылан улын
Үҙем бишкә тураным.

Иҙел. Атың ни, ҡай тарафтан һин?

Нөгөш. Минең әсәм — Гөлөстан,
Исемем Нөгөш булыр,
Ә һинеке?

Иҙел. Әсәм — Һомай, Ҡояш ҡыҙы,
Исемем Иҙел минең.

Ҡул бирешәләр ҙә ҡолаған ағасҡа ултыралар.

Нөгөш. Был яҡтарға нисек килеп сыҡтың?

Иҙел *(уңайлап ултырып алғас)*.
Ер йөҙөн туфан ҡаплағас,
Ҡоро ер ҙә ҡалмағас,
Бер көндө әсәм янына
Ҙур дейеү килеп инде.
Әсәмде үлтерергә тип,
Ҡомарланып ташланды.
Ә мин уға йәбештем дә
Саҡ ҡына яғалашҡас
Еңдем үҙен!
Шунда ғына Әсәм әйтте миңә.
«Батырҙан батыр тыуғанһың,
Атаңдай батыр булғанһың!
Бар, атаңа юлдаш бул,
Яуға сабыр ҡулдаш бул!», — тине,
Шулай атайымды эҙләйем мин.

Нөгөш. Урал батыр?! Тимәк беҙ — туғандар?!

Иҙел. Беҙ — туғандар икән! Беҙ — бер туған.
Икебеҙҙең дә атай Урал булған!
*(Ҡосаҡлаша, ҡыуанышалар.)*

### Икенсе күренеш

Шулай шау гөр килеп ҡыуанышҡан Иҙел менән Нөгөш янына Яйыҡ килеп инә.

Я й ы ҡ. Эй, егеттәр, ниндәй шатлыҡ бында?

Иҙел, Нөгөш тертләп китә. Уҡ-һаҙаҡҡа йәбешәләр. Яйыҡ тыныс.

Я й ы ҡ. Ниндәй шатлыҡ һеҙҙә?!
Н ө г ө ш. Беҙ — туғандар. Күрешмәгән инек.
Бөгөн килеп бына табыштыҡ.
Я й ы ҡ. Мин — юлаусы. Бик алыҫтан киләм.
Һыу бирегеҙ. Сарсап киттем иллә.
И ҙ е л. Һыу?! Ә беҙ сит әҙәмгә һыу бирмәйбеҙ.
Н ө г ө ш. Ашығаһың буғай, юлыңда бул!
Я й ы ҡ. Зинһар улай ятһынмағыҙ,
Ошо яҡта
Урал батыр, тигән ир барҙыр,
Юлым уға табан.
И ҙ е л. Берәй этлек ҡылыу түгелме уй?
Н ө г ө ш. Кейемдәрең, ана, ҡанға батҡан?
Я й ы ҡ. Ҡан? *(Итегенең ҡунысын байҡай.)*
Әй, кисеп үткәйнем шул күл ситенән.
Ҡанлы күл ул, беҙҙең илдә бар.
И ҙ е л. Ниндәй ҡан ул?
Я й ы ҡ. Халыҡ ҡаны...
Н ө г ө ш *(уҡ-һаҙағын ала)*. Яҡын килмә!
Я й ы ҡ. Олатам бик яуыз кеше булған,
Исем-аты уның Ҡатил батша...
И ҙ е л. Ҡатил батша?
Н ө г ө ш. Ҡатил?!
Үҙен бер ҙә күрмәһәм дә
Уның исемен ишетеү менән
Беҙҙә һәр кем тертләп ҡурҡып китә.
И ҙ е л. Әсәйем гел һөйләр ине миңә
Яуыз, ҡанһыҙ Ҡатил тураһында,
Һин ейәне уның, тимәк?
Н ө г ө ш *(Яйыҡҡа)*. Ташла йәһәт уҡ-һаҙағың ергә
Хәҙер һине юҡһа... *(Уҡ тоҫҡай.)*
И ҙ е л. Туҡта, Нөгөш ҡустым, һорашайыҡ
Урал батыр уға нигә кәрәк?
Я й ы ҡ. Әсәм — Ҡатил ҡыҙы әйтте миңә,
Һинең атаң Урал батыр, тине.

Ҡайҙан булһа ла бер эҙләп тапһаң
Минән сәләм еткер зинһар, тине.

Иҙел *(Нөгөштөң уҡ-һаҙағын аҫҡа төшөрә)*.
Нисек? Һинең атаң Урал?

Яйыҡ. Эйе, әле уны эҙләп барам.

Нөгөш. Улайһа беҙ өсөбөҙ ҙә туған.

Яйыҡ. Ә һеҙ...

Иҙел. Беҙ ҙә атайыбыҙ Урал батырҙы эҙләйбеҙ.

Яйыҡ. Улайһа танышайыҡ, юлыбыҙ бергә бит.
Минең исемем — Яйыҡ.

Иҙел, Нөгөш. Танышайыҡ!

Иҙел. Ҡара уны, әгәр алдаһаң
Уҡ-яныбыҙ әҙер!

Нөгөш *(турһыгынан һыу ала)*.
Мә, һыуһыныңды ҡандыр!

Яйыҡ. Рәхмәт, туғандарым. *(Эсә.)*

Иҙел. Анау түбәләстә тиҙәр,
Урал батыр ҡыуышы. Киттек!

Сығалар.

## Өсөнсө күренеш

Урал батыр, Нөгөш, Яйыҡ бергәләп усаҡ әҙерләйҙәр.

Иҙел *(тауышы)*. Атла, атла, килеп еттек бына. *(Сәхнәгә инәләр.)*

Һаҡмар *(ҡулдары артҡа бәйләнгән)*. Барыбер мин аттым был һуйырға...

Иҙел *(сәхнәгә сыға, ҡулында ҡош түшкәһе)*.
Аттың, атмай ҙа ни, уғың
Минең янға ғына килеп төштө.

Һаҡмар. Һине күрмәнем дә...

Урал. Һай был Иҙел улым сос та инде,
Әле генә китте,
Бер һуйырҙы атып килтергән дә.

Һаҡмар. Мин аткайным ул ҡошҡа...

Иҙел. Бына минең туғандарым, атам.
Ә һин ниндәй ниәт менән йөрөп ятаң?

Һаҡмар. Сәләм барығыҙға! Исемем Һаҡмар.
Оҙон сәфәр ҡылам, арыткан.

Нөгөш. Юлың ҡайҙа? Ни эшләйһең бында?

Һаҡмар. Атайымдың ҡустыһын эҙләп табырға тип,
Әсәм ебәргәйне был сәфәргә.
Эҙләп тап та яуҙа булыш, тине.

Иҙел. Әсәң ҡайҙа? Кем ул?

Һаҡмар. Әсәм — Айһылыу.

Нөгөш. Ә атаң кем?

Һаҡмар. Атам — Шүлгән.

Урал *(ишетеп ҡала)*. Шүлгән? Шүлгән тинеңме?
Ул... минең ағайым бит. Туҡта, туҡта,
Йә, йә улым, һөйлә, йәһәтерәк,
Айһылыуҙы, әсәйеңде һөйлә!

Нөгөш килеп, уның ҡулдарын сисә.
Һаҡмар Урал ҡаршыһына килеп һөйләй.

Һаҡмар. Атайымды беләһең —
Һине дошман күрәлер.
Дейеүҙәргә эйәрҙе.
Әсәйем һиңә ебәрҙе.
Атайым, бәлки, үҙгәрер,
Күңеле изгеләнер тип,
Уға әсәйем Айһылыуҙы
Кейәүгә биргәндәр...

Урал. Беләм. Айһылыу — Һомай һеңлеһе.

Һаҡмар. Әсәм көн дә иланы,
Ҡайғы баҫты, һары алды,
Алһыу йөҙө тутланды,
Бер көн миңә әйтте ул:
Кейәүгә тигән бүләгем —
Һары атымды бирәм,
Мен дә сап Урал батырға,
Атайыңды көтмәйек,
Бер ҡарайған йөрәгенең
Ағарырын өмөт итмәйек.
Урал батырға яуҙаш бул,
Терәк бул, ул алдамаҫ,
Тиеп әйтте әсәйем.

Урал. Ғәзиз уландарым менән бергә
Әйҙә ял ит, иртәгә яу,
Бергә-бергә булырбыҙ!

Һаҡмар *(сәйерһенеп)*. Ә улдарың минең менән
Теләмәһә?

Урал. Нөгөш, Яйыҡ, Иҙелем,
Килегеҙ, кил, килегеҙ!
Һомай һеңлеһенең улы
Һаҡмар булыр, белегеҙ!
Туған итеп күрегеҙ!
Ҡандаш, ҡәрҙәш итегеҙ!

Нөгөш, Яйыҡ, Иҙел килеп Һаҡмар менән күрешә.

## Дүртенсе күренеш

Һуғыш алышы барған ялан. Күмәк яугирҙар араһында йә бер, йә икенсе ерҙә Нөгөш, Яйыҡ, Иҙел, Һаҡмар күренеп ҡала. Урал батыр ҙа бар. Аҙаҡ уртала Урал менән Шүлгән икеһе генә һуғышып ҡала. Оҙаҡ ҡына һуғышҡас, Шүлгән еңелә башлай. Урал уны ергә тәгәрәтә лә боғаҙына ҡылыс терәй. Быны Һаҡмар күреп ҡала ла һуғышып йөрөгән еренән яҡын килә.

Һаҡмар. Атай? Атай!
Урал. Бына кем ул беҙгә көн күрһәтмәй,
Дейеү, аждаһаны беҙгә һөсләй.
Һаҡмар. Әсәйемдең күҙ йәштәре өсөн,
Халыҡ ҡанын ҡойоп кинәнгәнгә
Үлем һиңә, Атай!
Инде бер ҡасан да «атай!» тиеп,
Әйтмәһәм дә һис үкенмәм буғай.
Шүлгән. Һаҡмар улым, ҡотҡар атайыңды!
Ҡотҡар мине!
Һаҡмар. Юҡ инде, юҡ, ҡана, ҡан көҫәһәң,
Үҙем һине шунда юҡ итәйем.
*(Ҡылысын ҡынынан ала.)*
Урал. Ҡыҙма, Һаҡмар! Инде бахыр был йән.
Тар-мар иттек буғай дейеү илен.
Атай — изге йән ул улы өсөн,
Бер ҡасан да ҡул күтәрмә улай.
Ҡаны менән, бәлки, ант итер ҙә,
Изгелеккә ҡарай юл алыр?!

Шүлгәнде торғоҙа, ҡылыс, уҡ-һаҙағын ала. Ул арала халыҡ йыйыла. Уртала ҡалып, һөйләшәләр.

## Бишенсе күренеш

Урал менән Шүлгән диалогы.

Урал.
Йәштән яуыз үҫтең һин,
Урлап ҡан да эстең һин,
Яуызлыҡҡа ыҡланың,
Яҡшылыҡты ташланың.
Ил ҡапланың һыу менән,
Ил үртәнең ут менән,
Дейеүҙәрҙе дуҫ иттең,
Кешеләрҙе хур иттең,
Йөрәгеңде таш иттең,
Атам йөҙөн ят иттең,
Әсәм һөтөн ыу иттең.
Ҡыҙ һайланың — буй ҡуйҙым,
Ат һайланың — яй ҡуйҙым.
Дан эҙләргә теләнең —
Теләгеңә буй бирҙем.
Ҡулыңа таяҡ тотторҙом —
Ҡан ҡойорға ынтылдың.
Дейеүҙәргә алданып,
Кеше ҡаны түктерҙең.
Яуызға ҡаршы барманың,
Атам һүҙен тотманың.
Яманлыҡты яҡшылыҡ
Еңгәнен хәҙер белдеңме?
Кешеләрҙең донъяла
Өҫтөнлөгөн күрҙеңме?
Ер үбеп, ант итмәһәң,
Халыҡ алдында баш эйеп,
Аҡ һүҙеңде бирмәһәң,
Атам килгән сағында,
Ғәйеплемен, тимәһәң,
Он-талҡандай итермен,
Күбәләктәй йәнеңде
Төңгө томан итермен.

Шүлгән.
Һис яуызлыҡ ҡылмаҫҡа,
Йоланан баш тартмаҫҡа,
Һинең менән берлектә,
Кешеләр менән дуҫлыҡта
Ил батыры булырға,
Илдә тыныс ҡалырға,
Урал, юлың үбәйем.

Эйелеп Уралдың итеген үбә.

Ысын туған булайым,
Бергә торлаҡ ҡорайым,
Атам-әсәм күрәйем.

Урал. Йөрәгеңдәге ҡара ҡан
Кибеп ҡабат ҡыҙарһын,
Шунда кеше булырһың,
Илдә бергә ҡалырһың,
Яуҙа батыр булырһың!

Шүлгән. Һыбайға менгән арыҫланым
Ике һөрөнөп йығылды,
Өсөнсө тапҡыр һөрөндө.
Ҡабат һис тә һөрөнмәм,
Тип арыҫлан елкенде.
Өсөнсөгә китәйем,
Дейеүҙең ҡалғанын үҙем
Йәһәт тар-мар итәйем.
Ҡара йөҙөм йыуайым.
Кешеләргә иш булып,
Бергә торлаҡ ҡорайым.

Урал. Уҫаллығыңа баш булып,
Кешелекте һайлаһаң,
Үҙ арыҫланың һүҙенән
Өлгө алырлыҡ булһаң
Мин дә бер юл ҡуяйым,
Һинән яҡшылыҡ көтәйем.
Атамдың хаҡы өсөн,
Тағы ла бер һынайым,
Теләгәнде бирәйем.

Шүлгәнгә уҡ-һаҙаҡтарын кире тапшыра ла оҙатып сығарып ебәрә.

## Алтынсы күренеш

Халыҡ, Урал, Үлемһеҙ ҡарт.

Һорнай тауышы ишетелә. Яланға төрлө яҡтан халыҡ йыйыла. Барыһы ла шат. Байрам. Дейеүҙе еңеп, Йәншишмәнән һыу алыу байрамы бара.

Урал. Күҙгә күренгән Үлемде
Илдән ҡыуып юҡ иттек.

Ҡан эсеүсе дейеүҙең
Барын ҡырып юҡ иттек.
Йәншишмәнең бар һыуын
Һоҫоп алып киләйек,
Бар кешегә бирәйек!
Килер ауырыу-һыҙланыуҙан
Кешеләрҙе ҡотҡарып,
Мәңге үлмәҫ ҡылайыҡ!

Халыҡ геү килә. «Үлемһеҙ булайыҡ!» «Йәншишмәнән эсәйек!», «Мәңге йәшәйек!» тиешәләр. Шул саҡ Урал ҡаршына бәлтерәгән бер ҡарт сыға.

Ҡ а р т. Йәншишмәнән һыу эстем мин.
Күп осраны үлем ғүмеремдә,
Бирешмәнем, тере ҡалдым бит,
Инде бына байрам!
Ошо көндө
Барыбер ҙә күрә алдым бит.
Инде үлһәм дә, ҡайғым юҡ.
Егетем, батыр икәнһең,
Һинең алдыңа килдем,
Күбәләктәй йәнем бар,
Бер йотомдай ҡаным бар,
Әлберәгән тәнем бар,
Хәҙер уйым тарҡалды,
Йәшәр хәлем ҡалманы.
Үлем саҡырып ҡараным —
Буй бирергә уйланым.
Ә үлем:
«Йәншишмәнән һыу эстең,
Мәңге йәнең ала(а)лмам,
Һине үлек итә(а)лмам.
Көсөң бөтөр — ҡалырһың,
Үлә алмай туларһың.
Тәнең сереп, ҡорт ашар,
Шунда ла һин үлмәҫһең,
Алйып — ҡаңғырып бөтөрһөң» — тине.
Мәңге ҡалам, тимәгеҙ,
Йәншишмәнән эсмәгеҙ!
Донъяла мәңге ҡалыр эш —
Ул да булһа яҡшылыҡ!

Һыуға ла батмаҫ яҡшылыҡ,
Телдән дә төшмәҫ — яҡшылыҡ!

Урал. Тел төбөңдө төшөндөк.
Килтерегеҙ шишмә һыуын!
*(Ҡыҙҙар һыу килтерәләр.)*

Урал һыуҙы уртлай. Халыҡ шаулаша «Эс! Эс!» «Һин ҡотҡарҙың беҙҙе үлемдән!» «Бөтөргәнсе эс!» тиешәләр. Урал һыуҙы эсмәй, тирә-яҡҡа бөркә. Күңелле көй яңғырай. Тирә-яҡ йәшәрә башлай. Халыҡ ҡыуана.

## Етенсе күренеш

Шүлгән бер үҙе. Алыҫта халыҡтың шатлыҡлы геүләгәне ишетелә.

Шүлгән *(Усын-уҫҡа ыуғылап).*
Шә-ә-п! Йәншишмәне ҡороттолар!
Инде Үлем терелде,
Миңә ярҙамға килер
Дейеүҙәрҙе йыяйым,
Уйҙарымды әйтәйем,
Уралға баш эймәҫкә,
Кешегә һыу бирмәҫкә
Дейеүҙәргә ҡушайым!

*Сығып китә.*

## Һигеҙенсе күренеш

Урал, халыҡ вәкилдәре.

Ҡарт. Урал, һиңә килдем әле,
Кәңәш ҡороп эш ҡылырға —
Дейеүҙәрҙән ҡотолорға
Һис әмәл юҡ: һыу бирмәйҙәр,
Барлыҡ йылғаларға хужалар.

Егет. Ҡыҙҙар барһа, йоталар!

Ҡыҙ. Егет килһә, үлтерәләр!

Ҡарт. Халыҡ һыуһыҙ интегә,
Ни ҡылайыҡ?

Урал. Саҡырығыҙ улдарымды,
Килһендәр дүртеһе лә!

## Туғыҙынсы күренеш

Нөгөш, Яйыҡ, Иҙел, Һаҡмар инәләр.

Урал. Уландарым, бөгөн үк,
Сабығыҙ яландар буйлап,
Батырҙарҙы йыйығыҙ!
Дейеүгә яу асабыҙ!
Халыҡты ҡотҡарабыҙ
Һыуһыҙ интегеүҙәрҙән.
Барыһы бергә. Ярай, атай, беҙ юлландыҡ.
Батырҙарҙы йыйырбыҙ,
Яуызды ерҙән юйырбыҙ!

## Унынсы күренеш

Урал ҙур ғына күл янында тора. Күл янында бейек ҡая. Урал бер үҙе.

Урал. Шүлгән, Шүлгән, ағайым!
Ни ҡылаһың, аңламайым.
Һаман этлек яһайһың.
Халыҡты йонсотаһың.
Ғәрлек бит был.
Шүлгән, Шүлгән!
Ниңә боҫоп һеңдең күлгә?
Уландарым килһәләр,
Ҡырылышып бөтһәләр,
Тағын яңғыҙ ҡалырмынмы?
Ҡорормо беҙҙең ырыу?
Юҡ, юҡ, булмай, улар үлгәнсе,
Мине генә алһын яуыз үлем!
Шүлгәндән дә берсән ҡотолтайым
Халҡымды, илем, еремде.
Үлһәм үҙем генә үләйемсе,
Батырҙарым, халҡым йәшәһен!
Дейеүҙәр тулған был һыуҙы
Үҙем эсеп бөтөрәйем!
Үҙем генә үләйем!

*Эйелеп һыу эсә. Сәхнә ҡараңғылана.*

### Ун беренсе күренеш

Урал уртала ята. Тирәләп халыҡ йыйылған. Илашалар. Урал ята бирә лә ауыртыуҙарға сыҙамай ҡаты итеп ҡысҡырып ебәрә, ыңғыраша.

Егет *(янындағы ҡартҡа)*. Нимә булды, олатай?
Ҡыҙ. Ниңә халыҡ илай?
Ҡарт. Урал, Урал, Урал...
Күлде, дейеүҙәре менән бергә
Урал эсеп бөткән һыуын.
Ә дейеүҙәр һәм йыландар
Телә уның йөрәк- бауырын.
Урал. Аһ-һ-һ! Үләм!
Туғандарым! Бәхил булығыҙ!
Уландарым, һүҙем тыңлағыҙ!

Уның янына дүрт улы яҡынырак килә.

Уйым-уйым күлдәрҙең
Барында дейеү буласаҡ
Күлдең һыуын эсмәгеҙ!
Дейеүҙәргә буй биреп,
Ҡул ҡаушырып тормағыҙ.
Менһәм Буҙат бар ине,
Ҡулда булат бар ине,
Батыр ирҙәр бар ине
Шулар ҡәҙерен белмәнем. Аһһ!
Батырлыҡҡа маһайып,
Кәңәш ҡороп торманым,
Яңғыҙ башым уйланым.
Уландарым, һеҙгә әйтәм —
Батыр беләкле тыуһаң да,
Илдә йөрөп ил гиҙмәй,
Тубығыңдан ҡан кисмәй
Йөрәгең батыр булалмаҫ.
Яуызға юлдаш булмағыҙ,
Кәңәшһеҙ эш ҡылмағыҙ,
Олоно оло тиегеҙ —
Кәңәш алып йөрөгөҙ,
Кесене кесе тиегеҙ —
Кәңәш биреп йөрөгөҙ!
Талашмағыҙ, айҡашмағыҙ,
Үҙ-ара татыу йәшәгеҙ.

Барығыҙға шуны әйтәм:
Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,
Яманға юл ҡуймағыҙ,
Яҡшынан баш тартмағыҙ!
Әсәйҙәрегеҙгә әйтегеҙ —
Минән риза булһындар...

Урал йән бирә. Халыҡ илаша. Уралдың кәүҙәһен таш өҫтөнә һалалар. Шул саҡ күктән бер йондоҙ атыла. Күктән Һомай килеп төшә.

### Ун икенсе күренеш

Һомай килеп Уралдың ирендәренән үбә.

Һ о м а й. Ай, Уралым, Уралым,
Һуңғы һүҙең ишетмәнем,
Йәнеңә килеп етмәнем,
Инде хәҙер нишләйем?
Һиңә йәшләй осорап,
Ҡош тунымды һалғайным,
Яуыздарға яу асып,
Яҡшылыҡҡа юл асып,
Аҡбуҙатҡа мендереп,
Булат ҡылыс тоттороп,
Иң бәхетле ҡатын булып,
Мин оҙатып ҡалғайным,
Йәнеңә килеп өлгөрмәнем?!
Һомай исемем ҡалһа ла,
Кешеләр ҡош тиһә лә,
Ҡош тунымды һалмайым.
Һиндәй батыр таба алмам —
Ҡош көйөмә ҡалырмын,
Тыу йомортҡа һалырмын:
Балам булһа, ҡош булыр —
Һинең керһеҙ күңелеңдәй,
Төҫө булһа аҡ булыр.
Һинең юлдан ҡалған тауға
Ҡәҙер итеп күмәйем,
Юғалмаҫ алтын булырһың,
Донъяға батыр булырһың!
Хуш, Уралым!

Халыҡ геүләшә, илай. Уралдың кәүҙәһен ҡәҙерләп тауға күтәрәләр һәм шунда ерләйҙәр. Һәр кем услап ҡәбергә тупраҡ ташлай. Һомай улы Иҙел менән һөйләшә.

Һ о м а й . Улым, Иҙел, осһам аҡҡош булып,
Һағынырмын һине!

И ҙ е л . Мин дә, Әсәй! Китмә, ҡал!

Һ о м а й . Юҡ, юҡ, китәм! Һин инде ир-егет!

И ҙ е л . Бер ҡасан да аҡҡоштарға атмам,
Башҡаларға шуны еткерермен.
Тик һыу етмәй.
Халыҡ һаман сарсай.
Шүлгән йәшерелгән күлгә барып,
Тар-мар итеү кәрәк ҡалған дейеүҙәрҙе —
Һыуға туйыр ине халыҡ.

Һ о м а й . Атайыңсы, Урал нимә тине?
Күлдең һыуын эсмәгеҙ һис, тине.
Оноттоңмо?
Шүлгәнгә яу асһаң да,
Күленән ил мандымаҫ,
Әсә һөтөндәй булып,
Күл һыуы илде һуғармаҫ.

Иҙел булат ҡылысты алып, тау башына менә.

И ҙ е л . Уралдан тыуған ир булып,
Халыҡты һыуһыҙ ҡаңғыртып,
Батыр исеме күтәреп,
Һыу табалмай тилмереп,
Тороу ирлек буламы?

*Йән көсөнә булат ҡылысты һелтәп, тауҙы уя. Унан урғылып һыу атыла. Быны күргән халыҡ геү килә, ҡыуаныша.*

Х а л ы ҡ . Ирәмәлләп сапҡан тау,
Ирәмәл булып ҡалһын әйҙә,
Ә йылға — Иҙел,
Аҡ Иҙел исемле булһын!

## Эпилог

Шүлгән мәмерйәһе янында ҡарт менән малай ултыра.

М а л а й . Шүлгән ҡайҙа булған һуң?

Ҡ а р т . Шүлгәнме?
Шүлгән ҡурҡа, ти, кешенән.
Йәшенгән, ти, күл төбөнә,
Шунан бирле сыҡмаған.

Малай. Ә батырҙар?
Ҡарт. Иҙел ағаларынан күреп,
Яйыҡ, Нөгөш тә бер көндө
Тауға менеп ҡылыс сапҡан —
Таулы йылға башланған.
Һаҡмар ҙа шулай иткән, ти.
Һаҡмар йылғаһы аҡҡан.
Бына шулай дүрт йылғаға
Баш булған ул батырҙар,
Шуға исемен йылғаның
Яйыҡ, Нөгөш, Ағиҙел тип,
Һаҡмар тип атағандар.
Малай. Беҙ ултырған тау ҙа — Урал тауы...
Ҡарт. Эйе, Урал тауы был тау.
Урал тау арҡаһы менән
Һалҡын елдән һаҡлай беҙҙе,
Төндә хатта Ай нурында
Алтын-көмөштәй балҡый үҙе.
Аҡҡоштар төйәк иткәндәр
Ҡамышлы күл буйҙарын,
Һомай һис тә айырылмаҫ
Төйәк иткән Уралды.
Бына инде аңланыңмы
Ниндәй бөйөк ул Уралтау?!
Әһе-һей, Урал, Уралым!
Мәңгелек дан тулған тау!
Изгелеккә һәйкәл кеүек,
Ғорур ҡалҡып торған тау!

Тантаналы, күңелле, ғорур, Уралды данлаусы музыка.
Ҡурайҙа «Урал» көйө

**Шаршау**

# ПОЭМАЛАР

## ҠАР ӨҪТӨНДӘГЕ САБЫЙ

*Поэма*

«Дөйөм ятаҡта йәшәүсе талибә бәҙрәфтә баланан бушана һәм сабыйын бишенсе ҡаттан ҡарға ырғыта. Тикшереүҙән һуң шул асыҡлана: бала ир енесенән булып, етлегеп тыуған һәм ике сәғәт үткәс, туңып үлгән...»

(Гәзиттәрҙән)

### Сабый монологы

1

Миңә тынсыу, миңә һауа етмәй,
Тар ҡарындан килә ҡотолғом.
Әсәм кендегенән аҙыҡ ейеп,
Нисәмә ай бында ултырҙым.
Үҙ күҙҙәрем менән күргем килә
Яҡты Ҡояш, йәшел үләнде...
Ауырмындыр.
Мин донъяға килгәс,
Әсәкәйем генә үҙгәрһен.
Төндәр буйы, бәлки, иламаҫ ул?
(Ҡыйын ине әсәм илаһа).
Ул йылмайыр, тулап, тибешеүсе
Ҡарынында үҙем булмаһам.

Мин әҙермен фани донъялыҡта
Әҙәм кеүек ғүмер итергә,
Үҙ юлымдан, үҙ яҙмышым менән
Тормош йомғаҡтарын һүтергә.

Әсәйемә ауыр мәлдәрендә
Терәк булыр инем, валлаһи,
Мине күргәс, бәлки, атайым да
Ҡосағына килер алаһы...
Алға, алға!
Әсәй, ярҙам итсе,
Сығар мине яҡты донъяға.
Аһ! Ысҡындым бына, хәҙер, хәҙер
Тар ишектән ҡалды үтәһем,
Башым ғына һыйһын, кәүҙәм һыйыр.
Әсәкәйем, мине көтәңдер!
Бына йомшаҡ ҡулдарыңа алып,
Йылы күкрәгеңә ҡыҫырһың.
Иламасы, әсәй, мин тере бит!
Ҡыуанырһың әле, ҡысҡырһам.

Ах, бына ул ирек!
Сыҡтым! Сыҡтым!
Һалҡын икән.
Әсәй, өшөнөм!
Ал тиҙерәк йылы ҡулдарыңа!
Ҡаҡ иҙәнгә ҡуйма төшөрөп?!
Тәүге һулыш!
Яра күкрәгемде.
Ауыртыуға түҙмәй яр һалам.
Әсәкәйем ниңә ауыҙыма
Ҡанлы сепрәк тыға ҡарһалан?
Йоҡа ғына сепрәк киҫәгенә
Бәйләне лә алды ҡулына...
Һин илама, әсәй, мин теремен,
Бер һоҡланып баҡсы улыңа.

Тын алыуы ауыр, һаҫыҡ еҫтән
Баш әйләнә, күңел болғана.
Ҡалтыранам.
Әсәй, ура мине
Йылы ғына йомшаҡ юрғанға.

Мин кешесә әйтә белмәйем шул,
Илар инем — сепрәк ауыҙҙа,
Донъя был тиклем дә һалҡын, тиеп,
Уйламаған инем ҡарында.

Һалҡын икән фани был донъялар,
Әсәй ҡосағы ла юҡ икән...
Осам, осам һалҡын ҡотоптарға,
Ҡотоп төбө ҡайнар ут микән?!

Аҡ күбеккә сумдым.
Боҙ күбеккә.
Туңа ҡулым. Туңа аяғым.
Мең энәләр менән сәнскеләйҙәр...
Тормош тигәндәре аяуһыҙ!
Тар булһа ла, ҡарын эстәрендә
Йылы ине.
Килә йәшәгем!
Үҙең тыуҙырҙың да
Үҙең ниңә
Ҡарға аттың мине, әсәйем?!
Мин бит тере инем, әсәкәйем,
Туҡтап бара инде йөрәгем.
Шатлыҡ бирәм, тиеп, тыуған инем,
Артыҡ бер йән булдым, күрәһең.
Ете ағзам теүәл генә ине,
Ете көн дә йәшәй алманым.

Ҡотҡарығыҙ!
Мин кешелек ҡото!
Минең йәндә — ырыу тамғаһы.
Ата-бабаларҙың изге ҡаны
Туңып селпәрәмә килә бит!
Милләтемдең ырыу имәненең
Тамырҙары ҡорой, кибә бит!
Үҙ халҡымдың бер тамсыһы инем,
Йондоҙ булыр инем күгендә,
Инде бына һалҡын сикәм буйлап
Ҡайнар йәшем ҡарға түгелә.

Һуңғы һулыш!
Ике сәғәт буйы
Ҡар һыуығын ғына һуланым.
Белмәгәйнем ғәзиз ғүмеремдең
Ике сәғәт кенә булырын.

Әммә...
Ике сәғәт кенә йәшәһәм дә,
Кеше инем!
Тормош яраттым.
Гонаһ ҡылып әле өлгөрмәнем,
Гонаһтарҙан ғына шаҡ ҡаттым.
Гонаһтарҙан боҙло ҡар ҡосағын
Түшәк итеп йәйҙе фанилыҡ,
Гонаһтарҙан әсәм йөрәгендә,
Юҡ, ҡан түгел, бары ҡар тулы.

2

Боҙ иттеләр уның саф йөрәген —
Уйынсыҡтай күреп хистәрен.
Уйнап туйғас, атай ташлап китте,
Белгәс улы тыуыр икәнен.
Эй иланы әсәй, атай киткәс,
Уға ҡушылып мин дә һыҡтаным.
Хәтеремдә, йән асыуы менән,
Минең «башҡа» уның һуҡҡаны.
Хәтеремдә, ауылына ҡайтып,
Апаһына ниҙер әйткәне,
Аҙаҡ кейемдәрен йыйып алып,
Өйҙән бойоҡ сығып киткәне...
Белә ине бит ул,
Үҙ әсәһе,
Һиҙеп ҡалһа минең барлыҡты,
Сәстәренән аҫып ҡуйыр ине.
«Эй, өләсәй!» — тауыш ҡарлыҡты.
Тауыш юҡ шул.
Ул саҡ өләсәмә
Әйтер инем, аңла ҡыҙыңды,
Былай ҙа бит күпме йәшен түкте,
Минең өсөн йәне һыҙылды.

Был ауылға башҡа ҡайтманыҡ беҙ.
Хаҡлы инем әммә йәшәүгә,
Кәрәк инем бит мин кешеләргә,
Кәрәк булманым тик әсәйгә.

* * *

Суд килә, суд!
Аяғүрә баҫып,
Беҙҙе бөгөн ҡаршы алығыҙ.
Булған,
Буласаҡты йәшермәйсә
Ғәм алдына теҙеп һалығыҙ!
Иң-иң ғәҙел судья — НАМЫҪ бөгөн,
Ә МИН үҙем — зыян күреүсе.
Таныш түгел йөҙҙәр һүҙ алырға,
Ана, сират баҫҡан түгелме?
Ғәйепләнеүсе кем?
Эйе, ӘСӘМ.
Ул ғүмерен ҡыйҙы сабыйҙың
Суд залында
Гонаһ ҡылыусыға,
Бәлки, ғәҙел яза табылыр?

## Түлһеҙ ҡатын һүҙе

Бер көн бесәй балаланы —
Өс йомарлаҡ йылы йомғаҡ...
Һыйпай-һыйпай иркәләнем —
Бына рәхәт, күмәк булғас!
Ирем кисен эштән ҡайтҡас,
Эй ҡыуаныр һеҙҙе күреп.

«Балаһыҙ йорт — ҡошһоҙ урман».
Еңел түгел быға күнеү.
Ана, кемдер инеп килә.
Күрше ҡатын килгән икән,
«Бесәйегеҙ балалаған!
Һөйөнөстәр килгән икән!»
Өс йомарлаҡ йылы йомғаҡ —
Тере йәндәр йәмдәр бирә.
Йорт эсенә ҡояш ингән!
Ана, ирем ҡайтып килә.
Икәүләшеп бик һаҡ ҡына
Кескәйҙәрҙе күҙәтәбеҙ,
Тегеләй тот, былай тот, тип,

Бер-беребеҙгә өйрәтәбеҙ.
Әйтерһең дә, бесәй түгел,
Ә бер сабый бала тыуған!

Өйләнештек.
Тик бала юҡ.
Инде биш йыл ғүмер уҙған...

Күрше ҡатын иртәгәһен
Ни өсөндөр килгән ине.
Мине түгел, ә иремде
Күреп ниҙер әйткән ине...

Ғәзиземдең йөҙө бойоҡ,
Ҡояш ҡасты болоттарға,
Йылы һүҙҙәр ауыҙында
Шарт бикләнде йоҙаҡтарға.
Кискә «тейәп» ҡайтҡан ине —
Төнө буйы — ҡара мәхшәр...
«Бесәй генә балалатып
Ятаһың һин ниңә?» — тигән
Күрше ҡатын.
Ни хәл итеп,
Ҡыҫҡартаһың халыҡ телен?
Түлһеҙлектән ғаиләбеҙ
Тарҡалырға тейешме ни?

Көтөүлектән һыйыр ҡыуып,
Ҡайтыуыма — өйҙә бәлә!
Өс йомарлаҡ, ҡанға туҙып,
Үлеп ята көлдөксәлә...
Ә өрлөккә — инә бесәй
Аҫылғайны...
Әйтерһең дә, минең йәнем
Ҡалды арҡан ҡоршауында,
Ир ҡулында бер баланың
Йомшаҡ йылы ҡурсағындай.

Юҡ икән, юҡ!
Бала ла юҡ!
(Бер ауырға ҡалһам икән?)
Тимәк, Хоҙай теләмәгән.
Нисек кенә ҡалмаҡ һаман
Был йырткыслыҡ уртаһында?

Ә ғаилә?!
Ул бит изге.
«Йә алырбыҙ берәй сабый,
Сабыр итеп...» —
Һүҙҙәремде
Тыңламаны ирем.
Ахыр,
Күп тә тормай, бар мөлкәтем —
Кейемемде күтәрҙем дә
Киттем.
Һары һағыш ята
Һаман минең күҙҙәремдә.
Өс йомарлаҡ йылы йомғаҡ,
Һеҙ ғәйепле түгелһегеҙ,
Ғәйеп бары тик үҙемдә —
Хоҙай биргән түлһеҙлегем.

Әгәр шунда,
Эй, һылыу ҡыҙ,
Юлдарымда осрар булһаң...
Һинең улың минең улым
Булыр ине.
Гөл шикелле
Ғаиләбеҙ шиңмәҫ ине,
Юҡ, мин уны ер гүренә
Һис ҡасан да бирмәҫ инем.
Уға әсәй булыр ине,
Уға атай булыр ине,
Өс йомарлаҡ урынына
Бер сабыйҙы һөйөр инек...

Ғәйепләйем һине, һеңлем,
Бар түлһеҙҙәр исеменән,
Шул сәбәптән емерелгән
Ғаиләләр йәше менән.
Моронлап та өлгөрмәйсә
Ҡан эсендә тонсоҡҡандар,
Изге ниәт,
Алһыу бәхет,
Зәңгәр хыял исеменән,
Арҡандарға аҫылған йән,
Өс йомарлаҡ исеменән!

## Улын юғалткан оло ҡатын һүҙе

Нисәнсе ҡат бағам күҙҙәреңә —
Һин фотола һаман йәш көйө,
Йылмаяһың, үҙең ҡабатлайһың:
«Ҡаршылама мине йәш ҡойоп.
Тиҙҙән осрашырбыҙ. Ялға ҡайтам.
Бик һағындым һине. Көт, әсәй!..»
Һуңғы хатыңдағы ошо һүҙҙәр
Ҡайҙа барһам, шунда көтәсәк.
Нисәнсе йыл һағыш тамуғынан
Ҡотолорға сара тапмайым.

...Туҡта, ул көн бөтә ауыл көттө
Ғәзиз улҡайымдың ҡайтырын.
Һәр бер өйҙә бәлеш бешерҙеләр,
Бәйләнеләр тыуса һарыҡты,
Байрам күлдәктәре түргә сыҡты
Йылдар буйы ятҡан һандыҡтан...
Берәй эше сығып һуңлағандыр.
Аҙна үтте килер көнөнән...
Йәш һалдаттың ялға ҡайтыу мәлен
Ауыл һаман көттө төңөлмәй.

Әсә йөрәге бик һиҙгер була —
Таңдан үҙемә урын тапманым...
Хәтеремдә улым бүләк иткән
Аҡ кәсәне төшөрөп ватҡаным.
«Хәйерлегә!» — тигән булдым, ерҙән
Ап-аҡ ярсыҡтарҙы йыйғанда,
Ә йөрәгем һулҡып-һулҡып алды,
Хәүеф-хәтәр барын тойғандай.
Ап-аҡ конверт — аҡ кәфенлек төҫө,
Ҡалтырана ҡара хәрефтәр,
«Батырҙарса» тигән һүҙҙәрҙән һуң
Кем әсәгә бөгөн хәл өҫтәр?

Ирем килеп сыҡты күтәрмәгә,
Йөрәгенә ҡапты ут-хәбәр!
Бар ауылды йәшен аттымы ни?!
Һәр күңелдә бөгөн ут-хәнйәр.

Улым урынына табут ҡайтты...
Тимер йәшник кенә ни бары.
Афған, Чечня, Тажик, Кавказ аша
Башҡортостан тыңлай ил зарын.
Фоторәсем ҡалды иҫтәлеккә.
Нисәнсе ҡат уға ҡарайым.
Бер ни уңалта алмаҫ әсәләрҙең
Йөрәгендә ҡалған яраны.

Бер мин түгел, күпме әсә бөгөн
Рәсемдәргә ҡарап йәш түгә,
Күпме йәшәлмәгән йылдар ҡалған,
Күпме хыял, күпме йәш теләк?!
Аҫыл башҡорт егетенең эшен
Дауам итер бала тыуһана!

Мин илайым.
Бер диуана ҡатын,
«Балам үлде», тиеп ҡыуана.

Ғәйепләйем һине, йәш ҡыҙ-әсә,
Улым киләсәген үлтерҙең.
Яндырғаның өсөн быуындарҙы
Тоташтырған изге күперҙе.
Йәш сабыйҙы улы итер өсөн
Күпме ҡатын баҫҡан сиратҡа,
Сабыйыңды беҙгә бирер инең?!
Хәйер,
Уйламаның инде ул хаҡта.

Эй, ҡатындар, һеҙгә өндәшәмен,
Улым кире ҡайтмаҫ, беләмен,
Бәлки, улым кеүек бер сабыйҙы
Бирерһегеҙ миңә?
Берәре
Яңылыштан тыуған сабыйын
Берүк үлтермәһен!

Ана, улым
Сәңгелдәктә ята, ҡарағыҙ...
Улым ҡайтҡан икән...
Яраһыҙ...

## Үҙенә ҡул һалған ир йәне

Бәлки, минең хаҡым юҡтыр
Һеҙҙеңише һүҙ алырға.
Ишеткәс был фәхшилекте,
Теләмәнем шым ҡалырға.
Эйе, мин юҡ был донъяла,
Күптән түгел киткән инем,
Йәнем оса һауаларҙа...

...Ирендәрем кипкән минең,
Һыу бирегеҙ, эсем яна,
Үҙем эскән ыуҙан, ана,
Көнөм төнгә күсеп бара...
Үкенмәйем киткәнемә —
Тере мәйет кемгә хәжәт.
Был һоҡланғыс Ер йөҙөндә
Йәл, бик, бик әҙ ҡалдым йәшәп.
Бала сағым хыялдары
Зәңгәр көйө, зәңгәр көйө:
Үҙ ҡулдарым менән һалдым
Тормошомдоң зәңгәр өйөн.

Юҡ, бәхетһеҙ булманым һис —
Буй еткерҙем, егет булдым,
Беләгемә ҡеүәт ҡунды,
Йөрәгемә хис-дәрт тулды.

Ил һаҡларға ебәрҙеләр
Диңгеҙ буйы сиктәренә.
Беҙҙең кәмә һыу аҫтында.
Бойороҡ юҡ күтәрергә.
Авария!
          Авария!
Фажиғәле көнөм минең.
Шунда атом нурланыуы
Електәргә үтеп инеп
Һиҙҙермәйсә, өнһөҙ генә
Һаулығымды кимергән дә,
Шап-шаҡтайҙан ғәрип яһап,
Ошо көнгә килтергән дә.

Ни ҡылғанын «шымсы» нурҙың
Белмәй инем.
                    Ҡайттым илгә.
Өйләндем һәм донъя ҡорҙом.
Йән биргәнгә йүнен биргән.
Инде улым, ҡыҙым тыуыр,
Йорт һалайым һиплəп кенә,
Тик кәләшем һаман түлһеҙ...
Иплəп кенә
Икебеҙҙең күңелдә лә
Борсолоуҙар арта ғына...
«Кем ғәйепле?»
Һорауҙарҙан
Ҡайтауаздар ҡайта ғына...
Табиптарҙың ишектәрен
Асып-ябып илергәйнек,
Йылы өмөт һүҙен көтөп,
Икәүләшеп тилмергәйнек,
Һуңғы һүҙен әйтте табип,
Нөктә ҡуйҙы шик-шөбһәгә...
Ғаиләбеҙ ҡалды шулай
Ултырып та ҡаҡ төпһәлә.
Яңғыҙ ҡалдым бәлә менән.
Ҡатыныма һис үпкәм юҡ.
Йәшәүемдең йәме, тәме,
Мәғәнәһе юҡ, бүтән юҡ!
Ирмен, тиеп, кәпәс кейеп,
Ни ғәм менән йәшәйем, ти.
Кәмһетелеү һаҙлығынан
Сыға алмай сәсәйем мин.
Ғәриптәрҙең ғәрибе мин
Бар ағзам да теүәл көйө,
«Атай!» тиһә берәй сабый,
Тамағыма тығыла төйөр.
Ошо һүҙҙе үҙ улымдан
Ишетмәҫкә ҡәһәтләндем.

Йәшәү — үлем!
                    Үлем — йәшәү!
Ғүмере була ҡалһа йәндең,
Мин күсәйем күккә, тинем.
Фанилыҡтан мәңгелеккә...

Йылдар үткәс,
Терелермен,
Бәлки, берәй сәңгелдәктә...
Йәнем күсер бер сабыйға:
Оҙаҡ итеп йәшәр инем,
Эй яратыр мине атам,
Һөйөр ине әсәм мине.
Эй, бәғерһеҙ, йәнһеҙ йөрәк,
Ҡатын,
Ниңә булдың әсә?
Үҙең бар итмәгән йәндең
Ғүмеркәйен ҡыйҙың, әсә?
Мин теләмәҫ инем һис тә
Сабыйыңа йән өрөргә,
Ике сәғәт кенә йәшәп,
Юғалырға һәм үлергә...
Был сабыйға инмәҫ борон
Нисә быуат көткән ул йән
Терелергә?!
Улың түгел,
Һин тарихтың ҡотон күмгән...

Ғәйепләйем һине, һеңлем,
Мәңгелек йән исеменән!
Тормош гүзәл,
Мәйет түгел,
Тере кеше эше менән!
Минең ише «тере мәйет»
Үҙе теләп китә икән —
Бер ғәйепһеҙ сабый бала
Тар ҡәберҙе түшәк иткән.
Үлемдәр ҙә, йәшәү кеүек,
Төрлө икән.
Ғәйепләйем!
Түләгән бит хаҡын улың
Һинең гонаһ, ғәйептәрҙең.
Ғәйепләйем!

## Балалы йәш ҡатын һүҙе

Хәтерләгем килмәй ул көндәрҙе,
Өндәшергә ҡуша выжданым,
Айҙар, йылдар түгел, әлегәсә
Тынмай йөрәгемдең һыҙлауы.
Күҙ алдымдан китмәй ҡан төйөлгән
Атай ҡарашының нәфрәте,
Ҡағылғайны уға, намыҫ түгел,
Әҙәп, тәрбиәлек зәхмәте.
Ул көн тәүгә белде (белмәһәсе?!)
Атам минең йөклө икәнде.
Сәстәремдән һөйрәп туҡмағанды,
Итек менән эскә типкәнде,
«Кәнтәй, мине хурлар өсөнмө?» — тип,
Аҡырғанын бер кем ишетмәне,
Бер әҙәм дә ул көн күрмәне.
Уҡыуымдан ялға ҡайтҡан инем.
Әсәй эштә.
Шыңшып иланым.
Аҙбар мөйөшөндә төн үткәреп,
Бушлыҡ сәфәренә юлландым.
Хурлыҡ!
Хурлыҡ!
Атай — уҡытыусы,
Әсәй тәрбиәсе мәктәптә.
Ә ҡыҙҙары улар исеменә
Ҡара яға була, әлбиттә.
Ятраҡанға мин ғәйепле инем,
Ышанғанға һөйгән йәремә,
Йөккә уҙыуымды белмәй әле,
(Әйтмәҫмен дә, бәлки, кем белә?)
Сөнки уның инде кәләше бар,
Ул да бәпес көтә.
Ярай ҙа,
Ни булһа ла булыр.
Хәлем етер
Бер баланы ғына ҡарарға.
Тик атайһыҙ һәм әсәйһеҙ генә
Был донъяла нисек йәшәргә?
Нисек ваз кисергә тыуған йорттан?
Оноторға ғәзиз әсәйҙе?..

Уҡыуымдан ҡайтыуыма мине
Әсәм көтә ине бүлмәмдә.
(Уның менән хушлашмай ҙа киттем),
Ҡатып ҡалдым тәүгә күргәндәй.
Әсәйем дә минән баш тартырмы?
Табиптарға йүгер, тиерме?
Минең ҡәтғи яуабымды белеп,
Сығырынан сығып көйөрмө?
Бәлки...
Их, ошо һүҙ бер әкиәт булып,
Тормошома килеп инһәсе,
«Һаумы, ҡыҙым! Ниңә теге юлы
Мине күрмәй сығып китергә?
Атай һүҙе башҡа.
Кәрәк ине
Минең менән кәңәш итергә...»

Оҙаҡ һөйләштек беҙ.
Әсәкәйем
Хәлгенәмде дөрөҫ аңланы,
Өйгә ҡайтманым мин.
Тик әсәйем
Йыш ебәреп торҙо бал-майын.

Аҙаҡ ҡына белдем, әсәй өсөн
Ни хаҡ торған миңә килеүҙәр,
Атайым бит һәр китеүе һайын,
Һәр ҡайтыуы һайын тилергән.
Ә бер көндө: «Тыума тапҡан ҡыҙың
Кәрәк икән,
Юғал күҙемдән,
Өй тупһаһын аша атлар булма!» —
Тиеп ҡотороноп һүгенгән.

Монаятын йыйнап килде әсәй:
«Ни күрһәк тә, бергә күрәйек.
Бала хаҡы өсөн,
Бер йән өсөн
Михнәттәргә генә түҙәйек.
Минең ҡан тамсыһы ул сабыйҙа,
Минең хыял, минең киләсәк.
Хаҡ Тәғәлә бәхет, шатлыҡтарҙы
Сабырҙарға ғына бирәсәк!»

Тамуҡтарҙы үттек. Бирешмәнек.
Әсәй һәм мин,
Һәм дә бәпесем.
Уҡыуҙы ла яҡшы тамамланым,
Ыңғай ғына барҙы һәр эшем.
Ана, көмөш сәсле әсәйемдең
Уң яғында улым ултыра,
Һул яғында — минең уң ҡанатым,
Ауыр мәлдәремдә ҡулын һуҙған
Миһырбанлы йәрем, берҙән-берем —
Хаҡ терәгем — бәхетем ултыра.

Ғәйепләйем һине, әсә кеше,
Еңел йәшәргәме теләнең?
Белмәнеңме Хоҙай бәхеттәрҙе
Сабырҙарға ғына биргәнен?
Һин яңғыҙың ҡалдың ауыр мәлдә,
Үҙ әсәйең ситкә этәргән.
Ғәйебеңдең бер өлөшөн, эйе,
Миһырбанһыҙ әсәң күтәргән.
Ул да әсә кеше, тик ниңә һуң
Һанламаған хәлен ҡыҙының?
«Ҡартәс!» һүҙен инде ишетмәҫ ул,
Тыныслыҡта ғүмер уҙғарыр.
Ҡарт көнөндә, түшәктәргә ауғас,
«Һыу бир, ейәнем!» — тип саҡырыр.
Буш мөйөшкә текләп көнө үтер,
Уфтаныт та төнө яҡтырыр.
Кем битараф ҡалған йәш әсәгә —
Ғәйепләйем һеҙҙе, белегеҙ,
Гонаһығыҙ һанын арттыралыр
Ғәйепһеҙ бер сабый үлеме!

## Суд ҡарары

Баҫығыҙ, суд килә!
Баҫығыҙ!
Күңел ҡапҡаларын асығыҙ!
Ғазаптарҙы тойған, аңлағандар
Ҡылған енәйәттең асылын.

Статья менән генә үлсәмәйбеҙ
Намыҫ алдындағы гонаһты.
Әсә кеше!
Һине ғүмер буйы
Сабыйыңдың йәне оҙатһын!
Ҡайҙа барма — сабыйыңа ашыҡ.
Ҡолағыңда тауышы сыңлаһын.
Төндә төштәреңдә яфалаһын
Йырланмаған бишек йырҙары.
Сабыйың юҡ.
Тик мәңгелек йәне
Айҡай ете ҡатын күктәрҙең.
Һине ярлыҡарлыҡ сәбәптәр юҡ —
Гонаһтың иң ҙурын күтәрҙең.
Ярлыҡау юҡ һиңә, әсә кеше!
Кеше үлтереүсе бәндәһең.
Онотормон, тимә, сабыйыңды
Күмеү менән ергә кәүҙәһен.
Бәддоғаһын уҡыр уның рухы
Ете быуыныңа еткәнсе,
Ҡар өҫтөндә тыпырсынған сабый
Ҡарғыштары әсе, бик әсе...

## Эпилог

Ике сәғәт йәшәп, донъя ҡуйған
Сабый ише халҡым бөтөрмө?
Күкрәгенә сабый ҡосаҡлаған,
Халҡым киләсәген һаҡлаған
Яңғыҙ ҡатындар ҙа, берәй ҡасан,
Ғәйбәт, кәмһенеүҙәр кисермәйсә,
Башын ғорур сөйөп үтерме?
Бәлки, шул саҡ һалҡын ҡар өҫтөнә
Сабый кендегенән ҡан аҡмаҫ,
Яңғыҙ ҡалған әсә бәғерҙәрен
Гонаһ бысаҡтары ҡанатмаҫ!

# ЙОНДОҘ ҠЫҘЫ

*Фантастик поэма*

## I

Төнгө ҡала.
Тәҙрә-уттар һүнгән.
Йоҡлай ағас.
Йоҡлай урамдар.
Көндөҙ геүләп үтер машиналар,
Автобустар әле тынғандар.
Бер тауыш юҡ.
Йөрәк һуға туҡ-туҡ.
Туҡ-туҡ. Ерҙә аяҡ тауышы.
Әйтерһең дә, ерем — ҙур барабан,
Аяҡтарым — таяҡ ҡағыусы.
Туҡ-туҡ йөрәк.
Кәрәк, кәрәк, кәрәк
Тиҙерәк өйгә ҡайтып етергә...
Хәҙер инде бик аҙ ғына ҡалды.
Ҡалды күпер аша үтергә...
Йөрәк һиҙә —
Арттан кемдер килә.
Ишетелә аяҡ тауышы.
Мин туҡтаһам — тына,
Ә ашыҡһам,
Ул да йәһәтләтә барышын.
...Уйламайым бер ни.
Ҡайҙа ҡурҡыу?!
Ер туҡтаған кеүек йәшәүҙән.
Ә йөрәгем һулҡып-һулҡып илай,
Айырылғандай донъя-әсәйҙән.
Хистәрем дә ҡатып ҡалған кеүек,
Мин үҙем дә, гүйә, тораташ.

Бейек йорттар мине, рәткә баҫып,
Ҡәберлеккә мәллә оҙата?
(Кемдер килеп тотто терһәгемдән),
Тәнем буйлап ток йүгергән кеүек,
Сикәләрем яна ут булып.
Ниңә өндәшмәй ул?
Мин, бисара,
Һиҙмәй тиме икән мутлығын?
Өндәшмәйем.
Бары йөрәк кенә,
Йөрәккенәм бер аҙ сыҙаһын.
Еңел генә тарттым беләгемде...
Әйләнмәйем артҡа.
Аяҡ тарта
Алға,
Бит аҙ ҡалды уҙаһым.
Ҡыҙыҡһыныу хисен тыя алмай,
Мин артыма кинәт әйләндем:
Көл төҫөндә плащ.
Ә ҡараштар
Серле нурҙар булып бәйләнде...
...Баҫма уртаһында егет тора —
Ике ҡулын тыҡҡан кеҫәгә,
Ә күҙҙәре әйтә кеүек бер һүҙ:
«Тап ошонда, иртән, иртәгә!»
Кипкән ирендәрем, ирекһеҙҙән,
Бышылданы әллә: «Ярай!» — тип?!
Бер ни ишетмәйем, ә аңлайым.
Күҙҙәр күҙгә генә ҡарай тик.
«Ярай, ярай!»
Йөрәк шашып ярһый.
Егет ҡулын өҫкә күтәрҙе...
Ашыҡмайса, тыныс атлап киттем,
Ниндәйҙер көс алға этәрҙе.

Бүлмәм ҡаршы алды тыныс ҡына,
Өҫтәлдәге сәғәт келт тә келт.
Өйҙәгеләр йоҡлай.
Инде һин дә
Бер ни уйламайса йоҡлап кит...

II

Ҡыҙыу атлап эштән ҡайтып киләм.
Яңғыҙлыҡтан ҡурҡыу юғалды.
Бына күпер.
Уртаһында шәүлә.
(Оҙаҡ ҡына, ахыры, торғандыр?)
Йылға шаулай.
Күҙҙәремде ялмай
Серле шәүлә һипкән яҡтылыҡ.
Ара алыҫ ҡына.
Күкрәгемдән
Йөрәк сығыр һымаҡ атылып.
Яҡынлашам.
Күптән таныш кеүек
Ҡулдарымды биреп күрешәм.
Ҡайнар устарынан бар тәнемә
Ниндәйҙер бер ялҡын ҡойола.
Аңлайышһыҙ, наҙлы рәхәтлектең
Ямғырына, гүйә, ҡойонам.
«Һөйләшәйек, аңлашайыҡ», —тине.
«Улай булғас, киттек баҡсаға!»
«Әйҙә! — ти ул. — Керһеҙ ихласлыҡты
Һатып алып булмай аҡсаға».

Тауыш-тын юҡ.
Бары урман ғына
Ҡолаҡтарға серен бышылдай.
Бер туҡтауһыҙ елгән болоттарҙан
Алтын табаҡ Ай ҙа йышылған.
Тыңламаҡҡа беҙҙең һөйләшеүҙе
Баш осонда торҙо эленеп...
Серле танышымдың кем булыуын
Мин һорарға булдым иң элек.

Е г е т:

Юҡ, әлегә әйтә алмам бер ни,
Аҙаҡ төшөнөрһөң үҙең дә.
Таныш йондоҙомдо эҙләйем мин
Һинең моңло ҡара күҙеңдән.
Ҡурҡма берүк, насар уйлай күрмә,
Ышана күр бары һүҙемә,
Юғалырмын тиҙҙән.

Ә һин бары ҡара,
Ҡара теклəп минең күҙемə.
Мин юғалғас, эҙлə был ҡараштты —
Кешелəргə уны ҡалдырам,
Изге уйлы,
Киң күңелле йəндə
Йондоҙомдоң нурын яндырам…

…Йондоҙ, йондоҙ?!
Айға, һанһыҙ йондоҙҙарға бағып,
Əсəйемдең талды күҙҙəре.
«Атай ҡайҙа?» — тигəн саҡтарымда,
Иң кəрəкле һүҙҙəр эҙлəне.
Хəтерлəнем!
Əсəй ул сағында,
Бик алыҫта, тине, атайың.
Əллə ысын,
Əллə юрый ғына
Сəйер бер ил исемен атаны…

«Ә мин белəм, — тине шул саҡ егет. —
Үткəндəрең миңə билдəле:
Иҫтəремдəн сыҡмай
Ул ваҡытта
Яндарымдан нисек киткəнең…»

«Яңылышаһың, буталаһың, егет,
Мин бит һине күрəм тəү тапҡыр?»
Күҙҙəремə теклəп əйтте егет:
«Тимəк, һин икенсе йəр таптың?»
Аптырауҙан ҡаттым.
«Өндəшмə лə, һөйлəмə лə бер ни…»
Егет телгə килде тағы ла.
(Уйҙарымды уҡый?! Был ни ғəжəп?
Күҙҙəремə һүҙҙəр яҙыла?)

Тертлəп киттем, һалҡын һыу һипкəндəй,
Шом билəне ҡуйҙы йөрəкте:
Билдəһеҙ бер егет менəн яңғыҙ?!
Ә əсəйем нимə өйрəтте?
Ана, көтə əле əсəкəйем
Ҡошсоғоноң эштəн ҡайтҡанын —
Өмөт йондоҙолай балҡып тора
Алыҫтағы тəҙрə яҡтыһы…

III

Ҡотҡарығыҙ мине был сихырҙан,
Йөрәгемә дауа табығыҙ,
Ҡара төндә юлдарымда осрар
Серле күперҙәрҙе алығыҙ!
Атламайым, осам ғына икән
Бер күрергә серле күҙҙәрҙе.
Әсәйем дә, һиҙгән кеүек, әйтә:
«Хәйерлегә булһын, үҙгәрҙең.
Күҙҙәреңдең нуры һүнгән ине —
Күңелгенәң ҡошһоҙ урман ине,
Ниндәй ҡояш таптың үҙеңә?»
Әсәкәйем, мин яңынан тыуҙым —
Йөрәгемдә һөйөү уянды,
Тик әйтмәйем әле, эштән ҡайтҡас,
Кем менән һәм ҡайҙа булғанды.
Юҡ, ҡурҡма һин, әсәй, ҡыҙ балаң
Намыҫына тутыҡ ялатмаҫ,
Саф йөрәгем алтын-көмөш өсөн,
Аҡса өсөн генә яратмаҫ!

Төнгө урам бөгөн тынып тора,
Килгәнгәлер юлдан ғашиҡтар,
Беҙ түгелме хыял-ҡанаттарҙа
Күккә, йондоҙҙарға ашыҡҡан?

Е г е т:

Һөйөүемдән телһеҙ ҡалдым, ахыры,
Ҡара әле, иркәм, күҙемә,
Күрәһеңме, унда бер нур булып,
Йондоҙ саҡҡылары күренә?
Иртән, иркәм, инде һеҙҙән китәм,
Ҡалғым килмәй бер ҙә сер булып,
Ышан һүҙҙәремә һәм ғәфү ит,
Була алмам инде Ер улы.
Иҫләйһеңме, һөйләгәйнем бер көн,
Тыуып-үҫкән илем алыҫ, тип...

Ҡ ы ҙ:

Беләм, ә һин китмә,
Мөмкин булһа,
Үҙең менән мине алып кит!

Е г е т:

Дөрөҫлөк бер — үтә генә ғүмер,
Яҙмышымдың сере ҡалмаһын.
Минең кисергәнде бер кемгә лә
Кисерергә башҡа яҙмаһын!
Беҙҙең Ер ҙә һеҙҙекенә оҡшаш,
Тик кешеләр генә әҙерәк.
Йылға, урман, тауҙар саф көйөнсә,
Юҡ яуызлыҡ, алдау, йәберләү —
Барыһы ла тигеҙ.
Беҙҙең йондоҙ
Көҙөн ракеталар осора,
Һәр йыл һайын шулай бер ваҡытта
Беҙ тейешбеҙ алыҫ осорға.
Күптән йондоҙҙарға таралышҡан,
Шулай итеп, беҙҙең туғандар,
Ирҙәр — ҡатын-ҡыҙға, ә ҡатындар
Ир-аттарға ғашиҡ булғандар.
Мин дә шулай ғашиҡ булған инем
Бер килгәндә башҡорт ҡыҙына —
Йөҙө айҙай,
Ҡара керпектәре
Ҡош ҡанаты кеүек һыҙылған,
Күҙҙәрендә — әсир итер осҡон,
Һүҙҙәрендә — тылсым тамсыһы,
Икебеҙҙең йөрәк, әйтерһең дә,
Изгелекле ҡояш ярсығы.
Үҙе риза ине.
Алып ҡайттым
Йондоҙома башҡорт һылыуын.
Көндәр-төндәр буйы беҙ бүлештек
Йөрәктәге һөйөү йылыһын.
Оҡшаһа ла уға беҙҙең төйәк,
Ул һағынды Урал тауҙарын,
Йырҙарына ҡушып йырлай ине
Боролоп-боролоп аҡкан Һаҡмарын.
Ишетәһе килде ҡурай моңон,
Бер тәмләйһе килде ҡымыҙын,
Көн дә кипте,
Һарғайыуҙан йөҙәп,
Ул ауырып китте…

К ы ҙ:

Шунан, ҡайҙа булды йәрең?

Е г е т:

Ҡайтты. Ҡайтты үҙ иленә.
Ышанғайным был һағышҡа
Һарғаймайса түҙеремә.
...Хушлашҡанда «Һөйәм!» тиеп,
Балдаҡ бүләк иткән ине,
Сикәләрем, иренемдән
Татлы итеп үпкән ине...

К ы ҙ:

Ниңә үҙең ҡалманың һуң
Мөхәббәтең ҡуйынында?

Е г е т:

Бының өсөн кәрәк ине
Ҡыҙыл нурҙа ҡойонорға.
Ғүмерҙә бер тапҡыр ғына
Был нурҙарҙы алып була,
Шул саҡ теләгән йондоҙҙа
Йәшәр өсөн ҡалып була.
Теләгәйнем мин дә шулай,
Ер-йондоҙҙа ҡалам, тиеп,
Тик һөйгәнем ҡаршы төштө:
Ерҙә йәшәү — яза, тиеп.
Ерҙә һинең изгелегең
Яуызлыҡтан тапалыр, тип,
Ә аҡылың, сабыйлығың
Иҫәрлеккә һаналыр, тип.
Аңламаҫтар, һанламаҫтар
Ҡаты бәғер кешеләре,
Хыялыйға әйләнәләр
Беҙҙә Алла ишеләре,
Ҙур йөрәкле кешеләре.
Яңғыҙ ғына шулай икәү
Ерҙә етем ҡалырбыҙ ҙа
Юғалырбыҙ.
Һин ҡайтҡастын йондоҙоңа,
Йөрәгемә өмөт ҡабыр,

Ауыр саҡта устарыма
Һөйөү нуры — йондоҙ яуыр.
Шулай тигәс, кире йондоҙома
Ҡайтып киткән инем, хушлашып.

Ҡ ы ҙ:

Әле уны эҙләп килгәйнеңме?

Е г е т:

Үтәмәнем уның ҡушҡанын:
Онот, тигән ине, онотманым.
Сабыр, тигән ине, түҙмәнем,
Ергә килеп, айҙар, йылдар буйы
Йондоҙ-ҡараштарҙы эҙләнем.
Күрҙем күген,
Күрҙем ҡараһын да,
Күрҙем сафын, күрҙем бысрағын,
Көттөм бер көн, Ҡояш кеүек балҡып,
Тик иркәмдең генә осрауын.
Мин тауҙарға мендем.
Урман гиҙҙем.
Ялан, туғайҙарҙы буйланым,
Ҡая-ташҡа баҫып, әҫәрләнеп,
Урал ҡурайҡайын уйнаным.
Ишетер ҙә, бәлки, килер, тинем.
Яуапланы яңғыҙ һандуғас,
Шул да хатта бер йыуаныс ине,
Йәшлегемде өҙөлөп һағынғас.
Ҡурай,
Эйе, Ерҙең төҫө итеп,
Моңо итеп һөйгән йәремдең,
Алып ҡайтам.
Орлоҡтарын йыйҙым.
Үҫтерермен тыуған еремдә.
Уйнармын да, Ерҙе уйлармын мин,
Башҡорт тигән илде һағынып,
Һәм йәшәрмен бер аллаға ғына —
Мөхәббәткә генә табынып.
Уны эҙләгәйнем.
Ә һин уға
Ике тамсы һыуҙай оҡшашһың,
Шуғалырмы һөйөү ялҡындары
Йөрәгеңә барып олғашты.

Һиңә ҡарайым да уны күрәм,
Һин өндәшһәң, уны ишетәм...

Ҡ ы ҙ:

Мин ышанам.
Тик һүҙҙәрең генә
Йөрәгемде инде өшөтә...
Шулай сабыйҙарса ғашиҡ итеп,
Мине ташлап ҡайтып китәңме?

Е г е т:

Эйе, китәм иртән,
Тик һин, иркәм,
Күңелемдә ҡалдың ғүмергә,
Йондоҙомдоң бер сәскәһе һулыр,
Күҙ йәштәрең әгәр түгелһә.
Ысын була ҡалһа мөхәббәтең,
Баҡсам һулыуынан тойормон,
Һәм килермен ҡабат яндарыңа,
Мәңгелеккә бында ҡалырмын.
Ә хәҙергә
Иҫтәлеккә балдаҡ.
Булһын һөйөүебеҙ билдәһе.
Осратманым әле был донъяла
Һинең мөхәббәткә тиңдәрҙе.

Ҡ ы ҙ:

Теге бүләк-балдаҡ ошомо ни?

Е г е т:

Эйе. Хәҙер һиндә һаҡланһын ул,
Бәлки, осратырһың эйәһен?
Күрһәң әгәр,
Һине һаман көтә,
Бик һағынған һине, тиерһең.

Ҡ ы ҙ:

Рәхмәт! Һау бул!

Ҡосаҡлашты улар.
Береһе — хәтер.
Береһе — мөхәббәт.
Бәхет тигән илгә, изге ергә
Осһа ине лә бит икәүләп...

## IV

Ә с ә:

Ә мин бында ҡайтҡаныңды көтөп,
Үткәндәрҙе барлап ултырам...
Йәшлектәге һөйөүҙән дә татлы,
Ҡәҙерлерәк хистәр юҡ, ҡыҙым.
Мин ауылда үҫтем.
Силәк менән
Һыуҙар ташыр инем йылғанан,
Һиҙә инем
Оҙон толомома
Егеттәрҙең ғашиҡ булғанын.
Бер көн шулай һыуға килгәнемдә,
Йәшенеп тә тирәк артына
Тыңлап торған минең йырлағанды
Сибәр егет.
«Тағын йырла! — тине. —
Бындай моңдо тәүгә ишетәм,
Сабырлыҡ һәм наҙҙан бар йыһанды
Сәңгелдәктә итеп хис итәм!»
Мин йырланым.
Бына ошо көндән
Айырылмаҫ итте беҙҙе моң,
Тиҙҙән уйнарға ла өйрәнде ул
Урал ҡурайында өҙҙөрөп.
Бына шулай айырылыша алмай
Ғашиҡ булып көндәр үттеләр,
Беҙ йөрөгән юлда аҡ сәскәләр
Иртән ысыҡ-йәшен түктеләр.
Бер көн серен асты һөйгән йәрем:
«Айырылышыу көнө — иртәгә.
Мин ошонда ғына юҡҡа сығам,
Әгәр иртән ҡайтып китмәһәм».

Асты серен:
Ваҡытлыса ғына
Килгән икән беҙҙең йондоҙға.
Һинһеҙ нисек йәшәрмен һуң, тинем,
Һинһеҙ әйләнермен моңһоҙға?
«Ризаһыңмы. Алып китәм», — тине.
Риза булдым.
Остоҡ бергәләп...

Ҡ ы ҙ:

Ниңә кире ҡайттың, әсәй?

Ә с ә:

Бәләкәсем, татып ҡарамағас,
Белмәйһең шул һағыныу ғазабын.
Илен ташлағанға Хоҙай биргән,
Иң ауырын биргән язаның —
Ул — үҙ илен һағыныу ғазабы.
Ебәрмәҫ тип ҡурҡтым.
Ул сағында
Өндәшмәнем, түҙҙем, сыҙаным —
Ул тыуҙырған йәшәү тубырсығы
Ҡарынымда инде булғанын.

Ҡ ы ҙ:

Әсәй, тимәк...

Ә с ә:

Эйе, ул һин инең.
Йондоҙҙа бит һинең атайың!

Ҡ ы ҙ:

Ебәр мине, әсәй, атайымды
Күргем килә!
Ебәр йондоҙға?!

Күҙҙәремдән тамған ынйыларҙы
Һөртөп төшөргәндә ҡулдарым,
Әсә ҡараштары бармаҡтағы
Йөҙөк йәшмәһендә туҡтаны...

Ә с ә:

Туҡта, ҡыҙым, ҡайҙан алдың әле
Ҡулыңдағы ҡашлы йөҙөктө?

Ҡ ы ҙ:

Һөйгән йәрем бүләк итте бөгөн.
Иҫтәлегем итеп йөрөт, ти.

Ҡулдарына алып оҙаҡ ҡына
Әсә әйләндерҙе балдаҡты,
Ниҙер хәтерләргә тырышҡандай
Бер нөктәгә бағып шаҡ ҡатты.
Күҙҙәренән тамған ҡайнар тамсы
Сикәләрен уның сылатты.
Минең һүҙҙәремме?
Әллә йөҙөк?
Әсәйемде кем һуң илатты?

Ҡ ы ҙ:

Нимә булды, әсәй?

Юҡ, ишетмәй.
Йөрәгенә ҡыҫып балдаҡты,
Эстән генә ниҙер һөйләй-һөйләй,
Уйҙар диңгеҙенә олаҡты...
Ваҡыт етер:
Әсә тынысланып,
Ҡолонсағын ҡыҫыр ҡосаҡлап,
Йөрәккәйен өйкәп, әрнеп торған
Серен асыр бына шул саҡта.

...Балдаҡ, балдаҡ.
Алыҫ йәшлегенең
Ҡабатланмаҫ нуры ине ул.
Урал тауҙарының йәшмәһенән
Семәрләнгән ҡашы, тиер ул.
Һин яратҡан егет, әйе, ул саҡ
Мөхәббәтен, мине эҙләгән,
Тик ваҡыттың шартлы икәнлеген
Әллә белгән, әллә белмәгән?
Уның йондоҙонда бер йыл үткән,
Ә ер үткән ун йыл араны...

Тиҫтә йылдар хатта үтһәләр ҙә,
Уңалмай шул йөрәк яраһы.
Ҡыҙым, һине ғашиҡ иткән егет,
Нисегерәк итеп атайым?
Ул бит — минең йәшлек мөхәббәтем.
Ул бит,
Ул бит — һинең АТАЙЫҢ!
Балдаҡ ҡына ҡалды
Үткәндәрҙең
Хәтирәһен йолоп үҙенә,
Атай ҡайҙа, тиеп, һорамайым,
Ә ҡарайым әсәм күҙенә —
Унда һөйөү саткылары тулы
Серле йыһан үҙе күренә.
Йондоҙҙарға баҡһам, һағыш тулы
Моңло ҡурай сыңы түгелә...



## ЭПИК ШИҒЫРҘАР

### БАШҠОРТ ЙЫРЫ — ТЕРЕ ШИШМӘ

Башҡорт халыҡ йырҙарын әҫәрләнеп
тыңлаған берәүҙең һорауҙарына яуаптар

1

*Ниңә шулай оҙон тынлы,*
*Моңло, тиһең, башҡорт йыры?*

Ә һин күҙ алдына килтер
Халҡым йәшәр ялан-ҡырҙы...
Иғтибарлап тыңла әле,
Ҡолағыңа салынамы,
Дала буйлап туп-туп тулап,
Тай-тулаҡтар ярышҡаны...
Ишетеләмә...
Аҡ ҡылғанлы
Дала-диңгеҙ тулҡын ҡаға,
Саңҡ-саңҡ итеп бөркөт ҡуна
Мәрмәр ҡая яурынына...
Бүре, төлкө тырнағынан
Ялан буйлап ҡуян ҡаса.
Шаян елдәр тирмәләрҙең
Кейеҙ ишектәрен аса.

Ҡурайсының ҡулдарынан
Сихырланған үлән моңо,
Шығыр-шығыр...
Ашъяулыҡҡа
Өйөлә бара арыш оно.
Ҡашы — ҡарлуғас ҡанаты,
Күҙҙәре — бешкән муйыл,

Сулпылы толом сәстәре
Болоттай ҡара, ҡуйы.
Һомғол, сая һылыуҡайҙар
Шаршау артына боҫоп,
Ҡымыҙ бешә,
Май яҙалар,
Моңло йырҙарын һуҙып.
Ил ағаһы — уҙамандар
Аҡһаҡал эргәһендә,
Ултыралар бишбармаҡлы
Ҙур табаҡ тирәһендә...
Табын ҡыҙа.
Ҡурай һуҙа
Аҡһаҡалы сәсәнгә.
Көй барында,
Бейеү барҙа
Була әле йәшәргә!
Ойоҡһотоп баҫып үтә,
Елпенеп ҡала елән,
Баҫҡан һайын ут сәсрәтә —
Был егет ҡайҙан килгән?
Уҡалы ҡара елән...

Бышҡыра тай.
Тирмә йоҡлай.
Шишмәләр сөкөрләшә.
Аҙашҡан балаһын эҙләй
Урманда өкө-әсә...
Таң һыҙыла.
Ҡашмау кейә
Ирәндек-тау ҡыҙылдан.
Ҡояш аса нур-күҙҙәрен
Һабантурғай йырынан.
Сиңерткәләр салғы яный,
Тумыртка утын яра.
Силәк сыңлай.
Уңған килен
Шишмәгә һыуға бара...

Күҙ алдына килтер ҙә бер,
Йырламай түҙеп ҡара!
Тамырыбыҙ йәшәү көсөн
Тәрән тарихтан ала.

Тәбиғәттәй киң булғанға
Күңелкәйе халҡымдың,
Даръяларға һыймаҫ моңо
Ала шулай алҡымдан…

2

*Ниңә шулай зарлы, тиһең,*
*Башҡорт халыҡ моңдары?*
*Аптырата*
*Йырҙарымдың*
*Һуҙгә һаран булғаны?*

Ауырҙыр
Тын ҡалғанымда
Хистәремде аңлауы.
Эйе, йөрәгемде өтә
Сал тарихым шаңдауы…
Тыңла,
Быуаттар тарихын
Хаҡлыҡ ебенә теҙәм,
Йырламайым,
Йәштәремә
Быуыла йөрәк.
Түҙәм!

Ҡырағай башҡорт, тигән дә,
Еремде кем тапаған?
Кем алдаған?
Кем талаған?
Кем ҡырағай һанаған?
Ҡырағай булған өсөнмө,
Асҡан тәбиғәт телен?!
Йәнһеҙ ҡурайға йән өрөп,
Уйнаған йөрәк көйөн?!
Ҡырағай булған өсөнмө,
Үҙ ерем ташламаған,
Сит ҡәлғәне баҫымсаҡҡа
Бер аҙым атламаған?!
Тынғыһыҙ күршеләр әгәр
Тирмәгә ут һалһалар,
Нәфрәте күскән ҡылысҡа —
Башҡорт өнһөҙ ҡалмаған!

Көслө ҡулдар ҡайырғанда
Ғорур бөркөт ҡанатын,
Ҡауырһындар тарих яҙған
Йөрәктәрҙе ҡанатып...
Буранбайҙар юғалмаған,
Бығауҙар ыуалмаған,
Һағыштарҙы,
Ҡарғыштарҙы
Һырдаръя йыуалмаған.
Себерҙә ҡылыс, һөңгө юҡ;
Сит ерҙә ҡурай үҫмәй —
Һөргөндәге күңелдәрҙең
Нәфрәте моңға күскән...

3

*Ниңә шулай һағыш тулы,*
*Наҙлы, тиһең, башҡорт йыры?*

Тарихтың сал саҡрымдарын
Яҡтырталыр хәтер нуры...
Бөркөтһөҙ ҡалған ҡаяға
Ҡоҙғондар эйәләшкән.
Һандуғастар йырлар булған
Таштуғай, Төйәләҫтә.
Төнөн яңғыҙ Айға бағып,
Зөлхизәләр илаған.
Һүҙгә һаран башҡорт моңон
Тыңлаған ел-уҙаман.
Ә ҡоҙғондар,
Көнләшеүҙән
Һандуғас тауышына,
Көлөргә уйлап халҡымдың
Бәхетһеҙ яҙмышынан —
Телен ҡырҡҡан,
Моңдан ҡурҡҡан,
Ғорурлығынан ҡурҡҡан,
Тик халҡымдың күңеленән
Йөрәк ярып моң ағылған
Ҡан ғына тулы урттан...
Тыңла әле халыҡ йырын,
Һүҙҙәрем — күҙҙәремдә.
Тарих шишмәһе урғыла
Йөрәгем үҙәненән...

Халыҡ йыры — тарих теле.
Быуаттар хазинаһы.
Бары тыуған ерҙән генә
Улар бит табылаһы.

Йырҙарым оҙон.
Сабыр бул!
Өҙә күрмә сылбырҙы!
Аҡылһыҙ һүндерә күрмә
Күгемдәге йондоҙҙо.

Йырҙар йәшәткән халҡымды
Тере шишмәләр булып,
Ғорурлығымды уймағыҙ,
Йөрәгем моңға тулы!

## ҠЫРҠ ДҮРТ ЙОНДОҘ
## ҺӘМ ЕГЕРМЕ ЕТЕ ДИҢГЕҘ

Йондоҙ кеүек балҡып һүнгән
шағирә Зарема Әхмәтйәноваға.
Миңә 27, һиңә 44 йәш саҡта.
*«24 йондоҙ һәм 17 диңгеҙ» (Мөхәббәтнамә).*
*Рәдиф Ғаташ*

### Һин

Баш осонда ҡырҡ дүрт йондоҙ
Балҡыған сағың ине,
Бөрөләнеп ҡаршы алды
Һағынған яҙың һине.
Ҡояш алтын туҫтағынан
Эсерҙе ҡайнар тынын,
Һайрар ҡоштар сиртеп үтте
Йөрәктә һөйөү ҡылын.
Йырлағайның,
 тауышыңдан
Йырғанаҡтар моң алды,
Минең йырға йондоҙҙарың
Сәпәкәйләп ҡыуанды...
Шиғырыма һағыш тулды,
Бер баҡҡайным күҙеңә.

Йыһандай киң күңеленңдән
Ергә йондоҙ түгелә!
Был бит һөйөү үҙе лә!
Эй, тәбиғәт, сабырлыҡ бир
Һағыш-моңға түҙергә.

## Мин

Егерме ете диңгеҙҙе,
Һыуын тубыктан күреп,
Атлап ҡына түгел, аша
Сыҡҡан инем йүгереп,
Эскән инем, шәрбәт күреп,
Тоҙло һыуҙарын уның...
Йәшәнем яңғыҙ утрауҙа
Зарлы Робинзон булып,
Айҙар, йылдар иҫәпләнем,
Ағасҡа билдә киртеп...
Бер көн ҡоштар уяттылар
Мине, тәҙрәмә сиртеп:
Хыял карабында йөҙөп,
Һөйөүем килгән, тиһәм,
Ул — күңелем хазинаһын
Талаусы булған икән.
Ултырам яңғыҙ утрауҙа,
Аласығым емерек,
Ҡырҡ дүрт йондоҙ күҙҙәремә
Ҡарай күктән тилмереп...
Эйе, беләм, һиҙә күңел —
Йөрәгем хазинаһы,
Инде ерҙән түгел, бары
Тик күктән табылаһы.
Урланған гәүһәр таштарым
Йондоҙ булып яналыр,
Бәхет төҫө, юҡ, аҡ түгел,
Төн төҫөндә, ҡаралыр.
Ай тотҡалы йондоҙло күк —
Хыялға ишек кеүек!
Яҙ елдәре күңелемде
Тирбәлтә бишек кеүек...

## Шиғриәт

Түңәрәк Ай күкте байҡай,
Һанай йондоҙ-шәмдәрен.
Урмандар ослап ҡуйғандар
Ҡарағай-ҡәләмдәрен.
Йондоҙло күк — ҡағыҙ бите,
Төн-шағир шиғыр яҙа,
Йылғалар, күктән көнләшеп,
Тын ғына шыбырлаша...
Егерме ете диңгеҙ ҙә,
Йүгәнләп тулҡындарын,
Тыңлай ине, әрнеп, әрнеп,
Йондоҙҙар һулҡылдауын...

Түңәрәк Ай ерҙе байҡай,
Һиҙә һағыш артҡанын,
Иркә нур-ҡулдары менән
Һыйпай диңгеҙ арҡаһын.
Йәштәрең әсе, илама,
Тым, ти ҙә ул диңгеҙгә,
Һыу өҫтөнә эй тотона
Йондоҙҙарын һибергә!

* * *

Ай, йондоҙҙар, ҡарағайҙар,
Егерме ете диңгеҙ
Йөрәктәргә мәңгелеккә
Яҙ һәм наҙ булып инһен!
Был хисте һыйҙырам, тимә,
Мөхәббәт ҡалыбына,
Ышанайыҡ
Төн-шағирҙың
Шиғырҙар яҙыуына,
Кешеләргә ғашиҡ йәндәр
Йыр булып ҡалырына...
Нур булып янырына...

## ҠАРА ҺӘМ АҠ АРАҺЫНДА

### Ҡара

Ҡара һәм Аҡ — бар тәбиғәт
Һыйған ошо арауыҡҡа,
Бар төҫтәр ҙә төҫөн юя
Ҡара төндәй ҡаралыҡта.
Бар төҫтәр ҙә йотолғандар
Ҡара ергә, ҡара ергә!
Йәйғор кеүек балҡып янған,
Күҙҙәребеҙ яуын алған
Мең балкышлы был тәбиғәт
Йәшәү һутын ала бирә
Ҡара ерҙән, ҡара ерҙән…
Ҡара төндөң ҡаралығы —
Серле хистәр яралғыһы.
Мөхәббәт тә,
Енәйәт тә
Наҙ һәм нәфрәт аралығы…
Барыһы ла,
Барыһы ла
Тынмаҫ көрәш ялан-ҡыры —
Ҡара һәм Аҡ арауығы…

### Ҡыҙыл

Зәңгәр генә мөхәббәтем
Яраланды.
Йөрәгенән һарҡып-һарҡа
Ҡыҙыл ҡаны.

Ҡара ғәйбәт, ҡара һүҙҙәр
Ябырылды…
Шиңде һөйөү, шиңде аҡҡош
Ҡау(ы)рыйы.

Ҡыҙыл күлдә, ҡыҙыл һыуҙа
Ҡыҙыл әрнеү.
Ҡыҙыл телле язаларҙан
Ҡыҙыл һөйөү яралары
Һыҙып әрней.

Ҡыҙыл офоҡ, ҡыҙыу ҡояш —
Күңел кибә...
Сарсаған был күңелдәргә
Кем наҙ һибә?!

## Һары

Һары наҙҙар һибеп, Ҡояш ҡалҡа,
Һары тамсы тама ағастан,
Һары елдәр, гүйә, бар донъяны
Һары һағыш менән ялатҡан...

Зәңгәр һөйөүемдең һары көҙө
Һары япраҡ булып түшәлә,
Һалҡын ҡырау япҡан аҡ күңелем
Һары ялҡындарҙа үртәлә.

Һағыш төҫө — көҙгө һары балҡыш —
Ҡыштыр-ҡыштыр япраҡ ҡойола,
Мөхәббәттең һары утрауында
Кипкән үҙән, ярҙар уйыла...

Һары сәскә ҡосҡан өмөттәрем
Килгән һары һағыш туйына.
Өмөттәрем — һары бөртөктәрем
Ҡара ерҙә аҡ ҡыш буйына...

## Йәшел

Йәшәрә, йәшәрә, йәшәрә,
Ҡара ер ҡуйыны йәшәрә,
Өмөткә тулышҡан орлоҡтар
Шыталар дымлы ер-әсәнән...

Йәшәрә күңелдәр, йәшәрә
Шифалы күҙ йәше утынан,
Йәм-йәшел донъяла
Күңелдәр дәрт ала
Йәм-йәшел киләсәк утынан.

Мөхәббәт — мәңгелек серле хис,
Һалҡындар ҡурҡытмай уны һис,
Йәшел ер йәшәрһен,
Һөйөүҙән сәсәһен,
Йәм-йәшел өмөттәр йәшәһен!
Йәшәһен!

## Зәңгәр

Зәңгәр офоҡ ҡара төндә
Мөхәббәттән осҡонлана,
«Һөйәм!» һүҙен әйткән һайын,
Зәңгәр офоҡ балҡып ҡала,
Күктә яҡты йондоҙ яна...

Зәңгәр донъя, зәңгәр йылға,
Зәңгәр диңгеҙ — хыял иле.
Һауаларҙың зәңгәрлеге
Аҡылымды юя инде...

Бар донъяны һөйөү хисе
Зәңгәрлеккә буяған ул.
Хыялымда төҫөң юйма,
Мөхәббәтем, зәңгәр бул!

## Аҡ

Аҡ яланда үҫкән аҡ сәскәнең
Хуш еҫенән ерем илерә,
Ап-аҡ елдәр ап-аҡ болоттарҙа
Аҡ сәләмдәр генә килтерә...

Аҡ мөхәббәт кенә сәскә атһын,
Аҡ донъяны күмһен аҡ нурға!
Ҡара ерҙән хасил булһа ла бит,
Гел ынтыла кеше яҡтыға!

Ҡара һәм Аҡ — ошо арауыҡҡа
Һыя алған йәйғор төҫтәре,
Кеше күңеленең йәйғорона
Сағыуыраҡ төҫтәр өҫтәлһен!

# ХИКӘЙӘЛӘР

## ХӨКҮМӘТ АҒАЙ

Әсәйем магазинға тип сығып китһә, ҡустым менән икәүләшеп тәҙрә төбөнә ултырып алабыҙ ҙа урам ҡапҡаһы ҡасан асылыр икән, тип көтә башлайбыҙ. «Магазин» тигәндәрен йәй көнө күршеләге Сәлимә әхирәтем күрһәткәйне. Сәлимәне әсәһе гел үҙе менән бергә алып йөрөй, шуға белә. Беҙҙең өйҙән саҡ ҡына ҙурыраҡ өй инде шунда. Эсендә кешеләре генә күп. Берәһе инә, берәһе сыға. Сыҡҡандарының бүлтәйгән сумкаларынан йә перәник, йә печенье, кәнфит күренеп ҡала. Оҙон өҫтәл артында торған аҡ халатлы апайҙы ла күргәйнем. Моғайын, шул апайҙың исеме Магазин булғандыр...

...Ниһайәт, ҡапҡа асылды ла әсәй күренде. Беҙ тәҙрә төбөнән һикереп төштөк тә, кемуҙарҙан ишеккә йүгерҙек. Һалҡын аҡ боҫ эйәртеп килеп ингән әсәйҙең пальто сискәнен, дебет шәлен һалғанын сабырһыҙланып көтәбеҙ. Ә иҙәндәге сумканан күҙҙе алып булмай. Рөхсәтһеҙ тейергә ярамай шул. Әсәй сумканы төпкө бүлмәгә индереп ултыртты ла аҡ яулыҡҡа төрөлгән нәмәне өҫтәл уртаһына һалды.

— Икмәк килтерегеҙ!

Беҙ йүгерешеп кире килеүгә яулыҡ асылғайны. Өҫтәлдә бер өйөм шәкәр ҡомо! Шәкәрҙе күргән бар ҙа ул, тик ошолай ашауы күңеллерәк. Икмәкте бәләкәй генә итеп бүлеп алаһың да, бер аҙ төкөрөкләп, шәкәргә манып ашайһың. Ас та түгелбеҙ инде. Былай ҡыҙыҡ бит. Әсәй беҙгә йылмайып ҡарап торҙо ла: «Ашағыҙ, ашағыҙ!» — тип арҡабыҙҙан һөйөп аш бүлмәһенә сығып китте. Сумканың төбөндә тағы нимә булғандыр, күрһәтмәне. Тимәк, беҙгә түгел.

Ана, атайым да эштән ҡайтты. Ул сисенеп, мин ҡайттым, тигәндәй, аш бүлмәһенең ишегенән башын тығып ҡараны ла төпкө бүлмәгә үтте. Ул да булмай, әсәй өҫтәлгә

сынаяҡтар теҙә башланы. Беҙҙең икмәккә шәкәр манып ашап күңелебеҙ булғайны инде. Рәхмәт әйттек тә ҡул йыуырға киттек.

— Магазинға барғайным, автолавка килгән, — тине әсәйем, сәй яһай башлағас.

— Нимәләре бар? — Атай иҫе китмәй генә һорап ҡуйҙы.

Беҙ, серле һүҙ көткәндәй, әсәйҙең ауыҙына текләнек.

— Зиләгә күлдәк, Дамирға бер свитер алдым әле.

Зиләһе — мин, Дамиры ҡустым була. Бына бит нимә булған сумканың төбөндә! Их, тиҙерәк ҡарарға ине лә, сәй эсеп бөтмәйенсә ярамай. Атай, сынаяғын түңкәреп, ике ҡулы менән битен һыпырып ҡуйҙы. Әсәйем теге сумканы алып сыҡты.

— Бына, — тине ул, ҡыҙыл сәскәләр төшкән әберкәле йәйге күлдәкте йәйеп. Атайым күлдәкте ҡапшап ҡараны ла:

— Нисә тәңкә? — тине.

— Тауары ябай булһа ла, ҡиммәт тора үҙе, — әсәй, күпмелер аҡса түләүен әйтеп, тағы сумкаға эйелде. — Быныһы ярым синтетика, хаҡына ҡарап торманым, алдым инде.

Зәңгәр төҫтәге оҙон еңле свитерҙы әсәйем Дамирҙың күкрәгенә ҡуйып самаланы.

— Саҡ ҡына ҙурыраҡ икән.

— Юҡ, әсәй, тап-таман, — тине Дамир түҙемһеҙләнеп. Әсәйҙең был йылыҡай матур свитерҙы кире илтеп биреүенән ҡурҡа ине шикелле.

Атайым әле күлдәктең, әле свитерҙың ең остарына баулап тағылған шаҡмаҡ ҡатырғаларҙы әйләндергеләп ҡараны ла:

— Хөкүмәт әйбере шулай була инде ул. Уны алдап булмай. Хәләл көсөң менән эшләп тапҡан аҡсаңды нисек ҡайырырға белә, — тип уфтанып ҡуйҙы.

Әһә, әсәйем быларҙы Магазин апайҙан түгел, ә Хөкүмәт ағайҙан алған. Аҡсаны ҡайырып алырлыҡ булғас, бик көслө кешелер инде ул. Магазин эргәһенә «афталака» килде тигәйне бит. Хөкүмәт ағай шуның эсендә булған микән? Хәйер, кемдән генә алһалар ҙа яңы күлдәк шатлығы эсемә һыймай. Әсәйемдең: «Кейеп ҡара әле, ҡыҙым!» — тигәнен саҡ-саҡ көтөп алдым. Көҙгө эргәһендә әйләнгеләп ҡараным. Бик тә килешә икән дә, тик оҙонораҡ. Ярай, әле ҡыш үтмәгән, яҙ бар, йәйгә тиклем әҙерәк үҫермен. Әсәйем күлдәкте таҫлап һандыҡҡа һалып ҡуйҙы.

Бына көткән йәй ҙә етте. Яңы күлдәгемде кейеп алдым да Сәлимәләргә йүгерҙем. Күҙен ҡыҙҙырайым әле. Мин

килеп еткәндә, Сәлимә селек һепертке менән аласыҡ иҙәнен һеперепйөрөй ине. Күлдәгемде күргәс, бер аҙ һоҡланып та, көнләшеп тә ҡарап торҙо ла:

— Белгең килһә, минең дә яңы күлдәгем бар, — тип өйҙәренә йүгерҙе. Сәлимәнең күлдәге лә матур ине. Алдында ике ҙур кеҫәһе бар хатта.

— Матурмы?

— Матур, ә минеке? — тинем мин.

— Һинеке лә матур, әйҙә, киттек уйнарға.

Сәлимә мине кәртә менән мунса араһындағы таҡталар өйөмө яғына әйҙәне. Бер мөйөштә ул үҙенә «өй» төҙөгән ине. Ватылған сынаяҡ, көршәк ярсыҡтарын, төрлө төҫтәге таштарҙы таҡтаға ҡуйған, урталағы ҙур түмәр «өҫтәл»гә әйләнгән. Сәлимә, сәйнүктән сынаяҡ ярсығына һыу ҡойған һымаҡ итте лә, уны минең тапҡырға ҡуйҙы. Үҙенә лә шулай «сәй яһап» алғас, уртаға бер ус һары шаҡмаҡ таптарҙы һалды. Шунан:

— Әйҙә, сәй эсеп, ашап ултыр, — тип мине ҡыҫтай башланы.

— Һиңә күлдәкте ҡайҙан алдылар? — тинем мин, бер «печенье»ны тешләгән кеше булып, сынаяҡ ярсығына иренемде тейҙереп.

— Магазиндан, — тине Сәлимә «сәйен эсә-эсә».

— Ә минекен әсәйем ҡышҡыһын уҡ Хөкүмәт ағайҙан алып ҡайтты, — тинем эре генә. Ниңә, магазиндан уны кем дә ала инде, ә Хөкүмәт ағай ауылға гел килмәй бит. Сәлимә лә белһен күлдәгемдең ябай түгел икәнен.

— Ҡайҙан килгән ул? — тип ҡыҙыҡһынды Сәлимә.

— Белмәйем шул. Бик алыҫтандыр, моғайын. Машинаһы ла бар икән.

Сәлимә күңелһеҙләнеп ҡуйҙы:

— Их, белгән булһам, икәүләшеп барып миңә лә һинеке кеүек күлдәк һорар инек.

— Юҡ, ул бик көслө ағай булырға тейеш. Әсәйемдең дә аҡсаһын ҡайырып алған әле. Беҙгә, моғайын, бер нәмә лә бирмәҫ ине.

— Сәлимәү-ү-ү...

Өй яғынан әсәһенең тауышын ишетеүгә: «Әү, мин хәҙер!» — тип Сәлимә һикереп торҙо. Шулай тыңлаусан ҡыҙ ул.

— Балам, бар әле, йүгереп кенә ҡарап кил. Зәйтүнә апайың күренмәйме икән?

Сәлимәнең әсәһе бер биҙрә һөттөң өҫтөнә ап-аҡ сепрәкте уратып бәйләне лә тупһаға күтәреп ултыртты.

— Әсәй, урамдың теге осонан был яҡҡа килә, — тип Сәлимә ҡапҡанан былай йүгерҙе. Әсәһе биҙрәне күтәреп урамға ыңғайланы. Беҙ «һыҙыҡ» уйнарға тип сөй менән ергә шаҡмаҡтар һыҙып бөтөүгә, ул, буш биҙрәһен тотоп, аҡ сепрәкте беләгенә элеп, кире килеп тә инде. Һөтөн ҡайҙа ҡуйҙы икән? Беҙҙең тапҡырға яҡынлашҡас, түҙмәнем:

— Апай, һөттө ҡайҙа илттегеҙ? — тип һорай һалдым.

— Хөкүмәткә тапшырҙым.

Мин Сәлимәгә:

— Килгән бит, әйҙә, — тинем дә урам ҡапҡаһы яғына йүгерҙем. Урамда бер нисә ялтыр бидон тейәлгән арба эргәһенән, атын яй ғына атлатып, Зәйтүнә апай китеп бара ине. Сәлимә минең күҙҙәргә текләне.

— Хөкүмәт ағай үҙе килмәгән икән, урынына Зәйтүнә апайҙы ғына ебәргән, — тинем аптырағас. Ул Хөкүмәт ағайҙы үҙемдең дә бик күргем килә ине. Булманы.

Һуңғараҡ «Хөкүмәт» тигәндәренең һөт кенә түгел, ит, май, йомортҡа, һарыҡ йөнө, картуф та алғандарын белдем. Бер үҙенә шул тиклем байлыҡ йыйғас, ялсылары ла, һаҡсылары ла бик күптер инде уның. Ә ул, бәлки, һәр ауылда йәшәй торғандыр?

Беҙҙең өйҙән ике-өс өй аша ғына торған бер ғаиләлә балаларҙың күмәк булыуын беләм. Әсәйем дә гел уларҙы иҫләгәндә: «Уларға хөкүмәт ярҙам итә», — ти торғайны. Шулай бер көндө аҙбар башындағы һаламлыҡҡа менеп киттем. Йәнәһе лә, шунда уйнайым. Уйнау ҡайғыһымы ни, бейек урынға ултырып алдым да баяғыларҙың ус төбөндәгеләй күренгән ихатаһын күҙәтә башланым. Бәлки, Хөкүмәт ағай ҙа килеп сығыр.

Уларҙың ҡапҡаһы тапҡырына егеүле ат килеп туҡтаны. Арбанан бер ир кеше еңел генә һикереп төштө лә ҙур тоҡто яурынына һалып ишек алдына инде. Ҡатын кеше йүгереп сыҡты. Улар шулай бер нисә тоҡто келәткә керетеп ҡуйҙылар. Мин шунда уҡ таныным ул ағайҙы. Урамда ла күргәнем бар ине. Тимәк, бик күрергә теләгән Хөкүмәт ағай ҙа шул булырға тейеш. Тик беҙгә генә бер нәмә лә килтермәй, гел үҙенә бирәбеҙ. Миңә ҡыйын булып китте Хөкүмәт ағайҙың шулай кеше айырғанына. Исем өсөн генә булһа ла беҙгә бер ярҙам итһен ине ул.

Ана, теге урамдағы ҡыҙыл кирбестән һалынған, бейек тимер ҡапҡалы, өй эсендәге крандан һыу ағып торған йортта колхоз башлығы йәшәй. Теге юлы уларҙың минең кеүек ҡыҙҙары маҡтанып тора ине. Асыуың килһә лә килер шул, ауыҙын тултырып: «Был йортто беҙгә хөкүмәт төҙөп бирҙе», — тине. Хөкүмәттең шундай көсө булғас, ниңә бөтә ауылға матур йорттар һалдырмай икән?

* * *

Көҙ етте. Мин быйыл уҡырға төшәм.

— Әсәй, — тинем мин, иртә менән өр-яңы формамды, аҡ ҡына алъяпҡысымды кейеп, сәсемә матур бантик тағып мәктәпкә китеп барғанда. — Ә мәктәпте кем төҙөгән?

— Хөкүмәт, ҡыҙым, хөкүмәт, — тине ул. — Балалар баҡсаһын, магазин, клуб, идара йортон да, бөтәһен дә хөкүмәт төҙөгән. Ул һеҙ белемле булһын өсөн бушлай уҡыта. Шуға ҡәҙерен белеп, тырышып уҡырға кәрәк.

Хөкүмәт ағайҙарҙың өйө тапҡырынан ҡапҡаларына ҡарай-ҡарай атлайым. Күренә ҡалһа уға: «Мин дә быйыл һинең мәктәбеңдә уҡыясаҡмын», — тип әйтер инем. Хөкүмәт ағай гел дә мәктәп кеүек ҙур нәмәләр генә төҙөп йөрөй икән. Хәҙер кешеләргә өй һалмауын да ғәфү иттем. Бер үҙе ҡайҙан өлгөрһөн инде.

Хөкүмәт ағайҙы йәнә яҡындан күреү теләге көндән-көн көсәйә барҙы. Бер көндө, сәй эсеп ултырғанда, әсәйем менән атайымдың һөйләшкәндәрен тыңлағас, шөрләп ҡуйҙым. Әсәй, борсоулы тауыш менән:

— Теге былтыр ҡатыны үлгән баш бухгалтерға суд булған, ти. Биш йылға төрмәгә ебәрәләр икән. Йә, бәләкәй генә ике балаһы бар, нимә етмәй инде уға. Эшендә хөкүмәт аҡсаһын ашаған, тиҙәр. Шуға ебәрәләр, — тине.

Аҡсаны беләм мин. Төрлө һүрәт төшөрөлгән дүрткел ҡағыҙ була ул. Тәңкә кеүек тимер түңәрәктәре лә була. Ябай ғына ҡағыҙ ҙа түгел шул үҙе. Әсәйгә эйәреп магазинға барғанда күрҙем. Магазин апай уларҙы алды ла беҙгә кәнфит бирҙе. Ә бухгалтер ағай эшендә нисек ашаған икән уларҙы? Бына быныһы башҡа һыймай.

— Балаларын интернатҡа тапшыралар, ти. Рәхмәт инде был хөкүмәткә, балаларҙы етем итмәй.

Һуңғараҡ «төрмә», «интернат» тигәндәрен дә белдем. Икеһе лә бик алыҫта, ҡалала, тиҙәр. Төрмәгә хөкүмәткә

ҡаршы булған өлкән кешеләрҙе бикләйҙәр ҙә оҙаҡ сығармайҙар икән. Ә интернат — балалар өсөн. Хөкүмәт кейендерә, ашата, уҡыта. Был яңылыҡты белгәс, Хөкүмәт ағайҙан шөрләй башланым. Мине күреп ҡалмаһын, тип, улар тапҡырынан үткәндә йүгереп китәм. Бәләкәй кәүҙәле теремек ағай ҡарап тороуға ҡурҡыныс та түгел былай.

Шулай ҙа Хөкүмәт ағайҙың беҙҙең ауылда булыуы, етмәһә, өйөбөҙгә яҡын ғына йәшәүенән ғорурлана инем. Һәр кемгә тәтемәй бит бындай бәхет! Тик бәхетем оҙаҡҡа барманы. Яҙға табан, төшкә ҡарай мәктәптән ҡайтып барғанда әлеге йорт эргәһендә күп кенә халыҡ йыйылғанын күрҙем. Моғайын, бер нәмә һорарға, йә тапшырырға килгәндәрҙер. Ниңәлер, береһе лә һөйләшмәй, башын аҫҡа эйгән, бойоҡтар. Әллә Хөкүмәт ағай уларҙы әрләне микән?

Өйҙә әсәйем дә танауын мыш-мыш тарта. Әллә илаған инде? Атайым сәй эсергә лә ҡайтманы.

— Әсәй, ә атай?.. — тип һүҙ башлағайным:

— Сеү, балам, ҡайғы килде бит. Атайың Мөхәммәт ағайыңды ерләшергә китте, — тине әсәй, яулыҡ осо менән йәштәрен һөртә-һөртә. — Ғүмере рәхәт күрмәне, бахырың, эшләне лә эшләне. Эшендә тракторы аҫтында ҡалып үлеп тә ҡуйҙы. Хөкүмәт эше тип үҙен йәлләмәне инде...

Урамдағы кешеләр шуға йыйылған икән. Башыма таяҡ менән һуҡҡандай булды. Мөхәммәт — Хөкүмәт. Мин бит ошо көнгәсә Мөхәммәт ағайҙы Хөкүмәт ағай тип... Хәҙер нисек була инде? Кем беҙгә матур күлдәктәр бирә, яңы өйҙәр һаласаҡ? Күҙҙәремә йәш төйөлдө.

Шул көндән алып мин инде Хөкүмәт ағайҙы эҙләмәнем. Минең өсөн ул үлгәйне. «Ағайы» үлһә лә, хөкүмәте ҡалды. Тимәк, ул бер генә ағай булмаған. Йылдар үтте, ә хөкүмәтте кемдер маҡтау, кемдер хурлау һүҙҙәренә ҡушып телгә алғанын йыш ишетә йөрөнөм. Хөкүмәт тигәндәре беҙҙән бик алыҫта йәшәгәнен дә аңланым, тик уның кем икәнен барыбер белә алманым...

* * *

...Һалҡынса таң еле тамам йоҡомдо ҡасырҙы. Бөгөн — һайлауҙар көнө. Ғәҙәттәгесә иртә уянған ярым ҡараңғы ауыл урамынан киләм. Башта уйҙар сыуала. Хөкүмәт... Депутаттар... Тимәк, мин әле хөкүмәт кешеһен һайларға китеп барам. Тимәк, хөкүмәт тә беҙҙең кеүек кешеләрҙән

тора. Хөкүмәткә ул кешеләрҙе беҙ һайлайбыҙ. Мин нисек теләйем — хөкүмәт шулай буласаҡ. Былай булғас, хөкүмәттең ниндәй булыуы беҙҙең үҙебеҙҙән тора ла баһа...

Тау артынан ҡыҙарып ҡояш күренде. Хөкүмәттең киләсәктәге эшендә минең дә өлөшөм барлығын тойоуҙанмы, әллә башҡа сәбәптәнме, тау башында ағарып күренгән, былтыр ғына төҙөлгән яңы мәктәп тә, республика байраҡтары елберләгән идара йорто ла, ауыл клубы ла, магазиндар, балалар баҡсаһы ла үҙ ҡулдарым менән төҙөгәндәй яҡын тойолдо миңә.

## ЙЫҺАНДЫҢ БУМЕРАНГ ҠАНУНЫ

*Хикәйә*

Танышымдың Өфөгә тәүгә килеүе. Бөгөн ҡайтырға уйлаған. Сумаҙаны ауыр күренә. Беҙҙең йорттан трамвай туҡталышына ҡәҙәр хәтһеҙ атларға. Етмәһә, гел тауға үрләргә. Күп уйлап тормай, көҙгө кистең ҡапыл һалҡынайып китеүен хәтерләп, яурыныма плащ ябындым да, танышымды туҡталышҡа ғына булһа ла оҙатырға сыҡтым. Поезд төнгө ун берҙә. Билет алынмаған. Ашығырға кәрәк.

Трамвай туҡталышында кеше һирәк. Беҙ теләгән ергә бармай торған ике трамвайҙы оҙатып ҡалдыҡ. Шулай һөйләшә-көлөшә торабыҙ. Көнө буйы эштә булдым. Танышым менән йүнләп һөйләшергә өлгөрмәгәйнем. Хәбәргә әүрәп, ярты сәғәттәй торғанбыҙ. Ә кәрәкле трамвай юҡ та юҡ. Бер аҙ борсола башланым. Танышыма иртәгә эшкә. Мотлаҡ ҡайтып етергә тейеш. Шулай тағы ла ун биш минуттай көткәндән һуң, түҙмәнем: «Әллә пересадкалар менән китәһеңме? Һуңлап бараһың бит!» Танышым да сәғәтенә ҡарап алды. Ниндәйенә ултырып, ниндәйенә күсергә кәрәген һораштыра башланы. Шул саҡ унын күҙҙәрендәге албырғауҙы шәйләп, баҙап ҡалдым — былай бер үҙен генә ебәргәндә аҙашып, ҡаңғырып бөтәсәк. Күп уйларға ваҡыт юҡ.

— Әйҙә! — тип ҙур сумкаһын күтәрҙем дә, килеп туҡтаған беренсе трамвайға әйҙәнем. Ярай фатир ишеген бикләгәнмен. Кейемем дә ярарлыҡ кеүек. Плащым өйҙә кейгән күлдәгемде ҡаплап тора. Шулай ике тапҡыр трамвай алыштырып көс-хәлгә барып еттек вокзалға.

Поезд китеүгә ярты сәғәт кенә ваҡыт ҡалған?! Ярай, билет алһын да, шунан ҡайтырға сығырмын, тием. Сират баҫҡанда уның был сумкаларын кем ҡарап торор? Билет булды. Әммә ауыр сумкаларҙы күтәреп, ул нисек вагонына барып етһен? Поезд ҡуҙғалыуға ун минут ҡына ҡалған. Шулай итеп, мин уны вагонына тиклем оҙатып ҡуйҙым. Сәғәткә күҙ һалам. Ун бер тулды. Ҡәһәрең. Хәҙер трамвайҙар йөрөүҙән туҡтай. Йәһәтерәк булырға кәрәк. Шыбыр тиргә батып туҡталышҡа йүгереп килеп етеүгә, һуңғы трамвайҙың артҡы тәҙрәләре генә күренеп ҡалды. Туҡталышта бер кем дә юҡ. Тимәк, бөттө, башҡа трамвай булмаясаҡ. Ниндәйҙер өмөт менән йәһәт кенә ҡулымды кеҫәгә тыҡтым. Унда трамвайға етерлек кенә тинлектәр. Көшөлөктө лә, бәләкәй ҡул сумкаһын да алып тормағайным. Туҡталышҡа тиклем генә барырға булғас, аҡса нимәгә, тигәйнем.

Ҡурҡыныс уйҙарҙан күҙ алдарым ҡараңғыланып китте. Шулай берәй танышым килеп сыҡҡанса ошо вокзалда ултырырмын микән? Көндөҙ булһа, йәйәү ҙә ынтылыр инем. Биш-алты саҡрымдан ашыу түгел дә. Бер-ике сәғәттән ҡайтып етер инем. Вокзалда бер үҙеңә төн уҙғарыу ҡурҡыныс һымаҡ. Шулай ҙа, шайтан ғына өмөтһөҙ тип, автобустар туҡталышына килдем. Кем белә, бәлки, берәй таныш осрар. Йәки матур күңелле берәй водитель ярты хаҡҡа ла ултыртып алып ҡайтыр. Ярты юлға тиклем алып барһа ла ризамын.

Оҙаҡ ҡына көткәндән һуң, беҙгә бараһы микроавтобус килеп туҡтаны. Пассажирҙар күп түгел. Урын бар. Бөтә ҡыйыулығымды йыйып водителгә, мөмкин тиклем яғымлыраҡ булырға тырышып:

— Ғәфү итегеҙ, мин аҡсамды өйҙә онотоп ҡалдырғанмын. Ярты хаҡҡа алып бармаҫһығыҙмы? — тинем.

Күрмәлеккә һөйкөмлә генә күренгән урта йәштәрҙәге ирҙең күҙҙәренән асыулы осҡондар сәсрәне. Теш араһынан ғына:

— Юҡ! Аҡсаң булмағас, ниңә юлға сыҡтың? Йөрөйҙәр шунда... — тип ыҫылданы ла, көсләшеп инһә, сығара алмам тигәндәй, йәһәт кенә ишеген шап ябып, ҡуҙғала башланы.

— Ярар улайһа, — тиеп ситкә китеүҙән башҡа сара ҡалманы. Артынса тағы ла бер «Газель» туҡтаны. Бынылына бер генә кеше инеп ҡунаҡланы. Ҡара мыйыҡлы егет, «ултыр» тигәндәй, оҙаҡ ҡына миңә ҡарап торҙо ла газға баҫты. Теге водителдең тупаҫлығынан иҫәңгерәп, бынылына өндәшергә ҡыймай албырғап ҡалдым. Янымa хөләмә кейенгән, ауыҙынан һаҫыҡ еҫ борҡоған бер ир йораты килеп баҫты. Асарбаҡҡа оҡшаған. Миңә ҡырын күҙ менән

ҡарай-ҡарай иплэп кенэ янымараҡ шыла бара. Ә мин уның һайын ситкэрэк тайпылам. Йэ Хоҙай, тағы ниҙэр генэ күрэһелэрем бар икэн? Хэҙер был туҡталышта бер кем дэ ҡалмаясаҡ. Көндөҙ тулып йөрөгэн милиционерҙар ҙа эллэ ҡайҙа китеп бөткэндэр. Вокзалдың йоҡлап, йэ тыныста ултырып сығыр бүлмэһенэ инеү өсөн дэ аҡса кэрэк бит.

Шундай күңелһеҙ уйҙар оялай башлағанда яныма тағы ла бер автобус килеп туҡтаны. Инде һэр береһенэн һорарға ҡарар иткэйнем. Ниңэ, көлһэ, көлһөндэр, эрлэһэ, эрлэһендэр, был уларҙың фекере. Өйҙэ ысынлап та аҡсам тороп ҡалғанын ҡайҙан белэ улар? Меҫкен, ярлы, ташландыҡ тип йэллэһэлэр ҙэ барыбер. Иң мөһиме, миңэ ҡайтып етергэ кэрэк. Кэрэк, кэрэк, кэрэк!

Ошо һүҙҙэрҙе күңелемдэн ҡабатлаған һайын, ҡыйыулығым арта. Сираттағы водителдэн автобус салонына инеп тороп һораным хатта. Кире яуапты ишеткэс, төшөргэ тура килде. Буш барғанса, ярты хаҡҡа булһа ла алһалар ни була инде? Әле генэ балҡый башлаған өмөтөм тишелгэн һауа шары кеүек шиңэ барҙы. Шул саҡ сираттағы «Газел»дең алғы ултырғысында ултырған ҡара бөҙрэ сэсле таныш булмаған урта йэштэге бер ханым:

— Нисэ һум етмэй? — тип һораны. Инде ҡулына килеп элэккэн, бер туҡтауһыҙ тыпырсынған ҡошсоҡто осороп ебэрмэҫкэ тырышҡан һунарсы кеүек, һаҡ ҡына:

— Дүрт, — тинем.

— Ултыр, мин түлэйем, — тине ул. Мин, нимэ булғанын эле төшөнөргэ лэ өлгөрмэй, ялп итеп инеп ултырҙым. Автобус ҡуҙғалып та китте. Туҡталыштағы теге асарбаҡ автобус яғына ҡулын һелтэне лэ, туҡталышта ҡалған бер ир янына атланы.

Башымда бер генэ уй: был изге күңелле ҡатынға ниндэйҙер яҡшылыҡ эшлэргэ ине. Тик нисек? Шулай ҙа, йэ аҙаҡ эйтергэ онотормон, тип:

— Рэхмэт! — тинем. — Танышымды оҙатырға сыҡҡайным, аҡсам өйҙэ тороп ҡалған. Һеҙ адресығыҙҙы эйтһэгеҙ, иртэгэ үк индереп бирермен.

Ҡатын өндэшмэне. Йылмайып ҡына ҡуйҙы ла:

— Ниндэй туҡталышта сығаһың? — тине. Туҡталышымды белгэс, мин иртэрэк сығам икэн, тип, сумкаһын асты. Аҡсаһын ҡайҙа ҡуйырға белмэгэн көйэҙ иркэ ханымға оҡшамаған ине ул. Ундайҙарҙан бер тин дэ һорап алып булмай. Моғайын, берэй ҡасан ул да шулай төндэ вокзалда яңғыҙы ҡалғандыр. Шуға ярҙам итергэ телэйҙер. Тыныс-

ланып, салон эсенә күҙ ташланым. Шул саҡта ғына «Төнгө ун берҙән һуң 15 һум» тигән яҙыуҙы шәйләп ҡалдым. Бәй, бәй, ун һум ғына аҡсам була бит. Ҡалған 5 һумды ҡайҙан табам?» Тағы ла теге ҡатынға ҡараным. Минең бит башҡа ҡотҡарыусым юҡ! Ә ҡатын инде сығырға әҙерләнеп бөткән.

— Апай, ғәфү итегеҙ инде, мотлаҡ ҡайтарам, автобусҡа ун түгел, ун биш һум түләргә кәрәк икән?

Инде мин ниндәй яуапҡа ла әҙер инем. Хатта водитель киләһе туҡталышта төшөргә ҡушһа ла. Ҡурҡыуым йөҙөмә сыҡҡан, ахырыһы. Ҡатын бер текләп ҡараны ла, нишләп алдан әйтмәнең, тигәндәй кире сумкаһына үрелде. Ҡағыҙ унлыҡ алып миңә һондо.

— Ҙур рәхмәт! Һеҙгә лә шулай ярҙам итеүселәр осраһын! — тинем һәм яуабымдан ҡәнәғәт ҡалып, ихлас йылмайып ҡуйҙым. Ысынлап та, ихлас теләнем мин уға. «Бер изгелеге ун булып үҙенә ҡайтһын! Башлаған эштәре гел уңып торһон! Үҙе лә, ата-әсәһе лә, балалары ла, яҡындары ла бер ҙә генә бәлә-ҡаза күрмәһен! Хоҙай үҙен сәләмәтлектән айырмаһын...» — тағы ла әллә күпме изге теләктәрҙе ҡабатланым эстән һөйкөмлө танышыма, бәләнән ҡотҡарыусым төшөп ҡалғас та. Ихлас күңелдән теләнем. Теләктең көсөн беләм мин, ҡысҡырып әйтмәһәң дә, барыбер уйтеләктәр йыһанға олғаша. Аҙаҡ тәғәйен кешегә барыбер барып етә. Быныһына иманым камил. Әсәйем дә гел шулай ти торғайны. Ҡатындың исеме лә, йөҙө лә иҫемдә ҡалманы, әммә изгелеген үлһәм дә онотасаҡ түгелмен. Тимәк, теләктәрем был ҡатынды ғүмере буйы бәлә-ҡазаларҙан һаҡлап, ҡурсалап йөрөйәсәк. Үҙе лә һиҙмәйенсә, был изге йән минең күңелемдә шишмә урғылтып китте. Изгелек шишмәһе! Һис кенә лә ҡороясаҡ түгел ул...

Бына бит инде ҡайтып та еттем. Ауылдан килгән танышым бер нәмә лә белмәй поезда бара торғандыр. Үҙем дә ғәйепле инде — ниңә көшөлөктө алып сыҡмаҫҡа? Шулай йоҡлап киттем. Таң атты. Кисәге ваҡиға миңә һаман тынғы бирмәне. Ни өсөн ул ҡатын миңә ярҙам итергә булған? Һуңғы осорҙа кешеләр бер-береһен күрмәй үҙ утрауына бикләнеп, баш баҫып донъя ҡыуғанда, нисек күтәрелеп ҡараны ул миңә. Ни өсөн?

Баштағы уйҙар ярыша-ярыша сәйер, эйе, эйе, беҙҙең заман өсөн сәйер күренештең сәбәбен эҙләй. Хатта ул ҡатынға теләгән теләктәремде үҙем дә ҡайҙалыр ишеткән һымаҡмын. Ҡайҙа, ҡасан, кемдән? Шул саҡ башыма ҡылт итеп кисә иртәнсәк эшкә барғанымда, әле был ваҡиғалар

булмаҫ элек булған кескәй генә бер осраҡлы хәл иҫкә төштө. Уны инде онотоп та бара инем.

...Һалҡынса таң еленә ҡойоноп етеҙ атлап эшкә ашығам. Тураraҡ тартайым, тип өйҙәр араһына индем. Урамдың теге башында бер ҡатын күренде. Нисектер, аҙымдары ҡыйыуһыҙ һымаҡ. Әле бер, әле икенсе яҡҡа ҡаранып ала. Сәстәре туҙған. Бик етеҙ атлағанға оҡшай. Ул да эшкә ашыға буғай. Араларыбыҙ яҡынайған һайын теге ҡатын минең яҡҡа ныҕыраҡ текләй. Әллә мине танырға маташа. Мин дә уға текләп ҡараным. Юҡ, танышым түгел. Һары сәсле, зәңгәр күҙле ҡыҫҡа итәк кейгән тулыраҡ кәүҙәле был урыҫ ханыма оҡшаған бер танышым да юҡ шул. Әһә, аңланым. Был ҡатын икенсе яҡтан килгән дә аҙашҡан. Минән юл һорарға итә, буғай. Аралар яҡынайғас мин дә, ул да аҙымдарҙы әкренәйттек.

— Ханым, ғәфү итегеҙ, һеҙгә өндәшергә мөмкинме? — тип башланы ул һүҙен яныма килеп туҡтағас. — Шулай килеп сыҡты, мин... миңә трамвайға ғына биш һум аҡса биреп тормаҫһығыҙмы икән? Аҡсаларым икенсе плащ кеҫәһендә тороп ҡалған. Эшемә барып етә алмайым.

Ыҫпай ғына кейенгән һөйкөмлө ханым бер ҙә алдап, баҙар, кибет мөйөштәрендә икмәккә тип бер яртыға тиндәр йыйған хәйерселәргә оҡшамаған. Миндәге тиндәр иҫәпле генә инде ул. Кисә генә ҡыҙыма дәреслектәр һатып алғайныҡ. Әле эштәге ашханаға инерлек тә ҡалмағас, үҙем менән банкаға аш бешереп һалып алғанмын. Ҡапыл үҙемде лә шул ҡатын урынында күрҙем. Тормошта ниндәй генә хәлдәр булмай. Алла һаҡлаһын. Ҡулдарым үҙенән-үҙе кеҫәмә тығылды.

— Әлбиттә, —тинем. Тинлектәремде һананым да әлеге ҡатынға һуҙҙым. — Алығыҙ! Бында хатта автобусҡа ла етә.

— Адресығыҙҙы...

— Юҡ-юҡ, кәрәкмәй. Мин ашығам. Хушығыҙ, — тип ары атланым. Артымдан ҡатындың: «Рәхмәт! Һинең юлыңда ла изге кешеләр осраһын!» — тигән теләктәре оҙатты...

Йыһандың ҡанундары күп. Беҙ белгәне лә, белмәгәне лә бихисап. Шуларҙың береһе — бумеранг ҡануны. Был юлы ошо изге ҡанундың бер тәүлек эсендә үтәлеүе, етмәһә, ике тапҡыр артып ҡайтыуы үҙемә үтә лә ғәжәп тойолдо. Хәйер, инде был мөғжизәнең дә серен астым буғай — иртәнсәк ҡылған изгелегемде хәтеремдән бөтөнләй тиерлек юйғанмын.

## МӘРӘКӘЛЕ ХИКӘЙӘЛӘР

### «ҺАЙ, ҮҘЕБЕҘҘЕКЕЛӘР!» ЙӘКИ ҺИМЕҘЛЕКТӘН ҠОТОЛОУ ЫСУЛЫ

*Сатирик монолог*

Сит илдәгеләр беҙҙең ил сәйәсәтен гел дә кәмһетеп һөйләйҙәр: йәнәһе лә, кибеттәрҙә икмәк, шәкәр һәм башҡа аҙыҡтүлеккә хаҡтарҙы күтәреп ебәрҙеләр, ә ябай эш кешеләренә эш хаҡын арттырмайҙар. Улар беҙҙәге алдан уйлап башҡарылған үтә лә прогрессив сәйәсәтте аңлап етмәйҙәр буғай. Американың Америкаһында һаман да яҡшы йәшәйбеҙ тип шапырына торғас, ана ниндәй хәлгә төштөләр — һимеҙҙәр күбәйеп киткән дә хәҙер уларҙы нисек ябыҡтырырға белмәй ыҙа сигәләр. Уларҙы өсөн шәкәрһеҙ, майһыҙ, тоҙһоҙ, шыр консерванттан ғына торған әллә ниндәй ризыҡ төрҙәрен уйлап сығаралар. Тегеләре барыбер ябыҡмай ҙа ҡуя, ти. Бер ашап өйрәнгән кешене асыҡтырып сыҙатып булалыр шул. Хатта ки ана шул һимеҙҙәр магазин ишегенә һыймай, тип, хәҙер супермаркеттарҙың ишектәрен киңәйтеп яталар икән. Автомашиналарға олоғара, киң ултырғыстар эшләй башлағандар, имеш. Ул дәү кейем-һалым тураһында әйтеп тораһы ла юҡ — үҙҙәренә бер фабрика эшләй ти һәр ҡалала.

Ә бына беҙҙең ил етәкселәре йыш йөрөй бит шул диңгеҙ аръяғына. Улар ана шундай кешеләрҙең нисек ябығырға белмәй этләнгәнен үҙ күҙҙәре менән күреп ҡайталар. Шуға күрә, беҙҙең илдә лә ошондай ҡот осмалы хәлдәр килеп тыумаһын тип, алдан хәстәрлек күрәләр, вәт!

Һуң, икмәк ҡыйбат булһа ни, көнөнә ике телем генә аша. Германиялағы кеүек. Улар кеүек ҡоймаҡ шикелле йоп-йоҡа ғына итеп телеп ебәрһәң, бигерәк тә шәп. Иртәнсәк бер телем, төш бер телем һәм вәссәләм. Кискеһен ашамаҫҡа, тип күпме яҙалар. Кискелеккә яртыһына һыу ҡатыштырып бер стакан ҡатыҡ эсһәң дә ярай, ти.

Ә, шәкәр ҙә ҡыйбатландымы? Унныһын ана һуғыш, аслыҡ йылдарында йылына бер генә тәмләп ҡарағандар, бер ҙә үлмәгәндәр. Табиптарҙы алдай тип уйлайһыңмы? Шәкәр — аҡ ағыу тиҙәр ҙә баһа. Ашама! Белә тороп ниңә ағыу ашайһың.

Май, һөт, сыр тураһында һорайһыңмы? Эйе, улары әҙерәк кәрәк инде былай. Икмәкте, шәкәр, сәйҙе аҙыраҡ ала башлаһаң, көнөнә бер ҡабым май, сәйгә һалырлыҡ ҡына һөт, айына бер телем генә татырлыҡ сыр алырға аҡсаң ҡалыр ул? Ни тиһәң дә, эшләп йөрөйһөң дә баһа?

Кейемгә лә аҡса кәрәк тип башымды ҡатырмағыҙ. Бына хөкүмәтебеҙ уйлап сығарған сәйәсәтте дөрөҫ аңлап йәшәһәгеҙ, тиҙҙән 55—60-сы үлсәмле кейемдәр бөтөнләй юҡҡа сығасаҡ. Уларҙы кейер кешеләр ҡалмағас, фабрикалар гел генә 44—48-се үлсәмде тегәсәк.

Әле бына тағы ла хөкүмәтебеҙгә дан йырлап ҡайтып киләм. Элегерәк өйөбөҙҙөң янында ғына бөтә төр аҙыҡты ла берсән һатып алып була торған шәп баҙар бар ине. Хәҙер уның урынына «Ял итеү комплексы» төҙөнөләр. Яныбыҙҙа ғына хаҡтары тешләшкән ике магазин асып ебәрҙеләр. Баҙарҙы яптылар. Һуң, рәхмәт әйтмәй нисек түҙәһең инде, хәҙер икмәктең, майҙың 3—5 һумға булһа ла арзанырағын эҙләп, ике квартал үтеп, «Бишле» магазинына елдерәм. Автобус, троллейбусына ла аҡса кәрәк тип, шулай көн һайын кәмендә өс саҡрым араны йәйәү тәпәйләй торғас, һиҙмәй ҙә ҡалдым, 60 килонан 45-кә тороп ҡалдым. Хәҙер шул араны, ел көслөрәк булһа, осоп ҡына үтәм. Әллә ниндәй фитнес-клубтар ҙа кәрәк түгел. Унныһын да уйлай белә бит өҫтәгеләр. Киләсәктә һимеҙ кешеләр зәрә күбәйеп китһә-фәлән тип, һәр квартал һайын шул фитнес-залдарҙы аса башланылар. Былай барһа, тиҙҙән йога менән шөғөлләнеп, ҡояш нурҙары менән генә туҡланып йәшәүселәр күбәймәҫ тимә.

Аңлай белергә кәрәк. Сәйәсәттең ун, хатта илле йылға алдан уйлап алып барылғанын онотоорға ярамай. Ана, һимергән американдар ыҙалаһын. Ашатты, ашаттылар ҙа хәҙер нисек ябыҡтырырға белмәйҙәр. Һай, үҙебеҙҙекеләр, тип һоҡланмай сара ҡалмай. Шымығыҙ, тауышығыҙҙы ла сығармағыҙ. Барыһы ла беҙҙе сәләмәт итеү ниәтенән.

# МӘЙЕТ ХӘТИРӘЛӘРЕ

*Фантастик сатира*

— Доктор, ярҙам итегеҙ, бауырҙан сыҙамайым. Ике тапҡыр приступ тотто, өсөнсөһөндә үлермен кеүек.

Доктор эшлекле ҡиәфәттә ниндәйҙер исемлеккә ҡарап алды ла:

— Беҙҙә хәҙер тар специализация. Әгәр риза булһағыҙ, мин һеҙҙе бауыр менән шөғөлләнгән врачҡа ебәрәм, ул һәйбәтерәк дауалар.

Бауыр врачы ла бик йылы ҡаршы алды.

— Минең ассистентым «Бауыр» темаһына диссертация яҙа. Һеҙҙе шуға беркетәйекме?

Мин баш ҡаҡтым. Лабораториянан лабораторияға йөрөй торғас, бауырымды энәһенән ебенә тикшереп диссертацияһын ҡалынайтҡас, «ассистент» (доктор уның исемен шулай тине бит), операция яһарға кәрәк, бер-ике йылдан үлеп ҡалыуығыҙ ихтимал, тигән һығымта яһаны. Һеҙ ябай ғына операция тип уйламағыҙ. Миңә аварияға эләгеп вафат булған берәүҙең бауырын алыштырып ҡуйҙылар, рәхмәт төшкөрҙәре.

Ассистент эргәмдән китмәне. Тәки терелтеп ебәрҙе. Моғайын, диссертацияһын да һәйбәт яҡлағандыр инде.

Бер йыл да үтмәне, әүәлге докторға индем:

— Ярҙам итегеҙ, бөйөрөм, — тинем.

Сираттағы «ассистент» «Бөйөрҙө алыштырыу» темаһына диссертация яҡланы, ә мин яңы бөйөрҙәр менән йәшәй башланым.

Ярты йыл үтеүгә, йә Хоҙай, бирһә бирә бит бер кешегә ауырыуҙы. Һалҡында ла йөрөгәнем юҡ, ә пневмония тиҙәр. Инде үпкәмде лә алыштырырҙар микән, тип тора инем, был ассистент шәфҡәтле булып сыҡты — бер яҡ үпкәңә операция кәрәк, ти. Фәндең үҫешенә аяҡ салып буламы ни, ризалаштым.

Операция уңышлы үтте. Терелдем. Һуңынан рентген һүрәтен күреп ҡалдым. Алдаған бит былар мине. Операция тигәс, тағы икенсе кешенең үпкәһен ҡуйғандар тиһәм, былары үпкәмдең бер яғын сәпсим алып ташлағандар. Белгән булһам, ризалашмаҫ инем.

— Рәхмәт, инде фән докторы булдым, — тип ҡулымды ҡыҫып китте, етмәһә, үпкә белгесе.

Өс ай ҙа үтмәне һауығыуыма, аяҡтар шешенә башланы бит әй. Бөттөм, былай булғас, аяғымды ҡырҡалар инде.

— Доктор, операцияһыҙ ғына дауалағыҙ, аяғым миңә кәрәк, — тинем.

— Тә-ә-әк, ортопед-ассистенттар бөтәһе лә диссертацияларын яҡлап бөткән икән.

«Әйтәгүр, һуңғы йылдарҙа аҡһаҡ-туҡһаҡ, сулаҡтар күп күренә башлағайны, бына ҡайҙа икән ғилләһе», — тип уйлайым эстән.

— Таптым, — тине доктор шатланып.

Медицина институтының алтынсы курсында интернатура үтеп йөрөгән бер студент алдында ултырам. «Нимә беләһең һин?» — тип, вайымһыҙ ғына һорауҙар көтәм. Ә был тәүҙә һүҙһеҙ генә өс томлыҡ амбулатор кенәгәмде уҡып сыҡты. Мин ул «китапты» ауырыу үҙе уҡыһын да нимә менән ауырығанын һәм дә докторҙарҙың уға вайымһыҙ түгел икәнен белһен өсөн яҙыла тип уйлай инем элгәре. Студентым миңә иғтибар менән ҡарап алды ла ниңәлер йөрәгемде тыңларға булды. Ҡайҙан белә икән минең йөрәк тә сәнсеп-сәнсеп алғанын. Врачтарға, йә йөрәгемде лә алыштырырҙар, тип әйтмәй йөрөгәйнем.

— Иғтибар менән тыңлағыҙ, — тине ул мине ҡаршыһына ултыртып. — Һеҙ бынан бер нисә йыл элек ауырый башлағанһығыҙ. Тик ауырыуығыҙ бауырҙа ла, бөйөрҙә лә, үпкәлә лә булмаған. Юҡ, йәғни, дөрөҫөрәге, бауырығыҙҙың да, бөйөрөгөҙҙөң дә, үпкәгеҙҙең дә, аяғығыҙҙың да ауыртыуының төп сәбәбе — йөрәгегеҙҙең насар эшләүенән, ҡан йөрөшө боҙолоуҙан. Хәҙер һеҙҙе тик операция...

Күҙ алдарым ҡараңғыланып китеп, иҙәнгә ҡолағанымды ғына иҫләйем. Йөрәгем туҡтап үлеп киткәнмен шул. Теге студентты ғына йәлләйем. Мине үлтергәне өсөн институттан ҡыуғандарҙыр инде. Башлы егет ине. Йәл, диссертацияһын яҙып өлгөрә алманы...

## БӘХЕТЛЕ ҠАТЫН

*Юмористик хикәйә*

Эй ошо Нәсимәне, ҡасан килһәң дә, «мин бәхетле ҡатын» тип ҡыуана ла ултыра. Әйтерһең, Хоҙай уға ғына барыһын да биргән дә, миңә юҡ. Янымда гел көнсөлдәр, тәрбиәһеҙ, наҙандар йыйылып, берeһе лә мине аңламай,

ярҙам итмәгәнгә мин ғәйеплелер шул? Был донъяла бер генә яҡшы кеше лә юҡ бит ул. Кемеһен генә алһаң да, һинекен алып, үҙе генә ҡулланырға ғына тора. Барыһы ла минән нимәлер һорай, ә үҙҙәре бер нәмә лә бирмәй. Аһа, мин иҫәрҙер шул, барыһына ла таратып ас-яланғас ултырырға? Ана, биргән Нәсимә бирһен. Мин үҙемде бер ҙә бәхетһеҙ тип һанамайым. Әлеге шул минең байлығымдан көнләшеүселәр генә мине «бахыр» тигән булалар. Нишләп бахыр булайым ти? Ҡала уртаһында өс бүлмәле фатирым бар. Нәсимәнең һаҫыҡ хрущевкаһы түгел инде. Өс кеше инһә, дүртенсеһенә урын юҡ тигәндәй. Ә минекендә, кем әйтмешләй, футбол уйнарлыҡ. Хәйер, футболлыҡ урын ҡалдырманым, тапҡан-таянғаныма зиннәтле йыһаз тултырҙым. Заманса булһын, тинем. Бер диваным ғына ат хаҡы тора. Һәр бүлмәмдә берәр төҫлө телевизор. Аш бүлмәһендә заманса «аҡыллы» плитә, кәстрүлдәр. Телевизор ҡарап ятып ҡына, төймәләренә баҫҡыслап алһаң, ашың да бешә, сәйең дә ҡайнай.

Нәсимәнеңме? Уның аш бүлмәһе сыйырсыҡ ояһылай ғына ла баһа? Ире, ике улы, ҡыҙы, ейәнсәренә аш бешерә башлаһа, был бүлмә мунсаның парилкаһына әйләнә. Хет, миндек ал да сабын. Кит, хәсрәтте. Ғүмере буйы йәшәй белмәне инде. Күпме әйттем үҙенә. Нишләп инде үҙенең кейәүгә булған, башҡа йортта йәшәгән ҡыҙыңды, ейәнсәреңде әйәләтәһең тип. Юҡ, тыңламай. Улар мине яраталар. Мин бешергән ашты бигерәк оҡшата ейәнсәрем, тигән була. Ярата инде, әҙер ашты кем яратмаһын. Нәсимә шуларҙы ҡарайым тип ҡаҡ һөйәккә ҡалған. Өҫтәүенә, ире лә, ике улы ла өйҙә булһалар? Өйҙә тигәнем шул — ире вахтала йөрөп эшләй, бер улы икенсе ҡалала уҡый. «Бөтәбеҙ бергә йыйылғанда бигерәк күңелле була инде!» — тип ҡыуанып бөтә алмай Нәсимә. Уның нимәһенә ҡыуанаһың? Теге юлы ике туған апайымдың бер улы ике ай буйы минең фатирҙа йәшәп торҙо. Уны кешегә һанап, олоғара бер кладовкамды бушатып, шунда тапчан ултыртып ҡуйҙым бит әле. Уныһы әйләнгән һайын залыма сыға ла телевизор ҡабыҙа. Зиннәтле диваныма ултырып, салбарының ҡара эҙҙәрен ҡалдырып бөттө. Бер генә юлдан йөрө, таплайһың, тигәйнем, саф йөндән генә туҡылған иҙән балаҫымда һуҡмаҡ яһап ҡуйған. Шул инде, кладовканан туалетҡа тиклем эҙе беленеп тик ята. Ярай әле аш бүлмәһенә бик сыҡманы. Бер тапҡыр йомортҡа ҡурғайны, ике йыл элек Германиянан ҡайтартҡан обой-

ҙарыма май сәсрәтеп нык кына әрләнгәс, башка инмәҫ булды. Көндөҙ ҡайҙалыр ашап килеп ята ла иртәнсәк бутылкалағы һыуын эсеп сыға ла китә. Тәртипле ине ул яҡтан.

Шуныһына ғәжәп итәм әле? Бынау Нәсимәләрҙән бер ҙә кеше өҙөлмәй. Береһе инә, береһе сыға. Уларҙың иҙәндәре лә тап таҙа, йыһаздары ла матур көйө, keләмдәрен бер ҙә көйә ашамай. Минекен, бер кем дә инмәһә лә, көйә ашап бөтөп бара, йыһаздарымды аҙна аҙағына туҙан баҫа. Өс бүлмәне лә йыйыштырып арып бөтәм. Шулай ҙа барыбер аңламайым: Нәсимә нимәгә ҡыуана ла, ниңә үҙен бәхетле һанай. Ҡасан барһаң да, ауыҙы ҡолағына еткән, әле бер, әле икенсе ҡыҙыҡ хәлде һөйләй. Ейәнсәренең уңыштары менән маҡтанып бер була. Әйтерһең, уның ғына ҡыҙы бар ҙа, уның ғына...

Минеңме? Минең фатирым ғына түгел, министрҙарға түләгән эш хаҡын алырлыҡ эшем бар. Хужаларға матур итеп йылмая белһәң, табалар улар шундай эште. Әле кассала бер фатирлыҡ аҡсам ята. Теге юлы Нәсимә получкаға ҡәҙәре 500 һум һораған була. Нишләп бирәйем ти мин уны? Әхирәтем булһасы? Бер бирҙем инде. 100 һумымды ике ай буйы тотто. Хәҙер аҡылландым. Береһенә лә бирмәйәсәкмен. Бәхетлебеҙ, тип йылмайып йөрөйҙәр бит, әйҙә әҙерәк этләнһендәр. Бер тапҡыр тыуған көн тигән булып, кешенән күреп, өйөмә биш танышымды ҡунаҡҡа саҡырғайным. Быяланан булһа ла аҡсаға алынған бит, бер фужерымды ватып киттеләр. Өс мең аҡсамды түгеп, ризыҡ алдым, бер меңлек бүләк килтергәндәр. Эй матур итеп һөйләгән булалар. Көнө буйы магазиндан эҙләп алдыҡ тиҙәр. Һинең бөтә әйберең булғас, нимәне алырға белмәйбеҙ, тиҙәр. Ул һауытты асып та ҡарамағанмын әле. Бер мең тигәс, ышандым инде. Ҡана, ҡарайым әле?

Вәт, көлгәндәр былар минән? Икенсе юлы берегеҙҙе өйөмә аяҡ баҫтырһаммы? Ҡумта тулы теге ни, эт сынйыры, уны тәрбиәләй торған шаҡы-шоҡо инде. «Һинең дә бәхетле булыуыңды теләйбеҙ» тип яҙғандар тышына, етмәһә? Мине әллә этҡә тиңләйҙәр микән? Туҡта, барып был Нәсимәнең кәрәген биреп киләйем әле. «Бәхет»тең нимә икәнен күрһәтәйем.

Әллә өйҙә ҡырын ятып гел телевизор ҡарай торғас, һимереп киткәнмен инде. Тын ҡыҫыла. Шәп атлап булмай ҙаһа? Бынау эскәмйәгә ултырып ял итмәһәм. Ана, минең кеүек бер ҡатын эстән генә мөңрәй-мөңрәй үҙе кеүек үк

йыуантыҡ, тыршыҡ танаулы этен эйәртеп паркта ял итеп йөрөй. Йөҙө ҡәнәғәт. Ул да бәхетлелер, моғайын.

— Нимәгә ҡыуанаһың? — тинем түҙмәй теге ҡатын яныма килеп ултырғас.

— Бына, ҡартайғас ҡына бәхеттең нимә икәнен белдем, — ти был, минең уйлағанды һиҙгәндәй.

— Йә, әйтегеҙ, нимә? — тип тегенән яуап көтәм.

— Кемгәлер кәрәк булһаң, ана шул икән ул бәхет, — тине тегеһе уйсанланып китеп. «Һин кемгә кәрәкһең?» тип саҡ һорамай ҡалдым. Улай тәрбиәһеҙлек була. Теге ҡатын янындағы этен һыйпаны ла уның күҙҙәренә ҡарап:

— Һин дә бәхетлеһең, шулаймы? Күрәһеңме, беҙ икебеҙ ҙә бәхетлеләр, — тип ҡәнәғәт йылмайҙы ул. Ул да минең ише оло фатирҙа япа-яңғыҙ көн күрә икән. Миңә үҙем кеүек тәрбиәле, сибәр, уңған, аҡыллы ир-егет осрамағанға бер ҙә кейәүгә сыҡмағайным, ә уның ире лә, улы ла бер көндә аварияла һәләк булғандар. Уларҙан иҫтәлеккә ошо эттәре генә ҡалған икән.

Килһә килә бит был башҡа ҡыҙыҡ уйҙар? Күҙемә «Зоомагазин» яҙыуы салынды. Әллә, мин әйтәм, теге ҡатын кеүек... Сынйыр, тараҡ, шампундар һатып алаһы юҡ. Әхирәттәрем юҡҡа ғына шулай итмәгәндәрҙер. Бәхеттең нимә икәнен мин дә татып ҡарайым әле.

Сумканың төбөнән әле генә һатып алған көсөгөм шыңшығаны ишетелде. Юл ыңғайы магазиндан һөт, колбаса алдым. Хәҙер, ҡайтып ҡына етәйем әле, үҙеңде туйындырып алырмын. Ә Нәсимәгә аҙаҡҡараҡ икәүләп, һы, ҡыҙыҡ икән, хәҙер икәүләп тип әйтә алам, эйе, икәүләп барып хәлдәребеҙҙе һөйләрбеҙ. Бер мәҙәк булыр. Гел генә кешеләрҙең «мин бәхетле» тип маҡтанғанын күпме тыңларға була.

## ҠӘҺӘР ҺУҠМАЙ ТОРҒАН ЙӘН

*Сатирик монолог*

Һин кем, тип һорарға уйланыңмы? Оһо-һо-о-о! Ер шарында тереклек барлыҡҡа килгән замандан бирле йәшәйем бит мин! Аллаһы Тәғәлә юҡҡа ғына ебәрмәне мине Ергә. Әҙәм менән Һауа Ергә төшөрөлгәнсе үк йәшәй баш-

ланым мин унда. У-у-у, ул саҡта-а-а... тереклек гөрләп торҙо! Ҡояш йылыта. Ямғыр яуа. Ағас, үләндәр гөрләп үҫә. Һыуҙағы балыҡтар ҙа ишәйҙе. Йырткыс балыҡтар үҙенең иштәрен ашап торһалар ҙа, шулай яратылған бит инде — бер балыҡтан йөҙ балыҡ барлыҡҡа килә лә ҡуя. Бер заман һыу төбөндә ылымыҡтар, үләндәр бөтөп, балыҡтар үҙҙәре тонсоға башланы. Ҡайһы бер балыҡтар, һулар һауа етмәгәс, ярға һикереп сыға башланы. Сосораҡтары ерҙә тын алырға өйрәнеп алды. Кеҫәрткегә әүерелде. Әммә океан, диңгеҙ һыуын барыбер нисек тә һаҡларға кәрәк. Бына шунда инде Аллаһы Тәғәлә мине яралтты! «Бар, төш Ергә! Диңгеҙ тоҙона бирешмәҫлек итеп яралттым. Һыуға сум да шундағы хәлһеҙ генә йөҙөп йөрөгән балыҡтарҙың эсенә инеп йәшә, үрсе. Шул балыҡтарҙың һанын кәмет. Бик шашынып китмә! Туйынып алғас та ҡая эсендә, йә балыҡ айғолағында йәшенеп тор ҙа аҙаҡ хәлең бөтә башлағас, тағы ла берәй балыҡта үрсерһең», — тине.

Киттем! Балыҡтарҙың һанын кәметә торғас, беҙҙең армия ла ишәйҙе. Берәүҙән икәү, икәүҙән дүрт, дүрттән һигеҙ булдыҡ. Шул саҡ Күктәрҙән яңы фарман килде. «Етәр! Инде ылымыҡтар үҫә башланы. Балыҡтарға теймәгеҙ!» Ә беҙгә нимә эшләргә? Ишәйеп киттек бит, ҡәһәрең. «Ер өҫтөндәге хайуандар ҙа үрсеп, күбәйә башланы. Йәшеллекте ҡом сүллегенә әйләндерәләр...» тигән фарман килде. Аңлашылды, тинек.

Киттек ер өҫтөнә! Нисә мең йыл үткәндер. Йә теге, йә был хайуандарҙың иҫәп-һанын ҡыҫҡарта торғас, хәлдән тайҙыҡ. Ҡайҙа барып, кемеһен кәметергә Күктән күрһәтеп торҙолар. Артыҡ егәрлеләнеп киткән йылдар ҙа булды. Уның ҡарауы, аҙаҡ берәр йыл йоҡомһорап алдыҡ. Шулай һәүетемсә генә йәшәп ятҡанда Ер өҫтө боҙ менән ҡапланды бит әй! Туңдыҡ, ҡаттыҡ! Хайуандар шунда уҡ йән бирҙе. Ә беҙме, беҙ бирешмәнек. Бары тик йоҡомһорап ҡатып ҡалдыҡ. Ниңә, тағы ла берәй тереклек тыуһа, кәрәк булаsаҡбыҙ бит!

Бик оҙаҡ ҡатып тороп зәһәр асыҡтырҙы бит әй! Их, берәй тере йән булһасы? Бер мәл беҙҙе лә ер өҫтөнә сығарҙылар. Ҡояш йылыһынан ирәйеп киттек. Тик үле хайуанды ашап йәшәп булмай ҙа инде. Туҡта, туҡта! Өҫтә ниндәйҙер тере йән йылыһы һиҙелә тип, сығып ҡараһаҡ, һу... берәү түгел, әллә унлаған тере йәндәр беҙ инеп оялаған мамонт тирәләй урала! Таптыҡ! Ура! Был тере

йәндәр Кешеләр булып сыҡты. Улар үлгән мамонтты боҙ аҫтынан соҡоп сығарғандар икән. Туңып ятҡас, мамонт ите бер ҙә боҙолмаған икән. Кешеләр уны рәхәтләнеп ашап алды. Шулай итеп, беҙ кешеләрҙең тәненә инеп ояланыҡ. Эй рәхәтләндек кенә. Тик хайуандар, беҙ килеп инһәк, хәле бөтөп, тиҙ генә үлә торғайны, ә кешеләр бер ни булмағандай йөрөй бирә. Ярай, беҙгә бер ҙә ҡыйын түгел. Тамағыбыҙ туҡ, тибеҙ. Балаларыбыҙ ҙа, ейәндәребеҙ ҙә инде хайуандар яғына әйләнеп тә ҡарамай башланы. Организмы көслө кешеләрҙә оҙаҡ йәшәп булмай икән. Уларҙың ҡанындағы аҡһымдар беҙҙе йәһәт кенә ҡыуып сығара ла бөтә. Шуға сибегерәк, хәлһеҙҙәрен, балаларҙы һайлай башланыҡ. Сабыйҙарҙы күрһәк — түбәбеҙ күккә тейә! Ҡыҙығып китеп, ҡайһы береһенә күмәкләп йәбешәбеҙ ҙә, тегенеһе йән бирә лә ҡуя. Бик оҙаҡ барманы әле ул беҙҙең байрамыбыҙ. Кеше тигәндәре бик аҡыллы хайуан булып сыҡты. Беҙҙең армияны кәметеү өсөн әллә нисәмә төрлө дауа үләне тапты. Тәндәрен дә, йәндәрен дә нығыттылар. Һалҡындарға ла бирешмәй башланылар. Сыныҡтылар. Хатта һуңғараҡ, өшөһәләр — ут яғып йылына башланылар. Беҙгә «подпольеға» ҡасыуҙан башҡа сара ҡалманы. Йылына бер, ике тапҡыр ғына баш күтәреп алабыҙ ҙа, аҙаҡ йоҡоға талабыҙ. Шул арала үҙебеҙ нисек тә береһенә лә белгертмәй генә кеше тәненә үтеп инергә лә «эш боҙорға» тип баш ватабыҙ. Һәр быуын ошо һәләтте арттыра төштө. Ахырҙа, кеше беҙҙең килгәнде бөтөнләй аңғармай башланы.

Йыл һайын төрлө-төрлө сүрәткә инәбеҙ. Кешенең уяулығын кәметер, иғтибарын икенсегә йүнәлтер өсөн тәүге көндәрҙә һалҡын тейгәндәге кеүек башын ауырттырған булабыҙ. Сөскөртә, бышҡырта, тән температураһын күтәрәбеҙ. Хатта ҡайһы берҙәребеҙ эсен, ашҡаҙанын ауырттыра башланы. Кеше өйрәнгән бит инде: һалҡын тейгәндә эҫе мунса, миндек менән сабыныу килешә. Аҙаҡтан эҫе сәй ҙә эсеп ебәрһә... шунан... шунанмы? Теге ней... борос һалынған, эсте бешереп төшөп киткәне... иң зәһәре... шул үҙе! Ах, ох! Бер күтәрһәң, ҡан йүгереп китә. Ә беҙгә шул ғына кәрәк тә. Кешенең ҡан юлдары буйлап зырлап йүгерәбеҙ, инмәгән ағза ҡалдырмайбыҙ. Иртәгәһенә, «кисә генә һалҡын тейгән» кешебеҙ — беҙҙеке! Бер аҙналай мышҡылдап, ауырыуҙарға бирешмәйем тип маҡтанып йөрөгәндәрҙе лә тәгәрәтеп һалып ҡуябыҙ. Герой булып оҙағыраҡ йөрөгәне, йә иһә «һәйбәт» хужаға тура килгән егәрле, больничный

алмаған, хеҙмәтселәр бөтөнләй аяҡтан йығылғас ҡына табиптарға күренә башлай. Хатта һуң да булып ҡуя. Күбеһен йә һуҡыр, йә һаңрау, йә ғәрип итәбеҙ ҙә ҡуябыҙ. Ниңә беҙҙән дә көслөрәк хужа бармы ни? Беҙҙе эшкә һанамағандарға шул кәрәк тә.

Күпме кеше беҙҙе ҡәһәрләмәһен, беҙ барбыҙ һәм һәр ваҡыт буласаҡбыҙ. Үҙенең сәләмәтлеген алдан ҡайғыртта белмәгәндәргә һабаҡ өсөн Аллаһы Тәғәлә тарафынан ебәрелгәнбеҙ Ергә. Шулай ҙа, әгәр бер кемгә лә һөйләмәһәң, һиңә бер серемде асайым әле. Беҙҙең ҡотобоҙҙо алған нәмәләр ҙә бар ерҙә. Нимә тиһеңме? Табиптар? Эйе, уныһы ла бар. Ғалимдарҙан да әҙерәк шөрләйбеҙ. Йыл һайын үҙгәрһәк тә, беҙҙе танып, дауаһын табып ҡына торалар. Әммә иң ныҡ ҡурҡҡаныбыҙ — кешеләр йылдан-йыл аҡыллана бара. Хәҙер улар беҙҙең килгәнде белеп, алдан уҡ «баррикадалар» ҡора башлай. Йәй буйы саф һауала сыныға, баҡса үҫтерә, йылғала һыу төшә, дарыу үләндәре йыя, эсеү-тартыуҙан да тыйыла башланылар, ҡәһәрең. Көҙҙән үк витаминдар, төрлө йәшелсә-емештәр ашай башлай. Яңыраҡ, ана, прививка тигән нәмәһен уйлап сығарҙылар. Аҡылланды кешеләр! Минең исемем сығыу менән тиҙ генә һаҡланыу сараһы күрә башлайҙар — саҡ ҡына мышҡылдаһа ла өйҙә генә яталар, элекке кеүек бер ҙә эҫе мунсаға йүгермәйҙәр. Һары мәтрүш һалып, баллап тороп йәшел сәйҙәр эсеп ебәрһәләр, ҡотобоҙ ҡалмай. Нисәмә мең йыл буйы гел тере йәндә йәшәп, үлән төҫө күрмәгәс, шул сәйҙәр менән йыуылып ҡына төшәбеҙ ҙә бөтәбеҙ. Аҙаҡ беҙҙең көстө эшкә һанамаған, герой булып, һаҡланмай йөрөгән кешеләрҙе эҙләп хәлдән таябыҙ.

Бына шундай ҡәһәр һуҡмай торған йәнмен мин. Исемемде белгең киләме? Әйтһәм әйтәйем инде, үҙ ғүмерендә мине татып ҡарамаған бер генә йән эйәһе лә юҡ. Шуға бөтә ер шарында исемем бер иш яңғырай. ГРИПП — оҙонайтып әйтһәң, былай яңғырай ул — Гел Рәхәттә Йәшәгән Паразиттың Паразиты. Ҡайһы берәүҙәр хатта былай тип ебәрә — Гонаһлы, Рәнйешле, Имәнес Паразиттың Паразиты. Уныһын үҙең һайла. Миңә барыбер. Ана, ана, көнө-төнө компьютер артынан тормаған, саф һауа күрмәгән, сибек кенә берәү күренә. Йүгерҙем күршемде саҡырырға. Иртәгәнән дә ҡалмай шул кешегә барайыҡ! Хушығыҙ! Минең һөйләгәндәрҙе башҡа вирус туғандарыма еткерә күрмәгеҙ. Беҙҙең серҙе асаһың тип, йәнемде алырҙар.

# БАЛАЛАР ӨСӨН

## СЕРЛЕ МУЙЫНСАҠ

*Яңы йыл алдынан булған мажара*

**Кесе йәштәге балалар өсөн тамаша сценарийы**

ҠАТНАШАЛАР:

Ҡыш бабай
Ҡарһылыу
Ҡояшбай — әтәс
Аҡтүш — тәртипле эт
Мыр-мыр — бесәй
Һорлан — тәрбиәһеҙ эт
Шуҡбикә — төлкө

### Беренсе күренеш

Уртала оло түмәр. Арттараҡ бәҫ ҡаплаған ағастар. Ситтәрәк шыршы. Һорлан ҡушаматлы килбәтһеҙ эт менән төлкө килеп инә. Уларҙың ҡулында ҡағыҙ бите.

Һорлан. Яҡшылап уҡыныңмы, Шуҡбикә, ысынлап та, йәшел шыршы янында оло түмәр ултырған ялан, тиелгәнме?

Шуҡбикә. Тап шулай тиелгән. *(Уҡый.)* «Йәшел шыршы янындағы оло түмәр янында Ҡыш бабай, өтөр, Әтәсте көтөргә, нөктә. Улар Аҡтүшкә Яңы йылдың серле муйынсағын тапшырасаҡ, нөктә. Ҡарһылыу, нөктә». Һуң бына ышанмаһаң, үҙең ҡара! *(Һорланға телеграмманы һуҙа.)*

Һорлан *(ҡағыҙҙы баштүбән тотоп)*. Бик уҡыр инем дә ул, бер хәрефен дә танымайым, һав! Әсәйем уҡырға

өйрәткәндә гел генә тәҙрә аша тыштағы турғайҙарға ҡарап ултырғайным.

Шуҡбикә. Т-с-с, наҙан икәнеңде берәйһе ишетеп ҡалмаһын! Телеграмманы Аҡтүштән урлауы еңел булған тиһеңме? Аҡтүш уны уҡып өлгөргән булһа, хәҙер үҙе килеп тә етер әле. Уны нисек тә икенсе яҡҡа ебәреүҙе уйлашайыҡ.

Һорлан. Эйе, эйе, һав-һав! Шәп иттек. Яңы йыл муйынсағын Ҡыш бабайҙан алып ҡалырға кәрәк. Телеграмманы йәшер! Кемдер килә *(еҫкәнеп)*. Һав! *(Түмәр артына йәшенәләр.)*

## Икенсе күренеш

Сәхнәгә бик ашығып Аҡтүш менән Мыр-мыр килеп инә. Икеһе лә борсоулы.

Аҡтүш *(борсоулы)*. Телеграмманы оя ситенә, һөйәк менән баҫтырып һалып ҡуйғайным. Ояма инеп кенә сыҡҡансы юҡ булды.

Мыр-мыр. Йә ярай инде, Аҡтүш, бөтөрөнмә. Моғайын, сыҫҡандар батшаһы Муйылгүҙ күргәндер кем алғанын. Иртәгә үҙем табып килтерермен.

Аҡтүш. Иртәгә һуң була бит! Ярай телеграмманы бер тапҡыр булһа ла уҡып өлгөргәйнем. Бөгөн сәғәт икегә оло түмәрле ялан... *(Түмәрҙе күреп ҡала. Ҡыуанып.)* Ана, таптыҡ, Мыр-мыр, таптыҡ оло түмәрҙе!

Мыр-мыр. Шунан, шунан...

Аҡтүш *(түмәргә ултырып)*. Бөгөн бына ошонда Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу, Әтәс килеп, миңә нимәлер тапшырырға тейеш.

Мыр-мыр. Ә-ә-ә, иҫләнем, иҫләнем. Теге бөтә тирәяҡтан эттәрҙе йыйып, Яңы йылды кемгә бирергә, тигән конкурста һин еңеүсе булғайның бит, шуға бүләктер?

Аҡтүш *(ниҙер хәтерләргә тырыша)*. Юҡтыр. Юҡ! Тағы ла нимәлер яҙылған ине. Онотҡанмын.

Мыр-мыр. Беләһеңме, ошо түмәрҙе өс тапҡыр урап сыҡһаң, иҫеңә төшәсәк!

Аҡтүш. Кем әйтте?

Мыр-мыр. Әсәйем әйтә торғайны.

Аҡтүш түмәрҙе әйләнәйем тиһә, теге икәүҙе күреп ҡала.

Аҡтүш. Һау-һау! Мыр-мыр, кил бында. Һеҙ кемдәр?

Ш у ҡ б и к ә . Беҙме? Беҙ... әле генә... Ҡыш бабай менән Ҡарһылыуҙың тәмле күстәнәстәрен ашап килдек тә ял итәбеҙ.

А ҡ т ү ш . Ҡайҙа, һау-һау! Ҡайҙа?

Ш у ҡ б и к ә . Ашаныҡ инде.

А ҡ т ү ш . Ҡарһылыуҙымы? Ҡыш бабай...

Ш у ҡ б и к ә *(көлә)*. Ха-ха-ха, юҡсы! Күстәнәстәрҙе тим дә...

М ы р - м ы р . Ә ҡыш Бабай менән Ҡарһылыу ҡайҙа?

Һ о р л а н . Улар ниндәйҙер Аҡтүш тигән этте көтөп ултыралар ине.

Аҡтүш менән Мыр-мыр бер-береһенә ҡарашып алалар.

М ы р - м ы р . Алыҫтамы?

Ш у ҡ б и к ә . Алыҫта. Анау тау буйындағы кескәй яланда.

А ҡ т ү ш . Ә ул аҡланда Әтәс тә бар инеме?

Һ о р л а н . Бар, бар, һав-һав!

М ы р - м ы р . Әйҙә, киттек!

Һ о р л а н . Әйҙә, өлгөрөргә кәрәк! *(Сығалар.)*

## Өсөнсө күренеш

Ш у ҡ б и к ә . Шәп иттек, эйеме? Әйҙә, инде матурланып ҡына ошо түмәргә менеп ултыр! *(Кеҫәһенән тараҡ, көҙгө ала.)*

Һорлан ултыра. Төлкө уға көҙгө тоттора ла үҙе йырлай-йырлай Һорландың йөнөн тарай.

Ш у ҡ б и к ә . *Яңы Йылды иң матурға,*
*Иң батырға бирәләр,*
*Ҡыш бабай ҙа, Ҡарһылыу ҙа*
*Беҙгә бөгөн киләләр!*

Ух, Яңы йылды һиңә бирһәләрме, белер инем нимә эшләргә? Иң тәүҙә Аҡтүш менән Мыр-мырҙы дошманлаштырыр инем. Шунан... *(Тарағын кеҫәһенә һалам тиһә, ҡулына һыра һауыты эләгә.)* ...Бәй, онотҡанмын да ул. *(Тирәягына ҡарана.)* Әйҙә бер кем дә күрмәгән саҡта бынау һыраны эсеп ҡуяйыҡ!

Һ о р л а н . Һыра, тиһеңме? *(Ирендәрен ялап.)* Һав-һав, була ул! Туҡта, кемдер килә, һав-һав! Йәшер!

Шуҡбикә *(һыраны түмәргә, эттең артына ултырта)*. Эй эттәгенәһе, өлгөрмәнек! Йә ултыр шәберәк! Матурлан!

Һорлан ултыра. Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу күренә. Арттарынан әтәс — Ҡояшбай килә.

Ҡыш бабай *(оло түмәр өҫтөндәге этте күреп)*. Һо-о-о, Аҡтүш! Һинме был?

Һорлан. Эйе, һав!

Ҡыш бабай. Ҡайһылай өлгөрһөң! Юҡҡа ғына беҙҙең ярыштарҙа еңеп сыҡмағанһың икән!

Шуҡбикә. Һаумыһығыҙ, Ҡыш бабай! Беҙ һеҙҙе әллә ҡасандан бирле көтәбеҙ! *(Һорландың бөйөрөнә төртөп.)* Һаулыҡ һораш!

Һорлан. Һав-һав! Привет! Окей! Барығыҙға ла сәләм!

Ҡояшбай. Ҡо-Ҡо-Ҡоҡ! Был ни әллә һаулыҡ һораша ла белмәй инде?

Ҡарһылыу. Ҡаушағандыр ул! Әйҙә, Ҡояшбай, серле муйынсағыңды тапшыр ҙа ары китәйек! Беҙҙе күп ерҙә көтәләр бөгөн. Ваҡыт тығыҙ.

Ҡыш бабай. Туҡта, туҡта! Ашыҡмай тор, Ҡарһылыу! Йыл буйына хакимлыҡ итергә хоҡуҡ биргән муйынсаҡты улай тиҙ генә тапшырмайҙар. Мин был эт тураһында күп яҡшы һүҙҙәр ишеттем. Инде үҙем дә тапҡырлыҡ, сослоҡта һынап ҡарарға теләйем Аҡтүште.

Һорлан. Мин әҙер! Һыр, һыр! Әҙер!

Шуҡбикә *(эттең һыртына ҡағылып)*. Теге ни... бөгөн Аҡтүш бында килеү өсөн бик алыҫ ара үтте. Талсыҡты. Һалҡын тейҙереп тә алды. *(Эткә.)* Йүтәлләп тора...

Һорлан. Эйе. Ҡһо-ҡһо! *(Йүткерә.)*

Шуҡбикә. Башы ауырта. Бәлки, һуңғараҡ һынарһығыҙ уның сослоғон, ә?

Ҡояшбай. Ҡо-ҡо-о-оҡ, юҡ, юҡ!

Ҡыш бабай. Әйт әле беҙгә, һин нимәне йәнеңдәй күреп һаҡларға тейешһең йыл буйына?

Һорлан Шуҡбикә яғына ҡарай. Тегеһе ҡоласын йәйеп «белмәйем» тип күрһәтә.

Һорлан *(ҡыуанып)*. Һөйәкте!

Барыһы ла көлә.

Ҡояшбай. Әйттем бит, был ысын Аҡтүш түгел. Түгел! Ҡарауыл! Кикирикүк! Аҡтүш юҡ! Аҡтүште урлағандар! Балалар, һеҙ күрмәнегеҙме Аҡтүште?

Шуҡбикә. Саҡ ҡына сабыр итегеҙ! Аҡтүш хәҙер әйтә дөрөҫ яуапты. Шулаймы, Аҡтүш?!

Һорлан. Эйе! Хәҙер! Аҙ ғына уйлайым да.

Ҡарһылыу. Беҙҙе бөгөн күп ерҙә көтәләр! Ни эшләргә? Ысын Аҡтүште ҡайҙан табырға?

(Йырлай)

*Яңы йылды, Яңы йылды*
*Кемгә, кемгә бирергә?*
*Аҡтүшебеҙ бөгөн бында*
*Өлгөрмәне килергә.*

Ҡыш бабай. *Ай, Ҡарһылыу, Ҡарһылыу,*
*Көтәйексе аҙыраҡ,*
*Ашыҡмайыҡ Яңы йылдың*
*Муйынсағын тағырға.*

Шуҡбикә. Туҡтағыҙ! Туҡтағыҙ! Бына бит алдығыҙҙа Аҡтүш! Беҙ һеҙҙе тамсы ла алдамайбыҙ!

Ҡояшбай. Алдаҡ! Алдаҡ! Ҡо-ҡо-ҡо!

Ҡарһылыу. Алдамағас, ҡайҙа мин ебәргән телеграмма?

Шуҡбикә *(ҡағыҙҙы сығарып)*. Бына!

Барыһы ла ҡағыҙға ташлана.

Ҡояшбай. Кикирикүк! Ялған! Ялған!

Ҡарһылыу. Ялған түгел. Был, ысынлап та, мин ебәргән телеграмма!

Һорлан. Һав! Һав! Ә һеҙ ышанмаған булаһығыҙ!

Ҡыш бабай. Йә ярай, улай булғас. Ҡояшбай, ҡайҙа муйынсағың? Тапшыр ҙа, ары киттек!

Әтәс муйынынан муйынсаҡты алып, теләр-теләмәҫ кенә Һорлан янына килә.
Һыра еҫен һиҙеп ҡала.

Ҡояшбай. Фу-фу! Ниндәй һаһыҡ еҫ?

Шуҡбикә. Бик ашыҡҡайныҡ. Иртәнсәк тешен йыуырға онотҡандыр.

Ҡарһылыу. Ҡояшбай, беҙҙе көтәләр!

Әтәс муйынсаҡты эткә кейҙерә.

## Дүртенсе күренеш

Шул саҡ арып талсыҡҡан Аҡтүш менән Мыр-мыр килеп инә.

Мыр-мыр *(шыршыға ҡарап)*. Ой! Шыршы! Аҡтүш, ҡара, таптыҡ теге йәшел шыршыны! *(Башҡаларҙы күреп ҡала.)* Һаумыһығыҙ!

Ҡарһылыу. Һаумыһығыҙ!

Аҡтүш. Һаумы, Ҡыш бабай! Һаумы, Ҡарһылыу... э... э... кем... *(Әтәскә.)*

Ҡарһылыу. Ҡояшбай!

Аҡтүш. Ҡояшбай, һаумы! Мин Аҡтүш булам. Таныш булығыҙ, был минең дуҫым Мыр-мыр. Һеҙҙе эҙләп арып бөттөк!

Ҡояшбай. Күрҙегеҙме? Тағы ла бер Аҡтүш. Әйттем бит, был ысын Аҡтүш түгел, тип.

Ҡарһылыу. Ә Яңы йылдың серле муйынсағын беҙ тапшырып өлгөрҙөк...

Ҡояшбай. Муйынсаҡ әлегә үҙ көсөнә инмәгән. Теләктәремде әйтмәгәнмен!

Ҡарһылыу. Тәүҙә кемеһенең ысын Аҡтүш икәнен белергә кәрәк. Бәлки, быныһы ла алдаҡтыр?

Мыр-мыр. Ниндәй алдаҡ, ниндәй алдаҡ?! Ышанмаһағыҙ, ана теге конкурста бирелгән һорауҙарҙы биреп ҡарағыҙ! Мяу! Аҡтүш аҡыллы ул. Ул белмәгән бер һорау ҙа юҡ, вәт! Мурр-мур!

Ҡарһылыу. Баяғы һорауҙы был эткә лә бирәйек. Бәлки, яуабын белер?

Ҡояшбай. Дөрөҫ! Дөрөҫ!

Ҡыш бабай. Шулай шул. Йә инде, Аҡтүш, яуап биреп ҡара. Йыл буйына һин нимәне йәнеңдәй күреп һаҡларға тейешһең?

Һорлан *(тәпәйен күтәреп)*. Хәҙер үҙем әйтәм, үҙем. Аҙ ғына уйлап алам да. Теге ни... йыл буйына мин... оямды һәкларға тейешмен.

Ҡояшбай. Беҙгә дөп-дөрөҫ яуап кәрәк!

Мыр-мыр. Аҡтүш, әйт тә ҡуй!

Аҡтүш. Йыл буйына түгел, бөтә ғүмерем буйына мин... *(Тынлыҡ. Барыһы ла иғтибар менән тыңлай.)* Үҙ йортомдо, тыуған илемде, ғәзиз еремде һаҡларға, ҡәҙерләргә, яратырға тейешмен!

Ҡыш бабай. Һай, афарин!

Ҡарһылыу. Дөп-дөрөҫ, дөрөҫ!

Ҡояшбай. Бына был эткә Яңы йылды ышанып тапшырырға була.

Шуҡбикә. Былай дөрөҫ түгел. Түгел! Тағы ла бер һорау бирегеҙ! Уныһын беҙ ҙә белербеҙ!

Ҡыш бабай. Ярай һуң. Икенсе һорауҙы әйҙә быйылғы йыл хужаһы Ҡояшбай бирһен. Кемегеҙ дөрөҫ яуап бирә, шуға — серле муйынсаҡ.

Ҡояшбай. Тәк-тәк! Ҡо-ҡо-ко! Хәҙер. Әһә!

Аҡтүш. Һорлан. Тыңлайбыҙ, тыңлайбыҙ!

Ҡояшбай. 2005 менән 2006 йыл араһында нимә бар?

Шуҡбикә. Аҙ ғына уйлап алайыҡмы?

Ҡарһылыу. Оҙаҡ түгел!

Ҡояшбай *(Һорлан янына килеп)*. Ҡаптыңмы ҡармаҡ-ҡа? Йә инде, сослоғоңдо күрһәт!

Һорлан. Әйтәйемме?

Ҡыш бабай. Йә, йә, әйт!

Һорлан. «Менән» тигән һүҙ бар!

Шуҡбикә. Урра! Дөрөҫ! Дөрөҫ!

Ҡояшбай. Белмәне, белмәне, әйттем бит, ул түгел, тип!

Ҡыш бабай *(Аҡтүшкә ҡарап)*. Ә һин ни тиерһең?

Аҡтүш *(бер аҙ уйланып)*. 2005 менән 2006 йыл араһындамы? Теүәл бер йыл бар!

Ҡыш бабай. Һай, афарин! Дөп-дөрөҫ! Беҙ һеҙгә Яңы йылды тапшырыу өсөн бер йыл буйына килдек. Беҙ алдаҡсыларҙы яратмайбыҙ.

Шуҡбикә. Ә телеграмма?

Тынлыҡ. Шуҡбикә борғолана. Аҡтүш хафаға ҡалған.

Мыр-мыр. Аҡтүш... Аҡтүш ул телеграмманы... юғалтҡан.

Аҡтүш *(сеңләй)*. А-у-у-и!

Ҡояшбай. Тәк-тәк-тәк! Тимәк, урлағандар? *(Һорлан яғына ҡарай.)*

Һорлан. Мин урламаным. Ана Шуҡбикә ҡотортто.

Шуҡбикә *(асыулы)*. Нимә, шаяртырға ла ярамаймы әллә? *(Телеграмманы сығарып ергә ташлай.)*

Аҡтүш менән Мыр-мыр йүгереп килеп уны алалар.

Аҡтүш. Шул! Шул үҙе! Бына, Ҡыш бабай, ул телеграмма. *(Килтереп бирә.)*

Ҡ ы ш  б а б а й . Хуп-хуп! Ышандыҡ! Ысын Аҡтүш һин булаһың инде! Балалар, дөрөҫмө?

Б а л а л а р . Дөрөҫ! Дөрөҫ!

Ҡ ы ш  б а б а й . Мин бик шатмын! Яңы йыл иң аҡыллы, иң сос, иң егәрле, дөрөҫлөктө яратыусы эткә тапшырыла.

Ҡ а р һ ы л ы у . Ҡояшбай!

Ҡ о я ш б а й *(муйынынан муйынсаҡты сисеп алырға килә. Һорлан бирергә теләмәй борғолана һәм яңылыш һыра һауытын ергә төшөрә)*. Ыстағәфирулла! *(Һыра һауытын ерҙән алып.)* Был бит һыра! Нисек баҙнат иттегеҙ?! Ниндәй алама еҫ сыға тиһәм!

Ш у ҡ б и к ә . Ә беҙ уны тамсы ла йотманыҡ. Ана, Һорлан һауытын табып алған!

Ҡ ы ш  б а б а й . Тағы ла алдашаһығыҙмы?

Ҡ а р һ ы л ы у . Хәҙер үк юғалығыҙ бынан! Беҙ алдаҡсы, өҫтәүенә, һыра яратҡандар менән дуҫ түгел!

Ҡ о я ш б а й . Ярай әле, Яңы йылды Һорланға биреп өлгөрмәнек.

Ҡояшбай муйынсаҡты систереп ала. Тегеләр ситкә китә башлай.

Ҡ о я ш б а й . Туҡта! Туҡтағыҙ! Ә кем һеҙҙең артығыҙҙан таҙартырға тейеш! Алығыҙ! Башҡа улай урманда сүп ҡалдырып китмәгеҙ!

Шуҡбикә менән Һорлан һыра һауытын ала ла ситкә баҫа.

Ҡ о я ш б а й . Йә, Аҡтүш! Кил бында!

Аҡтүш түмәргә ултыра. Ҡояшбай уның муйынына муйынсаҡ кейҙерә. Күңелле көй яңғырай.

Ҡ о я ш б а й . Бисмилләһир-рахмәнир-рахим! Йыл буйы изге эштәр менән балаларҙы ла, өлкәндәрҙе лә ҡыуандыр! Илгә, ергә именлек, бар тереклеккә иҫәнлек килтер! Амин! Амин! Амин!

А ҡ т ү ш . Тырышырмын! Барыһына ла һау-һаулыҡ бирермен! Бәлә-ҡазаларҙан, һау-һау, һаҡлармын!

Барыһы ла сәпәкәй итә. Бер ситтә Шуҡбикә менән Һорлан ғына күңелһеҙ тора.

Ҡ ы ш  б а б а й . Бәй, бүләктәрҙе онотоп торам! *(Һәр кемгә бүләк тарата. Һорлан менән Шуҡбикәгә бирмәй.)*

Аҡтүш. Ҡыш бабай, Һорлан менән Шуҡбикәне был юлға ғәфү итәйек!

Һорлан. Беҙ башҡаса улай итмәйбеҙ!.. Һыраның тамсыһын да ауыҙыма алмаясаҡмын!

Шуҡбикә. Мин дә алдашмаҫмын, урлашмаҫмын... йыл буйы.

Ҡыш бабай *(уларға ла бүләк бирә)*. Тәүфиҡлы, итәғәтле булһағыҙ, һеҙҙе барыһы ла яратыр!

Һорлан да, Шуҡбикә лә шат. Рәхмәт әйтәләр.

Ҡарһылыу. Беҙ инде һеҙҙең менән хушлашабыҙ. Әйҙә, хушлашыр алдынан, шыршы тирәләй бейешеп, йырлашып алайыҡ.

Шыршы тирәләй бейейҙәр, йырлайҙар.

Ҡыш бабай. Һау булығыҙ, ҡәҙерлеләрем! Киләһе йыл осрашҡанға тиклем!

Ҡояшбай. Һәр көнөгөҙҙөң ҡәҙерен белегеҙ!

Ҡарһылыу. Аҡтүш, серле муйынсаҡты юғалтмай һаҡла! Йыл буйына ул һинеке буласаҡ. Изге эштәрҙә ярҙам итәсәк! Хушығыҙ!

Ҡыш бабай, Ҡарһылыу, Ҡояшбай сығалар.

Аҡтүш *(муйынсаҡты ҡарай)*. Һау, һау! Хәҙер үк бер изгелек эшләгем килә!

Һорлан *(үҙ алдына)*. Минең дә һинең кеүек белемле булғым килә.

Аҡтүш *(муйынсаҡҡа шыбырлай)*. Һорландың уҡырға өйрәнгеһе килә!

Мыр-мыр. Мяу-мяу! Ана шыршы төбөнә нимәлер төштө. *(Барып ҡарайҙар.)*

Һорлан. Ура! Минең хәҙер китаптарым бар! Уҡырға ла, яҙырға ла өйрәнәсәкмен! *(Китаптар тотоп сыға.)*

Аҡтүш. Ер йөҙөндәге бөтә балаларҙың да атай-әсәйҙәре булһын, барыһы ла белемле, аҡыллы булһындар! Яңы һөнәрҙәргә өйрәнһендәр!

Шуҡбикә. Вәт шәп! Әйҙә тағы ла берәй ҡыҙыҡ теләйек!

Аҡтүш. Әйҙә һуң! Ә хәҙер, шыршыбыҙ осона күктән йондоҙ төшөрөп ҡаҙайым! Бер, ике, өс! *(Шыршыла йондоҙ ҡабына.)* Барығыҙҙы ла Яңы йыл менән!

Барыһы ла шыршы тирәләй әйләнә, йырлаша, бейей.

## Яңы йыл йыры

*Яңы йыл, яңы йыл,*
*Яңы шатлыҡтар килә,*
*Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу*
*Беҙгә бүләктәр бирә.*

*Яңы йыл, яңы йыл,*
*Именлек, бәхет йылы,*
*Яҡшыраҡ, матур йәшәргә*
*Тырышайыҡ йыл буйы!*

*Яңы йыл, яңы йыл,*
*Барыһы ла шат бөгөн,*
*Теләйбеҙ беҙ кешеләргә*
*Аҡ теләктәр, аҡ күңел!*

**Шаршау**



## БӨЙРӘКӘЙ МЕНӘН ШЫРТЛАН

*Балалар өсөн Яңы йыл тамашаһы*

ҠАТНАШАЛАР:

Бөйрәкәй — Аҡанайҙың быҙауы
Шыртлан — ҡомаҡ
Тәңкәбай — сусҡа
Аҡанай — һыйыр
Ҡарабай — үгеҙ
Әтәс
Тауыҡтар

### Беренсе күренеш

Сәхнәлә — һыйыр аҙбары. Мөйөштә — шыршы. Аҙбарға йәһәт атлап Аҡанай менән Ҡарабай инә. Икеһенең дә ҡулында шыршы тәтәйҙәре. Бесәндән йолҡоп алынған сәскәләр, һөт һауғанда онотолоп ҡалған көрөшкә, аҡ сепрәк, төрлө биҙәкле сепрәк киҫәктәре һ. б.

Аҡанай. Әйҙә, йәһәтерәк булайыҡ. Бер сәғәт кенә ҡалды. Уй, Аллам, бигерәк яйһың. Әллә ҡасан әйттем. Һаман һуҙаһың.

Ҡарабай. Йә ярай, өлгөрөрбөҙ. Асыҡтырып китте. Бынау күк сепрәкте мөгөҙөм менән саҡ соҡоп сығарҙым. Хужабикә һайғау тишегенә нык итеп ҡыҫтырған.

Аҡанай. Уны нимә тип алаһыңдыр?

Ҡарабай. Бәй-бәй, шыршыбыҙҙы биҙәргә. Ҡара! *(Шыршыға килеп теге сепрәкте матурлап элеп ҡуя.)* Күрҙеңме? Бөйрәкәйебеҙ йоҡонан уянғанса, шыршыбыҙ тәтәй буласаҡ.

Аҡанай. Мә, бынау йылтыр көрөшкәне лә элеп ҡуй. Аҙбарҙа шунан да матур әйбер тапманымсы?

Ҡарабай. Бара, бара, йә тиҙерәк. Минең мөгөҙөмә эл. Өҫкәрәк ҡуяйым. *(Элеп ҡуя.)*

Аҡанай. Ҡара әле, Ҡарабайым, ә улар килгәндә мин ниндәй күлдәгемде кейермен икән? Әллә сәсемә ошо сәскәләрҙән таҡыя үреп тағайыммы?

Ҡарабай бесәнлеккә барып бесән ашай башлай.

Аҡанай. Ҡарабай, тим.

Ҡарабай. Бара, бара, Аҡанай! Әйҙә, тырыштыр.

Аҡанай. Әй, юҡ, шыршыбыҙ насар биҙәлгән. Сәскәләрҙе лә эләйем. *(Элә.)* Ҡарабай, ҡара әле.

Ҡарабай. Шәп-шәп. (*Ашай.)* Ҡунаҡ килеүгә нимәләр әҙерләрбеҙ икән табынға? Ваҡыт аҙ ҡалған түгелме, әсәһе?

Аҡанай. Эйе шул. Бөтөнләй иҫемдән сыҡҡан. Торма әле ашанып. Тәүҙә эште эшләйек.

Ҡарабай. Һөт, ҡаймаҡтарҙы сығарырға кәрәк булыр.

Аҡанай. Әйҙә, йәһәтерәк! *(Сығалар.)*

## Икенсе күренеш

Бесән аҫтынан Шыртлан — ҡомаҡ килеп сыға.

Шыртлан. Фу, бынау Ҡарабай ҡотомдо ғына алды бит әй. Бесән менән ҡуша мине лә ашай тип торам. Ярай сығып киттеләр. Бирермен мин һеҙгә! Байрам, ҡунаҡ тигән булалар.Тәк-тәк. Былай булмай. Уйларға кәрәк. Бер үҙемдең генә баш етмәй. Әһә! *(Кеҫәһенән кеҫә телефоны ала. Шылтырата башлай.)* Алло! Миңә Тәңкәбай кәрәк ине. Йә, аҡсаңды һанап бөтөрҙөңмө? Тиҙ генә бында кил әле. Миллионлыҡ эш бар. *(Тыңлай.)* Ярай, көтәм. *(Телефонды һала ла шыршы янына килә.)* Тапҡандар мәрәкәне. Шул да булдымы эш. Бер ағасты килтереп шунда ҡый-һай элергә. Вәт иҫәрҙәр! Кемде көткәнегеҙҙе беләм мин. Һеҙ генә түгел, мин дә компьютерҙан электрон почтаны уҡый беләм. «Иртәгә һеҙҙең ауылға киләм. Әҙер тороғоҙ. Кем дә кем Шыршыһын матур итеп биҙәп ҡуя, шуға... *(Шыршынан булған тәтәйҙәрҙе алып ырғыта башлай. Көлә.)* Хәҙер шыршыһын да алып ырғытырмын. *(Кемдер килә.)* Кемдер килә шикелле. Йәшенергә кәрәк. Теге Ҡарабай булып ҡуймаһын. *(Кире барып бесән йәшниге артына йәшенә.)*

Сәхнәгә Тәңкәбай сығa. Ул эсе кәпәйгән, бик ҡәнәғәт йөҙлө һимеҙ сусҡа.

Тәңкәбай. Хрю, хрю! Ошо аҙбар буғай. Эй, Шыртлан. Сыҡ, ҡайҙа йәшендең? Ҡайҙа минең миллионым?

Шыртлан килеп сыға.

Шыртлан. О-о-о, Тәңкәбай, ҡайһылай матурайып киткәнһең? Иртәгә үк һуйып... ой, фотоға төшөрөп гәзиткә, юҡ, журналға баҫтырып була һине.

Тәңкәбай. Йә, йә, үҙемдең матур икәнемде һин әйтмәһәң дә яҡшы беләм. Ҡайҙа?

Шыртлан. Ней бит әле. *(Түмәргә урын әҙерләй. Өҫтөнә бесән килтереп һала.)* Бына ошонда ултыр әле. Хәҙер төшөндөрәм.

Тәңкәбай ултыра.

Шыртлан. Һин Ҡарабай менән Аҡанайҙы беләһең бит!

Тәңкәбай. Беләм, беләм. Ҡарабайҙың исемен ишетеү менән тәндәрем земберләп китә. Былтыр нисек ыҙалатты ул мине. Бер тапҡыр ғына уға тигән ярманы ашағайным, кәртә буйлап уратып баҫтырҙы, ҡәһәрең. Саҡ-саҡ һайғау тишеген табып ҡасып ҡотолдом. Уф! Йә шунан!

Шыртлан. Һин генә ҡотҡара алаһың, Тәңкәбай, һин генә. Мине лә бик ыҙалата бит ул. Көн күрһәтмәй. Һин булғанда рәхәт ине. Үҙең ашаған ризыҡтан өлөш сығара инең. Ә былар? Үлмәҫлек кенә саҡ ялап өлгәрәм. Кәритәнең ситенән генә...

Тәңкәбай. Мин ашығам. Йыл буйына йыйылған аҡсаларҙы һанап бөтмәгәнмен.

Шыртлан. Эш былай тора. Хәҙер бына ошонда, аҙбарға Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу килеп, киләһе йылды Бөйрәкәйгә тапшырырға тейеш. Әле Бөйрәкәй йоҡлай. Ә Ҡарабай менән Аҡанай баҙға төштө.

Тәңкәбай. Шунан ни булған?

Шыртлан. Һинең киләһе йылға хужа булғың киләме?

Тәңкәбай. Бәй-бәй, мин яңыраҡ ҡына йыл буйы хужа булдым да инде. Етәр, сама белергә кәрәк. Ун ике, әй, ун бер йылдан тағы ла әйләнеп килә бит ул түрәлек.

Шыртлан. Аңлашыла. Ә бына минең бер ҙә хужалығымдан яҙғым килмәй? Йыл буйы эй рәхәтләнгәйнем — бөтә эшемде башҡалар эшләй. Мин хужа булғас ни, тегене алып кил, быны бир, тип ҡушып тик яттым. Бына иртәгә...

Тәңкәбикә. Нишләп тик ята, ти. Һин бик күп изге эштәр башҡарҙың — илебеҙҙә күп үҙгәрештәр булды. Яңы, йәш, аҡыллы президент һайланды, сит илдәр менән бәйләнештәр яҡшырҙы, беҙҙең республикала ла яңы мәктәптәр, клубтар, заводтар асылды, тағы ла... күп яңы бәпәйҙәр тыуҙы...

Шыртлан. Тик ятманым былай. Йылым бик бәрәкәтле үтте. Тик... бер эшем эшләнмәй ҡалды. Беләһеңме, мин ҡышҡыһын бик ныҡ өшөйөм. Шуға Төркиәнән мутон тунға заказ биргәйнем. Шуны килтереп еткермәнеләр. Хәҙер киләһе йылды Бөйрәкәйгә бирһәләр, йә, әйт, нимә эшләргә? Йылымды үҙемдә ҡалдырһам, тунымды һиңә лә биреп торормон. Һинең дә туның йоҡа бит.

Тәңкәбай. Уйларға кәрәк, уйларға. Һин Бөйрәкәй йоҡлай тинеңме? Хрю-хрю.

Шыртлан. Әйе!

Тәңкәбай. Әйҙә былай итәйек. *(Ҡоллағына ғына ниҙер әйтә. Көлөшәләр.)* Эй, башлыһың да Шыртлан. Һинең үлсәмең тура килә тиһең инде. Әйҙә һуң. *(Сығып китәләр.)*

Сәхнәгә ашығып Ҡарабай менән Аҡанай сыға. Ҡулдарында йомғаҡлы май, банкала ҡаймаҡ, ҡорот, эремсек.

Ҡарабай. Аҡанай, ҡайҙа ҡуяйым? *(Йомғаҡлы май тотоп йүгермәләй. Тәтәйҙәре төшкән шыршыны күреп ҡала ла аптырауҙан майын төшөрөп ебәрә.)* Ыстағәфирулла! Аҡанай, ҡара әле?

Аҡанай. Атаҡ-атаҡ! Ниңә майҙы ергә ташланың? *(Барып ала.)* Үҙең яһамағас, ҡәҙерен белмәйһең. Ошо бер йомғаҡ май эшләр өсөн бер биҙрә һөт кәрәк. Бер биҙрә һөттән бер сеүәтә ҡаймаҡ сыға. Бер сеүәтә... *(Шыршыны күреп ҡала.)* Йә Хоҙай! Кемдең этлеге икән? Былай ҙа өлгөрә алмай бер булабыҙ.

Сәхнәгә бер-бер артлы йүгерешеп Әтәс, тауыҡтар сыға.

Әтәс. Киләләр, киләләр... ҡыт-ҡытаҡ! Киләләр!
Беренсе тауыҡ. Етеп кенә киләләр.
Икенсе тауыҡ. Туп-тура был һарайға киләләр.
Өсөнсө тауыҡ. Ҡыш Бабайҙың һаҡалы аҡ ҡына.
Дүртенсе тауыҡ. Ҡарһылыуҙың туны йомшаҡ ҡына.
Аҡанай. Йә, сеүегеҙ! Ғауғалашмағыҙ!
Ҡарабай. Смирно! Стройся!

Тауыҡтар бер рәткә теҙелә.

Ҡарабай. Улар беҙгә генә түгел, башҡа һарайҙарға ла инеп ҡарарға тейеш. Һеҙгә мөһим эш ҡушабыҙ. Беҙҙең шыршыбыҙ әле әҙер түгел. Берегеҙ Ҡыш Бабайҙарҙы икенсе аҙбарҙарға алып китә тора. Ә беҙ ул арала күмәкләп шыршыны биҙәйбеҙ.

Тауыҡтар. Урра!

Әтәс. Кем, кем бара?

Икенсе тауыҡ. Мин шыршы биҙәйем.

Өсөнсө тауыҡ. Мин дә.

Дүртенсе. Мин... мин барайыммы?

Әтәс. Молодец! Батырһың икән. Иртәгә минең янға килерһең. Бүләкләрмен.

Дүртенсе тауыҡ сыға. Ҡалғандары кеҫәләренән матур тәтәйҙәр алып шыршы биҙәйҙәр. Ҡарабай менән Аҡанай өҫтәл әҙерләй.

Ҡарабай. Әсәһе, Аҡанайым, инде Бөйрәкәйҙе уятырға кәрәк. Шунан һуң ғына Ҡыш бабайҙы саҡырырбыҙ.

Аҡанай. Хәҙер, атаһы. Үҙем уятайым. *(Сыға башлай. Шул саҡ ишек төбөндә «Мө-ө, м-ө-ө!» тигән тауыш ишетелә.)* Эй, аҡыллымды! Үҙе уянған да. Хәҙер-хәҙер асам. *(Ишеккә бара.)*

Ҡарабай. Туҡта, туҡта! Тауыҡтарҙан ҡурҡып ҡасып китмәһен. Өркәк кенә бит. Саҡ ҡына сабыр ит. *(Тауыҡтарға.)* Йә, егәрлеләрем, эшегеҙ бөттөмө? Шәп, бик матур булған шыршыбыҙ! Рәхмәт! Теҙелегеҙ!

Тауыҡтар теҙелә.

Ҡарабай. Смирно! Ишеккә ҡарай шагом марш!

Тауыҡтар бер иш атлап ишеккә бара.

Ҡарабай. Стой, раз-два! *(Туҡтайҙар.)* Хәҙер шымығыҙ! Мин һеҙҙе ышыҡлап торам. Бөйрәкәй ингәс, сығырһығыҙ.

Ишекте аса. Бөйрәкәй инә. Тауыҡтар сығалар.

Тәңкәбай *(ул Бөйрәкәй кеүек тун кейеп алған)*. Әсәй, мәмәй бир. Асыҡтым!

Аҡанай. Мә, мә, аҡыллым! *(Ҡаймаҡ бирә. Сусҡа ҡаймаҡты бөтөргәнсе эсә.)*

Тәңкәбай. Тағы ла.

Аҡанай. Мә, мә! *(Май бирә. Сусҡа майҙы ла һоғона.)*

Тәңкәбай. Әсәй! Эремсек ашағым килә!

Ҡарабай *(аптырап)*. Бөйрәкәй, Бөйрәкәй, бәләкәсем, һин бит, беҙҙең табынды...

Аҡанай. Йә, ярар, шым. Аша-аша, бәләкәсем. Бигерәк оҙаҡ йоҡланың шул, асыҡҡанһыңдыр.

Бөйрәкәй эремсекте лә ашап бөтә.

Ҡарабай. Мин, мин тағы ла баҙға йүгерҙем. *(Йүгереп сығып китә.)*

Аҡанай. Бөйрәкәйем, бәләкәсем, ҡайһылай эсең ҙурайып киткән?

Бөйрәкәй. Әле генә күп итеп ашаным бит. Әсәй, ә ҡасан Ҡарһылыу килә?

Аҡанай. Ҡарһылыу? Ә һин уны ҡайҙан беләһең?

Бөйрәкәй. Белмәйем. Күргем килә. Ана, тышта тауыҡтар, Ҡарһылыу килә, тине. Уның менән баҫтырыш уйнарға яраймы, әсәй. *(Быҙауҙың аяҡтарына иғтибар итә.)*

Аҡанай. Ярай, тик һинең аяҡтарың нишләп улай ҡыҫҡарып китте икән?

Ишеккә туҡылдаталар. Аҡанай йүгереп барып аса. Ҡарһылыу менән Ҡыш бабай килеп инә.

Ҡыш бабай. Һаумыһығыҙ!

Ҡарһылыу. Йылы аҙбарға сәләм!

Аҡанай. Һаумыһығыҙ!

Ҡыш бабай. Ҡайҙа һеҙҙең шыршығыҙ?

Ҡарһылыу. Баянан бирле эҙләйбеҙ. Әлегә бер һарайҙа ла...

Ҡыш бабай. Ҡара әле, Ҡарһылыу. Иҫ китмәле! Һай, уңғандар!

Ҡарһылыу *(һоҡланып)*. Шәп! Күҙҙең яуын алып тора.

Ҡыш бабай. Улай булғас... килтер серле ҡыңғырауҙы.

Ҡарһылыу *(ҡыңғырау бирә)*. Серле теләктәреңде әйтергә онотма инде, Ҡыш Бабай!

Ҡыш бабай. Беҙ ошо ҡыңғырауҙы һеҙҙең быҙауға тапшырырға теләйбеҙ. Киләһе йылда шул быҙау йыл буйы хужа булып, йылды ҡабул итеп алырға тейеш.

Аҡанай. Бөйрәкәй. Уның исеме Бөйрәкәй. Кил бында.

Бөйрәкәй килә.

Аҡанай. Һаулыҡ һораш!

Тәңкәбай. Һаумы, хрю!

К ы ш   б а б а й . Туҡта, туҡта, беҙ Яңы йылды тапшырыр алдынан Бөйрәкәйгә бер мәҡәл әйтәбеҙ. Унда бер һүҙ төшөп ҡалған. Шуны табырға тейешһең. Әҙерһеңме?

Т ә ң к ә б а й . Эйе.

К ы ш   б а б а й . Әсә һөтө менән инмәгән, кемдең һөтө менән инмәй?

Т ә ң к ә б а й . Беләм, беләм, әйтәйемме? Әсә һөтө менән инмәгән, сусҡа һөтө менән инмәй, вәт! Белдегеҙме?

Ҡ а р һ ы л ы у *(көлә)*. Кем, кем? Сусҡа, тиме?

Т ә ң к ә б а й . Минең әсәйем шулай ти торғайны.

А ҡ а н а й . Юҡсы, юҡ, нишләп алдашалыр?

Ҡ а р һ ы л ы у . Ҡыш бабай, әллә был быҙауға бирмәй торайыҡмы Яңы йылды?

А ҡ а н а й . Бирегеҙ, бирегеҙ, ул аҡыллы ул! Әле шаяртып ҡына әйтте.

Ҡ ы ш   б а б а й . Шаяндар һәр ерҙә лә кәрәк, шулаймы, балалар! Беҙҙең ваҡытыбыҙ тарыраҡ шул. Тағы ла бер нисә һорау бирер инек тә...

Ҡ а р һ ы л ы у . Былай аҡыллы ғына быҙау күренә. Шыршыны ла матур биҙәгәндәр.

Ах та ух килеп, Ҡарабай инә. Ҡулында ашамлыҡтар.

Ҡ а р а б а й . Уф, өлгөрҙөм шикелле. Бына, барыһынан ауыҙ итегеҙ. Майы, ҡорото, эремсеге...

Ҡ ы ш   б а б а й . Вәт рәхмәт, асыҡтыра башлағайны инде. Әйҙә, Ҡарһылыу, килтер ҡыңғырауҙы. Эшебеҙҙе тамамлайыҡ та...

Ҡыңғырауҙы алып Бөйрәкәйҙең муйынына кейҙерә. Шомло көй яңғырай. Тышта ғауғалы тауыш ишетелә. «Ҡарауыл! Тотоғоҙ! Алдаҡсылар!» тип ҡысҡырышалар.

Ҡ а р һ ы л ы у . Ҡыш бабай, әлегә теләктәреңде әйтмәй тор! Ишетәһеңме?

Ул арала ишектән Шыртлан менән Әтәс баҫтырышып килеп инәләр.

Ә т ә с . Минән ҡасып ҡотола алмаҫһың. Беҙҙе алдарға уйланыңмы?

Ишектән тауыҡтар уртаһында Бөйрәкәй сыға.

Т а у ы ҡ . Әйҙә, әйҙә, Бөйрәкәй, кил уртаға!

Ҡ ы ш   б а б а й . Тағы ла бер Бөйрәкәй?

Ҡ а р һ ы л ы у . Икеһенең береһе ысын быҙау.

К̡ ы ш   б а б а й. Әллә игеҙәк быҙауҙарығыҙ бармы?

А к̡ а н а й. Юк̡сы. Юк̡...

Әтәс Шыртландың яғаһынан тотоп алып килә.

Ә т ә с. Бына, шилма к̡омак̡. Беҙҙең себештәргә көн күрһәтмәүең етмәгән, быйыл да йылға хужа булыр өсөн шулай к̡ыланған. Йә, үҙең әйт! Юғиһә, К̡ыш Бабайҙың сихыры көслө. Улай хәйләләшһәң, башк̡а бер к̡асан да һиңә йыл бирмәйәсәк.

Ш ы р т л а н. К̡ыш бабай, К̡арһылыу, беҙ шаяртырға ғына уйлағайнык̡.

А к̡ а н а й. К̡айһынынһы минең Бөйрәкәй әле ул?

Б ө й р ә к ә й. Әсәй. Бына бит мин! *(Килеп к̡осак̡лап ала ла сикәһенән ялай.)*

А к̡ а н а й. Уф, телгенәһе! Һин мине гел шулай к̡осак̡лап ялайһың. Нисек шуға ла иғтибар итмәгәнмен?

Ә т ә с. Бар, үҙең ас этлегеңде.

Шыртлан килеп сусk̡аның арк̡аһынан быҙау тунын ала. Муйынсак̡ты К̡ыш бабайға бирә.

Ш ы р т л а н. Ғәфү итегеҙ инде.

С у с к̡ а. Бынау Шыртланды тыңлап хур булдым. Оят! Мине лә ғәфү итегеҙ!

К̡ ы ш   б а б а й *(балаларға)*. Әллә, байрам хөрмәтенә, ғәфү итәбеҙме? Ярай, һеҙҙеңсә булһын!

Ш ы р т л а н. Беҙ башк̡аса улай итмәҫбеҙ.

С у с к̡ а. Алдашмаҫбыҙ!

К̡ а р һ ы л ы у. Йә, Бөйрәкәй, Яңы йылды к̡абул итергә әҙерһеңме?

Б ө й р ә к ә й. Әҙер!

К̡ ы ш   б а б а й. Бына һиңә Яңы йыл к̡ыңғырауы. Йыл буйына сисмә! Ул к̡ыңғырауҙы ишеткән кешеләрҙең барыһы ла иҫән-һау, бәхетле булһындар! Күберәк кеше бәхетле булһын тиһәң, муйыныңды һелкеп к̡ыңғырауҙы нығырак̡ сыңғыратып йөрө. Егәрле бул! Эшең күп быйыл һинең. Хужа булыуы еңел түгел.

Б ө й р ә к ә й. Тырышырмын, К̡ыш Бабай. Рәхмәт!

К̡ а р һ ы л ы у. Ә теге мәкәлдең серле һүҙен әйтмәне бит әле Бөйрәкәй.

Б ө й р ә к ә й. Нindәй һүҙ ул?

К̡ ы ш   б а б а й. Тыңла. Әгәр ҙә ошо һүҙҙе дөрөҫ әйтһәң, йыл тулыһынса һиңә күсә. Йә һынап к̡арайык̡ әле. Әсә һөтө менән инмәгән... йә дауам ит?

Бөйрәкәй. Әсә һөтө менән инмәгән, ... иҫләнем, иҫләнем, әсәйем миңә әйткәне бар уны. Әсә һөтө менән инмәгән тана һөтө менән инмәй, ти торғайны. Дөрөҫмө?

Ҡыш бабай. Һай, афарин, Бөйрәкәй. Аҡыллы ла икәнһең үҙең. Әсәйҙәрҙең әйткәнен гел тыңлап йөрөгән балалар шулай аҡыллы булалар.

Ҡарһылыу. Улай булғас, мә, Ҡыш бабай, ас, тоғоңдо. Яңы йылды ҡотлап, барыһына ла бүләктәр тарат!

Ҡыш бабай тоғон аса.

Ҡыш бабай. Килегеҙ. Бына, Аҡанай, һиңә Яңы йылда кейергә ебәк күлдәк. Ҡарабайға — йылтыр салбар. Әтәскә батыр булғаны өсөн — өр-яңы көмөш салғы. Тауыҡтарға — йылы ойоҡбаштар. Аяҡтарығыҙ ҡыш көнө өшөмәһен! Балалар, барыһына ла биреп бөттөкмө?

Балалар. Юҡ, Шыртлан менән Сусҡа ҡалды.

Ҡыш бабай. Уларға ла бирәйекме?

Барыһы бергә. Бирәйек, бирәйек. Бөгөн байрам бит!

Ҡыш бабай. Ярай, улайһа. Шыртлан, кил әле. Кисә генә миңә посылка килеп төштө. Һин Төркиәнән тунға заказ ебәргәнһең икән. *(Тун бирә.)*

Шыртлан. Вәт рәхмәт, Ҡыш бабай! Яңы йыл алдынан теләктәр ҡабул була тиҙәр ине. Рәхмәт!

Ҡыш бабай. Ә һиңә, Тәңкәбай, аҡсаларыңды дөрөҫ иҫәпләр өсөн — калькулятор.

Тәңкәбай. Рәхмәт. Инде гел дә изгелектәр ҡылып ҡына йәшәрмен!

Ҡарһылыу *(Ҡыш бабайға бер таяҡ тоттора)*. Байрам булғас, байрам булһын!

Ҡыш бабай *(таяғы менән һелтәп)*. Бер, ике, өс! Шыршыға уттар! Бер, ике, өс! Яңы йыл менән, дуҫтар!

Шыршыла уттар терелә.

Ҡарабай. Әйҙәгеҙ, барығыҙ ҙа табынға! Һөт, ҡаймаҡ, эремсек, сыр, ҡорот менән һыйланырға...

Барыһы ла табын артына баҫа. Шатланышалар.
Күңелле көй яңғырай.

Барыһы бергә. Яңы йыл килә ергә! Бәрәкәт, бәхет һеҙгә!

**Шаршау**



# СИҢЕРТКӘНЕҢ ТЫУҒАН КӨНӨ

*Кескәй балаларға нота өйрәтеү*

Балалар баҡсаһына тиклемге кескәй балаларға нота белемен бер аҙ өйрәтеү өсөн махсус сценарий. Бында уға пианиноның ҡаралы-аҡлы баҫҡыстары төшөрөлгән ҡатырға яһап биреп, ҡайһы өндө сығарыу өсөн ниндәйенә баҫырға кәрәклеген аңлатырға мөмкин. Ысын фоно (пианино, фортепиано, синтезатор һ. б.) менән тағы ла ҡулайыраҡ булыр. Китап, журналдарҙан телгә алынған әйбер йә бөжәк һүрәттәрен ҡырҡып алып, уларҙы ла ҡағыҙға йәбештереп, күргәҙмә материалдар әҙерләргә лә мөмкин. (Асылда, был яҙманы музыкаль китап итеп баҫтырыу өсөн махсус яҙҙым).

*Автор*

**Инеш өлөш**

* * *

**Д**әфтәремә бояп-бояп,
**Р**әсем төшөрөп ҡуям:
**МИ**скә өҫтөндә ҡуян,
**ФА**рфор көршәктә — йылан,
**СОЛ**андан сыҡҡан сысҡан,
**Л**әлә сәскәһен тотҡан —
**СИ**ңерткәнең тыуған көнө,
**Д**уҫтары килгән ҡотлап!

*(Инеш өлөш. Акростих. Тәүге хәрефтәре нота станы тәртибендә бирелгән. Һүрәттәге әйберҙәргә нотаның исемен яҙырға мөмкин. Мәҫәлән, мискәгә — «МИ», көршәккә — «ФА», сысҡандың майкаһына — «СОЛЬ», сәскәнең таҡыяһына — «ЛЯ», сиңерткәнең түшенә — «СИ» һ. б. Бала тәүҙә күрергә, унан ишетергә һәм уйнарға тейеш.)*

* * *

Һәр шиғырҙы уҡығас, нотаны уйнарға өйрәтегеҙ.

**«ДО»**

**«ДО»** — атаһы сиңерткәнең
Йыр йырларға теләгән,
Унының тауышынан ҡурҡып,
Сысҡан илап ебәргән.

**«РЕ»**

**«РЕ»** — өлкән ағаһы килгән
Атаһына ярҙамға,
Алмаш-тилмәш йырлағандар —
Көй сыҡмаған һаман да.

**«МИ»**

**«МИ»** исемле апаһын да
Саҡырғандар йырларға:
**«До», «Ре», «Ми» лә, «Ми», «Ре», «До»** —
Оҡшамаған был көй һис тә
Ҡуян менән йыланға.

**«ФА», «ЛЯ»**

**«ФА»** исемле ағаһы ла
Ҡайтып еткән һунарҙан —
**«До», «Ре», «Ми», «Фа»,**
**«Ре», «Ми», «Фа»** —
Оло ғауға сығарған!
«Ниңә беҙҙе көтмәйенсә
Йырлай башланығыҙ, — ти, —
**«ЛЯ»** — һеңлемде,

Әсәйемде
Эҙләп тапманығыҙ!» — ти.

**«СОЛЬ»**

**«ЛЯ»** — ҡулъяулыҡ сигә икән
Сиңерткәгә бүләккә,
**«СОЛЬ»** — әсәһе бәлеш ҡуйған,
Өҫтөн һырлап, биҙәкләп...

* * *

**До, ре, ми, фа, ля, соль, фа...**

Сиңерткә, ҡуян, сысҡан,
Ана, бейергә сыҡҡан.
Тороп ҡалған тик йылан —
Булмай, ти, былай йырлап.

**«СОЛЬ»** — әсәй килде.
Ҡулында
Хуш еҫле тәмле бәлеш!
«Йәгеҙ, баҫығыҙ сиратлап,
Кем йырлай — шуға өлөш!»

**«До, до, ре, до, фа, ми,**
**До, до, ре, до, соль, фа...»**
**«ЛЯ»** менән **«СИ»** — сиңерткә
Уртаға сыҡты шул саҡ.

*(Был ноталар инглиз телендәге «Хеппи бөзди ту ю» йәғни «Тыуған көнөң менән» тигән йырҙың тәүге ике юлынан алынған.)*

**«СИ»** уйнаны скрипкала,
**«ЛЯ»** ҡушылып йырланы,
Тағы ла бер ҡунаҡ килде —
Атайымдың туғаны.

(*Октаваны ябып торған нәҙек «ДО» нотаһын уйнарға өйрәтергә.*)

**«ДО»** — атайҙың тауышына
Бәләкәй «До» ҡушылды —
**«До, До, До, Ля**
**Фа, Ми, Ре, До...»**
Бына матур йыр булды!

*(Был шиғырҙы уҡығас, «Тыуған көнөң менән» йырының өсөнсө юлы уйнала.)*

## Башҡорт халыҡ әкиәттәре буйынса йыр һүҙҙәре

### ҠОШ ЮЛЫ

Торналар юлында
Йондоҙҙар яндылар,
Бәләкәй торналар
Алыҫта ҡалдылар,
Бәләкәй ҡанаттар
Талдылар, талдылар.

**Ҡушымта:**
**Ҡаҡ-ҡаҡ-ҡаҡ, торналар**
**Осалар, осалар.**

«Аҙашма, ҡошсоғом!» —
Тип әсә ҡайғыра,
Юлында ҡошсоҡҡа
Ҡауырһын ҡалдыра.
Бәләкәй торналар
Шул юлдан барҙылар.

**Ҡушымта:**
**Ҡаҡ-ҡаҡ-ҡаҡ, торналар**
**Осалар, осалар.**

Ҡауырһын ҡош юлын
Торналар табалар,
Юл буйлап, аҙашмай,
Бик оҙаҡ баралар.

Ҡош юлы, ҡош юлы —
Йондоҙҙар яналар.

**Ҡушымта:**
**Ҡаҡ-ҡаҡ-ҡаҡ, торналар**
**Осалар, осалар.**

## АЙ МЕНӘН ЗӨҺРӘ ҠЫҘ

Мискәгә һыу тултыр, тине
Зөһрәгә үгәй әсә.
«Бөгөн өлгөрә алмаһаң,
Һыу тултыр иртәнгәсә».

**Ҡушымта:** **Ай, мине ал,**
**Йәшәйем Айҙа.**
**Иркәләп һөйөр**
**Әсәйем ҡайҙа?**

Үгәй әсә әйтмәй генә
Мискәнең төбөн тишкән.
Зөһрә һыу килтереп ҡоя,
Тулмай ҙа тулмай мискә.

**Ҡушымта:** **Ай, мине ал,**
**Йәшәйем Айҙа.**
**Иркәләп һөйөр**
**Әсәйем ҡайҙа?**

Көн ташыған, тултырмаған
Төн ташыған, арыған:
«Ай, мине ал!» — тигән икән,
Ай саҡырған янына.

**Ҡушымта:** **Ай, мине ал,**
**Йәшәйем Айҙа.**
**Иркәләп һөйөр**
**Әсәйем ҡайҙа?**

## ӘТӘС МЕНӘН ТАУИС ҠОШ

1. Әтәстең ҡойроғо бар ине,
Ҡупшыҡай, зәңгәр-күк, аҡ ине.

**Ҡушымта: Кики-ри-күк, кики-ри-күк,**
**Ҡойроҡ матур, зәңгәр-күк.**

2. Әтәстән һораны тауис-ҡош,
Ҡойроҡто миңә лә тағып ҡуш.

**Ҡушымта: Кики-ри-күк, кики-ри-күк,**
**Ҡойроҡто бир иртән иртүк.**

3. Тауис-ҡош ҡойроҡто алды ла
Ҡасты шул алыҫ тау артына.

**Ҡушымта: Кики-ри-күк, кики-ри-күк,**
**Ҡойроҡто бир бөгөн кис үк.**

4. Әтәскәй ҡойроҡто тапмағас,
Ҡысҡыра иртә, кис, таң тыуғас.

**Ҡушымта: Кики-ри-күк, кики-ри-күк,**
**Ҡойроҡто бир миңә тиҙ үк.**
**Ҡойроҡто бир иртән иртүк,**
**Ҡойроҡто бир, кикирикүк!**

## ЕТЕГӘН ЙОНДОҘ

1. Ете сибәр ҡыҙ сығалар
Еләккә,
Сылтыр-сылтыр сыңлап китә
Силәктәр.
Бер аждаһа сыға ағас
Артынан,
Ете ҡыҙҙы тотам, тиеп,
Баҫтыра.

**Ҡушымта: Ете, ете, етегән,**
**Етегән йондоҙ,**
**Һәр йондоҙсоҡта**
**Йәшәй сибәр ҡыҙ.**

2. Аждаһанан ҡасты улар,
Йүгерә,
Силәктәге еләктәре
Түгелә.
Һикерәләр бейек күккә
Тоттормай,
Әйләнәләр сибәр ҡыҙҙар
Йондоҙға.

**Ҡушымта:** **Ете, ете, етегән,**
**Етегән йондоҙ,**
**Һәр йондоҙсоҡта**
**Йәшәй сибәр ҡыҙ.**

## УМЫРЗАЯ

1. Ярлы ҡыҙға ғашиҡ булған
Бай егет, бай егет,
Көн дә килгән ҡыҙ янына
Тай егеп, тай егеп.

2. Ҡыҙ ҙа ғашиҡ булған икән
Егеткә, егеткә,
Бай атаһы асыуланған
Белеп тә, белеп тә.

3. Егет әйткән, мин ул ҡыҙҙы
Яратам, яратам,
Атай әйткән, ҡарғышымды
Таратам, таратам.

4. Атай әйткән, кәрәк икән
Йәш кәләш, йәш кәләш,
Үҙең ҡар бул, ҡыҙ әйләнһен
Сәскәгә, сәскәгә.

5. Егет-ҡарҙы яҙ еткәс тә
Йыл һайын, йыл һайын
Умырзая-ҡыҙ ҡаршылай
Йылмайып, йылмайып.

# ТӘРЖЕМӘЛӘР

## Манира Фәрәхетдинова

### ВАЛЬС

Бәлә килгәндә лә тын минуттар була.
Бәләнең дә була зәңгәр офоғо.
Ауыртыныу зарын һүндерәм дә тәҙрә асам
Гөлсирендең ыуыҙ япраҡ еҫтәренә,
Ҡайын шауы, ҡап-ҡара төн ҡосағына,
Ғаләм шауы, төнгө усаҡ төтөнөнә...
Бер минутҡа һағыштарым онотам да
Таңға ҡәҙәр ысыҡтарҙы кисеп үтәм.

Әйҙә ошо ысыҡтарҙың
тәнде өткән
Һалҡынлығы йөрәгемде хәнйәр кеүек
Телеп үтһен,
ә мәңгелек бер һағышым
Яурынымдан һыпырылһын шәлдәр кеүек...

Бирһен миңә ирек, юлдар, йылға-һыуҙар,
Осоу хисен, мөхәббәтем бышылдауын.
Мәңгелеккә түгел, тик бер мәлгә генә
Вальс көйөнә әйләндерһен ошо тауыш...
Бер, ике, өс...

* * *

Белгең килә,
Тереме мин?
— Тере.
Белгең килә,
Яңғыҙмы мин?
— Эйе.
Белгең килә

Көттөммө мин?
— Көттөм.
Ҡояш миңә
Килер юлың
Өттө.
Тәҙрәмдәге ямғыр ғына
Утты
Һүндереп тә
Һыуға күмеп
Үтте.
Ә мейестә өй эйәһе
Йәшәй ине,
Йортобоҙҙо күҙ-ҡаранан
Һаҡлай ине.
Һәм йортомдо аҡ томанға
Япҡан ине...

* * *

Айныҡтырма мине, айныҡтырма,
Һинең утта дөрләү — ләззәт бит,
Татлы һүҙҙәр ҡолағымда
Йөрәккенәм өсөн йәннәт бит.

Айныҡтырма мине, айныҡтырма,
Серле бер моң менән күңел тулы —
Алыр бүләгем юҡ был тормоштан!
Иң ҙур бүләк — таңғы төшөң булыу.
Айныҡтырма мине, айныҡтырма!

*Рус теленән тәржемә*

**Римма Шәйәхмәтова**

**КҮҢЕЛЕМ МОҢО**

Үпкәләйҙәр, ниңә һаман тиҙәр
Өйрәнмәйһең тыуған башҡорт телен,
Бик үкенес,
шиғыр яҙаһың бит
Рус телендә генә ниңә гелән?

Беләм, миндә башҡорт ҡаны йәшәй,
Күңелемдә — тыуған ергә һөйөү,
Рус телендә яҙам, ихлас яҙам,
Башҡорт телен һөймәгәнгә түгел.

Бәләкәйҙән русса уҡыттылар,
Ошо телдә уй-хыялдар ҡорҙом.
Ниндәй генә телдә яҙһам да мин,
Барыһынан бөйөк— күңел моңо.

## ЯҘҘЫ КӨТКӘНДӘ

Күңелһеҙ моңһоу һүрәтле
Календарь тора.
Март уртаһы. Ә урамда
Буран ҡотора.

Кешеләр өмөтөн өҙмәй
Яҙҙы көтәләр,
Ҡарҙар тәҙрәгә сәләмен
Яҙып китәләр.

Яҙһылыу килер, туғайҙар
Сәскәгә тулыр,
Күңелдәргә илһам өҫтәп
Мөхәббәт тыуыр!

## ЙӘШӘЙ ГЕНӘ БАШЛАЙБЫҘ

Йылдан-йыл мин матураям,
Үҫәм бит, үҫәм шуға.
Ә апайым аптырата,
Әллә ни булған уға?

Көн дә иртән уянғас та
Бер үк һүҙҙе ҡабатлай:
«Тағы бер көнгә ҡартайҙыҡ,
Ваҡыт елә, шәп аттай».

Ә мин әйтәм: «Юҡ, апаҡай,
Үҙебеҙ шәп атларбыҙ.
Йәшлегебеҙ алда әле —
Йәшәй генә башлайбыҙ!

*Рус теленән тәржемә*

## Орхан Вәли

*Төркиә шағиры*

### БАЙРАМ

Ҡарғалар, ғәрип, ауырыу әсәйемә һөйләмәгеҙ!
Бөгөн ҡоштар тубы китте өйҙән ҡасып.
Хәрби булып китәсәкмен.
Һатмаһағыҙ мине, һеҙгә юйғыс алырмын,
Симит* алырмын,
Шәкәрле әтәс алырмын;
Һеҙҙе кәмә тирәсенә мендерермен, ҡарғалар,
Бөтөн ашамлыҡтарымды һеҙгә бирермен.
Ҡарғалар, ни булғанын әсәйемә һөйләмәгеҙ!

*1938*

### ТӨШ

Әсәйемде үлгән икән тип күрҙем төштә.
Илап уяндым.
Хәтерләтте миңә бер байрам иртәһендә
Күккә осороп ебәргән шарыма ҡарап
Илағанымды.

*1938*

### КҮЛӘГӘМ

Ялҡтым ҡалай эйәртеп йөрөп уны,
Йылдар буйы,
Аяҡтарым осонда;
Был донъяла бер аҙ йәшәй алырбыҙмы
Ул да үҙ алдына,
Мин дә яңғыҙ башыма.

*Анкара, 1937*

### БАШ АУЫРЫУЫ

I

Юлдар ни ҡәҙәре матур,
Төнө ни ҡәҙәр һалҡынса булһа,
Тәнең арыр,
Баш ауырыуы арымаҫ.

---

* *Симит* — ҡалас төрө

II

Өйөмә кергән сүрәттә
Бер аҙҙан сыға алырмын.
Әгәр ҙә был әсбаптар менән
аяҡ кейемдәре минеке булһа,
Урамдар бер кемдеке лә түгел.

*Анкара, 1938*

**НИ ТИКЛЕМ МАТУР**

Сәйҙең төҫө ниндәй матур
Иртә таңда,
Асыҡ һауала…
Һауа ни тиклем затлы!
Кескәй ир бала атлауы,
Инештәге һыу таты!

*1941*

*Төрөк теленән тәржемә*
*Өфө, 2011*

**Ғәли Аҡбаш**

*Төркиә шағиры*

**ҠАҘАҠ ҠӘБЕРЛЕКТӘРЕ**

Ана, Алматынан
Джамбул, Чимкентҡа ҡәҙәре
Сикһеҙ юлдар буйынса
Офоҡтарҙа йым-йым итеп,
Көмөш айҙар атылыр…
Бәлки, юғалған ғәскәрҙең
Күкте ярған һөңгөләре далала йылтырайҙыр!
Юҡһа яңы сәфәренән ҡайтып киләме Абылай хан!
Рухтар ҡалаһылыр был ерҙәге ҡәберлектәр…

«Аллаһ үлемһеҙ» тип яҙылғандыр ҡәбер таштарында,
Ҡыйырсыҡ ай аҫтында.
«Аллаһ үлемһеҙ…»

Ниндәй юлбаҫар һуйыр бынан һуң
Тик кәфендән ғибәрәт ул мәйеттәрҙе,
Йыландар, саяндар ашай шул серегән иттәрҙе
Түшәге — Ватан тупрағы,
юрғандары — ҡарҙыр,
Ҡытлыҡ, ҡырғын һәм ҡәһәрҙән үлгәндәрҙең
Иҫәп-һаны, моғайын да,
күктәге йондоҙҙарҙыр!
Рухтар ҡалаһылыр был ерҙәге ҡәберлектәр...
Дауылдар ҙа һис ҡурҡытмаҫ уларҙы бынан һуң
Ни ямғыр, ни бураны.
Сталин, Ленин, батшаны ла
һис тыңламаҫ улары.
Күҙҙәре — соҡор, быуындары — шығыр-шығыр,
Һөйәк — һөңгө, кәфен — байраҡ күккә сөйөр,
Наурузбей һәм Кенесары әйҙәп килер
Ҡурҡыныс бер ҡон ҡайтарыр ғәскәрҙер ул!
Рухтар ҡалаһылыр был ерҙәге ҡәберлектәр!

Аяуһыҙ ут дауылында
Семейҙә үлгәндәр,
Һәм тағы кисә,
Ҡан ҡоҫҡан көбәктәрҙе ҡаплап,
Елтуҡһанда үлгәндәр.
Уларҙың артында йәшәүҙән туҡтаған һөйөү ҡалды,
Әсәләр, аталар, үкһеҙ сабыйҙар ҡалды,
Әрнеүле йырҙар, үлемһеҙ дастандар ҡалды.
Исемһеҙ йондоҙҙар ише атылдылар күгебеҙҙән,
Күк бер тупраҡ ҡалдырҙылар...
Рухтар ҡалаһылыр был ерҙәге ҡәберлектәр...

Рухығыҙ шат булһын,
Оҙаҡ йылдар фатихаһыҙ ойоған ҡәрҙәштәребеҙ.
Бер Елтуҡһан һөйөү менән ҡалҡҡан өлкәгеҙ булһын,
Бынан һуң һис бушҡа китмәҫ
һеҙҙең түккән ҡандар,
Күк көмбәҙе аҫтында
һис тынмаҫ аҙандар,
Шәкәримдәр, Сейфулиндар, Мағжандар,
Рухтар ҡалаһылыр был ерҙәге ҡәберлектәр...

Ҡанығыҙ һыуға ҡушылды,
Тауыш елдә ҡыштырлай...

Бынан һуң һеҙгә айырма юҡ шул:
туфандырмы, ҡыштырмы,
Шәһиттәргә һәр миҙгел дә яҙҙыр,
Бик алыҫта һеҙҙең өсөн
Хәйер бирер, ясин уҡыр ҡәрҙәштәрегеҙ барҙыр.
Рухтар ҡалаһылыр был ерҙәге ҡәберлектәр...

*Төрөк теленән тәржемә*
*Анкара, 2011*

**Унал Кар**

*Төркиә шағиры*

## ҺЫУ

Бер тамсы һыу.
Тетрәтеп доғаһын йәйғорҙоң
Хаяһыҙ иҫтеләр елдәре,
Аҡлығын юғалтты болоттар —
Яңғыҙлыҡ ярына терәлдем.

Уйҙарым сыуалды башымда,
Теҙгене бушаны ваҡыттың —
Хыянат иреккә атланы,
Киләсәк көҙгөһө сатнаны.

Бушлыҡ тотҡононда ҡалғанында
Сыҡты балҡып күңел баҙарына
Көнсөллөк һәм мөхәббәтһеҙлек,
Һатлыҡ йәндәр...
Йылмайҙылар төкөрөктәрен сәсә-сәсә...

Кәре бөткән бер бахырға тиңләнеләр,
Ҡайта-ҡайта һәр береһе күҙ атты...
Сатнағандай булды ерҙең ҡабығы,
Күк йөҙөнөң зәңгәрлеге йоҡарҙы.

Бер тамсы һыу
Аһ! Йөрәгемдә хуш еҫтәре аңҡыны...

*Төрөк теленән тәржемә*
*Өфө, 2012*

**Ибраһим Терзиоглы**

*Төркиә шағиры*

## ӘСӘЙЕМӘ

Өшөйөм бит —
Әсәйем юҡ
Янымда,
Иҙрәп тә
Ойор инем
Ҡуйынында.

Әсәм ҡулы
Сәстәремә
Ҡағылһа,
Хуш еҫтәрҙең
Сихырына
Һарылам.

Йылынырмын,
Ҡосағына
Һыйынһам.
Өшөнөм бит —
Әсәйем юҡ
Янымда...

## ХӘТИРӘЛӘР

Хәтирәләр — был кәүҙәне йәшәткән,
Хәтирәләр абыныуҙан иҫкәрткән,
Хәтирәләр оҙата барыр һәр йәштән,
Хәтирәләр таштан, тупраҡтан, йәштән...

## ҺӨЙӨҮ ЮЛЫ

Юл йөргөнө түгел,
Арытыр юлыңмын...
Шул юлда аҙашыр
Бер фәҡир ҡолоңмон...

*Төрөк теленән тәржемә*
*Анкара, 2011*

## Несрин Өсжан

*Төркиә шағирәһе*

### ВАҠЫТ СОҠОР ҠАҘЫР

Ҡоштар ҡуныр баш осома —
Һайрауҙары сәйерҙер.
Ҡанаттары суҡ биҙәкле —
Мең төрлө төҫ-мәрйендер.

Көнсығышта күҙҙәрем —
Һине көтөп аҙайым.
Килмәҫ кеүек йәйҙәрем —
Бик алыҫта яҙ айым.

Ах(ы)ры, туҙанлы юлыма
Ваҡыт соҡор ҡаҙыған,
Шул тоҙаҡҡа юлыҡтыңмы,
Ҡайҙа ҡалдың, наҙлы йәр?

### МӨХӘББӘТ АСЫЛЫ

Һөйөүҙер асылыбыҙ, рух иһә башҡа,
Һәр тыуған көн, ай, кисе саҡырыр һөйөүгә,
Ер менән Күк иһә шаһиттыр һөйөүгә,
Болоттар иларҙар һөйөүҙе һөйөүҙән...

Мөхәббәт менән ҡоштар йырҙар йырларҙар,
Һандуғас тауышы булмаһа, гөл нишләр?
Тойғас та, телһеҙе теллегә әйләнер,
Ҡанат үҫер, осорҙар һөйөүҙе һөйөүҙән.

Сәскәнән сәскәгә бал ҡорто ҡуныр,
Һөйгән һөйгәненә йәшерен янып-көйөр.
Хаҡ тип әйтә-әйтә, ҡулыңда һөйөү ҡалыр,
Ғаләм сәләм биреп торор һөйөүҙе һөйгәнгә.

*Төрөк теленән тәржемә*
*Анкара, 2011*

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ

**Драмалар**

Балапан — бөркөт балаһы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 5
Марс—500 . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 46
Йондоҙло күпер . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 101
Ысыҡтағы ҡояш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 131
Урал батыр *(Либретто)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 154

**Поэмалар**

Ҡар өҫтөндәге сабый . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 208
Йондоҙ ҡыҙы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 224

**Эпик шиғырҙар**

Башҡорт йыры — тере шишмә . . . . . . . . . . . . . . . 237
Ҡырҡ дүрт йондоҙ һәм егерме
ете диңгеҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 241
Ҡара һәм аҡ араһында . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 244

**Хикәйәләр**

Хөкүмәт ағай . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 247
Йыһандың бумеранг ҡануны . . . . . . . . . . . . . . . . 253
«Һай үҙебеҙҙекеләр!» йәки
һимеҙлектән ҡотолоу ысулы . . . . . . . . . . . . . . . . 258
Мәйет хәтирәләре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 260
Бәхетле ҡатын . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 261
Ҡәһәр һуҡмай торған йән . . . . . . . . . . . . . . . . . 264

**Балалар өсөн**

Серле муйынсаҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 268
Бөйрәкәй менән Шыртлан . . . . . . . . . . . . . . . . . . 278
Сиңерткәнең тыуған көнө . . . . . . . . . . . . . . . . . . 287
Ҡош юлы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 290
Ай менән Зөһрә ҡыҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 291
Әтәс менән Тауис ҡош . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 292
Етегән йондоҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 292
Умырзая . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 293

**Тәржемәләр**

Рус һәм төрөк телдәренән *(Шиғырҙар)* . . . . . . . . . 294

2010 йылдың 29 декабрендәге 436-ФЗ һанлы
Федераль законға ярашлы 16+

В соответствии с Федеральным законом
от 29 декабря 2010 г. № 436-ФЗ 16+

Литературно-художественное издание

**КАИПОВА** Лилия Зайнулловна
(Лилия Сакмар)

**БАЛАПАН**

Драмы, сценарии, поэмы,
рассказы, переводы

*(на башкирском языке)*

Әҙәби-нәфис баҫма

**ҠӘЙЕПОВА** Лилиә Зәйнулла ҡыҙы

**БАЛАПАН**

Драмалар, сценарийҙар, поэмалар,
хикәйәләр, тәржемәләр

Мөхәррире Э. М. Ниғмәтуллина
Биҙәлеш мөхәррире А. Р. Мөхтәруллин
Рәссамы М. М. Ғәйнетдинов
Техник мөхәррире В. Р. Абдрахманова
Корректорҙары М. Р. Шәрипова,
А. Р. Исҡужина, Л. Ф. Саниева

Форматы 84х108 $^{1}/_{32}$. Питер гарнитураһы. Шартлы баҫма таб. 15,96.
Шартлы буяу отт. 16,38. Иҫәп-баҫма таб. 13,0. Заказ 1.0070.13.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

Башҡортостан Республикаһының
Өфө полиграфкомбинаты дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.